# МОСТАЙ КӘРИМ

# ОҘОН-ОҘАҠ БАЛА САҠ

ББК 84(Башҡ)
К97

Мостай Кәрим.
К 97 Оҙон-оҙаҡ бала саҡ. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1981,—296 бит.

Автор был китаптың жанрын билдәләмәй — уны повесть тип тә, роман тип тә атамай. Әҫәрҙә яҙыусы күргән ваҡиғаларға уның уйҙары, кисерештәре ҡушылып-үрелеп бара. Көндәлек тормош, көнкүреш хыял һәм тылсымлы күренештәр менән сиратлаша.

70303—374
М121(03)—81 66—81

3703010100
ББК 84 (Башҡ)

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1981 й.

## АЛДАН ӘЙТЕЛГӘН ҺҮҘ

***Был китап — мөғжизәләргә ышаныусан сәйерерәк, шауҡымлыраҡ, бер ҡатлыраҡ, сяраҡ кешеләр тураһында. Уларҙың көнкүреше беҙ йәшәп ятҡан көндәлек тормоштан саҡ ҡына ҡалҡыуыраҡ, саҡ ҡына тылсымлыраҡ, саҡ ҡына фажиғәлерәк. Бер-беренә ҡарата улар ғәҙәттәгенән сыҙамлыраҡ, рәхимлерәк; ғәйепләргә, хөкөм итергә ашығып бармайҙар. Был кешеләр бәхетте лә, әжәлде лә сабырлыҡ менән ҡабул итәләр. Шатлыҡтан туйып һикермәйҙәр, ҡазанан ҡойолоп уҡ төшмәйҙәр.***

***«Ниңә, һеҙҙең ауылда шундайҙар ғына йәшәйме ни?» — тип һораусылар була ҡалһа, алдан уҡ яуап ҡайтарам: «Мин күргәне ошолар ине. Бүтәндәре хәтерҙә ҡалмаған».***

***Китапта үлем-етем тураһында һүҙ күберәк тойолһа, уҡыусы. ғәжәпләнмәһен. Йәшәү менән үлем икеһе лә тиң хоҡуҡлы. Ләкин икенсеһе тураһында һүҙ барғанда беренсеһенең ҡәҙере, ҡыуанысы, мәғәнәһе расланма.***

*Бындағы яҙмыштар, әйткәнемсә, нигеҙҙә, мин үҙем күреп белгән, бергә донъя көткән йәки бер киҫәк юл үткән әҙәмдәр яҙмышы. Үтә яҡшыларының һәм үтә ямандарының исемдәрен алмаштырҙым, бүтәндәрен шул көйө ҡалдырҙым.*

*Хикәйәсеһе – мин үҙем һәм... үҙем генә лә түгел...*

*Автор.*

# БӨТӘҺЕ
# ЛӘ ӘЙЛӘНӘ

Мин теремен икән әле. Зәп-зәңгәр булып туңып, ҡатып ҡалған күкте күрәм. Шул күккә ҡалтайған баҡыр ҡояш йәбешкән. Баҡыр түңәрәккә кемдер, ахыры, таш менән бәрә: доң, доң, доң... Ҡояш ҡалтыранып ҡуя. Былай булһа, күпкә сыҙамаҫ, ҡубып төшөр, моғайын...

Мин теремен икән әле. Эргәмдә генә, бүлкелдәп, шишмә сығып ятҡанын ишетәм. Ҡапыл тертләп китәм. Сәйер. Ул шишмә ерҙән түгел, минең күкрәгемдән бүлкелдәй: бүлт, бүлт, бүлт...

Мин аҡрынлап зиһенемде туплайым. Хәҙер апасыҡ ишетәм: һулыш алған һайын күкрәгемдең һул яғынан ҡан ҡатыш борхолдап тын сыға. Һыҙлау ҙа, ғазап та юҡ. Әйтерһең, был мин түгел, бүтән берәү. Ә мин иһә, ике катушка йөкмәп, әле булһа алғы һыҙыҡҡа, ут һыҙығына элемтә тартам. Унда-һанда ярылған миналарға иғтибар итмәй, ҡола ялан буйлап йүгерәм. Минән алда оҙон шәүләм һуҙылған. Тимәк, инде ҡояш та ҡалҡҡан. Күләгәмдең башы ниндәйҙер ыҙан һымаҡ ерҙә ултырған яңғыҙ имәнгә килеп төртөлә. Шул саҡ эргәмдә генә гөлт итеп ут күбәһе тоҡанып һүнә. Күбәнең бер осҡоно минең күкрәгемдә өтөп ала. Мин ҡапыл туҡталып ҡалам. Бер аҙ сайҡалып торам...

Мин әле булһа сайҡалам. Юҡ, хәҙер мине Ер үҙе бәүелтә — сәңгелдәктәге кеүек. Офоҡ берсә артҡа сигенә, берсә яҡын килә. Бая йүгергән һалдат менән беҙ икебеҙ йәнә бер кешегә әйләнәбеҙ. Быныһы яҡшы. Бөтөнләйгә аймылышһаҡ, аяныс булыр ине.

Эйе, мин теремен инде. Баш осомда имән ботаҡтары бәүелә. Ағас тирәләй, ҡулға-ҡул тотоношоп, ваҡ балалар әйлән-бәйлән уйнай. Улар араһында мин дә, минең кесе туғандарым Сәлисә менән Ильяс та бар. Башта беҙ күңелле йыр йырлайбыҙ, шаяры-

шып зыҡ ҡубабыҙ. Унан нимәгәлер ыҙғышып илашып алабыҙ. Тағы татыулашабыҙ. Үҙебеҙ һаман әйләнәбеҙ, әйләнәбеҙ, әйләнәбеҙ... Беҙ генә түгел, ошо имән тирәләй бөтә ер, бөтә күк әйләнә. Ҡояш, ай, йондоҙҙар әйләнә. Ә ағас ҡымшанмай ҙа тик тора.

Был имән минең Оло инәйем булып сыға. Уның тирәһендә инде балалар ғына түгел, беҙҙең бөтә ғаиләбеҙ — атайым, Кесе инәйем, ағайҙарым, апайҙарым әйләнә. Хатта бер пар күк атыбыҙ, ике ала һыйырыбыҙ, быҙауҙарыбыҙ, һарыҡтарыбыҙ, тауыҡ-ҡаҙҙарыбыҙ әйләнә. Шул кеше тирәһендә беҙҙең барлыҡ бәхет-шатлыҡтарыбыҙ, ҡайғы-хәсрәттәребеҙ, көндәлек мәшәҡәттәребеҙ, өмөт-хыялдарыбыҙ әйләнә — донъябыҙ әйләнә. Минең Оло инәйем ошо әйләнеп торған донъяның үҙәге ул. Шуға күрә тыныс һәм хәүефһеҙ баҫып тора. Уның өсөн, әйтерһең, һәләкәт тә, ғазап та юҡ. Йөҙөндә шәфҡәтле йылмайыу...

Имән япраҡтарында иртәнге нурҙар һикерешеп уйнай. Әллә нурҙар, әллә япраҡтар үҙҙәре талғын ғына ҡыштырҙай. Ерҙә һуғыш та, үлем дә юҡ. Тик ҡояшҡа һаман да нимә менәндер һуғалар: гөп, гөп, гөп...

Ҡанаттарына ҡара тәре тамғалары һуғылған шөкәтһеҙ ҡоштар ҡайҙандыр килеп сыға ла һауала әйләнә башлай. Улар тирәһендә гөп тә гөп зенит туптары ярыла. Мин салҡан ятҡан килеш бөтәһен дә күреп торам. Бына әлеге ҡоштарҙың ҡорһаҡтарынан ҡара себейҙәр һикерешеп сыға башланы. Улар ажғырышып ергә, минең әҫтәмә ынтылалар. Әйтерһең, һәр бомба миңә генә, бары миңә генә тәғәйенләнгән. Һанап ятам: бер, ике, биш, ун... Бер кешегә күберәк түгелме? Бына-бына, ер тетрәтеп, шартлауҙар башланыр. Бына, бына...

Бер көндө икенсе тапҡыр үлге килмәй. Егерме ике йыл буйы көнләп, сәғәтләп, минутлап йыйылған ғүмерҙе бер юлы ғына түңкәр ҙә ташла, имеш. Юҡ инде. Ҡайҙалыр тороп югермәксе итәм. Хәлем юҡ. Бары йөҙтүбән әйләнеп ятырлыҡ ҡына көсөм ҡалған. Ҡурҡып, ергә ҡапландым. Өҙлөкһөҙ шартлау башланды, һәр бомба ярылған һайын, тупраҡҡа һеңә барам, һеңә барам. Үҙем өсөн үҙем хурланып киттем. Мороном менән балсы к соҡорға һуҡыр сыс-

ҡанмы ни мин? Яу эсендә кеше араһында ҡурҡаҡтарҙан иҫәпләнмәй инең бит. Йөрәкле егетмен тиһәң, һин япа-яңғыҙ саҡта батыр бул. Бына хәҙер, әҙәм күрмәгәндә... Хәйер, күрергә тейеш кеше һине барыбер күрә ул. Әйтәйек, иң яратҡан кешең. Уның өсөн ара ла, ваҡыт та юҡ. Әжәлеңде сәбәләнмәй генә көтә белеү — үҙе ирлек түгелме? Сәбәләнмә!

Мин яңынан салҡан әйләндем. Әйҙә, күҙемә ҡарап килһен үлем! Юҡ, килмәне был юлы. Минең егерме ике йәшлек ғүмеремә тимер ярсыҡ менән билдә һуғып, ҡайҙалыр башҡа тарафҡа китеп барҙы. Яланда шартлауҙар һүнде. Күк йөҙө баяғыса'тоноҡ, аяҙ. Ерҙә тын ҡурырлыҡ тынлыҡ. Хатта ҡурҡыныс.

Ҡапыл йән тетрәткес ғазаплы, әрнеүле бер тауыш минең ҡолағыма, юҡ, ҡолағым аша йөрәгемә бәреп инде. Был ыңғырашыу ҙа, илау ҙа, ялбарыу ҙа түгел ине. Бындай ауазды ғүмеремдә беренсе тапҡыр ишетәм. Мин, һағайып, тауыштың ҡабатланыуын көттөм. Оҙаҡ көттөм. Ул ҡабатланманы, әммә минең күңелемә ғүмерлеккә һеңеп ҡалды. Тимәк, яу ҡырында кемдер берәү аҡтыҡҡы һулышын алды, күкрәгендә ҡалған һуңғы ауазды донъяға шулай һытып сығарҙы.

Нәҡ шул ваҡыт минең аңымда, минең хәтеремдә унарлаған бүтән өндәр ҡабаттан терелеп, яңғырай башланы. Былары инде — яңы тыуған сабыйҙарҙың йыһан киңлектәренә осорған беренсе ауаздары. Бала сағымда уларҙы мин күп ишеттем. Хәҙер бына ошо фажиғәле, ошо саф иртәлә кешенең беренсе һәм һуңғы ауазы минең рухымда бергә килеп ҡушылды; һәм миңә уларҙы көндәремдең иң йонсоуҙарына, иң моңһоуҙарына ҡәҙәр үҙем менән алып барырға насип буласаҡ. Сөнки бынан һуң мин йылғаның ярҙары ни өсөн икәү булыуын аңланым. Уларҙың береһе— фанилек, икенсеһе — мәңгелек икән, ә уртанан һыуҙар аға. Шунда уҡ ярҙар араһынан Замана үҙе аға. Ә кеше ғүмер баҡый, әлеге ике ярҙы тоташтырмаҡсы булып, ағастан, таштан, тимерҙән, фекерҙән, хыялдан күпер һала. Күперен ташҡындар алып китә, дауылдар емерә, галактикаларҙан килгән уттар ялмап көл итә; кеше үҙе һәләк була, яңынан тыуа һәм төп эшенә керешә: күпер һала. Сөнки уның йөрәгендә баяғы ике ауаз йәшәй.

...Имән тайшанып киткәндәй булды. Юҡ, ул ҡуҙғалманы. Кемдәрҙер мине һаҡ ҡына күтәреп носилкаға һалды. Алып киттеләр. Аяҡ осомдан носилканы сибек кенә һалдат күтәреп бара. Мин уның бары төшөнкө яурындарын һәм арыҡ аҡһыл йөҙөн генә күрәм. Уның ике яңағынан, бормалы ике һуҡмаҡ булып, ҡара тир аға. Арбаусан һоро күҙҙәре миңә төбәлгән. Ул күҙҙәр, әйтерһең, мине ҡайҙалыр алыҫҡа — мәрхәмәтле ерҙәргә, хәүефһеҙ замандарға саҡыра. Әллә бөтөнләй киреһенсәме — тауышның да әйләнеп ҡайтмаҫ шомло яҡтарға әйҙәйме? Күңелемде ҡапыл шик баҫа. «Минән ал шул күҙҙәреңде. Ошонда ғына ҡалдыр мине...» — тип ялбармаҡсы булам, әммә тауыш урынына ауыҙымдан бөркөлөп ҡан сыға. Йәнә уның эйәк өҫтөндәге оҙонса ғына арҡыры йөйҙө шәйләйем. Был күптәнге яра эҙе булырға тейеш... Ошо аҡһыл сырай, һоро күҙҙәр, эйәгендәге йәрәхәт эҙе минең бөтә иғтибарымды бер нөктәгә тарта. Ҡайҙа һуң ул нөктә? Минең ҡан эсендәге ауыр кәүҙәмде көс-хәл менән күтәреп барған кеше кем һуң ул? Хәтерләй алмайым, зиһенемдең ҡеүәте етмәй, һуңынан мин уны иҫемә төшөрәсәкмен, бик асыҡ итеп төшөрәсәкмен. Ә хәҙер ул мине әжәлем һағалап торған һәләкәт яланынан абына-һөрөнә күтәреп алып сығып китте..

Теге ялан хәҙер минән утыҙ йылға артта тороп ҡалды. Мине ышығына алған имән әле иҫәндерме-юҡтырмы, белмәйем. Шул имәнде хәтерләткән минең Оло инәйем инде унан да элек үҙенең мәңгелек йортона күскәйне. Ул киткәндә талпынып-талпынып күбәләк ҡар яуа ине. Уның йорт түбәһен шунда уҡ ап-аҡ ҡар ҡапланы. Ләкин Оло инәйем әле булһа минең берсә ҡояшлы, берсә болотло, берсә сәскәле, берсә ҡар-буранлы яҙмышым яланының уртаһында баҫып тора. Уның тирәһендә минең бөтә яҙмышым әйләнә.

Асыҡ хәтерләйем: ғүмеремдә мине беренсе тапҡыр етәкләп алған ҡул — уның ҡулы булды. Унан һуң беҙ етәкләшеп бик күп йөрөнөк. Бына әле лә атлай-югерә Түбән осҡа табан китеп барабыҙ. Ул атлай, мин югерәм. Ҡайҙа шулай ашығалар былар, тиме икән кешеләр! Атап ҡына һораһалар, әйтермен: «К е ш е т ы у ҙ ы р ы р ғ а ! »

# КЕШЕ
# ТЫУҘЫРЫРҒА

Минең Оло инәйемде «кендек әбейе», ә.үҙемде «кендек бабайы» - тип йөрөтәләр. Мин бәләкәймен әле. Оло инәйемдең камзул кеҫәһенә буйым саҡ-саҡ етә'. Ул тылсымлы кеҫәнән тәмле-томло нәмәләр һис ваҡытта ла өҙөлмәй. Йә берәй шаҡмаҡ шәкәр, йә дүрт-биш бөртөк йөҙөм емеше, йә перәник валсығы, йә кипкән муйыл, йә ҡурылған борсаҡ була. Хатта ара-тирә баҡыр тәңкәләр ҙә сылтырап ҡуя. (Беҙ аҡсаның ҡөҙрәтен күптән беләбеҙ!) Торғаны менән бер хазина инде ул кеҫә — бөтмәҫ-төкәнмәҫ хазина.

Әле лә ҡулымды тығыуым булды, дәү генә ике өрөк усыма килеп тә эләкте. Береһен шунда уҡ ур-тыма ҡыҫтырып ҡуйҙым. Беҙҙә тәмле нәмәне бер юлы ғына ҡомһоҙланып ашай торған ғәҙәт юҡ. Беҙ уны рәхәтләнеп һурып ҡына йөрөйбөҙ. Икенсе өрөктө бөгөн генә кейеп сыҡҡан яңы салбарымдың кеҫәһенә йәшерҙем. Унырын, ҡайтҡас, һеңлем менән ҡустыма бүлеп бирермен. Бәлки, ошонан башлап минең салбарымдың да кеҫәһе тылсымлыға әйләнер. «Йомарт ҡулға мал керер», — ти Оло инәйем.

Беҙ Түбән ос Ҡара Йомағолдарға китеп барабыҙ. Унық бисәһе бәпескә сирләгән. Беҙгә, беҙгә тип ни инде, Оло инәйемә, йөҙө көл кеүек ағарған Ҡара Йомағол үҙе килеп хәбәр итте. Итте лә, яуап-фәлән көтөп тормайынса, кире сығып гогерҙе. Был инде ҡу-наҡҡа саҡырыу ғәмәле түгел. Ҡунаҡҡа саҡырыусы башта яйлап түргә уҙа, урындыҡҡа ултыра. Ашыҡ-май ғына доға ҡылалар. Йорт-ерҙең, мал-тыуарҙың именлеген һорашалар. Хатта ул күрше булһын, барыбер һорашалар. Шулай тейеш. Мин быҙың буш йола ғына түгеллеген бары үҫкәс аңланым. Эйе, ҡунаҡҡа саҡырыусы һинең донъяң имен, кәйе-фең урынында икәнеЯ үҙ ҡолағы менән ишетергә,

үҙ күҙе менән күрергә тейеш. Сөнки күңеле китек әҙәмдә ҡунаҡҡа йөрөү ҡайғыһы булмау ихтимал. Шуны ла әйтергә кәрәк: беҙҙең ауыл кешеләре, туған-тыумасанан тыш, дәрәжәгә, абруйға, мөлкәткә ҡарабыраҡ аралаша, һәр кемдең үҙ ҡоро бар. Һәр ҡорҙоң үҙ йыры бар:

Байҙар, байҙар бал эсә.
Урта хәлдәр һыра эсә.
Беҙҙең кеүек ярлылары
Мәкегә ятып һыу эсә.

Минең атайым һыра әсеүселәр ҡоронда. Быныһын яҡшы беләм. Әле яңы ғына өй-ҡура юнәтеп, мәке тирәһенән уҙмаған Ҡара Йомағол, әлбиттә, беҙҙең һалҡын һыуыбыҙҙы ла уртлағаны юҡ. Ә минең атайым бал әсеүсе ҡайһы бер йорттарҙың тупһаһын да аша атламаған. Йә саҡырмағандарҙыр, йә саҡырылып та бармағандыр. Моғайын, үҙ ҡороноң түр башында ултырырға күнеккән ғорур зат өлкәнерәк дәрәжәле сит ҡорҙоң ишек төбөнә төшөргә теләмәгәндер. Был хаҡта мин хәҙер, үҙем балалар атаһы булғас, шулай уйлайым.

...Оло инәйем менән беҙгә урыҫ ҡапҡалы, ҡалай түбәле, бейек болдорло өйҙәрҙең дә, ергә һеңеп бөткән балсыҡ аласыҡтарҙың да ишектәре шар асыҡ. Бәғзеләре, беләм, асмаҫтар ҙа ине, астырыусылары бар. Һәр өйҙә тиерлек, яҙына-көҙөнә, иртәһенә-кисенә, яуынына-аяҙына ҡарамай, үҙ ваҡыты еткәс, кеше тыуа. Шул кешене ҡаршы алырға беҙ кәрәк.

— Шул баланы гел үҙеңә эйәртеп йөрөтмәһәң булмаймы, көндәшем? — тине бая Кесе инәйем.

— Юҡ, Вазифа, шул сабый яҡын-тирәмдә булһа, ҡатындар еңелерәк бәпесләй һымаҡ.

— Инде... — Кесе инәйем сәйер генә көлөп ҡуйҙы, — шул тиклем дә сихырлар икән берәүҙе берәү.

— Ирем киҫәге — итем киҫәге. Бар сихыры шунда. — Ошоларҙы әйткәс, Оло инәйем көрһөнөп ҡуйғандай итте. Бәлки, көрһөнмәгәндер ҙә.

Нимә ул «ирем киҫәге — итем киҫәге»? Быныӊ төп мәғәнәһен мин бик күп йылдар үткәс, талпынып-талпынып күбәләк ҡар яуырға бары бер генә көн ҡалғас төшөнәсәкмен.

— Ихтыярыңда...—тине Кесе инәйем, ғәйепле кеше һымаҡ, башын эйҙе. — Ни ҡылһаң да — һин хаҡлы.

,— һәр ҡайһыбыҙҙың үҙ хәҡиҡәте, үҙ иманы, Вазифа. Беҙ икебеҙ бер дөрөҫлөк менән йәшәй алмайбыҙ. Хаҡлы булһам да, мин үҙем өсөн генә хаҡлымын...

Инәйемдәр һөйләгән был һүҙҙәрҙең һәр береһен айырым-айырым аңлайым, ә бөтәһе бергә ҡушылғас, уларҙың мәғәнәһе минең башыма һыймай, төрлө шҡка сәселә лә һауала ireп юғала. Шулай, ҙа күңелемдә һағыш ҡатыш билдәһеҙ шом тороп ҡала. Йөрәгемде килке-килке уртаға бүлгән ул шом бик оҙаҡ йылдар буйынса мине ташлап китмәйәсәк. Сөнки шул ике ҡатын һыны бөтә юлдарым буйлап мине оҙата барасаҡ. Ике мөхәббәттең шәүләһе булып гел генә ике һағыш эйәрәсәк миңә.

Эйе, мин бер юлы ике әсәнең мөхәббәтен татыным һәм үҙемдең бер мөхәббәтемде уларҙың икеһенә тигеҙ бүлергә тырыштым. Үҙемде-үҙем уртаға айырҙым. Тора-бара мин бының рәхәтен генә түгел, үҙемә аңлашылып та етмәгән эске ғазаптарын да кисерәсәкмен. Әммә ғазаптары татлы буласаҡ.

...Әлегә мин, уртымдағы өрөктө һура-һура, Оло инәйем эргәһенән тыр-тыр югерәм. Бына Ҡара Йомағолдарҙың ҡапҡа төбөнә лә килеп еттек. Келәт алдында бау ишеп торған хужа, эшен ташлап, атлай-югерә килеп ҡапҡа асты. Оло инәйем туп-тура өйгә йүнәлде. Бынан ары мин үҙ көнөмдө үҙем күрәсәкмен. Өйгә инеп йөрөргә миңә ярамай. Бынының күптән беләм. Төптән йыуан Ҡара Йомағол, шешеңке ҡабаҡтары аҫтындағы ҡыҫыҡ күҙҙәрен сылт-сылт йомоп. Оло инәйемә инәлә һалды:

— Малай була күрһен инде, зинһар, — ти,— тәү бала бит. Мәңге ойотмам, инәй.

Оло инәйем Ҡара Йомағолдоң йомшаҡ ҡына арҡаһынан ҡаға:

— Ярар, — ти, — һайлап алырға тура килһә, һин теләгәнде һайлармын. Бар, эшеңдә бул. — Шуны әйтте лә үҙе өйгә инеп юғалды.

— Шулай итә күр инде, зинһар өсөн, — Ҡара Йомағолдоң, ниңәлер, ирендәре ҡалтырай.

Ул, кире келәт янына килеп, эшенә керешә. Мин унан алыҫ түгел түмәр башына менеп ултырам. Үҙ дәрәжәмде, урынымды яҡшы беләмен — мин кендек әбейенең улымын. Ваҡ-төйәккә ҡыҫылып бармайым, ололарҙың аяҡ аҫтында уралмайым. Үҙем теләгән ерҙә әҙәпле генә ултыра бирәм, сабырлыҡ күрһәтәм. Шуға күрә бәпес тыуыр өйҙә ололар ҙа миңә «эй, малай!» тип өндәшергә баҙнат итмәй. Исемемде тултырып әйтәләр.

Байтаҡ ултырғас ҡына Ҡара Йомағолға һүҙ ҡушам:

— Нимә ишәһең? — тим.

— Арҡан. Бау ишкәндә ваҡыт тиҙ үтә ул. Осо ла, сиге лә юҡ уның — иш тә иш кенә. — Ҡара Йомағол йомоҡ кешеләрҙән һанала, уның ауыҙынан һүҙҙе көрәк менән ҡайырып алырға кәрәк, тиҙәр. Бөгөн теле-телгә йоҡмай. Бер аҙ шымып тора ла дауам итә. — Бау ул, ҡустым, донъяның тотҡаһы. Бау булмаһа, бөтә донъя таралып төшөр ине.

Ысынлап та, дөрөҫ әйтә бит. Бар, ана, епһеҙ-бауһыҙ көн күреп ҡара. Был һүҙҙәре менән шаҡ ҡатырғас, Ҡара Йомағол тынып ҡалды. Ишә-ишә лә ул, йорт яғына ҡолаҡ һалып, һағайып тора. Тағы ишә.

— Арҡаныңды ҡасан ишеп бөтөрәһең инде? — тим, әсем боша башлағас.

— Ишәм әле, малай тыуғансы...

— Оһо! Әгәр ул тиҙ генә тыумаһа?

- Тыуыр. Ә юкә миндә бер йөк, хыт биш көн иш...

Өйҙән Оло инәйем бер-ике тапҡыр сығып күренде, бер йәш ҡатын өс көйәнтә һыуға барып ҡайтты. Көн инде кискә ауышты. Теге өрөк әллә ҡасан ауыҙҙа иреп юҡ булды. Уның сәтләүеге абайламаҫтан ҡыҙыл һандыҡҡа төшөп китте. Әсемдә минең бер нәмә лә юҡ. Тик әлеге өрөк сәтләүеге генә дөбөр-дөбөр тәгәрәп йөрөй. Бая һыу ташыған килен көтөү ҡайтыр алдынан ғына беҙгә ашарға сығарҙы. Ҡатыҡотонан булһа ла тамаҡ ялғап алғас, күңел күтәрелеп китте.

Ҡара Йомағол йәнә эшенә тотондо, ә мин шул уҡ түмәр башына менеп ҡунаҡланым. Арҡаны уның хәҙер, һуҙһаң, моғайын, мәсет айына етер ине. Күп иште.

— Ә шул тиклем оҙон арҡанды һин нимә эшләтәһең?

— Хәбибулланың ун етеһе тулғансы, ул ошо келәттә һаҡланасаҡ. Ун етеһе тулғас, уға тапшырасаҡмын.

— Ә ун етеһе тулғас, ниңә уға арҡан кәрәк?

— Ниңә тиһеңме? Улайһа, тыңла...

Ҡара Йомағолдоң ҡыҫыҡ күҙҙәре ҡапыл ҙурайып китте лә ниндәйҙер тылсымлы нур сәсә башланы. Нур тәүҙә уның итләс йөҙөнә таралды, унан һуң ул ишеп торған арҡан буйлап югерҙе. Әйтерһең, анау бөгәрләнеп-бөгәрләнеп ятҡан нәмә хәҙер һарғылт ҡжә бау түгел, ә ошо ямаҡ кешенең ике күҙенән ағылып сыҡҡан нур таҫмаһы. Үрелеп тотмаҡсы итәм шул таҫманы, әммә, м.ин ҡағылһам, тылсымы юғалыр, тип шикләнәм.

— Улайһа, тыңла... — тип ҡабатлай Ҡара йомағол. Уның тауышы ла элеккесә тамаҡ төбөнән сыйылдап түгел, күкрәгенән, тәрәндән гөрләп, урғылып сыға. Торғаны менән йыр йырлай тиерһең... Хәҙер миңә быға тиклем әҙәм күҙе күрмәгән, әҙәм ҡолағы ишетмәгән сер асыласаҡ. Мин сабыр ғына көтәм. Ә ул, йорт яғына ҡолаҡ һалып, бер талай ҡатып ҡала. Ләкин тынлыҡтан башҡа нәмә ишетелмәй. Хәбибулла әлегә билдә бирмәй. — Ана, күрәһеңме офоҡто?—Ҡара Йомағол эйәге менән алыҫҡа күрһәтә.—Шуның аръяғында Урал тигән бейек тау бар, тау түбәһендә әҙәм үтмәҫлек ҡара урман, урман эсендә түп-түңәрәк аҡлан, түп-түңәрәк аҡлан эсендә түп-түңәрәк күл булыр. Күлдең арҡырыһы-буйы етмеш ҡолас, ә төбөндә төп юҡ, имеш. Ул күлдә балыҡ та, бүтән төрлө йәнлек-януар ҙа юҡ, имеш. Унда бары алтын яллы, көмөш тояҡлы, елдәй елер, ҡоштай осор, теләгән ереңә еткерер, уйлаған уйыңды башҡарыр, үткәнеңде ҡайтарыр, көткәнеңде килтерер, әҙәм менән әҙәмсә һөйләшер, хоҙай менән хоҙайса серләшер бер Аҡбуҙат йәшәй, ти. Йылдың иң ҡыҫҡа төнөндә, сәтләүек сәскә атҡан сәғәттә, юкәнән бал тама башлар мәлдә, үлән ҡыяҡтары шәрбәттән тулышҡан саҡта, күлдең өҫтөн уртаға ярып, алтын ялын сайҡай-сайҡай, Аҡбуҙат килеп сығыр, тң. Таң һыҙылғансы, һис нәмәнән өркмәй-ҡурҡмай аҡланда үлән утлап

йөрөр, ти. Шул арала кем дә кем уның муйынына етмеш ҡолас оҙонлоғо ҡороҡ һалып өлгөрә, ат шуныҡы булыр, ти. Көндөҙ йондоҙ күрерлек, төнөн януар ауларлыҡ, эсендә ут янһа ла, уфтанмаҫ, өҫтөнә тау ауһа ла, һыҡтамаҫ ир-егет кенә ҡороҡлай алыр, ти, ул затты. Ай үҫәһен көн үҫер уланым, йыл үҫәһен ай үҫер, йәше ун етегә етер, иңенә етмеш ҡоласлы ошо арҡанды һалыр ҙа сығып китер ырыҫ толпарын ауларға. Моратына ирешер, иншалла... Бына нәмәгә кәрәк буласаҡ был арҡан!

Мин әсемдән көнләшеп ҡуям. Хәбибулланың эштәр көйлө. Үҙе әле тыумаған да, уны инде ҡара урман эсендәге түңәрәк күл буйында керт-керт үлән утлап йөрөгән Аҡбуҙат көтә, атты ҡороҡларға арҡан да әҙер. Була бит ҡотло кешеләр!

Ысынлап та, әле батып барған ҡояш яҡтыһында ялтырап ятҡан алтын-һарғылт бау нәҡ ун ете йылдан һуң аҡ толпарҙың муйынына ураласаҡ. Тыуасаҡ Хәбибулла ла минең күҙ алдыма алтын сәсле, көмөш тырнаҡлы ғәләмәт ҙур бәһлеүән булып килеп баҫа. Бына кемде көтәбеҙ беҙ!

Әңгәмәһен һөйләп бөткәс, Ҡара Йомағол, ни эшләптер, күңелһеҙләнеп ҡалғандай итте. Өй яғына уҡталып ҡараны ла кире туҡтаны. Тағы ишергә кереште.

Ергә шыйыҡ зәңгәр эңер төшә башланы. Тыптын зәңгәрлек. Әйтерһең, һыу өҫтө шулай тынып ҡалған. Мин уйым менән яңынан теге күл янына китеп олаҡтым. Уның ярында әле тыумаған Хәбибулла түгел, мин үҙем ҡороҡ тотоп ултырам, бына-бына һыу аҫтынан аттың матур башы күренер. Эй, ана, ул килеп тә сыҡты, әсе тауыш менән кешнәп тә ебәрҙе: «И-һа-һа-һау!..»

— Тыуҙы! — тип һөрәнләне Ҡара Йомағол. Үҙе сүгәләп төштө. — Тыуҙы!! Минең малай тыуҙы!!!

Ул атылып тороп өй ишегенә ташланды, ҡапыл кире боролдо. Югереп йәнә келәт эргәһенә килде. Ҡыҙыу-ҡыҙыу арҡанын ишергә тотондо. Ҡулдарына күҙ эйәрмәй. Кендек әбейе сығып һөйөнсө алғанды Ҡара Йомағол сыҙам ғына көтөп торорға тейеш тә бит, күрәһең, сыҙай алмай. Иҫәүән.

Ә мин түмәр өҫтөндә, аяҡтарымды һалындырып, ҡымшанмай ҙа ултыра бирәм. Сәбәләнеүҙән ни фай-

ҙа? Хәбәре килер. Бер тыуғас, кире әллә ҡайҙа китмәҫ... Шулай ҙа Оло инәйем ниңә күренмәй һуң әле? Күңелемә шик төшә башлай. Ҡара Йомағолдоң ҡурҡынған күҙҙәре тағы ҡабаҡтары аҫтына инеп бата. Ул кинәт эшенән туҡтала. Көрһөнә. Хәҙер инде матур аҡлан да, аҡлан уртаһындағы күл дә, күлдән сығып килгән Аҡбуҙат та ҡайҙалыр монар эсенә сумып ҡала. Ерҙә уралып ятҡан нур таҫмаһы ҡабаттан ябай юкә арҡанға әйләнә. Инде мин өй яғына ҡарарға ла ҡурҡам: бына ишек асылыр ҙа, унан Ҡара Йомағол өсөн ҡот осҡос бәлә килеп сығыр һымаҡ. Хәйер, улай булмаҫ, унда минең Оло инәйем бит.

Баяғынан да көслөрәк һәм сағыуыраҡ яңы тауыш өйҙән тышҡа бәреп сыҡты. Ҡара Йомағол тертләп китте. Минең быуындарым буйлап ниндәйҙер рәхәтлек йүгерҙе. Был тауыш тиҙ генә тыныр өсөн яралмаған булып сыҡты.

...Байтаҡ замандар уҙғас, аяҙ иртәлә имән төбөндә ятҡанымда, берәүҙең донъя менән хушлашыу ауазынан һуң нәҡ ошо сағыу тауыш минең аңымда яңынан терелеп, йәнемде тетрәтәсәк...

Бына болдорға минең Оло инәйем-сығып баҫты.

— Һөйөнсө, Йомағол! — тине ул, тораташ төҫлө, һелкенмәй ҙә.

— Кем бар! —Тегеһе ә тигәнсе Оло инәйемдең алдына килеп теҙләнде.

— Ике улың.

— Икәү? Бер юлымы? Ниңә икәү? Икенсеһе ни исемле?

Оло инәйем көлөп үк ебәрҙе:

— Иҫәр, берәүгә ҡарағанда икәү яҡшыраҡ та... Исеменә генә ҡалғас, уныһын табырһың инде.

— Әйе, әйе, яҡшыраҡ, икәү яҡшыраҡ. Исемен табырбыҙ. Аллаһы әкбәр! — Теҙләнгән көйө ул доға ҡылды. — Һөйөнсөһөнә, инәй, һиңә бер һарыҡ. Юҡ, ике һарыҡ! Аллаһы әкбәр! — Ике ҡулы менән йәнә битен һыйпаны.

— Арыҡ аттың күгәне киң, тиме. Шашма! Бер бәрәс бирһәң, хаттин ашҡан.

Беҙҙең эштә был хәл — игеҙәктәрҙе әйтәм — бары икенсе тапҡыр ғына булды. Бүреһе олоно Ҡара Йомағолдоң! Бер бәрәс кенә, әлбиттә, аҙырағын

аҙыраҡ та. Кендек әбейенән уҙып, мин нимә әйтә алам?

Оло инәйем, болдорҙан төшөп, Ҡара Йомағолдоң арҡаһынан ҡаҡты:

— Бәхет-тәүфиҡтәре менән килһендәр был донъяға. Малайҙарыңдың игелеген күрергә яҙһын.
Ә ҡатыныӊ торғаны менән инә арыҫлан. Бисәләрҙең кеме кем икәнлеге бала аҫыраганда һынала. Ҡәҙерен белеп йәшә.

Бәпес тыуғас, быларҙыӊ эше бөттө инде, әлеге һөйөнсө бәрәсен етәкләрҙәр ҙә ҡайтып китерҙәр, тип уйлайһығыҙмы? Юҡ шул. Беҙҙең ҡәҙер, тормоштоң рәхәте бәпес тыуғас башлана. Ул рәхәтлек аҙна буйына бара. Хатта ашып та китә.

Бына нисек була ул.

Бәпес тыуған йортҡа, уның мөлкәтлеме, мөлкәтһеҙме булыуына ҡарамаҫтан, икенсе көндө үк һый ағыла башлай. Күрше-күлән, туған-тыумаса, дуҫ-иш, таныш-белеш ҡатындар, тиңдәштәр, әхирәттәр, ҡоҙағый-ҡоҙасалар бала әсәһенә күстәнәс ташый. Берәүҙәр — ҡыҙыу табала ҡоймаҡ, икенселәр — бәлеш, өсөнсөләр —- ҡыҫтыбый, дүртенселәр—тултырған тауыҡ, бишенселәр—ҡатлама, алтынсылар—бауырһаҡ, етенселәр... тағы әллә нәмәләр, әллә нәмәләр килтерә, һәр кем хәленән килгәненсә лә, артығын да тырыштыра, үҙендә булмағанды күршенән үтескә алып тора. Бына ниндәй һыйҙар менән хөрмәтләйҙәр яңы тыуған баланы!

Иртәнән кискә тиклем түрҙән самауыр төшмәй. Түр башында мамыҡ мендәр өҫтөндә кендек әбейе ултыра, уның эргәһендә кем тиһегеҙме — мин. Бер аҙна буйына шулай ултырабыҙ. Хатта ашып та китә. Был күркәм тормошто тик бер генә нәмә боҙа. Ул да булһа — бәпес мунсаһы. Бала тыуғас, көн һайын мунса яғалар. Оло инәйем хоҙайҙың биргән һәр көнөндә, башҡалар инеп сыҡҡас, мине алып барып мунса саба. Үҫерһең, ти. Ҡыйын булһа ла түҙергә тура килә. Бер ҡыйындың мең рәхәте бар Мунсанан ҡайтҡас, беҙ йәнә түр башына менеп ҡунаҡлайбыҙ. Тирләп-бешеп, баллап-майлап сәй әсәбеҙ...

Иртәгә мин Ҡара Йомағолдоң түр башында булаcаҡмын. Ә бөгөнгә миңә бары бер туҫтаҡ йылы һөт менән бер һыныҡ икмәк кенә бирҙеләр. Унан

һуң келәт иҙәненә йоҡларға һалдылар. Бер ҡышҡа ҡуян тиреһе лә сыҙаған, тиҙәр. Бер төнгә түҙербеҙ. Яңы көндә яңы тормош башланасаҡ.

һәм шулай булды ла. Уянғанда уҡ минең тана-уымды ярып-ярып ҡыҙҙырылған май еҫе бәреп инде. Тик бер аҙна уҙғас ҡына, Ҡара Йомағол һыйлаған аҡ бәрәсте эйәртеп өйгә ҡайтып киттек. Оло инәйем — мине, мин, муйынына еп тағып, аҡ бәрәсте етәкләп алдым.

Әлбиттә, гелән байрам, гелән туй ғына ла булып тормай. Тикәй көндәр ҙә йыш килә. Сөнки әҙәм тыуыуҙа беҙ көтмәгән тоткарлыҡтар килеп сыға. Шул саҡта мин үҙ тиҫтерҙәрем менән туйғансы уйнап ҡалам. Бара торғас, уйын да еләтә. Эс боша башлай. Яңы тыуған бәпестең үҙе хаҡында, һөрәнләп, донъяға хәбәр һалыуын ишеткем, ҡыуаныстан бөтөнләй юләрләнеп ҡалған аталарҙың ҡыланышын ситтән генә күҙәткем, быуаса йәмһеҙ генә күренгән ҡатындарҙың баланан һуң йәмләнеп, нурланып киткән йөҙөн күргем килә.

Йәш әсәнең тәүтапҡыр бала имеҙгәнен шаршау ярығынан ҡарап торғаным бар минең. Әле күҙе лә асылмаған ҡып-ҡыҙыл йәп эйәһенең ирендәре алһыу имсәккә тейеүе була, әсәнең аҡһыл йонсоу маңлайы ҡапыл балҡып яҡтырып китә. Улар шул түшәктә ятҡан килеш, гүйә, аҡрын ғына юғарыға, һауаға, күтәрелә. Түшәге лә, имеш, түшәк түгел, аҡ болот. Болот эсендә, ләззәткә сумып, икәү йөҙә — әсә һәм бала. Ниңә шулай икән — үтә рәхәт булғанда кеше йә оса, йә йөҙә һымаҡ? Былар ҡапыл ергә ҡолап төшмәһендәр, тип ҡурҡып, мин сытырҙатып күҙҙәремде йомам һәм шаршау янынан китеп барам.

Ауылда оҙағыраҡ бала тыумай торһа, минең бер бик йәтеш сарам бар. Башҡаса сыҙарлыҡ әмәл ҡалмағас, һуңғы сиктә мин шуға килеп төртөләм.

Беҙҙең баҡсала бер сәтләүек ҡыуағы үҫә. Был ағас беҙҙә тылсымлы иҫәпләнә. Әгәр ете төп уртаһында уның сәскә атҡан сағына тап булһаң, әгәр бер сәскәне өҙөп өлгөрә алһаң, әгәр ус төбөңдө үткер бәке менән ярып, шул сәскәне тиреҥ аҫтына ҡыҫтырһаң, һине һис ниндәй әҙәм заты күрмәйәсәк. Бер рухҡа әйләнәһең дә ҡуяһың. Теләһәң ҡайҙа бар, теләһәң нимә эшлә —һине һис кем тыя алмаясаҡ.

һуңыраҡ, беләккә көс, йөрәккә тәүәккәллек инә башлағас, атайымдың һаҡал-мыйыҡ ҡыра торған иң үткер бәкеһен тотоп, күпме йәйге төндәрҙе мин шул сәтләүек төбөндә үткәрмәнем! Күҙгә күренмәй торған затка әйләнгәс, мин нимә эшләйәсәгемде яҡшы беләинем: ер шарындағы бөтә буржуйҙарҙы берәм-берәм ҡырып бөтөрәм дә иҙелгән ҡолдарҙы азат итәм.

Сәтләүек, әлбиттә, миңә күренеп сәскә атманы. Әммә мин артабан да, ҡара сәстәремде йылдар һоро кәлгә әйләндерел бөткән заманда ла, сәтләүектең сәскә атасағына ышандым, ышанасаҡмын. Шуға ышанмаһам, йәшәүемдең ҡыҙығы ҡалмаған булыр ине.

Хәҙергә минең төндәр буйы баҡсала яңғыҙ ултырырлыҡ ҡыйыулығым да, бөтә буржуйҙарҙы ҡыйратып, барлыҡ ҡолдарҙы азат итерлек дарманым да юҡ. Теләгәнемде ялбарып һорарлыҡ телем генә бар. Атайым өйлә намаҙына киткәс, көндөң иң изге мәлендә, мин баҡсаға сығып, сәтләүек ҡыуағы алдына теҙләнәм. Ул серле ағас минең дә, хоҙайҙың да телен аңлай төҫлө. Шуға күрә ике ҡулымды юғары күтәреп, уның аша күктәгенең үҙенә өндәшәм. Алла менән нисек һөйләшергә кәрәклекте беләм мин. Ул шаштырып маҡтағанды ярата. Быны мин әллә ҡасан инде Оло инәйемдән төшөнөп алдым.

— Эй хоҙайым, — тим мин. — Ҡөҙрәтең дә, рәхимең дә сикһеҙ һинең. Бар өмөтөбөҙ һиндә генә. Изге ихтыярың менән сабыйҙар тағы, тағы, тағы донъяға яралһын, һиңә иман килтерер гонаһһыҙ ейәндәр тыуһын! Теләктәремде ҡабул ит!! Ишетәһеңме мине, тәңре?! — Сәтләүек япраҡтары берҙәм ҡыштырҙап ҡуя. Быныһы инде минең үтенесем эйәһенә барып юлыкты һәм ҡабул ҡылынды тигән һүҙ.

Хоҙай вәғәҙәһендә тора. Ике-өс көн үтмәй, ауылдың ҡайһылыр осонда йә берәй малай, йә берәй ҡыҙ тыуа. Әлбиттә, мин, әрһеҙләнеп, алланы артыҡ йыш борсорға тырышмайым. Бая әйткәнемсә, ул минең иң һуңғы сарам.

Донъя шулай ипле генә бара. Тамаҡ һыйға тейенеп тора. Оло инәйемдең камзул кеҫәһенә генә түгел, минең салбар кеҫәмә лә ҡот керҙе. Ҡустым менән һеңлемә унан өлөш сығып ҡына тора. Дуҫым

Әсғәт тә осрағанда буш ҡалмай. Шулай ҙа көйлө донъяның ара-тирә көйө киткеләп ҡуя. Бөтәһе лә шул малайҙар арҡаһында. Минең һурпа өҫтөндәге өрө төҫлө йәшәүемдән көнләшеп, улар мине үсекләй, хатта ҡыйырһыта башланылар. Башта: «Кендек бабайы! Кендек бабайы!» — тип ирештерҙеләр. Быныһына артыҡ иҫем китмәне. Дөрөҫө шул булғас, ни ҡылаһың? Өйҙә ағайҙарым да миңә, шаяртып, «Кендек бабайы» тип өндәшәләр. Әйҙә, әйтә бирһендәр!

Тик бынан ары булғаны минең намыҫыма нығ һуҡты. Баяғы яуыз малайҙар бер заман мине, бөтөнләй мәсхәрә итеп, ҡоро «Кендек»кә торғоҙоп ҡалдырҙылар. Урамға сығыр хәлем юҡ, уң яҡтан да, һул яҡтан да тик бер генә һүҙ ишетәм:

— Эй, Кендек!

— Нихәл, Кендек?

— Бәпес ҡоймағы тәмлеме, Кендек?

— Кендегеңде күрһәт әле, Кендек!

— Кендек! Кендек! Кендек!

Хатта арабыҙҙа иң йыуаш, иң тыйнаҡлы иҫәпләнгән Арҡыры баш Хәмитйән дә тел-теш күрһәтә башланы.

Байтаҡ ара мин үҙ тиҫтерҙәремдән биҙеп торҙом. Улар ҙа минән һыуындылар. Тик бер Әсғәт кенә ташламаны.

Хәҙер инде ауылда яңы кеше тыуыу ҙа миңә, элекке кеүек, ҡыуаныс килтермәй. Оло инәйемә лә һирәгерәк эйәрәм. Бараһым килмәгәндә, ул да нығытып ҡыҫтамай.

— Үҫә башлауың ошомо икән ни?—тип бары битемдән генә һөйөп ала. Ул башҡа бөтә кешеләрҙең арҡаһынан ҡаға, бер мине генә битемдән һөйә. Д'ның йомшаҡ ҡулы битемә ҡағылғас, мин бөтөнләй-бөтөнләй бәләкәс булып ҡалам. Барлыҡ әрнеүҙәрем бер юлы юҡ була. Күңелемә тыныслыҡ ҡайта. Үҫеп буйға еткәс тә, тәүге мөхәббәт ғазаптарын татып, аҡылдан шашҡанда ла шулай буласаҡ: йомшаҡ ҡына бармаҡтар яңағыма тейгәс тә йөрәгемдәге әрнеүҙәрҙе алып ташлаясаҡ, һәм мин ҡайтанан сабыйға әйләнәсәкмен.

Ғүмер уҙған һайың, хағы ла, нахағы ла артта ҡала торҙо, яҡшыһы ла, яманы ла онотола барҙы.

Ә «К.ендек»те берәү ҙә онотманы. Ул миңә ғүмерлеккә тағылды. Күп кеше ауылда минең ысын исемемде лә белмәй. Үҙем дә күнектем. Кемдер берәү миңә алыҫтан яҙып-яңылышып үҙ исемем менән өндәшһә, мин башта тирә-яғыма ҡаранып алам, миңәме икән, тим. Шунан ғына яуап бирәм. Ә «Кендек» тирә-яҡта берәү генә. Бәлки, үтә насар ҙа түгелдер әле. Минең ҡушаматым миңә хатта оҡшай. Ә эйәләшкәнсе күпме яфа, күпме бәлә, күпме күҙ йәштәре килтерҙе ул миңә. Хисапһыҙ. Мин уға ҡаршы ҡанға батып көрәштем, үҙемде аямай көрәштем. Тешем-тырнағым, йәнем-тәнем менән ҡарыштым. Мин ҡарышҡан һайын, ул нығыраҡ йәбеште.

Беренсе ҡанлы һуғыш бына шулай булды.

# БАЙРАМ АШЫ —
# ҠАРА ҠАРШЫ

Бөгөн байрам. Ҡорбан байрамы. Күпме замандар мин аҡрын ғына яҡынлашып килгән ошо иртәнең сихыры аҫтында йәшәнем. Уның шаңдағы, алыҫ офоҡ ситендәге аҡ болоттарҙа сағылып уйнаған таң нурҙары һымаҡ, әллә ҡасан инде минең иләҫ күңелемә килеп һарылды. Ҡо'яш әле сығып та етмәгән, донъя инде яп-яҡты. Тап бына шулай килә ҡорбан байрамы. Үҙе әле ары — шауҡымы инде бире.

Уҙған төндә мине оҙаҡ йоҡо алманы. Башымдан төрлө-төрлө уйҙар уҙҙы. Байрам килгәс тә, ерҙә бөтә нәмә кинәт үҙгәрер төҫлө тойолдо миңә. Оло инәйем һөйләгән әкиәттәге һымаҡ, ут менән һыу бергә ҡушылыр, бүреләр менән һарыҡтар аралашып, бер көтөүҙә йөрөр, яуыздар — изгегә, дошмандар дуҫҡа әйләнер. Быға мин ҡыуанам да, бер аҙ шикләнәм дә. Һарыҡтар өсөн борсолам. Аңғармаҫтан ғына уларҙы мәкерле бүреләр быуып ташламағайы. Ут өсөн дә хәүефләнәм. Абайламаҫтан һыу үҙен һүндереп ҡуймағайы. Дуҫтар өсөн дә күңелем урынында уҡ түгел. Дошмандар, хәйлә ҡороп, үҙҙәрен харап итмәгәйе, тим...

Барыбер минең шатлығымдың сиге юҡ. Уның башы — ҡара бәрхәт түбәтәй менән бер пар резинка галош булды. Ҡалаға он һатырға барған еренән байрам бүләге тип уларҙы Мортаза ағайым алып ҡайтты. Әллә нисә көн инде шул түбәтәй менән калоштар минең таҡыр башымды, йәнә «себейҙәре» төҙәлеп бөтмәгән тәпәйҙәремде көтә. Көтһөндәр әйҙә! Мин дә уларҙы күп көттөм. Шуның өҫтәүенә, Оло инәйем, үҙемә үлсәп, аҡ буйлы ҡыҙыл киндер ыштан тегеп ҡуйҙы — ике кеҫәле. Яйы килгәндә әйтеп үтәйем: ҡырҡ йылдар уҙғас, шундай буйлңь буйлы ҡыҙыл ыштан кбйгән ҡупшы егеттәрҙе мин

Европаның иң мәшһүр ҡалаларында бик күп осраттым. Әһә, мин әйтәм: беҙгә лә эйәрер көнөгөҙ еттеме? Тик һеҙ әле кейгәндәрҙе беҙ күптән кейеп туҙҙырған, модаһын уҙҙырған! Әммә Европа ыштандарының йөҙө-күренеше беҙҙекенә оҡшаһа ла, тауары күп ҡайтыш ине. Үҙем ҡапшап ҡараным.

Бер кешегә ни тиклем мөлкәт, ни тиклем яңы кейем-һалым, тип аптырайһығыҙҙыр әле, моғайын. Аптырау ғына түгел, әле шаҡ ҡатасаҡһығыҙ. Анау кәштәгә эленгән зәңгәр нимә ул? Буран Абдулла Шәрифәһе тегеп биргән зәңгәр күлдәк — ҡыйыҡ яғалы сатин күлдәк ул.

Был байрамға мине ана ҡалай баштан-аяҡ кейендерҙеләр. Ҡыҙыҡ инде, әҫтәңә яңы, матур кейем кейгәс, нисектер, күңелең дә бөтәйеп, йәмләнеп киткәндәй була. Ана шулай тыштан-эстән яңырып, ялтырап мин урамға сығасаҡмын. Байрам тигәнең бары урамда ғына була. Өйгә һыйып бөткән байрам — байрам түгел ул.

Минең тағы ла ҡыуанысым, иң ҙур ҡыуанысым бар. Уныһын әлегә сер итеп һаҡлайым тигәйнем дә, сыҙап буламы ни? Әйткәс әйтәйем инде. Мин Аҡманайҙа ат йөҙҙөрөп ҡайтҡас, киске еләҫтә беҙ Оло инәйем менән икәү генә, күк алашаны егеп, Сайран ауылына уның кейәүҙәге өлкән ҡыҙына — минең Ғәйникамал апайыма ҡунаҡҡа барасаҡбыҙ. Юлда, кырандас күсеренә ултырып, күк алашаны үҙем әйҙәйәсәкмен. Юғиһә өшән ул. «Ҡунаҡ егете» булғас, Сайранда Оло инәйем менән мине лә өйҙән-өйгә ашҡа йөрөтәсәктәр, түр башына ултыртасаҡтар. Түр башында ултырған бар, уныһын килештереп була. Бына ҡасан ул ҡара бәрхәт түбәтәй, резинка галош, ҡыҙыл ыштан, зәңгәр сатин күлдәк сайрандарға кемдең кемлеген төшөндөрөп бирәсәк. «Ағас күрке япраҡ, әҙәм күрке сепрәк», — тине бер саҡ Оло инәйем. Шулай булғас, һиҙгәнһегеҙҙер инде, кем арҡаһында мин батша малайы урынына суҡтай итеп шулай ^кейенеп алғанмын. Оло инәйем арҡаһында...

Ҡорбан ғәйетенә барыусылар, туҡталып тәкбир әйтә-әйтә, Түбән осҡа мәсет яғына үтеп китте. Минең атайым да сығып уларға ҡушылды. Иртәнге, сәй ғәйеттән һуң эселә. Беҙҙә бөгөн тары тәбикмәге

бешкән. Оло инәйемдең ҡулы тейһә, унан майҙар тамып торасаҡ. Ниндәй һәйбәт нәмә — байрам!

Яны ыштандың бер кеçәһенә көнбағыш, бер кеçәһенә кипкән муйыл тултырып мин ҡапҡа төбөнә сығып баçтым. Ауыл өçтөндә һеләгәйҙе ағыҙырлыҡ тәм аңҡый, һәр кем хәлдән килгәнсә, таба ҡыҙҙыра. Йыл буйы «һыйыр ағы» инмәгән — ҡатыҡ-һөт затын беҙ шулай тибеҙ — өйҙәрҙә лә бөгөн -үҙенә күрә шыж-быж сыға. Берәүҙәр тәбикмәк, икенселәр ҡоймаҡ, өсөнсөләр ҡыçтыбый, дүртенселәр май күмәсе бешерә. Бер аҙҙан, был еңел-елпе аштарҙың еçе таралып бөтөр-бөтмәç үк, һауаға бешкән .ит еçе күтәреләсәк. Бына шул саҡта инде һин күкрәк тултырып һулыш алыуҙың ысын тәмен татыйһың.

Баш осомда ғына ҡарлуғастар ҡыйпылып үтә. Йәшел үлән өçтөндә турғайҙар һикерешә. Әйтерһең, ҡоштар ҙа кешеләр байрамын байрам итә.

— Әй, Кендек! Әй, Рукавказ! — Был Шәһиҙулла тауышы, Шәһибәктәр тыҡрығы яғынан килә. Мине саҡыра. Үҙе күренмәй. Шәһиҙулла беҙҙең башлығыбыҙ. Ул исемде өндәштеме, һин шунда уҡ уның эргәһенә килеп баçырға тейешһең. Ҡабатларға яратмай. Мин шунда уҡ башлыҡ тауышы килгән яҡҡа югерәм.

— Рукавказ! — Әмерҙе был юлы тынҡыш Вәлетдин ҡабатланы.

«Рукавказ» — минең икенсе ҡушаматым — һуғышсан ҡушаматым. Анау бер саҡ бөтә малайҙар, икегә бүленеп, һуғыш уйнар алдынан һәр беребеҙгә яңы исем — ил исеме тағылды. Арабыҙҙа иң көслөһө Шәһиҙулла үҙе «Рәсәй»ҙе алды, унан ҡала тынҡыш Вәлетдин «Америка», Йскәндәр Ибрайы «Япония» булды, бүтәндәргә «Англия», «Франция», «Австрия», «Төркиә», «Германия», «Кавказ» әләкте. Бөтә төбәктә мин иң бәләкәйе. Миңә еткәс, илдәр бөттө лә ҡуйҙы. «Донъяла бүтән ил юҡ!» — тине Шәһиҙулла. Башлыҡтан уҙып, яңы илдәр эҙләп, берәү ҙә баш ватманы. Мин тәүҙә ҡойолоп төштөм, унан шым ғына илап ебәрҙем. «Нисек инде ул, — тимен әсемдән генә, — бер миңә ҡалғас ҡына ил бөтөр икән? Шул тиклем дә ҡотһоҙмонмо икән ни? Бүтәндәр, ил-ил булып, рәхәтләнеп һуғышып йөрөгәндә, бер яңғыҙың исемһеҙ-затһыҙ ситтә^тороп ҡал инде...»

Шәһиҙулла алыҫтаныраҡ булһа ла беҙгә нәҫел тейешле. Шуға күрә мине ҡыҙғанды, ахырыһы. Ерән башын аҙыраҡ тырнап торғас, унан бик яҡшы бер һүҙ соҡоп сығарҙы...

— Онотҡанмын, малайҙар, ер шарында үтә ғәйрәтле, үтә ғәрсел, үтә хәтәр тағы ла бер ил бар.
Ул да булһа — Рукавказ! Кендек! һин — Рукавказ!

Теге Рукавказ ғәрселдерме, юҡтырмы — белмәйем. Ә миндә иһә ғәрселлек саманан ашҡан. Шәһиҙулла миңә аҙыраҡ төрттөрөп китте буғай. Шуға ҡарамаҫтан, был юлы хатта теге мәсхәрә ҡушаматты әйтеүенә лә үсекләшмәнем. «Береһен төшөрмәй, икенсеһен күтәреп булмай», — ти атайым. Харап икән — Кендек! Рукавказ менән Кендеккә лә бирешерлек түгел...

...Байрам иртәһендә башлыҡ, моғайын, һуғышсан оран һалғандыр. Тоҡ-томалға Рукавказ тип саҡырмаҫ. Мин барып еткәндә, малайҙар тыҡрыҡ тулы ине инде. Тик Әсғәт кенә юҡ. Ҡайһылары көнбағыш яра, ҡайһылары сертләтеп кипкән муйыл сәйнәй.

— Тә-тә-тә-тә!—тине Ибрай, мине бер ҡат әйләнеп сығып.—Мәкәрйәнән килгән купеҡме ни? Көмөш сылбырлы сәғәте генә юҡ. Хәйер, сылбыры бында аҫылынып тора икән! — Ул минең байтаҡ уҡ һалынып торған ыштан бауын тартты. Ярай, ыштан сиселмәне. Ибрай — ул минең дуҫым Әсғәттең бер туған ағаһы. Ни эшләптер, үҙе миңә гел ҡаныҡып тора.

Шәһиҙулла башта минең килеүемә лә, өҫ-башыма ла артыҡ иғтибар итмәне. Тик, ҡулы менән ишара яһап, Ибрайҙы ғына минең эргәнән ҡыуып ебәрҙе.

— Нимәгә шулай ике ыштан балағың бүлтәйеп сыҡҡан? — Был һорауҙы бер аҙҙан һуң, эйәген сөйөп кенә, башлыҡ бирҙе.

— Бер кеҫәлә көнбағыш, Шәһиҙулла ағай, икенсеһендә кипкән муйыл. Көнбағыш шундай эре. Лекарь урыҫы Тимофей килтергәйне...

— һин, ыштанһыҙ, барыбер кешегә өләшеп бөтөрөрһөң. Көнбағышын да, муйылын да күсер минең кеҫәләргә!

Унының өр-яңы йәшел салбар кеҫәләренә мин тәүҙә i
көнбағышты, унан һуң кипкән муйылды үҙ устарым менән шатлана-шатлана ташыным. Бөртөгө ҡалма-

һа ла үкенмәйем. Ашамаған ашмы. Ахырҙа үҙемдең сикһеҙ йомартлығымды һәм ихласлығымды раҫлау өсөн элек уң кеҫәмде, унан һул кеҫәмде әйләндереп күрһәттем.

— Шәп егет һин, һыҡмыр түгелһең, — тип маҡтаны мине башлыҡ. Үҙенең оло усы менән бер .ус көнбағыш, бер ус муйыл ҡайтарып бирҙе. Ысынлап та, була бит киң күңелле, ғәҙел кешеләр! ЧПуларҙың береһе беҙҙең башлыҡ.

Харап ирмәк ул Шәһиҙулла ағайым. Уйлап сығармаған уйыны, әйтмәгән йомағы юҡ уның. Бына әле лә уйын тиһәң, уйын түгел, йомаҡ тиһәң, Тюмаҡ түгел, бер мәрәкә тамаша уйлап сығарҙы.

— Малайҙар!—тине ул. Беҙ бөтәбеҙ ҙә уның ауыҙына төбәлдек, -г- Кем ыҙмаһы иң бейек, малайҙар?

Беҙҙең ҡараштарыбыҙ, әлбиттә, иң тәүҙә һатыусы Шәмсулланың сарҙаҡлы өйөнә юнәлде.

— Шәмсулланыҡы! — тине һәр нәмәгә алдан тығылып барыусы Ибрай. Шунда уҡ Шәһиҙулланың ҡырлы дәү йоҙроғо тегенең яңағына килеп ҡунды. Беҙ, аптырап, шымып ҡалдыҡ.

Шул уҡ тауыш менән шул уҡ һорауҙы ҡабатланы ул:

— Кем ыҙмаһы иң бейек, малайҙар?

Был юлы башлыҡтың тиҫтере тынҡыш Вәлетдин үҙенең зирәклеген, тапҡырлығын күрһәтмәксе булды:

— Хыт аҫ, хыт киҫ, иң дөрөҫөн үҙем әйтәм: самай, самай бейеге —Баҙар урамындағы Әхмәр мулланың ыҙмаһы. Ышанмаһаң... ышанмаһаң... — Нимә буласағын Вәлетдин әйтеп бөтөрөргә лә өлгөрмәне, баяғы йоҙроҡ уның ҡолағын өтөп алды.

Беҙҙе тамам ҡаушау алды. Ауылда беҙ белмәгән, беҙ күрмәгән, тик башлыҡтың бер үҙенә генә билдәле бейектән-бейек өй барҙыр, күрәһең. Тағы бер-ике малай, Ташбулат ҡарт менән Әғләм тимерсенең өйөн атап, бәхет һынап ҡараны. Әммә уларҙың яуабына ла шул уҡ баһа бирелде.

Ҡапыл ҡайҙандыр юғарынан төшөп, минең башыма иҫ киткес аҡыллы бер фекер килеп инде. Шул саҡ бөтә тәнемә рәхәт бер ҡалтырау таралды. Йөрәгем леп-леп тибә башланы. Бына хәҙер әйтәм

дә бөтә малайҙарҙы бер юлы ҡырып һалам. Мин белгәнде берәү ҙә белмәй. Үҙем дә һиҙмәҫтән, бөтә урамды яңғыратып һөрән һалдым:

— Мәсет манараһы!

Башлыҡ тәүҙә шаҡ ҡатты. Бер ағарынды, бер бүртенде теге. һипкелле танауына тир бәреп сыҡты.' Бер талай ваҡыттан әлеге йоҙроҡ минең икмәк шүрлегенә — ауыҙ-морон тирәһен беҙ шулай тип йөрөтәбеҙ — йылт итеп килеп етте. Ләкин ҡағылманы, әкрен генә түбән төштө.

— Мәсет ул хоҙай йорто, — тине башлыҡ, — бындай ыҙмалар рәтенә инмәй. Шуны ла белмәйһең, иҫәүән.— Күрәһең, телгә алғаным «хоҙай йорто» булғанға бишбармаҡтан уҡмашҡан ҡырлы туҡмаҡ мине аяп үтте. Әммә Шәһиҙулланың иҫәп-самаларыи мин ярайһы сыуалтып ташланым, ахырыһы. Уйындың ҡыҙығы китте. Малайҙар арлы-бирле буталыша башланы. Ләкин башлыҡ сигенмәне. Уға иң дөрөҫ, иң тапҡыр, иң ғәҙел яуап кәрәк ине.

— һуңғы тапҡыр һорайым: кем ыҙмаһы иң бейек?

Ауыҙ асып өндәшергә берәү ҙә баҙнат итмәне. Шомло тынлыҡ. Бары тыңҡыш Вәлетдиндең танау тартҡаны ғына ишетелә. Шул саҡ уйынға ла, бәхәскә лә һирәк ҡатнаша торған малай — хәйләкәрлеге өсөн Төлкө ҡушаматы йөрөткән Шайхаттар кинәт телгә килде. Ул бер һүҙҙе әйткәс, икенсеһен көтә-көтӘ арып бөтәһең.

— Ҡайһы яҡтан ҡарайһың бит, — тине Төлкө, — бер яҡтан ҡарағанда, Шәһиҙулла ағай, һеҙҙең ыҙманың ҡыйығы ҡалҡыу, икенсе яҡтан ҡарағанда, мөрйәһе юғары. Шулай булғас, иң бейеге һеҙҙең ыҙма булып сыға инде. һеҙҙең ыҙма!

Уға ҡушылып, тағы ике-өс малай ҡабатланы;

— һеҙҙең ыҙма! һеҙҙең ыҙма! Иң бейеге — һеҙҙең ыҙма!! — Кемдер кәпәс тә сөйөп ебәрҙе.

Башлыҡтың йөҙө балҡып китте. Ерән сәс бөртөктәрендә ниндәйҙер баҡыр нурҙар сағылып уйнаны. Шулай ҙа бөтөнләй иреп төшкәнен күрһәтмәҫкә тырышты ул. Эре генә йомғаҡ яһап ҡуйҙы:

— Ана шулай, күрә белгән күҙгә күренә ул. Бейекте тәпәштән айыра белергә кәрәк! — Ул теш

араһынан сырт итеп төкөрөп ҡуйҙы. Ә үҙе Шайхаттар яғына әйләнеп тә ҡараманы.

Күреп торабыҙ. Ана, ҡаршыла ғына Шәһиҙулланың атаһы Кәшфулла ағайҙың бер яҡка янтая төшкән, һалам түбәле тәпәш өйө ултыра. Урамға ҡараған ике тәҙрәнең береһенә аҫҡы өлгө урынына мендәр тығылған. Мөрйәһе лә әллә ҡайҙалштмэгән. Әммә төтөнө тура сыға, бейек күтәрелә. Бик бейек күтәрелә төтөнө.

Ошондай иң тапҡыр, иң дөрөҫ, иң ғәҙел яуап табылғас, малайҙар хәстәрҙән бушап, иркеләйеп ҡалды. Күпме баш ватҡан булдыҡ. Баҡһаң, йомаҡтың аҫҡысы эргәлә генә торған икән!

Минең әсемдә шулай ҙа бер төйөр ҡалды. Дөрөҫөн генә әйткәндә, кем ыҙмаһы бейек һуң әле? Тик үҫә төшкәс кенә мин ул һорауға бер сама яуап табасаҡмын — кемдең йоҙроғо ҡаты, шунының ыҙмаһы бейек була...

Мәсет манараһынан мәзиндең аҙан ауазы яңғыраны. Йәнемә яңынан байрам рухы ҡайтты. Ергә бөгөн шундай изге көн килде. Бөтә ыҙмалар ҙа бейек, бөтә әҙәмдәр ҙә тигеҙ. Ҡайҙалыр бик яҡында ғына, ахыры, беҙҙең Йәшелтау артында, һарыҡтар менән бүреләр бер көтөүҙә йөрөй. Резинка галошлы, бәрхәт түбәтәйле, ҡыҙыл ыштанлы, зәңгәр сатин күлдәкле малай шул көтөүҙе көтөп йөрөй. Әле бүреләр, әле һарыҡтар килеп унық ҡулын ялап китә...

Минең ана шулай онотолоп хыялға бата торған ғәҙәтем бар. Бына әле лә... Кемдер минең бөйөрөмә төрттө. Мин тертләп киттем. Минең эргәлә, ауыҙын йырып, Ибрай баҫып тора.

— Ишетәһеңме, ана, Хәмитйән нимә ти һиңә? — тип ыҫылдай Ибрай.

— Ишетмәйем.

— Кендек, Кендек, Кендек... — ти ул һиңә.

Мин тоҡанып китәм. Хәмитйән арҡыры башын сайҡай:

— Юҡ, әйтмәнем, биллаһи, әйтмәнем, — ти.

Ибрай инде Хәмитйәнгә килеп бышылдай:

— Күрәһеңме, ана тегенең ирене ҡыймылдай. Нимә ти ул? Арҡыры баш, Арҡыры баш, Арҡыры баш, ти...

Мин иларҙай булып танам:

— Яҡты ҡояш, икмәк өҫтө! Әйтмәнем, — тим.— Хәмитйән бит етем, етем кешене ҡорбан байрамында рәнйетергә ярамай,—тим.

— Һы, ул бер ҙә ҡорбан тип тормай... Ана, күҙен сылт-сылт йома: Кендек, Кендек, кендек тиеүе шул уның. Эсенән ҡабатлай...

Хәмитйәндең күҙе, ысынлап та, сылт-сылт килеп тора ине. Тиктәҫкә түгел был. Эсенән генә миңә исем атауы бик ихтимал. Ух, йыуаш, имеш... Һалынҡы ҡолаҡлы ул Арҡыры башта әллә ниндәй аҫтыртын уй барҙыр әле. Асыу төйөнө минең тамағыма тығыла. Тыным ҡыҫыла. Тел осома Хәмитйәндең ҡушаматы килеп аҫылына. Ул, үлән ҡыяғынан бына-быҡа тамырға торған тамсы һымаҡ, хәҙер өҙөлөп төшәсәк. Тыя алманым, ысҡынды:

— Күҙеңде ■ бескелдәтмә. Арҡыры баш, — тинем.

— Минең күҙҙә эшең булмаһын, кендегеңде өйрәт, — тип яуапланы теге. Мин был тиклемен үк көтмәгәйнем.

— Ҡара уны, арҡыры башыңды буй итермен!

— Кендегеңә төртөп, мин әсеңде тишермен!

— Ҡурҡытма, Арҡыры баш!

— Өркөтмә, Кендек!

— Арҡыры баш, Арҡыры баш!

— Кендек, Кендек, Кендек!

Был ваҡыт малайҙар, икебеҙҙе түңәрәк эсендә ҡалдырып, беҙҙе уратып алғайны.

— Давай, давай! Һеҙҙән ҡеүәт, минән көс! — тип Ибрай һөсләтергә кереште.

Хәҙер беҙ икебеҙ ҙә һөсләтеүгә мохтаж түгел инек инде. Йоҙроҡтар күптән төйнәлгән, тештәр ҡыҫылған. Беренсе булып мин Хәмитйәнгә осоп ҡундым. Ул бер аҙ артҡа сигенде лә: «Байрам ашы — ҡара ҡаршы», — тип минең әсемә типте. Мин бөгөлөп төштөм. Шунда уҡ һушымды йыйып дошмандың танауына килтереп тондорҙом. Унан борхолдап ҡан бәреп сыҡты. Ҡан күргәс, мин ҡойолоп төштөм, Хәмитйән бөтөнләй илереп китте.

— Ҡанға — ҡан!—тип минең күлдәк яғамдан эләктереп алды. Мин кинәт тартылдым. Күлдәк умырылып сыҡты. Хәҙер инде мин аҡты-ҡараны күрмәҫтәй булып шаштым. Беҙ, бер-беребеҙгә йәбешеп,

йә көрмәкләшеп китәбеҙ, йә ысҡынып, аяуһыҙ йоҙроҡтар яуҙырырға керешәбеҙ. Мин ауыртыу ҙа һиҙмәйем, асыу ҙа татымайым. Бары сәм генә — һуғыш сәме генә ҡалды миндә. Малайҙар, ҡаҡҡан ҡаҙыҡ төҫлө, ҡымшанмай ҙа баҫып торалар. Ҡатнашыусы ла, аралаусы ла юҡ. Тик Ибрай ғына беҙҙең тирәлә һикергеләп йөрөй:

— Бирешмә, бирешмә! — ти ул, ҡайныбыҙғалыр көс бирә. — һеҙҙән йоҙроҡ, минән тел! —Мин уның тауышын алыҫтан, урман артынан ишеткән кеүекмен... Тап шул ваҡыт Хәмитйәндең йоҙроғо минең күҙ төбөнә килеп тейҙе. «Күҙҙән уттар сәселде» тигән нәмәне мин тәүтапҡыр ана шунда, һигеҙ йәшемдә, татыным. (Унан һуң донъя байтаҡ ут күрһәтте.) Эйе, башта осҡондар сәселде, унан һуң күҙ алдымда ҡара түңәрәктәр тәгәрәргә кереште, ләкин мин бирешмәнем. Шунда уҡ иҫемә килеп, Хәмитйәндең һалбыр ҡолағына йәбештем. Ул тартылманы, киреһенсә, миңә табан тайшанды ла, йән асыуын йыйып, башы менән минең сикәмә төкөнө...

Бынан ары алыш күпме һәм нисек барғандыр, асыҡ ҡына хәтерләмәйем. Әммә шунан һуң да берберебеҙҙе байта-R дөмбәҫләнек буғай. Минең хәлем тиҙерәк бөттө. Хәмитйән миңә ҡарағанда йәшкә лә олораҡ, кәүҙәгә лә мыҡтыраҡ ине. Ахырҙа, хәлем мөшкөлләнгәнде самалап, ул мине, ыштан бөрмәмдән алып, өйөрөлдөрөп-өйөрөлдөрөп йөрөттө лә һыртым менән ергә һуҡты. Ҡалаҡ һөйәгем аҫтына ҡаты, осло нәмә килеп төртөлдө. Күрәһең, ҡырлы таш булды. Минең һыным ҡатты. Ҡотороу сигенә еткән Хәмитйән минең күкрәгемә менеп тубыҡланды. Ауыҙ ситемдән ниндәйҙер йылы нәмә тәгәрәп сығып, битем буйлап югерҙе. Мин ҡайҙалыр батып барам, батып барам. «Аралағыҙ беҙҙе, ҡотҡарығыҙ мине!» — тип ҡысҡырмаҡсы итәм. Ҡысҡырырлыҡ хәлем юҡ. Беҙҙе әйләндерел баҫҡан малайҙар инде эреле-ваҡлы ҡаҡҡан ҡаҙыҡтарға әйләнгән. Ҡысҡырһам да, ишетмәҫтәр. Бары күҙҙәре генә йылтырай. Улар ҙа ысын күҙ түгел, ботаҡ тишектәре икән.

...Ҡырҡ дүрт йыл үткәс, быға оҡшаған хәл ғүмеремдә тағы бер тапҡыр ҡабатланды. Мине күрә алмаусы берәү ул саҡ услап-услап минең әҫтәмә бысраҡтар ырғытты. Минең эшемде, шәхесемде,

мөхәббәтемде кәмһетте, йөрәгемде менеп тапаны, йәнемдән ҡара ҡан эркелеп сыҡты. Ул көндө лә беҙҙе кешеләр текмәһе уратып алғайны. Бысраҡ һибеүсе тәбиғәте менән йыуаш, бары минең үҙ арҡамда ғына сығырынан сыҡҡан бала, ә битараф ҡарап тороусылар бергә уйнап йөрөгән ғәмһеҙ, аңра малайҙар түгел ине. Бергә хеҙмәт иткән, ҡайғышатлыҡ бүлешкән, яҙмыш уртаҡлашҡан оло кешеләр ине. Ҡурсаламаҫтармы, тип өмөт иттем. Өндәшмәнеләр. Ә бит улар мине ихтирам итә, ҡайһы берҙәре хатта ярата кеүек ине. Ҡурҡтыларммы? Әллә: «Беҙгә әләгә тора бит, уға ла эләкһен әле», — тинеләрме икән? Бәлки, улар үҙҙәренсә хаҡлы ла булғандыр...

Быға тиклем малайҙар ҡушаматымды әйтеп үсекләүҙән тыш мине ерле юҡҡа ҡыйырһытманы. Дәүерәктәр ҡанат аҫтына ала килде. Хәҙер нимә булды һуң? Ниңә минең өҫтән берәү ҙә Хәмитйәнде тартып төшөрмәй? Баяғы күҙле ҡаҙыҡтар, бер-береһен ҡыуып, түңәрәк тирәләп әйләнә башлай. Әйләнгән ерҙең үҙәге һымаҡ, уртала минең Оло инәйем баҫып тора.

Донъя яңынан үҙ урынына ултыра. Инде мин үҙем, аҡрын ғына бәүелеп, ҡайҙалыр әллә осоп, әллә йөҙөп барам. Яңағымда йомшаҡ, йылы нәмә һиҙәм. Был Оло инәйемдең ус төбө — мин уны шунда уҡ таныным.

Ошо ҡулдың йылыһы һәм ҡөҙрәте бынан ары ла мине бөтә ғүмерем буйы һаҡлаясаҡ һәм яҡлаясаҡ. Минең тынғыһыҙ һәм дыуамал башым өсөн ул иң ышаныслы, иң мәрхәмәтле төйәк буласаҡ, һуңғы һулышымды алған мәлемдә мин, моғайын, бик аҙ нәмәләрҙе хәтергә төшөрөргә, бик аҙ заттар менән хушлашырға өлгөрөрмөн. Ләкин шуныһын асыҡ беләм: әллә ҡасан донъя ҡуйған Оло инәйемдең йомшаҡ ҡулын иҫкә алырға,_ уның йылыһы менән хушлашырға ваҡыт табырмын. Башҡаса мөмкин түгел.

Сәйер тынлыҡ эсендә әллә осоп, әллә йөҙөп барам. Башым Оло инәйемдең ус төбөндә рәхәтләнеп ята. Ҡояш нурҙары, әйтерһең, керпектәремдән тартып, минең күҙҙәремде аса. Мин башта бейек зәңгәр күкте, унан һуң Оло инәйемдең хәсрәтле йөҙөн кү-

рәм. Ул мине күтәреп бара. Моғайын, өйгә ҡайтып киләбеҙҙер...

Мине урам яҡ өйгә — ҡунаҡ өйөнә һалдылар. Башҡа ваҡытта бында инеп йөрөү ҙә һирәк эләгә беҙгә. Хәҙер түр башында йомшаҡ түшәк өҫтөндә йәйелеп ятам, әйтерһең дә, бер түрә... Артыҡ йәйелеп тә булмай шул әле. Тын алған һайын жалаҡбаш һөйәген нимәлер яндырып өтөп ебәрә. Тамаҡ ҡырыр әмәл юҡ, уҡмашҡан ҡан борхолдап килеп сыға. Ул ҡанды һөртөп тороrға минең эргәмә ҡыҙыл башлы оҙон таҫтамал һалдылар.

Мине ҡыҙғанып сеңләүсе лә, Хәмитйәнде ҡарғап һөрәнләүсе лә булманы. Бер тапҡыр эргәмә атайым инеп сыҡты. Ул миңә теклəп ҡарап торҙо ла көрһөнә биреп ҡуйҙы:

— Ярай, нығыраҡ булырһың... — тине, бөтә йыуатыуы шул булды.

Ағайҙарым өндәшмәй генә күҙ һалып сыҡтылар. Бәләкәстәрҙе, ахыры, минең янға индермәйҙәр. Әле күҙгә күренгәндәре юҡ. Кесе инәйем эйелеп минең маңлайыма ирендәрен тейҙерҙе. Шул саҡ битемә унын бер нисә бөрсөк эре-эре күҙ йәше тамды. Шул йылы дым, гүйә, миңә хәл кертте, рухымды иркәләне. Күңелемдә ҡапыл рәхмәт тойғолары уянды. Иң кәрәкле һүҙҙәрҙе генә әйтеп, унын үҙен йыуатҡым килде:

— Илама, Кесе инәйем, илама, мин һине лә яратамсы, — тинем.

— Эйе, ярataһың, мине лә ярataһың, — тине Кесе инәйем, — мин бит ул хаҡта иламайым. Мин бөтөнләй иламайым... Ҡайһы ереӊ ауырта, балам?

— Инде бер ерем дә ауыртмай, — тинем мин. Дөрөҫөн әйтеп, Кесе инәйемде ҡайғыртып булмай бит инде. — Ҡорбан байрамы бөтмәнеме әле?

— Юҡ, бөтмәне. Ана, күрәһеңме, алдыңда ни тиклем байрам һыйы, хатта шәрбәт тә бар. Тамағыңа ҡабыр инең.

Минең яныма батмус тултырып тәмле-томло аштар ҡуйылған. Уларҙы күргәс тә, күңелем болғанып китте.

— Тәмле нәмәләрҙе йыйып, Әсғәткә илтеп бир, Кесе инәйем, зинһар, — тип ялбарам, — уның ҡолағын ат тешләп өҙҙө. Ула^ ыумас ыуып ҡына тора-



5-се биткә. «Мин теремен икән әле. «Зәп-зәңгәр булып туңып, ҡатып ҡалған күкте күрәм».

лар. — Бына-бына уҡшып ебәрәм тип ҡурҡып, күҙҙәремде йомам.

— Ярар, балам,—тип Кесе инәйем батмусты алып сығып китә.

Аш өйөнән сығарып. Оло инәйем сәйнүк морононан миңә нindәйҙер әсе һыу эсерә. Әрем һыуы булырға тейеш. Бына һиңә байрам һыйы! Ауыҙҙы бороп бара, ә үҙен уртлаған һайын уртлағы килә.

— Талаҡ-бауырыңа шифа булыр, эс, балам, эс, — ти. Бер аҙҙан күңел өҫтө еңеләйеп китте.

...Хатта миңә рәхәт тә. Мин инде Йәшелтау битләүендә, иҫ киткес йәмле, аяҙ көндә көтөү көтәм Ап-аҡ бөҙрә бәрәстәр һоро бүре балалары менәг ҡыуышып, һикерешеп уйнап йөрөй. Тегеләр юрамал ғына бер-береһенең ҡолағынан тешләгән булғ. Уларҙың инәләре менән аталары — оло һарыҡтар менән оло бүреләр — бәпестәренең татыулығын > һоҡланып, ситтән генә ҡарап тора. Ҡыуаныстарынан тамам ашауҙан яҙғандар. Бына бер аңра бүое балаһы иҫәр бәрәстең ҡойроғонан тартты. Теге мәэлдәп бәлә һалырға кереште, үҙе шунда уҡ, сигенә биреп, иптәшенең ҡабырғаһына килеп төкөнө. Быны күргән бөтә һарыҡтар, сәмләнеп, бүреләргә ташланды һәм күҙ асып йомғансы тегеләрҙе бер юлы быуып, ҡырып һалды, һарыҡтар ҡайҙалыр китеп юғалды, тау битләүендә бары бүре үләкһәләре генә ятып ҡалды...

Инде ут менән һыу мажараһы башланды. Тғүҙә улар икәүһе йәнәшә килә. һыу боролоп-борслоп аға, ә ут, ҡыҙыл ялдарын туҙғытып, яр буйлап югерә. Йылға шундай шат, бәхетле, унын өҫтөнә уттың тылсымлы шәүләһе төшә. Мең төрлө нур уйнай һыу өҫтөндә. Үҙ матурлығына үҙе таң ҡалып, ҡайҙалыр ашыға бахыр йылға. Байрамғамы? Туйғамы? Шатлығына сыҙай алмай һикергән бер тамсы яңылыш утҡа тамды. Тәкәббер ут быға үтә ғәрләнде, ыҫылдап, шунда уҡ һыуға ябырылды. Тегеһе рәхим һорап һүҙ әйтергә лә өлгөрә алманы, томанға әйләнеп, йыһанға таралды. Үҙ тинтәклеге арҡаһында һыуҙан айырылған ут, асыуынанмы, үкенеүенәнме — белмәйем, ниҙәндер — йомғаҡ буЛып йомарланып, офоҡ ситенә табан тәгәрәне. Ана әле булһа, зәһәрен сәсәсәсә, тәгәрәп бара... Ерҙә тамсы һыу ҡалмаған.

— Һыу!

— Мә, балам, — Оло инәйем минең иренемә баягы сәйнүк моронон килтереп терәй.— Шундай һәйбәт, тыныс йоҡланың, — ти ул. — Хәҙер инде иртәнсәк.

Урам тәҙрәһенән минең битемә ҡояш төшә. Мин яй ғына ҡояшҡа табан боролам. Шул саҡ тәҙрә каршыһында аҡрын ғына Хәмитйәндең арҡыры таҡыр башы ҡалҡып сыға. Мин тәүҙә уның ҡаҡ түбәһен, унан ялбыр ҡолаҡтарын, бойоҡ ҡара күҙҙәрен шәйләнем. Мине күргәс, ул әллә иларға, әллә йылмайырға итте — өҫкө ирене ҡалтыранып ҡуйҙы. Шунан ул яҫы маңлайын һаҡ ҡына тәҙрә быялаһына терәп ҡатып ҡалды. Мин дә уға һүҙ ҡушманым. Юҡ, асыуҙан түгел, хәлем мөшкөллөктән өндәшә алманым. Хәмитйәнде Оло инәйем дә күрҙе, әммә уның да теле һүҙ әйтмәне, ҡулы ишара яһаманы. 1>еҙ Хәмитйән менән бик оҙаҡ шулай йөҙгә-йөҙ килеп торҙоҡ. Уның күҙҙәрендәге ҡайғыны күреп сыҙай алмай, мин башымды икенсе яҡҡа борҙом.

«...Бына һиңә байрам!» — тип уйлап ятам мин. Ниңә шулай икән ул — байрам осоронда әҙәмдәр бер-береһен шәйлә рәнйетә. Былтыр һабан туйында Ҡаранйылға гармунсыһын ҡаланан килгән бер зимагор хәнйәр менән сәнсте. Теге гармунсы сатан булып калды. Яҙ көнө ташыу ҡаршылау йомаһында Ҡыҙҙар тауында үҙебеҙҙең ауыл егеттәре, урамға-урам ҡаршы килеп, ҡанға туҙып һуғышты. Әле ҡышын **ғына** Ябалаҡ урамында туй осоронда әҙәм үлтерҙеләр. Хатта тула өмәһендә лә түбэләшеп алырға яй табалар. Ыҙғыш-ҡырылыш сығарыр өсөн, кешеләр, әйтерһең, байрамды ғына көтөп торалар. Йыл буйына бөтәйтеп кейгән иң матур кейемдәрен, бер-береһенә ташланып, өҙгәләйҙәр, бысраталар, ҡанға мансыйҙар. Яман һүҙҙәр әйтешәләр, сибәр йөҙҙәренә йәрәхәттәр һалалар. Байрам, туй осоро еттеме, **беҙҙең** бөтә өй әсебеҙ буйға еткән Мортаза ағайым **нсвн** дер ҡалтырап тора. Ул да, минең кеүек, үтә гәрсел. Торғаны менән бер һуғыш суҡмары. Кәләш **нлып** бирһәк, аҡылға ултырмаҫмы, тип өмөт итәбеҙ ҙә... Нисек булып сығыр инде. Ифрат үҙһүҙле ул. **Оле** кисә лә, ҡорбан байрамын һанға ла һанамай,
I иң менән ике атты ,егеп, баҫыуға һабан һөрөргә

китте. Атайымды ла, Оло инәйемде лә тыңламаны. Имеш, улар, егет-елән бергәләп, һүҙ ҡуйышҡандар, йәнәһе, уларҙың «ҡорбан байрамына ҡатнашы юҡ». Атайым да артыҡ ныҡышманы. «Мин элек тыуһам, бәлки, һин белеп тыуғанһыңдыр»,—тип ризалашыуын да белдергәндәй итте. Сәйер ул минең Мортаза ағайым. Ҡыуанып байрам итер урында ер һөрөп йөрөгән әҙәм ниндәйерәк тиҫкәре булырға тейеш — үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ.

Мин тағы ла тәҙрә яғына әйләнәм. Был юлы инде минең күҙ алдымда Хәмитйәндең соҡор елкәһе тора. Ул, урамға ҡарап, беҙҙең нигеҙ ташында ултыра, ахырыһы. Үҙе ҡымшанмай ҙа...

Икенсе көндө лә, өсөнсө көндө лә нәҡ шул урында мин Хәмитйәндең йә йөҙөн, йә елкәһен, йә яңағын күрҙем. Иртән дә, көндөҙ ҙә, кис тә ул үҙ урынында ҡалды. Беҙҙекеләрҙән уны берәү ҙә ҡыуманы, берәү ҙә уға асыуланманы, күрәһең. Тик мин тәүбашлап урамға сыҡҡас ҡына, мине күреп, артына ла әйләнеп ҡарамайынса тороп югерҙе. «Хәмитйән!»— тип ҡысҡырҙым мин. Ул ишетмәне.

Бынан һуң да донъя үҙ яйын яйлап бара бирҙе. Малайҙар менән ыҙғыштыҡ та,араштыҡ та. Бөтәһе лә, Оно инәйем әйтмешләй, эт тәнендәге йәрәхәт кеүек, йөйһөҙ төҙәлә килде. Тик бер Хәмитйән генә бүтәнсә миңә бер ваҡытта ла ҡул күтәрмәне. Әммә «Кендек»те миңә барыбер йәбештерҙеләр, ҡуптармаҫлыҡ итеп йәбештерҙеләр.

Тап ун биш йыл үткәс, мин йәйге иртәлә яу ҡырында яңғыҙ имән төбөнә килеп ауасаҡмын. Күкрәгемде шунда тишеп ингән тимер ярсығы һуңыраҡ минең үпкәмде өңөп, үҙенә оя яһаясаҡ. Йәнә дүрт йылдан шул оянан ҡан һарҡый башлаясаҡ.

...Бына мин Мәскәү янында үпкә ауырыуҙарын дауалай торған больницала ятам. Түбәләрҙән апрель тамсылары тама. Яҙ — беҙҙең өсөн иң хәтәр саҡ. Ни эшләптер, нәҡ ошо мәлдә, ер уянып, өрйәнынан йәшәй башлаған бер миҙгелдә, минең кеүектәрҙең донъя менән алыш-бирештәре йышыраҡ өҙөлә. Был яҙ үтеп китһә, ихтимал, тибеҙ, үләнгә лә аяҡ терәрбеҙ. О, ул ихтимал! Беҙгә оло өмөт, оло иман хәҙер.

- Мотоцикл менән ниндәйҙер милиционер килгән, һеҙҙе һорай. Инһенме?—тип килеп әйттеләр миңә.

Кем? Милиционер?.. Бар гонаһтарым өсөн бер юлы яуап алырға килгәндер, — тип шаярған булдым мин. — Инһен әйҙә.

Закон кешеһен яҡкан көйө ҡаршылау килешмәç. Тороп ултырҙым. Көтәм. ч'

— Мөмкинме?—тине инеүсе. Уның эйелгән башы ишек ҡашағаһына саҡ-саҡ ҡына теймәй ҡалды. Ингәс тә ул, әйтерһең, үҙенең ғәләмәт ҙур кәүҙәһен ҡайҙа ҡуйып бөтөрөргә белмәй, аптырап Торҙо. Фуражкаһын һалды. Уның яçы киң маңлайы буйлап уң ҡашынан өçтәрәк һырлы-һырлы тәрән йөй һуҙылған. Мин тәүҙә ана шул йөйҙө күрҙем. Йәнә шуны шәйләнем: миңә үтә таныш моңһоу күҙҙәр карай, тилмереп, ялбарып ҡарай.

— Хәмитйән!—тинем мин. Ул ишетмәне. Бәлки, минең тауышым сыҡмағандыр. Бынауындай бәһлеүән кинәт кенә бөршәйеп, бәп-бәләкәс булып ҡалды ла минең түшәгем янына килеп тубыҡланды. Хас гоге саҡ тәҙрә быялаһына ҡапланған һымаҡ, маңлайын минең койка тимеренә терәне.

- Кендек!—тине. — һине күрер көн дә бар икән!—Ул быуылып иларға кереште.

- Йә, йә, Арҡыры баш, ҡуй, һинең һынлы баһадиргә илау килешмәй,—тип мин уның сәсен һыйпаным.

**Күҙ** йәштәрем боғаҙымдан эркелгәс, нимә ҡылайым, Кендек?

— Етер, етер, Хәмитйән. Тор, ултыр.

Тыйма мине, илайһын илап бөтөрәйем, — тине ул, тыныслана төшөп. Бер аҙҙан бөтөнләй шымып, калды. Ҡулъяулығын алып, йөҙөн һөрттө. Шунан Һуң ғына башын күтәрҙе. Ләкин, күпме инәлһәм дә, урынынан ҡуҙғалманы.

Байтаҡ ара күҙгә-күҙ ҡарашып торғас:

һаумы?—тип мин ҡулымды һуҙҙым. Күреш-Іек. Уң ҡулында уның ике бармағы юҡ ине.

һине күрер көн дә бар икән, — тип ҡабатланы ул. — Таба алмамдыр, тип өмөт тә өҙә башлағайным инде. Таптым ^пулай ҙа...

Хәмитйән түкмәй-сәсмәй үҙенең мажараларын һөйләп бирҙе:

— Һинең үпкә сире менән ауырып китеүең хаҡында ауылдан яҙҙылар. Мәскәүҙә ята, тинеләр. Мин бынан алтмыш-етмеш километр ерҙә генә хеҙмәт итәм. Бер ай буйы инде хеҙмәттән буш арала мотоциклға атланам да һәр көн Мәскәүгә елдерәм. Башта үпкә сирлеләр ятҡан бөтә больницаларҙы ҡыҙырып сыҡтым. Юҡһың. Йәнә бер әйләндем. Шунан һуң бындай больницаларға берәм-берәм тейеп уҙҙым. Юҡһың. Барлыҡ санаторийҙәрҙе әйләнеп ҡайттым. Юҡһың. Яҡын-тирәләге район, хатта ауыл больницаларына ла һуғылдым. Юҡһың, юҡһың, юҡһың... Һинең өсөн хафалана, нығытып хафалана башланым, һуңға табан «Больница» тип яҙылған йорт күрһәм, тертләп китә торған булдым. Ул һүҙгә ҡарата бер төрлө нәфрәт тыуҙы... Ахмаҡ мин! Адресеңде һорап, ауылға телеграмма бирергә баш етмәгән. Әле бында килгәс төшөндөм шуны. Ә һине табыуым «бирәһе килгән ҡолона — сығарып ҡуйыр юлына» тигән мәҡәл буйынса булды. Әле бая ғына фартҡа ҡул һелтәп, Мәскәүҙән сығып килгәндә бер бисәкәй «ултырт әле» тип ҡул күтәрҙе. Исмаһам, берәүгә игелегем тейһен тип ултырттым, һөйләшә торғас, уның ошонда сестра булып эшләүен аңланым. Һинең хаҡта һораштым. Белмәй. Байтаҡ урау булһа ла, теҙгенде был яҡҡа тарттым. Бына, насип булғас, күрештек. — Хәмитйән бөтөнләй тынысланды булырға тейеш. Уның тауышы ла хәҙер талғын ағыла. Ләкин был тыштҡы тыныслыҡ күпкә барманы. Баяғыса уҡ хәсрәт һәм хәүеф тулы күҙҙәрен миңә төбәне лә:

— Кендек! — тине ул үҙәк өҙгөс әрнеүле тауыш менән. — Һинең сиреңдең сәбәпсеһе мин бит! Теге саҡ күкрәгеңде менеп тапамаһам, һин был көнгә төшмәç инең... Мин, мин ғәйепле! Ғәфү ит, тип әйтә алмайым. Мине ғәфү итеүҙән генә һиңә еңел булмаясаҡ. Уныһын беләм. Миңә ғәфү кәрәкмәй ҙә. Тейеш тә түгел! Тик һин шуны ғына күр, шуны ғына бел: һинең менән бергә яфаланам, бергә өмөт итәм, бергә ышанам. Әгәр мөмкин булһа, бер үпкәмде киçеп, ярты йәнемде ярып бирер инем. Мин һине эҙләгәндә, шуны тәүәккәлләнем: бәлки, докторҙар минең бер

үпкәне һиңә күсереп ҡуя алырҙар. Ә, Кендек? Хәҙер был эште башҡара алалар, тиҙәр бит. Әйтеп ҡарайыҡ докторҙарға...

— Иҫәр һин. Арҡыры баш, — тип йыуатмаҡсы иттем мин уны.— Беренсенән, докторҙар хәҙергә иҫке үпкәне генә киҫеп ташлай беләләр, яңыһын ҡуя алмайҙар; икенсенән, минең үпкәне;, бит фашист тимере тишеп үтте. Бәләнең башы шунда. «Не виноват военкомат, виноват гитлеризм» тигән йырҙы ишеткәнең барҙыр бит. Ошоноң шикелле, һинең ҡатнашың юҡ бында.

— Беләм. Ҡемең тимере хаҡында ла,' «кем виноват» хаҡында ла беләм. Әгәр теге саҡ имгәнеп ■ҡалмаған булһаң, шул бармаҡ осондай юнһеҙ тимер ярсығына ғына бирешер инеме ни һинең үпкә? Затың ундай түгел һинең, һеҙҙең затты юҡка ғына «имән үҙәкле» тип йөрөтмәйҙәр бит. Аһ, сабый саҡ, һантый саҡ! —тип көрһөндө ул.

Хәмитйәнде өгөт менән түгел, асыу менән генә еңеп була торғайны. Мин шуны хәтерләнем.

•— Нимә һин, Арҡыры баш, минең баш осонда сеңләргә тотондоң әле? — тип екерендем, булдыра алғанса. — Мин бит үлергә йыйынмайым, һин баянан бирле күҙеңдән дә, ауыҙыңдан да һеләгәй ағыҙаһың.

— Үлмәйәсәкһең дә!— тип раҫланы Хәмитйән.— Ә һин минең күҙ йәштәремде, минең выждан ғазаптарымды кәмһетмә. Быныһы һиңә килешмәй.

Хәмитйән миңә йәл булып китте. Ул яңынан ҡаҡҡыланып-һуҡҡыланып үҫкән етем малайға әйләнгәндәй тойолдо. Ҡаты бәрелеүемә үкенеп ҡуйҙым.

— һин үлмәйәсәкһең, — тип тыныс ҡына ҡабатланы ул, — һиңә бер тапҡыр йыназа уҡылғайны инде. Хәҙергә сабыр итеп торһондар. Юғиһә йышыраҡҡа тура килер.

— Ҡасан? Нисек?

— Ниңә, белмәйһеңме ни?

— Ю-ю-ҡ!—Мин аптырап ҡалдым.

— 1943 йылда. Берәү ҙә һөйләмәнеме ни һиңә?

— һөйләмәне.

— Улайһа, мин һөйләйемме?

— һөйлә. Үҙ йыназаң тураһында әңгәмә тынлау ирмәктер ул...'[1]

Хәмитйән минең өсөн, йәнәһе, имен бөткән, бүтән берәүҙәр өсөн үтә һәләкәтле тамамланған, күңелемә ғүмерлек яра һалған тарихте һөйләп китте. Ул китте, һуңынан баш осомдағы тумбочка өҫтөндә газета ҡағыҙына төрөлгән төйөнсөккә күҙем төштө, һаҡ ҡына сисеп ҡараным. Унда бөршәйеп бөткән һарғылт йәшел ике алма ине. Ул китте. Шул беҙҙең һуңғы күрешеүебеҙ, һуңғы айырылышыуыбыҙ булды. Күп тә үтмәй, уның хаҡында ҡот осҡос ҡара хәбәр килде. Иҫерек бандиттәрҙән йәш кенә бер ҡыҙҙы ҡурсалағанда уның йөрәгенә бысаҡ ҡаҙағандар. Имеш-мимешкә ҡарағанда, был көн ул хатта хеҙмәттә лә булмаған. Хәбәр миңә ваҡытында килеп юлыҡманы. Шунлыҡтан мин уны ерләргә лә бара алманым. Әле яңыраҡ ҡына миңә бер үпкәһен, ярты йәнен ярып бирергә тип килгән Хәмитйән, шулай итеп, бөтә ғүмерен бер юлы бүтән бер ғүмерҙе һаҡлау өсөн биргән.

Был хәбәрҙән һуң минең рухымды өҙлөкһөҙ ике хәсрәт таларға тотондо. Берҙән, ғәжәйеп ҡорҙашымдың фажиғәле үлеме әрнетһә, икенсенән, үҙ яҙмышым тынғы бирмәй. Хәмитйән һөйләгән нәмәләрҙән һуң мин үҙемде кем иҫәбенәлер ғүмер һөргәндәй, үтескә йәшәгәндәй хис итә башланым. Ошо уй торһам да, ятһам да мейемде игәй: үтескә, үтескә, үтескә...

Ул иһә был тарихте мине йыуатыу, өмөтөмә ҡеүәт өҫтәү ниәте менән, миңә оҙон ғүмер юрап һөйләне. Баҡһаң, бөтөнләй башҡаса килеп сыҡты. Бер башыма урын таба алмайым. Врачтарҙы ла хәүефкә төшөрҙөм. Бына ул фажиғә. Мәрхүм нисек әңгәмә иткән булһа, уны һүҙмә-һүҙ ҡабатлап сығам. Әсемдә һаҡларға башҡаса сыҙамлығым етмәй.

## «ҠАЛДЫ
## ҒӘЗИЗ БАШЫМ
## ЙӘШ КӨЙГӘ»

...Бына ошо ерҙән маңлай һөйәген немец пуляһе бураулап үткәс, мин байтаҡ заман иҫәңгерәп йөрөнөм. Аҙна-ун көн самаһы ауылда ла булып киттем. Мин ҡайтҡан көндө шулай клубта — халыҡтың йонсоу күңелен аҙ-маҙ күтәрмәксе булыптыр инде — уҡытыусылар концерт ҡуйҙы. Бейенеләр, йырланылар, шиғыр һөйләнеләр.

Ахырҙа сәхнәгә һинең ҡатының Рауза сыҡты. Ҡапыл халыҡ араһында ниндәйҙер шомло шыш-быш үтте. Үтте лә тынды. Был көн, аҡ күбәләк кеүек, саф, сибәр Раузаның үҙенән дә сафыраҡ, үҙенән дә сибәрерәк ине. Шундай мәлдәр була, әйтәйек, көтмәгәндә һинең алда офоҡ сигенә, баш өҫтәңдә күктәр күтәрелә, ап-асыҡ итеп иҫкән елде күрәһең. Рауза килеп баҫҡас, минең өсөн донъяла сиктәр югалды. Әйтерһең, ер йөҙөндәге туп тауыштары берсә тынды, тәндәрҙәге һыҙлауҙар баҫылды, яралар уңалды: шиктәр таралды. Ысын нәмәләрҙән бөтә йыһанда бары ул ғына — бер Рауза ғына тороп ҡалды. Уның йөҙөндә әллә һағышлы тантана, әллә тантаналы һағыш сағыла ине. Бәлки, ул да бөтөнләй үк ысын түгелдер — бер йыр йырлар өсөн генә күктән төшкән сихри заттыр... Ҡыҫҡаһы, үҙенән дә илаһиерәк ине ул.

«Ашҡаҙар»ҙы йырланы ул. Тәүҙә, йырҙың беренсе яртыһын йырлағанда, халыҡ башы өҫтөндә ниндәйҙер ҡурҡыныс тынлыҡ аҫылынып торҙо. Бына-бына ул ҡолап төшөр ҙә әҙәмдәрҙе баҫып үлтерер һымаҡ ине.

Шәшкеләргә китеп вафат булды,
Ҡалды Үәзиз башым йәш көйгә.

Йырҙың икенсе яртыһын ул бигерәк тә йән тетрәткес итеп башҡарҙы. Ләкин, ни эшләптер, дыу килеп ҡул сапманылар. Бер-ике ерҙә сәпәкә иткән булдылар. Уныһы ла ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына...

Ҡапыл артҡы рәттәге бер ҡатын һыҡтап илап ебәрҙе. Уға күршеһе ҡушылды... Минең эргәләге ҡыҙ бала ла ҡулы менән йөҙөн ҡапланы. Әле теген дә, әле бында йәше-ҡарты быуылып иларға кереште. Бер аҙҙан бөтә зал үкһергә тотондо. Рауза ҡаушап ҡалды. Йыры менән ул кешеләрҙең асыҡ йәрәхәттәренә ҡағылды, ахыры. Уның йөҙөнә борсолоу сыҡты. Эйе, күпме «ғәзиз баштар ҡалды йәш көйгә». Хәйер, улай тиһәң, инде өсөнсө йыл һуғыш бара. Кешеләр күп нәмәгә күнектеләр, йырҙың да моңлоһо, фажиғәлеһе нығыраҡ күңелгә ятыусан булып китте бит.

Кешеләр туҡтала алмай һаман үкһей. Берәүҙе берәү йыуатмай ҙа, тыймай ҙа. Бер минең күҙемдә йәш юҡ. Шундай уҡ таш бәғергә өйләндемме икән ни?

■— Клубта гел шулай йырлап илашаһығыҙмы? — тип һораным мин, әлеге ҡыҙға эйелеп. Ул шымып ҡалғайны инде.

— Юҡ, — тине. — Был юлы сыҙап булырлыҡ түгел шул.

— Ниңә улай?

— Бер аҙна әүәл инде Кендек тураһында ҡара ҡағыҙ килде. Бөтә ауыл белә. Раузаға әйтергә телебеҙ бармай. Күтәрә алмаҫ, тип ҡурҡабыҙ, бигерәк ярата ине.

Мин аҡрын ғына ер аҫтына батып, кире ҡалҡтым. Алдағы бейек урында әле булһа Рауза баҫып тора. Ул шундай нескә, аҙ ғына ел тейһә лә, сайҡалыр, ауып китер төҫлө. Кескәй генә ошо ҡатындың бахыр иңдәренә бына ни тиклем хәсрәт йөгө ҡоланы. Сабырлыҡтар бирһен үҙенә! Аяғүрә баҫып, ауылдаштарға ҡысҡырғым килде: «Ни эшегеҙ был? Ниңә гонаһһыҙ ошо йән эйәһен күмәкләп язалайбыҙ һуң әле? Уны, ҡыҙғанып, һәләк итәбеҙ түгелме? Иртәгә һуң, иртәгә нисек уның күҙенә күренербеҙ? Нисек йөҙөнә ҡарарбыҙ?» Ҡысҡырманым. Ихтимал, мин түгел, ауылдаштар хаҡлылыр. Бәлки, улар, рухы имгәнгәнсе был ҡатын тағы бер тапҡыр йырлап

ҡалһын, тигәндәрҙер. Бәхетһеҙлектең бер төнгә һуңлап ҡалыуы, бәхеттең бер төнгә китмәй тороуы кеше өсөн үҙе ҙур бүләк түгелме ни? Ҡатын өсөн ире, тимәк, үҙ ғүмеренән тыш әле булһа йәшәп ята.

Иртән Рауза мәктәпкә киткәс, һеҙгә барҙым. Атайыңдар был хәлде белә ине. Улар ҙа, бөтә хәсрәтте үҙ күкрәктәренә алып, Раузаны ҡурсалайҙар икән. Яҙмышты алдап булмаясаҡ, артйбан йәшереү бары алда торған һәләкәтте генә арттырасаҡ тип, беҙ ошо хәйләһеҙ хәйләгә сик ҡуйырға булдыҡ. Саманан тыш ауыр был вазифаны мин үҙ әҫтәмә алдым. Сәңгелдәктә тыныс йоҡлап яткай улыңа ҡараным. Ҡотом осоп китте. Ошо баланы бына-быына атаһыҙ ҡалдырасаҡмын һымаҡ тойолдо.

Миңә ул вазифаны үтәргә тура килмәне. Күрәһең, бөтә ауылды баҫып торған ҡайғы быуаһы бүтән ерҙән йырылғандыр. Таш булып ҡатҡан Раузаны ике иптәше етәкләп өйгә алып ҡайтты. Уны сисендереп һандыҡ өҫтөнә ултырттылар.

— Кендекте үлтергәндәр, — тине ул, байтаҡ торғас,— хәбәре килгән. Быына.— Таушалып бөткән ҡағыҙ киҫәген ул үрелеп өҫтәлгә ҡуйҙы.

— Ҡағыҙ әле әжәл түгел, — тине Кесе инәйең. — Беҙ уға ышанманыҡ. Бала минең күкрәгемдә йәшәй. Уның урыны быына бында һыуынмаған әле, тимәк, уны ҡәбер алмаған. Сабыр бул, ҡыҙым.

Раузаға беребеҙ ҙә яҡын килмәнек, йыуатманыҡ. Кискә тиклем тиерлек шулай һүҙһеҙ ултырҙыҡ.

— Яҙмыштан уҙмыш юҡ, — тип көрһөндө атайың, — ни ҡылһаҡ та, аҡрынлап күнегергә тура килер. Шәмгә ут ал, әсәһе. Яҡты күңелле егет ине, ҡараңғыла оҙатмайыҡ үҙен.

Шул кисте беҙ һине, һәр кем үҙенсә йыназа уҡып, ер ҡуйынына тапшырҙыҡ.

Ни аралалыр, иҫ итмәҫтән үрелеп, мин өҫтәлдәге теге яҙыуҙы алдым. Ҡат-ҡат уҡып сыҡтым. Эйе, исеме, фамилияһы, атаһының исеме — бөтәһе лә һинекенә тура килә. Адресе лә һеҙҙеке. Тыуған йылы ғына байтаҡҡа тура килмәй. Уныһын писарь бутаған булырға тейеш. Туҡта! Нимә эшләп һуң әле бында «рядовой» тип яҙылған?

— Званиеһе кем ине? — тип һораным, «ине» тигәнемдә үҙемдең Тәндәрем сымырҙап китте.

Яуапты атайың ҡайтарҙы:

— Унда барғас, бөтәһе лә бер дәрәжәгә күсә. Званиегә ҡарап түгел, ҡылған яҡшылыҡҡа ҡарап ҡабул итәсәктәр.

— Бында «рядовой» тип яҙылған. Ул бит командир. Шулай түгелме ни?

— Мин яҙыуҙы уҡый алманым,—тине Рауза. Уға йән ингәндәй булды. Кинәт ҡалҡынып ҡуйҙы. Ләкин шунда уҡ яңынан бөршәйҙе.

— Командир, беҙҙеке командир,—тип бышылданы Кесе инәйең, — командирҙе «рядовой» тип яҙмаҫтар ҙа...

Күңелдәрҙә зәғиф кенә өмөт ҡуҙы йымылдағандай булды. Яҙмыштан уҙырға тырышып, яҙыуҙың бүтән хужаһын эҙләргә тотондоҡ. Беҙ башта һеҙҙең фамилияны йөрөткән кешеләрҙе, унан һинең аҙаштарҙы, урамдан-урамға күсеп, барлап сыҡтыҡ. Берәү ҙә тура килмәй. Атайың исеме иһә ул бөтә ауылға берҙән-бер... Бара торғас, Аҡманай утарына төшөп киттек. Ул да бит беҙҙең ауылға ҡарай. Урамдың арғы башынан бер-ике өйгә ҡағылыуыбыҙ булды, Кесе инәйең әрнеп ҡысҡырып та ебәрҙе:

— Кейәү! Аҡманай кейәү!! Ой, бахыр Кәфиә һылыуым! Ой, бисара! Кейәүеңде бигерәк яратам, апай, улыңа шуның исемен ҡуша күрсе, тип инәлде бит, бәхетһеҙ йән!

— Эйе, кейәүҙең атаһы менән беҙ аҙаштар инек. Бик күптән донъя ҡуйҙы, һәйбәт кеше ине, мәрхүмең, — тип раҫланы атайың.

Еҙнәңдең исеме лә, атаһының исеме лә, фамилияһы ла һинекенә тура килә. Ләкин әле шик таралманы. Ҡыуанманыҡ та. Ҡөҙгө оҙон төндә шулай тып-тын ултырып сыҡтыҡ. Йоҡлап китһәк, был әсе өмөтөбөҙ төшкә әйләнер ҙә, таралып, юҡ булыр, тип ҡурҡтыҡ. Моғайын, шулай иттек.

Иртәнсәк теге ҡағыҙҙы тотоп, мин ауыл Советенә киттем. Унда эшләүсе ситтән килгән секретарь ҡыҙ ауылда һинең өлкәнерәк һыңарың барлығын башына ла индермәгән. Барлыҡ төп кенәгәләрҙе аҡтарып сыҡҡандан һуң, яҙыу һинең еҙнәң хаҡында булырға тейеш тигән фекергә килдек. Әжәлде уның өлөшөнә сығарҙыҡ.

Иң ауыры икенсе көндө булды. Илай-илай шешенеп бөткән Кәфиә апайың килеп инде һеҙгә. Ҡулында шул уҡ яҙыу. Уны Кесе инәйеңә һуҙҙы:

— Апай, ниңә шулай иттегеҙ инде? Был ҡағыҙ бит һеҙгә килгән. Уны һеҙгә биргәндәр. Ни өсөн уны миңә атҡарҙығыҙ? Ошо ғәҙеллек буламы? Апай, мә, ал, кире ал был ҡәһәрле ҡағыҙҙы! — Кесе инәйең уны етәкләп һикегә ултыртты. Кәфиә инде, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, Раузаға ҡараны:

— Килен! Киленкәйем! һинең балаң ни бары берәү генә, минекеләр итәк тулы! Берәү етем ҡалыр урында бишәү етем ҡалһынмы ни инде? Берәү тилмерер урында, бишәү тилмерһенме ни? Үҙем дә етем үҫтем, тамағым — аш, өҫтөм кейем күрмәне... Ус}> аллаҡайым!

Ул бер аҙ һыҡтап алды ла яңынан Кесе инәйеңә өндәште:

— Нимә тип кенә, апай, теге саҡта кейәүеңдең исемен улыңа ҡуштың икән? Бүтән исем бөткәнме ни һиңә? Шуны ҡушмаған булһаң, бәлки, был ҡайғыларға ла төшмәҫ инек.

Кесе инәйең ҡайғыһынан алмашыныу сигенә еткән һеңлеһенең бер һүҙен дә кире ҡаҡманы:

— Алдырыр көн яҙҙырыр, ти, шул. Былай булырҙарын белһәм, бер ҙә генә ҡушмаҫ инем дә бит, — тип Кәфиәнең башынан һыйпаны.

— Ниҙәр генә ҡылайым инде, ниҙәр генә ҡылайым? Кемгә барып күҙ төбәрҙәр минең балаларым?— тип Кәфиә яңынан бөгөлөп төштө.

Ғәйепле кеше кеүек, бығаса башын эйеп ултырған атайың һүҙгә ҡушылды:

— Иҫән-Һау саҡта ташламабыҙ, балдыҙ. Ҡулдан килгән ярҙамдан мәхрүм итмәбеҙ балаларыңды. Хәсрәтеңде еңеләйтерлек бүтән һүҙ таба алмайым — үпкәләмә. Әйткән вәғәҙәм — иман. һин мине беләһең,' балдыҙ.

Нәҡ кисәге урында һандыҡ өҫтөндә бөршәйеп ултырған Рауза ҡапыл атылып торҙо ла Кәфиәнең муйынына килеп һарылды. Тегенең яурынына башын һалып, тыйыла алмай иларға кереште. Кәфиә лә уға һыйынды. Бер-береһенең ҡосағына һеңеп, ике ҡатын бик оҙаҡ йәщ түкте. Эйе, уларҙың араһында

бер әжәл тора йне. Кем әжәле? Уныһы беҙгә барыбер бөтөнләй үк анык түгел ине әле...

...Миңә бер үпкәһен, ярты йәнен бүлеп бирергә тип килгән Хәмитйән бына ошоларҙы һөйләп к-итте. Китте лә икенсе берәүҙең ғүмерен һаҡлау өсөн бөтөнө менән үҙ ғүмерен бирҙе.

Кесе инәйемдең ике туған һеңлеһе Кәфиә апайым бынан ары гел мине эҙәрләй торған булды. Уның хәйләһеҙ ҙур ҡара күҙҙәре, йә үпкәләп, йә тилмереп, гел миңә ҡарай. Әйтерһең, мин үҙемә тәғәйенләгән немец пуляһен еҙнәмә атҡарғанмын, шуға күрә беҙгә тигән ҡара ҡағыҙҙы апайыма ебәргәндәр. Беләм, минең бер кем алдында ла ғәйебем юҡ. Үҙ өлөшөмә төшкән яфалар ҙа етерлек булды, һәм уларҙы үҙем күтәрәм. Өй түбәләренән апрель тамсылары түгел, минең һанаулы көндәрем тама. Бәлки, һуңғы тамсы минең һуңғы һулышыма тура килер. Ә шулай ҙа мин хәҙергә теремен. Тере кешегә үкенеү ҙә, шикләнеү ҙә, ғазапланыу ҙа ят нәмә түгел. Хатта өмөт тә бөтөнләйгә ташлап китмәне хәҙергә. Ихтимал, анау тамсыларҙан ғүмерлерәкмендер әле?!

Ошо хәүефле кисерештәр ваҡытында мин бер ябай хәҡиҡәтте төшөндөм: башҡаларҙың үлемендә минең дә өлөшөм булған кеүек, минең йәшәүемдә мәрхүмдәрҙең дә дәхеле бар. Хәмитйән юҡҡа ғына йыуата мине. Мин әле үҙем өсөн үҙем нығытып бер тапҡыр ҙа үлмәнем. Бәлки, бүтәндәр минең өсөн дә һәләк булғандыр — үтескә миңә ғүмер ҡалдырып?..

...Бер ваҡыт мин, әле үҫмер сағымда, ҡояш батып барғанда Сағылтау башында йөрөгәнемдә, саҡматаш өйөмөнә тап булдым. Кемдер мунса ташына тип йыйғандыр, күрәһең, уларҙы. Ни эшләптер, эйелеп, өйөмдәге бер йоморо ташты алдым. Ул йып-йылы ине. Мин быға ғәжәпләндем. Икенселәрен дә тотоп ҡараным. Улары ла йылы ине. Ситтәрәк таралып ятҡан бер нисә ташты өйөмгә алып һалайым тип ҡул һондом. Былары һап-һалҡын ине. Тимәк, күмәк булғанда таштар ҙа, ҡояштан алған йылыны үҙ-ара бүлешеп, оҙаҡ заман һыуынмайҙар икән.

Ә кешеләр? Күпме әҙәмдең йылыһын, яҡтыһын, кәрен йөрөтәм икән мин үҙемдә? Мин ғүмер баҡый улар менән аралашып, уҡмашып йәшәнем. Үҙ тиң-

дəремдəн миңə үҙ йылыһын бүлеп биргəн беренсе кеше Əсғəт булды. Ул һəр ваҡыт минəн ике йəшкə оло йөрөнө. Миңə һигеҙ саҡта, уға ун, миңə ун һигеҙ саҡта, уға егерме ине. Тора-бара мин Əсғəткə ҡарағанда ике тапҡыр, хатта унан да ашыу өлкəнерəк булып киттем. Ул ғүмерҙең башында тороп ҡалды. Ə мин əле булһа барам да барам. Арыраҡ киткəн һайын артыма йышыраҡ əйлəнеп күҙ ташлайым. Алыҫта аҙашып ҡалған моңдарға‘һəм өндəргə ҡолаҡ һалам. Улар миңə йыш ҡына намыҫ ауазы булып ишетелə. Ғəжəп.

## ИСКӘНДӘР ӘСҒӘГЕ

Әсғәттәр урамын «Губернатор урамы» тип йөрөтәләр... «Бында губернатор үҙе йәшәгән, имеш...» — тип уйламағыҙ тағы. Ҡасандыр, әллә йөҙ йыл әүәл, ошо урам шәрәмәтенән, тройкала елдереп, губернатор уҙып киткән, имеш, тиҙәр. Шул тиклем ҙур түрәнең көймәһе туҙҙырып уҙған туҙанда ҡойоноп, рәхәтлектән ғорурлыҡтың сигенә еткән бәндәләр шунда уҡ үҙ урамдарына яңы исем ҡушҡандар — «Губернатор урамы». Әйтергә кәрәк, биш кенә йорттан торған был тыҡрыҡтың «Кәзәләр төбәге» тигән элекке исеме лә тиҙ генә онотолмаған. Губернаторҙар, байҙар, түрәләр, күҙҙән төшөп, түрҙән тәгәрәгәс, «Кәзәләр төбәге»н яңынан йәбештерергә маташыусылар ҙа булған буғай. Ләкин «губернаторҙар», һәр йорттоң нигеҙ буйында кәзәләр көйшәп ятыуға ҡарамаҫтан, был мәсхәрәне ҡабул итмәгәндәр, берҙәм кире ҡаҡҡандар. Губернатор урамы ауылдағы «Туң мөрйә», «Өс этәс», «Ябалаҡ», «Серсә» исемдәрен йөрөткән башҡа төбәктәргә ишме ни? Тегеләрҙең һәр береһенән меҫкенлек, наҙанлыҡ, томаналыҡ аңҡып тора.

Был урам үҙе, асылда, ике нәмә менән — фәҡирлек һәм тәкәбберлек менән айырыла. Биш йорттоң дүртеһендә кәзә менән тауыҡтан башҡа мал заты юҡ. Тик Әсғәттәрҙең генә һыңар күҙле бейәһе, бер һыйыры менән йәш үгеҙе бар. Ярлылыҡ атай-олатайҙарҙан мираҫ булып ҡалған, уның ҡәҙерен беләләр бында. Ә ҡупырайырға тигәндә — бала-сағаһына тиклем кикреген ҡатырырға тора. Әйтерһең, уларҙың һәр береһе, кәм тигәндә, ысын губернатор нәҫеле. Етмәһә, килеп тороп маҡтансыҡтар, һәр «губернаторҙың», төптән уйлап ҡараһаң, башҡаларҙа юҡ бер хикмәте килеп сыға. Улар һуҡҡан

бүре башмаҡ саҡлы, улар тотҡан йәйен бүрәнә буйы, улар атҡан өйрәк торна саҡлы була. Тик, ни эшләптер, үҙҙәре бер ҙә генә ҡотаймайҙар, һис кенә лә кәпәренер урыны булмаған сатан Шәрәй ҙә хатта маҡтанып ебәрә. «Сатан күп йөрөр, тип минең турала әйткәндәр ул. Бынау ярман һуғышынан алып ҡайтҡан ағас аяҡтан уңдым бит: талмай ҙа, һыҙламай ҙа, өшөмәй ҙә, тирләмәй ҙә. Бүтәндәр бер кейем сабата туҙҙырғанда, миңә бер һыңары етә», — тип шапырына.

Бәләкәй саҡта Губернатор урамы минең өсөн сит бер донъя, ундағы кешеләр тотош сер ине. Ул һауалы фәҡирҙәрҙең .сәйер ҡылыҡтарын Мин һуңыраҡ, олоғая биргәсерәк кенә төшөндөм. Тәкәбберлек уларҙың ҡоралы, ҡалҡаны, таяныр терәге булған икән. Башҡаларҙың мөлкәтенә, дәрәжәһенә, көсөнә нимәнелер ҡаршы ҡуйырға кәрәк бит. Улар шул ҡоро мин-минлекте килтереп баҫтырғандар. Бахыр, ғорур, әкәмәт «губернаторҙар»! Мин һеҙҙең бөтәгеҙҙе лә һағынып иҫкә алам — тереләрҙе лә, мәрхүмдәрҙе лә...

Шул «губернаторҙарҙың» береһе Әсғәт ине.

...Мин Губернатор урамынан Тау артына быҙау эҙләргә китеп барам. Үҙҙәренең ҡапҡа төбөндә хас та етен төҫлө ап-аҡ сәсле Әсғәт баҫып тора. Күҙҙәре лә етен сәскәһенә оҡшаған — зәп-зәңгәрҙәр. Мин уны беләм. Тик әлегәсә бер тапҡыр ҙа бергә уйнағаныбыҙ юҡ. Был миңә йә таш ырғытыр, йә телен сығарып үсекләр, йә «Кендек»тән һалдырып исем атар тип, үҙемсә яуап ҡайтарырға әҙерләнеп киләм.

— Эй, малай, ыңғайла былай! — тип бойорҙо теге, таҡмаҡлап.

— Үҙең ыңғайла. Мин быҙау эҙләргә барам,— тип сәйнәштем мин.

— Шөрләмә, һиңә булмаç һис нәмә, мин кешегә теймәйем, — тине Әсғәт. Мин туҡтаным. Үҙем, хәжәте килеп сыҡмағайы тип, уң йоҙроҡто йомарлап, артҡа йәшереп ҡуйҙым. Ике күҙенән зәңгәр нурҙар сәсә-сәсә, «етен баш» үҙе миңә табан ыңғайланы. Килеп еткәс тә усын йәйеп минең танау аҫтына килтереп терәне.

— Нимә еҫе килә?

Мин, ауыҙҙы йомоп, аптырап ҡалдым. Әгәр яман ниәт менән булһа, ул ус төбөн түгел, йоҙроғон еҫкәтер ине. Һуғыш сығарырға самалаған малайҙар шулай йоҙроҡ еҫкәтәләр.

— Йә, әйт инде, нимә еҫе килә? — тип ҡабатланы.

— Эт еҫе — тип ауыҙын ҡапларға уйлағайным да, тегенен хәйләһеҙ йылмайыуы тыйып ҡалды.

— Юҡсы, бер еҫ тә килмәй,—тип баш сайҡаным.

— Һин яҡшылабыраҡ еҫкә, — тип ныҡышты теге, —танауыңды йырыбыраҡ...

Ярылып бөткән бысраҡ ус төбөн мин, бара торғас, ысынлап еҫкәргә тотондом. Әммә айырып ҡына әйтерлек еҫ таба алманым.

— Их, һин, — тип кәмһетмәксе итте мине Әсғәт, — шуны ла белмәйһең... Күмәс еҫе, май күмәсе. Әле генә күмәс ашап сыҡтым.

Быныһы ла мине шаҡ ҡатырҙы — тапҡан маҡтаныр нәмә! Уның күмәс ашауы миңә бик хәжәт, ти, ана. Харап икән!

— Ашаһаң ни... Мин быҙау эҙләргә барам.

— Мин дә һиңә быҙау эҙләшәйемме?

— Эҙләшһәң ни...

Һай соҡор тигән ергә еткәндә, беҙ Әсғәт менән етәкләшеп китеп бара инек инде. Шул арала ул мине арбап, ҡулға эйәләштереп алды.

— Эй, туҡта әле, ыштан кеҫәндә һинең нимә ҡабарып тора ул!?

— Икмәк ҡатыһы.

— Булмаҫ, йә таштыр әле.

— Бына, ышанмаһаң,—тип мин кеҫәләге ҙур ғына икмәк ҡатыһын сығарып күрһәттем, — быҙау алдатырға. Бына...

— Быҙауҙы, ни, уны былай ғына, алдатмай ғына, ҡыуып ҡайтырбыҙ. Әйҙә, икмәкте ултырып ашайыҡ.

— Үҙең әле генә, май күмәсе ашаным, тип маҡтандың...

— Күмәс кенә тамаҡты туйҙырмай шул, уны икмәккә ҡушып ашарға кәрәк.

— Ә ниңә һуң ҡушып ашаманың?

— Икмәк булмағас...

Әкәмәт был донъя. Берәүҙәрҙә гел генә күмәс, икмәк юҡ, икенселәрҙә икмәк бар, күмәс юҡ. Беҙҙә, әйтәйек, күмәс бары йома көндө генә була. Әсғәт минең ҡулдағы икмәк киҫәгенә йотолоп ҡараны ла, ирендәрен ялап, ауыҙын сапылдатып ҡуйҙы.

— Мә, аша, — тип һыныҡты уға тотторҙом. Киҫәкте ул һаҡ ҡына уртаға һындырып яртыһын миңә һондо. Мин баш сайҡаным. *-

— Икмәктән туйған әҙәм дә булыр икән,—тип, арыҡ боттарын һуҙып, үлән өҫтөнә ултырҙы. Күлдәк итәген теҙ баштарына һәйбәтләп япты ла ашыҡмай ғына ашарға кереште. Итәгенә төшкән валсыҡтарҙы шунда уҡ алып ҡаба барҙы.

*— Икмәкте баҫып ашарға ярамай, — тип аңлатты миңә. — Баҫып ашаһаң, туҡландырмай ул. Әгәр бер валсығын ергә тршөрһәң, яҙыҡ була. Яҙыҡ булғас, тамуҡта яндыралар — үлгәс. — Ул һуңғы ҡабымын сәйнәп йотто. Тик урынынан торорға ашыҡманы. Туйынып, күңеле хушланып алғас, ул ғибрәтле бер әңгәмә һөйләп ташланы. — Атайым әйтә, борон-борон заманда бер батша дала буйлап һыбай китеп бара икән, ти. Бара торғас, бының ҡорһағы асҡан. Ҡуйынындағы икмәген алып, атынан төшмәй генә ашарға керешкән был. Ваҡыты ҡыҫтау булған, ти, батшаның. Аҡтыҡ ҡабымды ҡаптым тигәндә генә, бер валсығы ергә тәгәрәп төшкән. Батша шунда уҡ эйәренән һикергән дә әлеге валсыҡты эҙләргә тотонған. Әй эҙләгән, әй эҙләгән. Өс көн, өс төн буйы, имгәкләп, бөтә тирә-яҡты ҡыҙырып сыҡҡан. Тәки таба алмаған. Дүртенсе көндө өйөнә ҡайтһа, бөтә һарайҙы ҡара ҡайғы баҫҡан, ти. Бынан нәҡ өс көн элек батшаның иң яратҡан улы һыуға төшөп үлгән икән. Хоҙай ҡәһәренең тағы ла иманырағы төшөүҙән ҡурҡып, батша әлеге икмәк валсығы төшкән урынға ҡуш манаралы мәсет һалдырған, ти. Бынан һуң уны хоҙай ярлыҡағандырмы, юҡтырмы — унылы беҙгә мәғлүм түгел...

Ана ниндәй нәмәләр белә был сәйер малай!

Шыҡыр-шыҡыр шыҡырҙап баш өҫтөнән түбәндән генә бер төркөм һайыҫҡан осоп үтте. Быныһын мин дә беләм: инә һайыҫҡан балаларын осорға өйрәтә. Уҙған аҙнала ғына сыйырсыҡтар менән ҡарлуғастар бала осороу айны. Бөгөн — һайыҫҡандар.

Мин йәһәт кенә бер таш табып, һайыҫҡандарға тоҫ-
ҡап ырғыттым:

- һайыҫҡан, һайыҫҡан, күкәй эскән, май эс- ,
кән!

— Тейҙерһәң һуң? — тип һикереп торҙо Әсғәт.

—- Тейһә, тейә бирһен, һандуғас балалары түгел әле.

— һайыҫҡанға ла үҙ балаһы ғәзиз. Уның да эсендә йәне бар. Бөтә нәмәләрҙең дә йәндәре бар — ағастарҙың да, таштарҙың да, үләндәрҙең дә... Йәндәре булмаһа, йәшәрҙәр инеме ни улар? Беҙҙең бармаҡ киҫелһә, ҡыҙыл ҡан аға, ағас ботағын ҡырҡһалар, аҡ ҡан аға. Тимергә тимерҙе һуҡһаң, сыңлай бит, эйеме. Шул — тимерҙең илауы була инде.

Белмәгәне юҡ был Әсғәттең. Әҙәм затынанмы икән был? Уның етен сәсе, зәп-зәңгәр күҙҙәре, һары керпектәре мине бер аҙ шомландырып та ҡуя. Бөтә төбәктә берҙән-бер аҡ малай ул—ҡара тауыҡ ояһында үҫкән аҡ өйрәк балаһы төҫлө. Сәңгелдәктә саҡта уны пәрей алмаштырманымы икән? Пәрей шулай үҙенең балаһын ҡалдыра ла кеше балаһын алып китә, ти, бит. Булмаҫ та! Ҡалған тағы пәрей балаһына шундай аҡыллы, һәйбәт булырға!

Беҙ һай соҡорҙо ла, Тәрән соҡорҙо ла бер итеп, бөтә Тау артын әйләнеп сыҡтыҡ. Юкәле ҡул урманына барып еттек, Мөкөш шишмәһенә төшөп һыу эстек. Әллә нисә быҙау осраттыҡ, ә беҙҙең Аҡмаңлайҙың эҙе лә юҡ. Арып-талып өйгә әйләнеп ҡайттыҡ. Ҡайтһаҡ, беҙҙең ҡойма күләгәһендә Аҡмаңлай һуҙылып ята. Тиҙ генә ҡапҡаны асып, быҙауҙы, һәүкәшләп, ҡураға ҡыуаланыҡ.

Аласыҡ тирәһендә нимәлер мәшәкәтләнеп йөрөгән Оло инәйем мине маҡтап ҡаршы алды.

— Бына рәхмәт, улым, ҙур үҫтең инде, ҡул араһына керәһең.

— Мин түгел, Оло инәй, быҙау ҙур үҫкән...

— Улайһа, икегеҙ ҙә ҙур үҫкән.

— Оло инәйем, был Әсғәт исемле малай. Ул миңә быҙау эҙләште.

— Уға ла рәхмәт. Былай булғас, өсөгөҙ ҙә ҙур үҫкән. Барығыҙ, ана, мөгәрәптән алып, ҡунағың менән һалҡын ҡатыҡ әсегеҙ.

— Икмәкләпме?

— Икмәге лә шунда аласыҡта.

— Ярай, мин ҡайтайым инде, — тигән булды Әсғәт, — өйҙә йә йомортҡа бешергәндәрҙер.

Быны ишетеп ҡалған Оло инәйем, хәйләкәр йылмая һалып, Әсғәтте ҡыҫтарға уҡ тотондо.

— Аш — ашҡа, урыны башҡа. Йомортҡаға ла урын табылыр. Ҡатыҡ сеүәтәләрегеҙгә берәр ҡашыҡ ҡаймаҡ та һалып бута. — Быныһын ул миңә әйтте.

Әсғәт башҡаса инәлтмәне... Аласыҡ эсенә еләҫкә ултырып, беҙ тиҙ үк ҡашыҡтарҙы бейетергә керештек. Үҙ сеүәтәһен ялап ҡуйғас, ҡунағым миңә яңы хәбәр һалды:

' — Күмәс тураһында бая мин фәстерҙем. Аслыҡты аҙаштырыр өсөн генә әйтелгән алдаҡ һүҙ ул. Йомортҡаһы ла шулай. Беҙ икенсе аҙна инде көнөнә бер тапҡыр ыумас ыуып ҡына торабыҙ. Атай мәсеттән ҡайтмай, оло ағайым ҡалаға китеп олаҡты. Донъяны беҙ Ибрай менән икәү генә алып барған булабыҙ. — Хәҙер инде уның тауышында баяғы тәкәббер ғәмһеҙлектең әҫәре лә юҡ. Минең ҡаршыла бәләкәс кенә бабай ултырған да үҙенең аһ-зарын һөйләй. — Беҙҙең тәндә хәҙер бер тамсы ла май ҡалманы. Кисә Ибрай менән икәү, ҡорһаҡтарҙы асып, әллә ни саҡлы ҡояшта ҡыҙҙырып ҡараныҡ. Бөрсөк тә май сыҡманы. Шунан мин ағайымды үсекләп йыр сығарҙым. Кешегә һөйләмәҫ булһаң, һиңә лә әйтәм.

— Икмәк өҫтө, ант! — тинем мин.

— Былай ҙа, ант итмәһәң дә ышанам.

Ибырашка-дурашка
Артын асҡан ҡояшҡа.
Ике ҡаҙаҡ майы сыҡҡан
Күстәнәскә күмәскә.

Ирмәкме йыры?

— Ирмәк. Ибрай нимә тине һуң?

— Сабата ҡалыбы менән башҡа тондорҙо. Бына ороһо әле лә бүлтәйеп тора. Бөтөр әле, мәңгегә бармаҫ. Ә төртмә йыр ҡалыр. Уға ҡалып менән һуғып булмай.

Әсғәт бер ҡатлы малай булып сыҡты. Уның эсендәге тышында икән. Сер артынан серен сисә генә бирҙе.

— Минең ҡушаматым «һары серәкәй», — тине.-—Төҫөмә ҡарата ла, телемә ҡарата ла ҡушылған ул. Телем әсе минең. Тартай теленән таба тигәндәй, шул телем арҡаһында эләгеп кенә тора миңә. Ә ҡушаматтан мин ғәрләнмәйем. Исем атауҙан бер ер ҙә кәмемәй. Харап икән — «һары серәкәй», имеш...

— Минең дә ҡушамат бар ҙа ул,—тигән булдым мин, унан ҡалышмаҫҡа тырышып. — Тик, әйтһәләр, ғәрләндерә.

— И-и-ии-һи, — тип күтәреп алды Әсғәт, — һинең ҡушамат бер тигән — Кендек! Донъяла иң кәрәкле әйбер — кендек ул. Арт арбаны ал арба менән нимә тоташтыра? Кендек! Иң ғәйәр ир уҙаманына нимә тиҙәр? — «Донъя кендеге» тиҙәр. Уның өҫтәүенә, һин ауылда бәпес тыуған һайын, өйҙән-өйгә, һыйҙан-һыйға йөрөп, күпме игелек күрәһең— шул кендек арҡаһында!

— Ҡара уны, тағы бер исем атаһаң, һуғышам, — тип иҫкәрттем мин.

— Иҫәр һин, һинең ҡушамат миңә эләкһә, мин маҡтанып ҡына инем.

— Бик маҡтанаһым килеп тормай әле,—тип ҡырт киҫтем мин. Ул да һүҙҙе ары һуҙманы.

Шулай ҙа «Кендек»те Әсғәт ауыҙынан ишеткәндә мин сығырҙан сығып ғәрләнмәнем, уны тыйыуым да асыуҙан түгел, ә «ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул» тигәнде аңлатыуым ғына ине. Ә бүтәндәр әйтһә йә әйтергә уйлаһа, енем ҡуҙғала. Шунан һуң күп тә үтмәй, беҙ Хәмитйән менән, көҙгө әтәстәр һымаҡ, ҡанға батып һуғыштыҡ бит инде. Ләкин «Кендек» бара торғас миңә ныҡ йәбеште, теш менән умырып та, тырнаҡ менән ҡуптарып та алырлыҡ түгел. Ул мине еңде, мин еңеүсе алдында баш эйҙем...

Бер көн эсендә Әсғәт мине бөтөнләй сихырланы. Ул ҡайтып киткәс тә үҙен һағына башланым. Бынан ары беҙ ташлашмаҫ дуҫтар булдыҡ.

Әсғәт бәхетле заттарҙан түгел. Ғүмер буйы уның башы бәләнән сыҡманы. Ҡорбан байрамы алдынан ғына уға бер-бер артлы ике яфа килде.

Көтөү ҡайтҡас та, ҡойроҡтан ғына сыгып, Әсғәттәргә барҙым. Былар ағаһы Ибрай менән икәүләп артҡы аҙбарға мал ябып йөрөй. Үгеҙҙәре аҙбарға күндәм генә керә, ә һыйырҙары ҡарыша. Өгөтләп тә, сыбыҡлап та ҡарайҙар — тыңламай. Ахырыһы, һыйырҙары үҙ аҙбарынан биҙгән. Аптырағас, Ибрай һыйырҙы атланып та әйҙәп ҡараны. Барып сыҡманы. Теге ҡапыл бер яҡҡа тайшанды ла бешмәгән һыбайлыны тиреҫ өҫтөнә атып бәрҙе. Уға шул таман да. Үҙе ул кешенән көлөргә, әҙәм ҡоторторға бик һәүәҫ.

Ҡустыһы шунда уҡ таҡмаҡлап та алды:

,,
Атың арыҡ, Ибырай,
Артың ярыҡ, Ибырай!
Ат тигәнең пар мөгөҙлө,
Тоҙ ялай ҙа һыу һорай.

Ибрай аҡайып Әсғәткә табан килә башлағайны, ҡустыһы йәтеш кенә һүҙҙе икенсегә борҙо:

—. Үгеҙ көслөмө, һыйыр көслөмө?—тине ул.

— Үгеҙ!!-—тинек беҙ Ибрай менән бер юлы, сөнки ир затының көслөрәк икәнен бот буйы малай ҙа белә.

— Әйҙәгеҙ, улайһа һыйырҙы тарттырып индерәбеҙ.

— Нисек?!

— Ҡойроғон үгеҙ ҡойроғона бәйләйбеҙ ҙә! — Ибрайҙың баш йоҡа унын. Былдай йәпле фекер уның уйына бер ваҡытта ла киләсәк түгел, ләкин ағай кеше алды бирмәгән булды:

— Алйот, алабарман! Ағайың башында яралған аҡылды әйтеп ысҡындырырға кем ҡушты һиңә?

— Әллә инде.

— Ағайың иҫән саҡта кәм-хур булмаҫһың, энем, баш түгел беҙҙә — хазина, — китте, китте был «губернатор» ҡуҡырайып. Был һүҙҙәрен ул бигерәк тә минең ҡолаҡҡа төбәп әйтте буғай. — Бар, килтер бында үгеҙҙе!

Әсғәт йыуаш ала үгеҙҙе һыйыр эргәһенә ҡыуалап килтерҙе. Ибрай үҙ ҡулдары менән ҡойроҡто ҡойроҡҡа нығытып бәйләне. Әсғәт, үгеҙҙең мөгөҙөнән тотоп, яй ғына эске аҙбар яғына ыңғайланы, һыйыр, киреһенсә, дүрт аяғын да терәп, ергә йә-

беште. Үгеҙ ҙә буй бирмәне, егетлеген итте, бар ҡеүәтен йыйып алға ынтылды. Ике хайуандың да ҡойроҡтары, һуҙылып нескәргәндән-нескәрә барҙы. Дарманға дәрт өҫтәп, Ибрай оҙон сыбыҡ менән үгеҙҙең һырт буйына һыҙырҙы. Ала мәхлүк, үрә һикереп, алға ынтылды. Нимәлер шырт итте. Баҡһаң, үгеҙ ҡойроғо булған урында бер ҡарыш самаһы ғына йөнтәҫ ҡырҡынды һерәйеп тора ине. Ҡырҡындынан эркелеп ҡан килеп сыҡты. Үгеҙ яман итеп үкереп ебәрҙе лә, бөтә ҡураны бер итеп, үрһәләнеп сабырға кереште. Өй эргәһендәге ултыртма ситәнгә килеп бәрелде, ситән ҡолап төштө. Шашып ҡоторған бисара хайуан Тау артына сығып ҡасты.

Беҙ өсәүләп үгеҙ артынан тороп югерҙек. Тик эңер төшөүгә генә уны кире алып ҡайттыҡ. Ул шул саҡлы сабыуҙан, һыҙланыуҙан тамам йонсоғайны. * Башын да күтәрә алмай. Ауыҙынан туҡтауһыҙ һеләгәй аға.

Сәлләһен кейеп, мәсеткә йәстеү намаҙына барырға тип сыҡҡан Искәндәр ағай беҙҙе ҡапҡа төбөндә ҡаршы алды. Был үгеҙ мажараһын Әсғәттең апаһы күреп торғайны. Эштең асылын атаһына еткергәндер, күрәһең. Шуға күрә Искәндәр ағай бәйнә-бәйнә һорашып торманы:

— Ҡайһығыҙҙың этлеге был?—тип ҡулындағы үгеҙ ҡойроғон һелтәп ҡуйҙы.

— Әсғәтең уйлап сығарҙы,—тине Ибрай.— Башҡа ла ингән нәмә түгел ине, атай.

— Әлеге һин! Атаң яҡшы, инәң яҡшы, эттән тыуған эт балаһы! — Мәсет ҡарты оятһыҙ, әшәке һүҙҙәр әйтеп, кесе улының ҡолағынан эләктереп алды. Икенсе ҡулындағы үгеҙ ҡойроғоноң ҡанлы йыуан башы менән Әсғәттең арҡаһын ҡайыҙлай-ҡайыҙлай аҙбар эсенә алып инеп китте. Йәстеү намаҙы урынына ҡарт үҙенең кесе улын—тәнендә бер тамсы ла май әҫәре ҡалмаған Әсғәтте хәлдән тайғансы ярҙы. Ибрай шунда уҡ ҡайҙалыр шылды. Әсғәттең ыһ тигән тауышы ишетелмәне, тик үгеҙ ҡойроғо ғына шыйылданы. Бөтөнләй күҙ бәйләнә башланы. Аҙбар эсенән Искәндәрҙең аҡ сәлләһе килеп сыҡты.

— һиңә нимә ҡалған бында? Бар өйөңә ҡайт! — тип екеренде миңә. Әммә туҡталып торм»ыы, ары

китте. Ишек төбөндәге ҡомғанды тибеп осорҙо ла өйгә инде.

Мин боçоп ҡына Әсғәт эргәһенә индем. Ул тиреç өйөмө өçтөнә ҡапланып ятҡан. Ара-тирә һулҡылдап ҡуя. Уға әйтер бер һүҙ ҙә таба алманым. Баш осона тубыҡланып ултырҙым. Ул, аҡрын ғына ҡулын һуҙып, минең теҙ башымды ҡапшаны. Шул саҡ яҡында ғына Оло инәйемдең, мине саҡырғаҡ тауышы ишетелде.

— Мин бында, Оло инәйем!

— Ҡайҙа?

— Аҙбар эсендә. Искәндәр ағайҙар аҙбарында!— Үҙем тауыш' бирәм, тороп китергә үҙемдең әллә кәрем, әллә зиһенем етмәй.

Оло инәйем аҙбар ауыҙына килеп туҡтаны.

— Нимә эшләп ултыраһың бында, кеше аҙбарында, эңер төшөп бөткәс?

— Әсғәтте атаһы үлтергәнсе туҡманы. Үгеҙ ҡойроғо өсөн. Ул тора алмай хәҙер.

«Ниндәй үгеҙ, ниндәй ҡойроҡ?» тип төпсөнөп торманы ул. Ыңғырашып ятҡан Әсғәтте ҡараңғыла һәрмәнеп килеп тапты ла яй ғына ҡулынан тартып торғоҙҙо.

— Әйҙә, улым, өйгә инәйек.

— Әл-лә арҡам!—тип ҡысҡырып ебәрҙе Әсғәт. Оло инәйем, етәкләп, уны өйгә алып инде.

Искәндәрҙәрҙең түр яғында һуҡыр лампа яна. Йорттағы барлыҡ йән эйәһе шаршау эсендә, ахырыһы. Шылт иткән тауыш юҡ. Был яҡта бер Искәндәр генә һике өçтөндә теҙләнеп тиçбе тартып ултыра.

— Тиçбеңде ҡуйып тор әле, Искәндәр! — тине Оло инәйем, тауышын күтәрә төшөп. Теге тыңламаны.— һиңә әйтәмсе!—тип ҡабатланы.

Ҡарт тиçбеһен ҡуйманы, шулай ҙа тартыуҙан туҡтаны. Алға һуҙылған ике ҡулының бармаҡтары, төймә тотҡан көйө бөгәрләнеп, ҡатып ҡалды.

— Әйҙүк, еңгә. Хуш... — тине, тешен ҡыçып ҡына. — Түрҙән уҙ.

— Иманың бармы һинең? — Ул Әсғәттең буй-буй булып ҡан һауған арҡаһын асып күрһәтте. — Йыртҡыс һин. Улай тиһәң, йыртҡыс та үҙ балаһын был тиклем үк иҙеп, ңмгәтеп ташламаç, һин унан

да ҡанһыҙыраҡ. Хоҙайҙан ҡурҡмаһаң, әҙәмдән оялыр инең. Былай булғас, һинең мәсеттән сыҡмай намаҙ уҡыуың ҡороһон!

— Хоҙа ғәмәленә тел тейҙермә, еңгә. Тәңре ҡарғышы төшә күрмәһен...

— Ә һин әҙәм балаһын рәнйетмә. Әҙәм ҡарғышы төшһә, гүреңдә лә урын табалмаçһың.

Оло инәйемдең былай асыуланғанын мин бер тапҡыр ҙа күргәнем юҡ ине. Әйтерһең, ул, бәпкәләрен яҡлап, төйлөгәнгә ташланған инә ҡаҙ. Бәпкәһе лә үҙенеке түгел бит әле. Үҙенеке түгел тимен дә... Моғайын, Оло инәйем Әсғәттең дә кендек әбейелер әле.

— Ҡара уны, — тип киçәтте ҡартты, — бармаҡ менән сиртәһе булма балаға. Уның күңеленә хәҙер асыу сәсһәң, һуңыраҡ нәфрәт урырһың. Иң яман ҡаза — ата менән бала дошманлығы.

Искәндәр ҡарт бүтәнсә әрепләшмәне. Башҡа кеше уға ошолайыраҡ тел тейҙерһә, ҡарт пыр туҙыр ине. Минең Оло инәйемә ҡаршы әйтә алмай шул. Ауылда уға берәү ҙә ҡаршы әйтмәй..

— Әй, кем бар унда шаршау эсендә? — тип ҡысҡырҙы Искәндәр. — Ҡунаҡ килгәнен ишетмәйһегеҙме ни? Самауыр ҡуйығыҙ!

Теге яҡта нимәлер ҡыштырҙаны, нимәлер шылтыраны, ләкин яуап булманы. Оло инәйем Әсғәтте ҡулынан тотоп, һикегә ултыртты ла, беҙ ҡайтып киттек.

Өҙөлгән үгеҙ ҡойроғо төҙәләме, Оло инәйем? — тип һораным мин ҡайтып барышлай.

— Төҙәлә. Бөтәһе лә төҙәлә. Тик өҙөлгән өмөт менән ҡалған хәтер генә төҙәлмәй. — Уның был һуңғы һүҙҙәрен мин, әлбиттә, аңлап бөтөрмәнем.

Икенсе бәлә Әсғәткә иртәгә ғәйет тигәндә килде. Байрам көндө төштән һуң бөтә урамдағы малайҙар Аҡманай һыулауына ат йөҙҙөрөргә барабыҙ тип, алдан һөйләшеп ҡуйҙыҡ. Мортаза ағайым миңә лә күк алашаны биреп торорға вәғәҙә итте. Аҡманайҙа ат йөҙҙөрөү үҙе бер тамаша ул. Унда барғансы һәр малай үҙ атын ҡырғыслап таҙарта, ялдарын тегәнәктәрҙән әрсей, хатта, ҡыҙҙар сәсе һымаҡ, толом-толом итеп үреп тә ҡуя. Ҡупшырат^тары әлеге толомдарға төрлө-төрлө таçмалар ҙа тағып ебәрә.

Беҙҙекеләр улай ҡыландырғанды яратмайҙар. Мин күк алашаны буйым еткәнсә ерҙән, буйым етмәгән урындарын өҫтөнә менеп ҡырғысланым, һыланым-һыйпаным да Әсғәттәргә киттем. Әсғәттең инде арҡаһындағы ҡутырҙары ҡубып төшә башланы, йөҙөндәге ҡара янған урындар ҙа һарғылт зәңгәргә әйләнде. «Ни эшләнең?» — тип һорағандарға ул: «Үгеҙ һөҙҙө», — тип яуап ҡайтарҙы. Миңә-лә шулай әйтергә ҡушты. Бахыр үгеҙ өҫтөнә юҡ ғәйепте ташлап, ниңә алдашабыҙ икән беҙ? Быныһын мин аңлап еткермәйем әле.

Ҡура уртаһында, кейәү ҡуйынына инергә, әҙерләнгән кәләш һымаҡ, биҙәлгән һыңар күҙле ҡара бейә баҫып тора. Бейә түгел, торғаны менән бер картинка. Ике ҡолағына сигелгән суҡлы ҡулъяулыҡтар бәйләнгән, ялына аллы-зәңгәрле таҫмалар ҡушып үрелгән, хатта алғы бәкәлдәренә аҡ сепрәктәр уралған, ҡойроғона эреле-ваҡлы тәңкәләр тағылған. Үҙе ҡара һөлөк төҫлө йылҡылдап тора. Тик күҙ генә берәү. Уныһы ла, әмәлгә ҡалғандай, сылт-сылт йомолоп, эрен ағыҙа, ҡәһәрең. Был тиклем бай йыһаз ҡара бейәгә ҡайҙан килде икән, тиһегеҙме? Самалауы ҡыйын түгел: малайҙар ике апаһының да бирнә һандығына ярайһы ғына тәрән сумып сыҡҡан булырға тейеш. Йә улай ҙа түгелдер. Йә апалары үҙҙәре биреп торғандыр. Әсғәт хәл эсендә ҡалғандан һуң, улар бөтәһе лә йомшара төштө.

Шундай итеп биҙәнеп-төҙәнеп, ҡупшылыҡтың сиген уҙған ҡыҫҡа муйынлы күпкәк ҡара бейәнең юкә нуҡтаһын ике яҡтан Ибрай менән Әсғәт .-тотоп алған. Улар, таҡмаҡ әйтеп, бер урында һикергеләп бейеп тора:

Һайт, ҡара юрға! һайт, ҡара юрға!
Аҡҡош муйын, нескә бил,
Елде уҙып ел дә ел,
һайт, ҡара юрға!
Тауис ҡойроҡ, шәм ҡолаҡ,
Бер аҙымы бищ булыр.
Уны менгән уҙаман
Хан ҡыҙына иш булыр.
һайт, ҡара юрға! һайт, ҡара юрға!
Алтын тояҡ, ебәк ял!
Бер мөләйем ҡараш һал!
һал! һал! һал!

*

Ошо тиклем оло маҡтауҙы ҡара бейә аҙағына тиклем баш та ҡаҡмай, ҡойроҡ та ҡыймылдатмай, үтә тыныс, үтә сабыр тыңлап торҙо. «Бер мөләйем ҡараш һал! һал! һал! һал!» — тигән ялбарыу һүҙҙәрен ишеткәс кенә, тертләп киткәндәй итте. Шулай ҙа йырҙың күрәләтә ярамһаҡ булыуы оҡшаманы буғай бейәгә. Әсғәт яғына кинәт башын бороп, тегенең һул ҡолағын төбөнән үк умырып та алды, ә иртәгә ғәйет ине...

Быйылғы байрамдың ҡыҙығы булманы. Мин ҡай төкөрөп үткәрҙем, дусым ғүмерлеккә һыңар ҡолаҡлы булып ҡалды.

Күп тә үтмәй, Өс әтәс урамында Ҡәҙерғол ҡарттың ете йыл буйы бәпес килтермәй йөрөгән йәш бисәһе малай тапты. Мин һуңғы тапҡыр рәхәт сигеп бәпес һыйҙарында һыйландым, һуҡрана-һуҡрана бәпес мунсаһы керҙем. Ҡәҙерғол олатай хәлле тора, туған-тыумасаһы ла ҡалын. Күстәнәсте мул килтерҙеләр, әммә ҡоймаҡтары майҙа йөҙһә лә, хужаларҙың күңелдәре шатлыҡта йөҙмәне. Бойоҡ ҡаршы алдылар малайҙы. Оло инәйем менән бер әбейҙең аш өйөндә быш-быш һөйләшеүе лә миңә сәйер тойолдо.

— Суҡышына ҡара саҡ ҡына, торғаны менән ҡоҙғон заты бит, — тине теге ҡарһыҡ.

— Кемдән тыуһа ла, донъяға килгән, әхирәт, — тине Оло инәйем. — Ул үҙ теләге менән килмәгән, бүтәндәр теләгенән килгән, әммә ул барыбер үҙе өсөн тыуған, үҙ яҙмышы менән. Рәхим итеп, асыҡ сырай күрһәтеп, ҡабул ҡылығыҙ. Шик-шөбһә таратһағыҙ, бөтә ырыуығыҙ мәсхәрәгә ҡалыр. Ҡағыпһуғып рәнйетмәгеҙ — яҙыҡ төшөр. Белеп булмай, бәлки, ул бер изге рухлы бәндә булып китер. Хатта пәйғәмбәрҙәрҙең дә ҡайһы берҙәре шулай сит ел ҡағылыуҙан яралған, тип һөйләйҙәр.

Мин баш ватам: ни эшләп ул ҡоҙғон затынан икән? Ниндәй «сит ел»? Әллә был малайҙы берәй ҡош ояһынан алып ҡайттылармы икән, тиһәм... Юҡ инде! Имеш, бәпесте «ҡоҙоҡтан алалар» йәки «торна ояһынан барып табалар» тигән әкиәттәргә ышана торған замандар үтте инде. Кешенең нисек тыуғанын да, нимәнән тыуғанын да беләбеҙ хәҙер. Шуға күрә «ҡоҙғон заты» тигәне аҡылға һыймай ҙа. Ошо

аҡылға һыймаç нәмәнең серенә бер нисә йыл үткәс тә төшөндөм. Баҡһаң, бөтәһе лә яп-ябай ғына икән...

Ҡәҙерғол ҡарттың ҡойроғона Ҡоҙғон ҡушаматлы Исмәғилдең ҡойроғо килеп тоташа тиерлек. Ике арала йырғанаҡ ҡына, йырғанаҡ төбөндә сылтырап ағып ятҡай йылғасыҡ ҡына бар. Күрәһең, йырғанағы артыҡ тәрән, йылғасығы артыҡ киң түгелдер. Ҡәҙерғол ҡарт ҡалаға он һатырға киткән төндәр самаһыҙ ҡараңғы ла, самаһыҙ яҡты ла булмағандыр. Аҙашмай күрешерлек кенә, аулаҡта ышыҡланырлыҡ ҡына, йәғни тап-таман ғына булғандыр ул төндәр. Әй, нимә эшләп имеш-мимеш һөйләп торам әле мин бында! Ҡайһылай булғанын мнн күргәнме лә, мин күҙәткәнме? Кеше һүҙе кеше үлтерер, ти...

Ишмырҙа исемле малай ай үçәһен көн үçте. Үçкән һайын Ҡәҙерғол күңелен яулай барҙы, иң яратҡан улына әйләнде. Ишмырҙа тәүтапҡыр атҡа атланғас, Ҡәҙерғол ҡарт үҙенең ҡорҙаштарына ошондай әңгәмә һөйләгән, имеш. «Ишмырҙаның әсәһе килен булып төшкән яҙҙа, — тигән ул, — минең картуф баҡсаһында бер алмағас һабағы баш төртөп сыҡты. Ултыртҡан, сәскән нәмәм түгел. Орлоғон хоҙайҙың рәхмәте менән, күрәһең, ҡайҙандыр ел килтереп ташлағандыр. Күпме ҡырау, күпме боҙямғыр күрҙе ошо зәғиф кенә һабаҡ. Эçе елдәр көйҙөрҙө, һалҡын елдәр өшөттө. Анау ҡыштағы зәһәр һыуыҡтарҙа оло алмағастар туңып ҡороно. Был тороп ҡалды. Барса михнәттәр менән алты йыл алышты ла, етенсе яҙҙы сәскә атып, йәйен емеш бирҙе. Ошо йәйҙә тәңре миңә кесе улымды бүләк итте. Бөтәһе лә күктәгеләр ихтыярында, бөтәһе лә ел иркендә».

— һай-һай,—тип баш сайҡай донъя күргән кешеләр, — алмағас хикәйәтен ҡарт үҙ теле менән үҙе һөйләмәç, уның теле менән бүтәндәр лаҡылдайҙыр, моғайьш.

Шулай булыуы ла ихтимал. Ҡорҙа ултырып Ҡәҙерғол ауыҙынан үҙем ишеткән һүҙ түгел. Әммә Ишмырҙа, михнәт-яфа күрмәй, үçә бирҙе...

...Ана шул Ишмырҙа һыйынан мин Әсғәткә лә байтаҡ өлөш сығарҙым, һуңғы барыуҙа, ике кеçә тултырып, баллы сәксәк алып ҡайттым. Бер кеçәһен һылыуым менән ҡустыма бүлеп бирҙем, икенсеһенә

теймәнем. Кискә табан күк алашаны Тау артына сығарып тышайым тип барғанда, Губернатор урамына инеп, Әсғәткә һуғылдым. Ул да ҡара бейәгә атланып сыҡты. Тәрән соҡор аръяғына илтеп аттарҙы тышаулағас, беҙ үлән өҫтөнә ултырҙыҡ. Мин дуҫыма тигән күстәнәсте алмаҡсы булып, кеҫәмә тығылдым, ләкин баллы сәксәк, тоташы менән уҡмашып киндергә йәбешкәйне. Кеҫәне бөтөнләй өйләндергәс кенә, беҙ уны ҡуптарып ала алдыҡ. Күстәнәстең яртыһын бүлеп, Әсғәт миңә һуҙҙы.

— Боғаҙыма еткәнсе тығындым, бына!—тип ауыҙҙы асып күрһәттем.

Ул һәр ваҡыттағыса, ашыҡмай ғына, ҡәҙерләп кенә ашарға кереште.

— Миңә бөгөн тағы эләкте, — тип хәбәр һалды дуҫым, ҡолаҡһыҙ яңағын һыйпап.

— Нимә өсөн?

— Йыр өсөн. Иртән торғанда атайым башыкүҙе менән ҡаҙ мамығына батҡайны. Төндә уның мендәр тышы йыртылған икән. Мин шунда уҡ әйтә һалдым:

Атайымдың мендәре —
Пыр-пыр итә йөндәре,
Атай үҙе- пы.р туҙа
Мендәренән элгәре.

— «һи, ауыҙыңа шайтаҥ төкөргөрө!» — тип ҡыптыр ҡата менән ебәрҙе. Йән ергә килеп тейҙе. Бөгөлдөм дә төштөм. Үҙем дә иҫәр инде, бер телемде тыя алмайым.

Минең ҡаршыла ултырған етен башлы, һыңар ҡолаҡлы Әсғәт ҡапыл ҡарағанда бер тотҡаһы төшкән самауырға оҡшап китә. Батып барған ҡояш нурҙары ла, самауыр еҙендә сағылып уйнаған шикелле, уның сәс араһында йымылдай. Тау аҫтында, түбәндә, күҙгә күренер-күренмәҫ кенә шыйыҡ зәңгәрлек төшә.

— Анау зәңгәрлек, — ти Әсғәт, — ул күктән ҡойола. Көн буйы күк йөҙө ҡыҙа ла кискә табан, унан ҡубып, шулай зәңгәр туҙан һибелә.

Әлбиттә, дөрөҫөн әйтә ул. Юғиһә ҡайҙан сыҡһын ул зәңгәрлек? Ерҙән күтәрелһә, бары быу күтәрелер ине. Ер йөҙөндә ниндәйҙер моңһоу тынлыҡ ята.

Юғарыла болот та, түбәндә ел дә юҡ. Шул тынлыҡты ярып, бынан алыҫ түгел туғай юлы буйлап кемдер, үтә моңло, үтә зарлы итеп, йыр йырлап үтте. Һыбай бара булырға тейеш ул. Йәйәүле кеше былай уҡ иркен, былай уҡ яманһыу йырлай алмаҫ ине. Мин үҙем дә атҡа атланһам, йә шашып дәртләнәм, йә яман моңаям.

Беҙ йырҙың бары һуңғы һүҙҙәрен генә асыҡ итеп ишетә алдыҡ:

Суртан үрләй һыуҙың үренә.
Кеше кермәй кеше гүренә...

— Шәйхи малайы Рамазан был. -— Әсғәт йырсының тауышын шунда уҡ танып алды. — Атаһы мәрхүм тураһында зар илай ул.

Бөтәһен дә белә был- Әсғәт...

Бынан бер аҙна ғына әүәл бар ауылды тетрәткән шундай хәл булды. Кашафетдин менән Шәйхулла исемле ағалы-энеле ике кеше Лекаревка тигән рус ауылы янында Дим аша күпер һалып ята икән. Күпер бына-бына бөттө тигәндә, Кашафетдин, яҙа баҫып, һыуға ҡолап төшкән. Йөҙә белмәгән ағаһын ҡотҡармаҡсы булып. Шәйхулла Димгә һикергән. Шул сумыуҙан башҡаса ҡалҡмаған. Кашафетдин, улай-былай итеп, ярға килеп һуғылған. Ә Шәйхулла ғәйеп булған. Өс көн үткәс кенә уның кәүҙәһе ҡайҙалыр Дим түбәнендә килеп сыҡҡан. Ул башы менән йылға төбөндәге иҫке бағана осона барып һуғылған булған. Шунан һушы китеп, батып үлгән.

Рамаҙандың тауышы күптән тынды, ә һүҙе менән моңо күңелдә тороп ҡалды.

Кеше кермәй кеше гүренә...

— Әсғәт, ә, Әсғәт, — тим мин ойоп ултырған дуҫыма, — ә бит уйлап ҡараһаң, Шәйхи үҙ гүренә түгел, ағаһының гүренә ингән. Үлергә Кашафетдин ағай тейеш булған.

— Әллә инде, — Әсғәт баш сайҡаны, — быныһын мин белмәйем. Оло инәйеңдән һорарға кәрәк. Кеше тыуыуы тураһында ул бөтәһен дә белә, үлем тураһында ла, моғайын, беләлер.

Ләкин был турала мин Оло инәйемдән һорамаactive. Үлем тураһында төпсөнгәнде яратмай ул.

Байтаҡ һүҙһеҙ ултырғас, Әсғәт ниндәйҙер серле лә, шомло ла тауыш менән һәйләргә тотондо.

— Мин бит бында үҙем өсөн йәшәмәйем, бүтән бер малай өсөн йәшәйем. Әгәр һаҡларҙан булһаң, ике серемде һөйләйем һиңә. Антмы?

— Икмәк өҫтө.

— һин бит үрге остағы сөм-ҡара сәсле, сөм-ҡара күҙле Фәриҙә ксемле етем ҡыҙҙы беләһең. Уларҙың йорто бейек...

— Беләм.

— Шул Фэриҙәне үгәй әсәһе көн һайын йә әрләй, йә туҡмай. Минең шикелле бәхетһеҙ ул. Беҙ етем Фәриҙә менән икәү бер ишбеҙ. Миңә ул хаҡта анау Әүлиә шишмәһе янындағы йәшен һуҡҡан ҡуш ҡайындың береһе әйтте. Донъяла минең иң ҡыҙғанған кешем — ана шул ҡыҙ. Үҙемде лә был тиклем үк йәлләмәйем. Унын хаҡында мин йыр ҙа сығарҙым.

Бейек-бейек ыҙмала
Йәштәр түгә ҡыҙ бала.
Йәштәр түккән ҡыҙ баланы
Күңелдәрем ҡыҙғана.

Ошо йырҙы йырлайым -да, үҙем илайым.

— һинең илауыңдан уға ни файҙа?

— Әлегә файҙа юҡ. Үҫеп буйға еткәс, мин уға ғашиҡ буласаҡмын. Шунан бер көндө, йәйге ҡояш яңы ғына сығып килгән бер мәлдә, мин уны етәкләп аласаҡмын да ҡояшҡа ҡарай китәсәкмен. Беҙ үргә, гел үргә менәсәкбеҙ. Баш особоҙҙа өҙлөкһөҙ ҡоштар һайрап торасаҡ, алдыбыҙҙа пырылдап аҡ күбәләктәр осоп, беҙгә юл күрһәтеп барасаҡ. Беҙҙең ҡыуаныстьі күреп, сәскәләр баш эйәсәк, йыландар ояларына, бүреләр өңдәренә ҡасасаҡ. Беҙ донъяның иң бейек түбәһенә — Ҡыҙҙар тауынан да бейегерәк тау башына менәсәкбеҙ, хатта күк үҙе түбәндә тороп ҡаласаҡ. Бынан бөтә йыһандың бөтә ауылдары, бөтә ҡалалары күренеп торасаҡ. Тау башын ҡуйы оҙон үлән ҡаплаған булыр. Саҡ ҡына эйелһәк, ул беҙҙе бөтөнләй күмәсәк. Ана шул үлән араһында боҫоп ҡына уның һул битен үбеп аласаҡмын, һул битендә уның матур миңе бар...

— Фу! Тапҡанһың һәнәр... — Әсғәттең үбешеүе миңә оҡшаманы. Ҡуйы үлән араһына йәшеренеп,

үҙен үптереп торған Фәриҙәнең ҡылығы иһә бөтөнләй йәмһеҙ күренде.

— Ғашиҡтәр үбешергә тейеш. Үбешмәйенсә булмай ул. Мин бит әле түгел, үҫкәс... Фәриҙә әгәр етем булмаһа, үгәй әсәһе уны йәберләмәһә, бәлки, мин уға ғашиҡ тә булмаҫ инем... Бәхетле кешегә минең дә кәрәгем бер тин. Теге ҡуш ҡайындың береһе миңә йәнә шуны әйтте: «БерәүҒә берәү кәрәк, ҡыйышҡа терәү кәрәк», — тине. Фәриҙә менән минең ише ҡыйыштар бер-береһенә терәү булырға тейеш. Тик был хаҡта кешегә һөйләмә инде.

— Ант!—тинем.— Антҡа ышанмайһыңмы ни?

— Ышанам да.

Әсғәттең был «сер»е, ниңәлер, миңә оҡшап етмәне. Беләм, ул теләһә, Фәриҙәне иң бейек тауға ла алып менер, ҡояш нурҙарына ла сорнар, һайрар ҡоштар ҙа тотоп бирер уға, шишмәләрҙән отоп алған йырҙарын да йырлар. Күк түбәндә, улар юғарыла булыр. Ҡөҙрәте сикләнмәгән уның.

Әммә ул Фәриҙәне мин дә беләм. Улар йорто тураһынан уҙғанда, түбәтәйемде төҙәтеберәк, ҡупшыраҡ итеп кейәм, танауҙы ла һирәгерәк тартырға тырышам... Юҡка асты Әсғәт был «сер»ен. Тимәк, мин сөм-ҡара сәсле, сөм-ҡара күҙле, һул битендә ҡара миңе балҡып торған етем ҡыҙға тиң түгел, сөнки мин яфа сикмәй йәшәйем.

Ғ1иҙәр генә күрергә яҙмаһын, дуҫымдың серен барыбер сисәсәк түгелмен. Ай күрҙе, ҡояш алды...

Минең күңелемә иләҫ-миләҫ уйҙар ҡағылып үткәнде дуҫым һиҙмәне. Уның үҙ һағышы үҙенә еткәйне.

— Әгәр ҡоштар булһаҡ, хәҙер үк осоп китер инек, — ти Әсғәт, һаман үҙенекен һөйләй. — Мин уны нисек тә күндерер инем.

— Ә һин ниндәй ҡош булырға теләр инең — шоңҡармы, аҡҡошмо әллә сыйырсыҡмы? — тим мин. Ул байтаҡ уйланйп тора. Шунан ғына яуап ҡайтара:

— Юҡ, мин барыбер ҡош булмаҫ инем. Ҡошҡа әйләнһәм, минең арттан килгән өйөрмә, мине тапмай, кире китер.

— Ниндәй өйөрмЪ ул?



14-се биткә. «Үҙе әле тыумаған да, уны инде ҡара урман эсендәге түңәрәк күл буйында... Аҡбуҙат көтә...»

— Икенсе серем ана шул өйөрмә инде. Антыңды ҡабатла!

— Икмәк өçтө!

Әсғәттең арыҡ йөҙөнә ҡараным. Уның зәңгәр күҙҙәре шундай уйсандар.

— Мин бында түгел, башҡа илдә — ебәк үләндәр үçкән, татлы емештәр бешкән сәхрә ерҙә тыуғанмын. Бер заман ҡаты өйөрмә сыҡҡан да, мине күтәреп, бейек тауҙар, сикһеҙ дарьялар, ҡара урмандар аша ошонда килтереп ташлаған. Минең урынға бынан икенсе малайҙы осортоп алып киткән. Тегегә рәхәт, миңә михнәт татытыу өсөн шулай иткән ул. Ваҡыты еткәс, беҙҙе яңынан алмаштырасаҡтар. Әгәр ҙә мин ят ерҙәрҙән килмәгән булһам, мине сит ояның себеше урынына шул саҡлы ҡыйырһытырҙар инеме ни? Беләм мин, бер ҡыйындың бер анһаты буласаҡ. Анау Ҡайынлы ҡул яғынан ғына өйөрөлөп килер ҙә ул өйөрмә мине алып та китер. Ғәрәсәт ҡупҡан һайын мин, аҙбар башына менеп, көтөп торам. Тик әлегә ваҡыты етмәгән. Бында әсәһе һыуым эселеп, йотаһы утым йотолоп бөтмәгән.

Минең йөрәгем жыу итеп китте:

— Улайһа, һине пәрей алмаштырған булып сыға... Улайһа, һин пәрей балаһы!..

— Юҡ, пәрей балаһы аҡ булмай, ҡара була. Әйтәм бит, мине бында бүтән донъянан, бәхетлеләр иленән, килтереп ташлағандар. Мине юллап табасаҡтар барыбер...

Бынан һуң бик күп дауылдар булды, өйөрмәләр уҙҙы, әммә улар минең дуçыма теймәнеләр. Әсғәт үҙе лә ҡабатламаны был хаҡта — бер ваҡытта ла. Мин дә хәтерләтмәнем.

Яҙмыш менән бәхәсләшеп, беҙ үçә барҙыҡ. Буйға еттек. Әсғәт уйсан тәбиғәтле, сабыр холоҡло егет булып китте. Кескәй саҡта уны атаһы: «Шайтан һабағына йөрөмә!» —тип мәктәпкә барыуҙан тыйҙы, һуңынан үҙе күңел һалманы. Ул хәреф таныр-танымаç көйө ҡалды. Үҙе бөтә ауылда сәсән телле һүҙ оçтаһы, йыр, таҡмаҡ сығарыусы булып дан алды. Шул әсе телле, тапҡыр һүҙе арҡаһында уға аратирә туҡмаҡ та төшкөләй торҙо. «Яҙығына күрә язаһы», — тип ул телен дә тыйманы, йәбер-йоборға ла иçе китмәне.

Бер заман бөтә ил өҫтөнә көрән өйөрмә ябырылды. Ул. өйөрөлдөрөп-өйөрөлдөрөп, еләк кеүек егеттәрҙе алыҫ яҡтарға алып китте. Бәхет иленән түгел, бәхетһеҙлек иленән килгәйне был ғәрәсәт. Ул, кирегенсә, беҙҙе рәхәтлек донъяһынан хәүеф донъяһына олаҡтырҙы. Әсғәт тә инде ебәк үләнле ғәзиз тупраҡтың үҙ аяғы аҫтында икәнен күптән аңлағайны. Шул өйөрмә ҡаҡҡылап-һуҡҡылап беҙҙе. ир итте. Кайһыларыбыҙға әжәлдән, ҡайһыларыбыҙға дан-дан өлөш сыҡты. Әммә бөтәһенән дә юғарыраҡ күтәрелеп тыуған тупраҡтың изге нуры тереләрҙең рухын, үлеләрҙең гүрен яҡтыртты.

Бик күптәребеҙҙе утлы өйөрмә кире әйЛәнеп ҡайтмаҫ ерҙәргә алып китте. Әсғәт тә хәбәрһеҙ ғәйеп булды. Юҡ, быға ышанып булмай. Ул хәбәрһеҙ юғала торғандарҙан түгел ине. Күрәһең, уның күҙҙәренең зәңгәрлеге ҡайҙалыр күктәрҙең зәңгәрлеге менән барып тоташҡандар. Үлгәндә ул ерҙә ятып, тартышып, сәбәләнеп, сырай һытып үлмәгәндер; йә һыбай елеп барғанда эйәр өҫтөнән атылып төшкәндер, йә самолетта осоп килгәндә һауала дөрләп янғандыр. Ул яҡшы күңелле, матур кеше ине. Сибәр түгел, матур ине. Яҡшы күңелле матур кешенең йәмһеҙ үлеүе мөмкин түгел. Ул шағир ине. Шағирҙең йәмһеҙ үлеүе мөмкин түгел.

Әсғәтте заман соңғолона бөтөнләй батгы тиһәм дә, байтаҡ йылдар уҙғас, уның тураһында, күҙгә күренмәҫ ел һымаҡ, ҡолаҡ ишетмәҫ нур һымаҡ, бер хәбәр ил өҫтөнән һаҡ ҡына тирбәлеп үтте. Уны ғаләм төпкөлөнә юл ярған аҙамат ирҙәрҙең береһе килтергән, тинеләр. Имеш, баяғы ғаләм аҙаматы алыҫ галактикаларҙың алыҫында планетанан-планетаға һикереп атлап барған етен сәсле, зәңгәр күҙле, һыңар ҡолаҡлы йәш егетте шәйләп ҡалған. Ҡулында уның һүнмәҫ сырағы бар икән. Шул сырағы менән егет йыһандағы һүнгән йондоҙҙарҙы берәм-берәм яңынан тоҡандырып, һүнә барғандарына ут өҫтәп йөрөй икән. Быныһына ышанырға була. Сөнки ул шағир ине. Тимәк, шағир үҙенең төп эшенә тотонған...

# МӘСХӘРӘ ИТЕЛГӘН ҠАЛА

Өй артында тыңҡыш Вәлетдин утын киҫә. Бер саба ла күккә ҡарап ялбара:

— И һауа! Йә мине ал, йә ошо ҡартнәйемде ал! Тота ла утын киҫергә ҡуша, тота ла утын киҫергә ҡуша...

Ул түмәрҙәге ҡоро ҡайын ағасына киҙәнер-киҙәнмәҫ кенә йәнә саба. Ағас бирешмәй, бары һикереп кенә ҡуя.

— Ағасы ҡаты, балтаһы үтмәҫ, — тип зарлана ул, — ниңә бөтәһе лә бер миңә генә шулай тиҫкәре килә икән?

Вәлетдин ҡайышланып бөткән түбәтәйен башынан алып ергә атты. Түбәтәй төшкән урында, нигеҙ буйында, борҡолдап туҙан күтәрелде. Ул тағы ла зәп-зәңгәр күккә төбәлде. Әллә ҡайҙа алыҫҡа китеп аҙашҡан күҙҙәренән ҡапыл мөлдөрәп йәштәр аға башланы.

— И һауа, бер етемеңде генә — минең үҙемде генә ал һин. Ҡартнәйем бында тороп ҡалһын. Бер яңғыҙы ғына рәхәт сигеп йәшәһен әйҙә — бөтә мал-тыуарға баш булып! Ишетәһеңме, һауа?

Вәлетдин мәлйерәп бөткән оләсәһе Ғизелниса ҡарсыҡ менән икәү генә тора. Атаһы унының герман һуғышынан ҡайтмаған, әсәһе Күсем ауылына кейәүгә сығып киткән. «Мал-тыуар» тигәндәре һыңар мөгөҙлө һары кәзә. Әммә кәзәһе кәзә ише генә түгел инде, торғаны менән бер ҡоралай. Бөтә ауылдың көтөүен эйәртеп йөрөтә. Шуның менән Вәлетдин маҡтанып туя алмай: «Беҙҙең һары кәзә бөтә көтөүҙең батшаһы ул, ҡайҙа теләй, шунда алып бара һеҙҙең күпкәк, наҙан һыйырҙарығыҙҙы, томана һарыҡтарығыҙҙы... — ти, — һөтө самалы булһа ла, тот-

кан дәрәжәһе, ҡылған ҡылыҡтары дан унын», —
**ти.**

«Ҡылған ҡылыҡтары дан уның...» — ти. Дан уҡмы икән? Юҡҡамы анау көндө Кесе инәйем ҡатындар собраниеһенән һуңлабыраҡ ҡайтҡас, атайым, мыҫҡыллай биреп, әйтә һалды: «Былай эш ташлап, собраниейәргә йыш йөрөй башлағас, бисәкәй, Ғиюлниса кәзәһенә әйләнеп ҡуймаһаң ярай ҙа...» Кесе инәйем һе тип көлөп ҡуйған булды, бик үк көлгөһө килмәһә лә...

Мин Ғизелниса әбейҙәрҙең өй мөйөшөнә һөйәлеп торам. Вәлетдин, ни эшләптер, мине һаман йүрмәй. Ул балтаһын ташланы ла лып итеп түмәргә ултырҙы. Вммә ике яңағы буйлап күҙ йәштәре туктауһыҙ аға бирҙе. Байтаҡ шымып торғас, ул башын тағы ла югарыға сөйҙө:

— И һауа,— тине,— баяғы һүҙҙәремде мин кире илам. Ҡалдыр беҙҙең икебеҙҙе лә ошонда. Юғиһә ҡартнәйемә 1йинһеҙ үтә ҡыйын булыр. Ике етем бер үкһеҙ булып йәшәрбеҙ әле шунда...

Мин сыҙай алманым, Ғизелниса әбей менән Вәлетдинде йәлләп илап ебәрҙем. Шул саҡ Вәлетдин тертләп китте, минең яҡҡа әйләнеп ҡараны. Башта ул әллә хәүефкә төштө, әллә асыуы тоҡанды — атылып урынынан торҙо. Сит заттың бары «мин генә» икәнен күргәс, тынислана бирҙе:

— Кем тейҙе!—ти ул йомшаҡ ҡына.

— Теймәне.

— Ә ниңә балауыҙ һығаһың?

— һин илағанға... һүҙеңде кире алып яҡшы иттең. Нимә ҡалған һиңә унда боҙло һауала?

Минең кешегә ҡушылып, кеше өсөн әрнеп илауым, бәлки, ғүмеремдә беренсе тапҡыр ошо булғандыр. Ә кешегә ҡушылып тәүтапҡыр ҡасан йырлағанмындыр, униһын хәтерләмәйем, һуңыраҡ, күп замандар һуңыраҡ, булғандыр быныһы...

— Мин дә иламаным, һин дә иламаның. Төшөндөңмө? — тине Вәлетдин. — Йәш ағыҙып тороу ирит эше түгел.

— Төшөндөм, — тип баш ҡаҡҡан булдым, төшөнөп үк етмәһәм дә... Ул саҡта ла, һуңынан да төшөнмәнем мин быны. Имәндәй ирҙәрҙең инрәп илағанын күргәндә мин һис тә ғәжәпләнмәнем,

уларҙы ғәйеп итмәнем. Таштан һытылып һыу тамсыһы сыҡһа, мин әйтер инем: күрәһең, шулай тейештер, тимәк, башҡаса мөмкин түгелдер...

— Ошо ағасты өс сабыуҙа ҡырҡып сығармаһаммы— исемем Вәлетдин булмаһын!—тип ул өс тапҡыр усына төкөрҙө. Балтаһын алды ла, ажарланып, һелтәп ебәрҙе. Ҡырҡылған утын ағасы түмәрҙән осоп та төштө. Бынан ары Вәлетдин саба торҙо, сапҡан һайын бер утын ағасы ситкә тәгәрәй торҙо. Ни хикмәт был? Шул арала әллә ағас йомшарҙы, әллә балта үткерләнә төштө.

Ғизелниса әбей ишек алдына сығып баҫты. Ейәненә ҡарап һоҡланып бөтә алмай:

— Бына ниндәй ул минең уңғаным, минең тыңсылым! Эшләгәндә йөрәккәйҙәре елкенеп тора бит уның! Таянысым, алтын бағанам минең... Хатта түбәтәйҙәрен һалып ташлаған. Киҫкән утыныңды инде кертеп тә бирһәң...

— Мин үҙем! — тип шунда уҡ утын ағастарын ҡосағыма тейәй ҙә башланым.

— Затың игелек күрһен, балам, итәғәтле икәнһең,— тип әбей мине лә маҡтап алды. — Ҡылған эшең — кешегә, килгән сауабы — үҙеңә! — Шуны әйтте лә кире өйгә ыңғайланы.

Ә тигәнсе ике ҡосаҡ утынды кертеп тә ташланым.

Вәлетдиндәрҙең иңе-буйы бер ҡолас ҡына өйҙәре беҙҙең төп төйәгебеҙ ул. Үрге ос малайҙары йәйенҡышын ошонда. Бында иркен. Тыйыусы, орошоусы юҡ. Шуға күрә Ғизелниса әбейҙең бәләкәс кенә йомошон да ҙур итеп башҡарырға әҙер торабыҙ. Дөрөҫөн генә әйткәндә, уның сибек кенә «алтын бағанаһы» былай уҡ ҡысҡырып маҡтарлыҡ түгел — эш яғынан. Холҡона килһә, йомош тыңлай, холҡона килмәһә, хыт үлтер һин уны, ҡыл да ҡыймылдатмай. Тиҫкәрелек уға төйөп, тыңҡыслап тултырылған.

Беҙ бер йыйыла башлаһаҡ, мал һуйған ергә ябырылған ҡарабаш турғайҙар һымаҡ, хәҙер тупланып алабыҙ. Минән һуң Хәмитйән, уның артынса уҡ Шәйхаттар, Ибраһим менән Әсғәт, Хөсәйен Мөхәррәме, Аҡ Йомағол Әнүәре, тағы бүтәндәр килДе. Иң һуңынан башлыҡ үҙе күренде.

Төшкә саҡлы беҙ төрлөбөҙ төрлө ерҙә йә ҡулдан килгәнсә эш эшләйбеҙ, йә ваҡ-төйәк уйын менән

мауығабыҙ. Ә киске яҡта бөтәбеҙ бергә йыйылабыҙ **ҙн,** ике төркөмгә бүленеп, «Герман һуғышы» тигән иң ҙур, иң тамаша уйынды уйнайбыҙ. Мин ҡеүәтле «Рукавказ» булыр сәғәтемде көтөп ала алмайым. I ИК шунышы алама: мине төркөмдән-төркөмгә күсереп йөрөтәләр — берсә «Рәсәй» ҡул аҫтына, берсә «Германия» ҡул аҫтына килеп эләгәм. Ҡайҙа эләкһәм дә, сәмләнеп аяуһыҙ һуғышам мәгбр: танау канамай, күҙ-баш күгәрмәй ҡалған саҡ һирәк була. М га төймәләрен әйтеп тә тораһы юҡ, ҡырыла ғына. Оло инәйем тағып өлгөртә алмай.

«Герман һуғышы» башланыр алдынан ғьнта, тыны бөтөп, Ҡотло ҡул Насип килеп етте. Ирмәк ул Насип. Ниндәй генә нәмәгә тотонмайыҡ: «Малайҙар, мин ҡул башлайым әле, минең ҡулым ҡотло», — тип инәлә. Балыҡҡа барһаҡ, тәүҙә ул ҡармаҡ һалырға ашыға: «Минең ҡулым ҡотло, балыҡ бөтәбеҙгә лә илереп ҡабасаҡ», — ти ул. Ҡалҡыуысы сәп Итеп күл өҫтөнә килеп тә төшә. Төшә лә шунда уҡ йоҡоға тала. Бүтән ҡалҡыуыстар ҙа ҡымшанмай ултыра. «Хәҙер... хәҙер... —тип бышылдай Насип.—• Беҙҙең сабырлыҡты һынай ул балыҡ. Сабыр иткән — моратына еткән...» Сабыр итәбеҙ, әммә моратҡа етеп булмай. Урманға ҡаҡыға барһаҡ, әлеге Насип алға сыға: «Беренсе ҡаҡыны мин өҙәйем инде, малайҙар, минең ҡулым ҡотло, һеҙгә лә игелеге тейер», — ти. Әммә төрлөсә тура килә — йә тейә игелеге, йә теймәй. Ә былтыр арыш урағына төшкәндә, был: «Атай, тәүге усманы мин урайым әле, минең ҡулым ҡотло бит, эш ырамлы булыр»,— тигән дә... тәү ураҡ һалыуы булған, һул ҡулының бәпес бармағын һөйәгенә еткәнсе ҡырҡып та сыгарҒан. Ниҙәр генә күрмәй ул Насиптең ҡотло ҡулдары! Уҡ сүкеһә, сүкеш төшә, тауҙа таш өйөмөнән ҡош йоморткаһы эҙләгәндә таш баҫа, хатта ишек асып япҡанда,- ишеккә ҡыҫыла. Ләкин ул ҡулдарының ҡотона ихлас ышана. Насиптең гел шулай тығылып барыуы минең әсемде бошора. «Үҙен күрһәтергә ҡалайыраҡ тырыша...» — тип асыуым килә. Тик байтаҡ замандар үткәс кенә Насиптең ошо ҡылығы унын үҙенә түгел, бүтәндәргә ҡот теләүе икәнеп аңлаясаҡмын. Ҡулдарының ысынлап та ҡотло булыуын ул бер са-ң ғүмерлеккә иҫбат итәсәк...

«Герман һуғышы» тоҡанырға торғанда ғына, Ҡотло ҡул, тотлоға-тотлоға, шундай хәбәр һалды:

— Малайҙар! Әле генә Йоморо Талип менән атайым һөйләшеп торҙо. Йоморо Талип әйтә, ҡалала урыҫтарҙың ҡалас байрамы икән, ти, шул байрамда бөтә кешегә лә бушҡа ҡалас өләшәләр икән, ти. Бына шундай күперелеп торған ап-аҡ ҡалас. — Ул, ҡулдары менән самалап, ҡаластың бейеклеген күрһәтте.— Кәм тигәндә, тирмән ташы ҡалынлығы булыр ине.

Хәбәр ысынлап та шаҡ ҡатырлыҡ ине. Малайҙарҙың күҙҙәре түбәгә менде. Бөтәбеҙ ҙә бер юлы телдән яҙҙыҡ.

— Йә алдайҙыр әле!— Быны бөтә .нәмәнән дә гел файҙа ғына сығара торған Шәйхаттар әйтте. Ул Шәйхагтарҙың тимер конькиҙәре бар. Ҡыш көнө шуларҙы тағып Аҡ Йомағол тыҡрығынан ике тапҡыр шыуып төштөңмө, бер тинеңде түлә. Алты төшһәң, өс тин. Артығына ҡаҙна таҡыр. Ҡышҡа керһәм, мин шуның арҡаһында бөлөп бөтәм.

— Алдаһа, атайым ышаныр инеме ни? Алдағанға тамсы ла ышанмай ул.

— Йоморо Талщггең шыттыра торған ғәҙәте барын бар ҙа ул,— тине Шәһиҙулла, һүҙгә яңы ҡушылып, — әммә ҡалала ҡалас байрамы булыу ҙа бик ихтимал.

— Кәнишнә, ихтимал, — тип раҫланы башлыҡтың яраны Вәлетдин.

— Ни өсөн тигәндә?.. — Беҙҙең алға башлыҡ шундай һорау ҡуйҙы.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә уның йоҡа ғына иренле ауыҙына төбәлдек. Ояһынан сыҡҡан сыйырсыҡ һымаҡ, бына-бына шул ауыҙҙан «ни өсөн?»дөң яуабы осоп сығасаҡ. Яуап сыҡманы, алға яңы һорау килеп баҫты:

— Ҡалас ҡайҙан килеп сыҡҡан?

— Ҡайҙан булһын, мейестән инде, — тип Ибрай тапҡыр яуап менән беҙҙең иҫте китәрмәксе булды.

— һин үҙең мейестән сыҡҡан, тик ашығыбыраҡ сығарғандар — бешеп етмәҫ борон... — Беҙҙең башлыҡтың теле ҡайһы саҡ әремдән дә әсе була.

— Уны ап-аҡ ондан бешерәләр, — тип аныҡланы Аҡ Йомағол Әнүәре. Шәһиҙулла уның һүҙенә ҡолаҡ та һалманы. Үҙенекен һөйләй бирҙе:

— «Ҡалас» һүҙе ул, егеттәр, «ҡала» һүҙенән килеп сыҡҡан. Йәғни ҙә «ҡаласа икмәк», «ҡала нцы» тигәнде аңлата.

Оho, ниҙәр генә белмәй минең нәҫел Шәһиҙулла ш айым!

— Булһа тағы, безгә унан ни файҙа? — тип бая-Iы Шәйхаттар ҡыҫылды. — Әйҙәгеҙ, лутсы «Түбәтәй йэшереш» уйнаныҡ.

— Ҡасан, ти, һуң ул ҡалас байрамы?

— Әлләсе... Йоморо Талип атайыма үҙ ауыҙы менән ҡалас ашағанын һөйләне инде.

•— Ҡасан ашаған ул — кисәме, былтырмы, бө-Гвпмө? — Шәһиҙулла ҡыҙып-ҡыҙып төпсөнөргә то-тондо. Насип ҡаушап төштө.

— Бөгөн һөйләгәс, бөгөн ашағандыр инде... Йә кисә ашағандыр,—тип мығырҙаны Насип. — Ул бит безгә ҡаланан ҡайтышлай һуғылғайны.

— Йоморо Талип йәренгә атасаҡ ҡуянын быйыл аттым тип һөйләһә һөйләр, тик былтыр атҡанды быйыл аттым тимәҫ. — Арабыҙҙа иң баҫалҡы Мөхәррәм бара торғас һүҙгә ҡушылды. Йәшкә ул Шәһиҙулла менән Вәлетдин самаһы. Буйға ла арыу ғына. Башлыҡтың әмер-өмөрҙәренә лә ыжлап бармай. Бәхәскә лә, уйынға ла һирәк ҡатнаша.

— Ә ҡуяны төптө булмаһа? — тип шик белдерҙе Шәйхаттар.

— Юҡты бар тимәҫ ул. Уның һүҙендә һәр саҡ бер хикмәт була...

— Иң дөрөҫөн үҙем әйтәйемме? — тип хәбәр һалды Вәлетдин.

— Әйт!

— Мин урыҫтарҙың ҡылығын белеп бөтөргәнмен. Улар байрам итә башлаһа, бер аҙнаһыҙ туҡтамай. Йәкшәмбенән йәкшәмбегәсә зыҡ ҡубалар.

Вәлетдин быныһын белеп һөйләй. Әсәһе кейәүгә киткәс, әле бәләкәйерәк саҡта, ул өс айны, дүрт аймы рус ауылында приютта торған... Шунан инде сусҡа булып мырҡылдарға ла өйрәнеп ҡайтҡан. Һөләк килештереп мырҡылдай, оләсәһенең ҡотон алып бөтөрә. Тик русса һөйләшергә генә өйрәнә алмаған.

— Бөгөн ни көн? —тигән һорау ҡуйҙы башлыҡ.

— Йома. Атайҙар бая өйлә намаҙын мәсеттә уҡыны, — тип раҫланы Әсғәт.

— Раҫ шулай булғас, ҡалас байрамы әле бөтмәгән,— тигән һығымта сығарҙы Шәһиҙулла. Уның йөҙөндә ниндәйҙер тантаналы балҡыш сағылып уҙҙы. — Кем дә кем туйғансы ҡалас ашарға теләй, шулар минең уң яҡҡа баҫһын!

Шәйхаттар менән Мөхәррәмдән башҡаларыбыҙ, йылғаға төшөп барған өйрәк балалары һымаҡ, башлыҡтың уң яғына теҙелдек.

— Ә һеҙ алҡымығыҙға еткәнсе ҡалас тығынып майымланығыҙмы ни? —тине Шәһиҙулла тегеләргә.

— Бармамдыр, шәт. Бер ҡалас ашауҙан мал яуамы?—тип Шәйхаттар яурындарын йыйырҙы.

— Бөгөн кис атайым менән Өршәк тирмәненә арыш тарттырырға китәбеҙ, — тине икенсеһе. — Арыш икмәгенән айырмаһын хоҙай.

...Бер тапҡыр ҡалас ашау өмөтө менән беҙ егерме биш саҡрым ергә йәйәү барырға әҙербеҙ. Тамаҡһаулыҡмы, ҡомһоҙлоҡмо, иҫәрлекме был? Әллә башҡа берәй нәмәме? Мин хәҙер үткән ғүмерҙең сал түбәһенән артҡа әйләнеп ҡарайым да шундай фекергә киләм: хикмәт бөтөнләйе менән ҡаласта булмаған, хикмәт беҙҙә, беҙҙең рухта булған. Ун михнәттең араһында бер рәхәттең ҡәҙерен, йөҙ әсенең эсендә бер татлының тәмен белеп үҫкәнбеҙ беҙ. Шуға күрә лә һуңыраҡ, башҡа аң, йөрәккә дәрт ингәс тә, беҙ әсәйҙәребеҙҙең бер фатихаһы хаҡына мең һынау үтергә әҙер булдыҡ, һөйгәндәребеҙҙең күҙҙәренә тик бер генә тапҡыр тултырып ҡарау өсөн, күкрәктәрҙәсе асыҡ яраларыбыҙҙы устарыбыҙ менән ҡыҫып, меңәр саҡрымлыҡ араларҙы араға һанамай, һуғыш ҡырынан бер генә көнгә, бер генә сәғәткә тыуған төйәктәребеҙгә ынтылдыҡ, һәм, аҙаҡ килеп, Тыуған илдең бер генә ус тупрағы, бер генә тамсы һыуы, бер генә һулам һауаһы өсөн, Ватан ҡабул иткән саҡта, бөп-бөтөн көйө ғүмерҙәребеҙҙе бирҙек...

— Шәһиҙулла! Әллә тоҙло һыу һипкәндәр инде шул Ғизелниса тупһаһына? Нисә ҡарама шундалар. Атайың бәлтерәп ҡайтты, ана, атты туғар! Береһе иҫерек, икенсеһе иҫәүән, өсөнсөһө бырамат — ни ҡылайым инде шулар менән? Шәһиҙулла, тим!.. —

Башлыҡтың әсәһе Миңлекәй еңгә урамдың теге игында шулай һамаҡлап һөйләй. Унның тауышы бөтә ауылға ишетелеп тора. Шул арҡала уларҙың өйөндә һис ваҡытта ла сер ятмай.

— «Герман һуғышы» булмаясаҡ, —тип белдерҙе башлыҡ. — Иртәгә көтөү ҡыуғанда ҡала ҡапҡаһы янындағы ҡом баҙына йыйылабыҙ, ҡалас мейестән сығыуға, ҡалаға барып етергә кәрәк...[1]' Ҡарағыҙ уны, артыҡ-бортоҡ кеше белмәһен. — Ул, ниңәлер, Шайхаттар менән Мөхәррәмгә һөҙә биреп ҡарап ҡуйҙы.

Беҙҙә лә уйын ҡанғыһы ҡалманы. Берәм*берәм өйҙәргә таралыштЫҡ.

рына оҙаҡ-оҙаҡ көттөрөп төн дә килде. Мин йоҡлап китергә ҡурҡып ятам. Уяулығымды Оло инәйем һиҙмәһен тип, тын да сығармайым. Ул ауыҙ эсенән генә доға уҡый. Уның бышылдауы ниндәйҙер шом тыуҙыра миндә: әйтерһең дә, Оло инәйем төнгө рухтар менән һөйләшә. Тик тәҙрә төбөнә төшкән ай яҡтыһы ғына бер аҙ шиктәремде тарата. Ҡустым менән һеңлем күптән инде сәбәләнә^сәбәләнә йоҡлай.

— Ниңә шулай боҫтоң, синнай? Ниңә йоҡламайһың?— тине Оло инәйем. (Бәләкәй саҡта уның «синнай» тигән һүҙен аңламай инем. Баҡһаң, ул рустың «ценный» — «ҡиммәтле» тигәне булып сыҡты.)

Мин өндәшмәйем. Өндәшһәм, бөтәһен дә һөйләп бирермен тип ҡурҡам. Бүтәндәр алдында хәрәмләшкәнем дә, хәйләләшкәнем дә, алдашҡаным да бар. Оло инәйем алдында шуларҙың береһен дә ҡыла алмайым.

— Иртәгә ниҙәр ҡыйратмаҡсы булып ятаһың?

Йөрәгем жыу итеп китте:

— һин уны ҡайҙан беләһең?

— Беләм инде.

...Оло инәйемдең зирәклегенә бына әле хәҙер килеп ғәжәпләнәм, хәҙер килеп һоҡланам. «Кисә ярамаған ниндәй эш ҡылдың, шулай йоҡоларың ҡасырлыҡ?» — тип һораманы ул. Сөнки кескәй бала уҙғанды ҡат-ҡат хәтерләү менән мауыҡмаҫ, тик алдағыңа ғына алғыҫыр, үткән менән түгел, көткән менән йәшәр уЛ...

— Дөрөç беләһең, Оло инәйем. Беҙ иртәгә бөтә малайҙар — Шәһиҙулла ағайым да — ҡалаға, урыçтарҙың ҡала байрамына барабыҙ. Бушлай ҡалас ашарға.

— Уларҙың ҡалас байрамы яҙ көнө, йырғанаҡтар йырылғанда була, балам.

— Юҡ, әле була, иртәгә була. Йоморо Талип әйткән...

— һе, Йоморо Талип әйткәс ни... раçтыр.— Күрмәһәм дә, һиҙеп торам: ул йылмайып ҡуйҙы. — Барығыҙ. Югергәндән бурҙайҙың табаны туҙмаç... Хәҙер йоҡла инде.

—- Йоҡлап ҡалһам һуң? Беҙ бит таң менән үк китәбеҙ.

— Ҡалмаçһың, үҙем уятырмын.

Оло инәйем мине һары таңдан уҡ уятты. Ҡыҙыл сепрәккә төрөп, ҙур ғына бер икмәк тотторҙо.

— Кәрәкмәй, Оло инәйем, беҙ бит унда ҡорһаҡ тулғансы ҡалас ашарға барабыҙ, — тип ҡарыштым.

— Мә, ал әле, бик ауыр булһа, ярты юлға еткәс, берәй әрем төбөнә ҡуйып китерһең, ҡуяндар ашар. Әммә ярты юлға саҡлы ташлама, сыҙа. Сепрәген алып ҡайт.

Алһам да. Оло инәйемдең һүҙен йыҡмаç өсөн генә алдым инде ул икмәкте.

— Сепрәкте инде, Оло инәйем, буш көйө килтермәм, ҡалас төрөп килтерермен! — тип ҡыуандырҙым уны.

Мин барып етеүгә, ҡом баҙы тулы кеше ине. Минән һуң, гел төшөп йөрөй торған ыштанын күтәрә-күтәрә, Аҡ Йомағол Әнүәре генә килеп өлгөрҙө. Ул Йомағолдар бөтә өй эçтәре менән әрпештәр. Әнүәрен әйттем инде. Уның ағаһы Мозафар әле булһа танауын һөртә белмәй, апаһы Йәмлегөлдөң гел генә сабата бауы сиселгән булыр. Анау көндө Әсғәт, йәнәһе, Әнүәрҙең әсәһенә оҡшатып, шундай һамаҡ һамаҡланы:

Әнүәрбәк, Мозафар! —
Утын киçәһем дә бар,
һыуға бараһым да бар,
Ҡамыр баçаһым да бар,
Ҡаҙан аçаһым да бар,
Өй артына егет килгән

Шуға бағаһым да бар...
Эй лә бөтмәҫ ҡырҡ эш!
Юҡты бушҡа тултырам,
һағыҙ сәйнәп ултырам...

— Нимә ул? — тип Шәһиҙулла ағай минең төйөнсөккә төртөп күрһәтте.

— Икмәк, — тинем мин бышылдап ҡына.

Вәлетдин кеткелдәп көлөп ебәрҙе:

— Арыш икмәгеме? Юҡ инде. Беҙгә, малайҙар, ҡорһаҡ һаҡларға кәрәк. Мин хатта кисә кис тә ашаманым.

— Бая мин дә шуны әйттем, тик Оло инәйем генә аңламаны.

'Икмәк хаҡында башҡаса һүҙ булманы.

— Ибрай ҡайҙа? — тип һораны башлыҡ.

— Ағайымдың бүҫере ҡуҙғалды, — тип яуапланы Әсғәт.

Башлыҡ бөтәбеҙҙе барлап алды. Йыйнауыбыҙ ете йән булып сыҡтыҡ. Иң тәүҙә үҙе, унан ары бүтәндәр: Вәлетдин, Насип, Хәмитйән, Әнүәр, Әсғәт. Иң ахырҙа мин.

— Ҡара уны, Кендек, арып бәлә һалмаҫ булһаң ғына эйәр! —тип киҫәтте Шәһиҙулла. Мин күкрәкте кирә биреберәк ҡуйҙым. Өндәшмәнем. Башлыҡҡа хәтерем ҡалһа ла, белдертмәнем. Үҙҙәре бөтә өй эҫтәре менән аҙым һайын, йомош һорап, беҙгә киләләр, ә үҙе мине буш һыйҙан да мәхрүм итергә тора.

Яуапты минең өсөн Хәмитйән ҡайтарҙы:

Бирешмәҫ. Икмәген мин күтәреп барырмын. Бир, «Рукавказ»! — Шунда уҡ минең төйөнсөктө үҙенә алды. Анау йылғы хәлдән һуң Хәмитйән миңә ҡарата ифрат та һәйбәтләнде. Ах итеп тора.

— Ә һин ҡалала ла ыштаныңды шулай тотоп йөрөрһөңмө, Әнүәрбәк?

— Тотмаһаң, төшәсе.

— Юҡ, Әнүәр ыштаны менән был көйө юлға сығып булмай, — тип бошондо башлыҡ. — Мәсхәрәгә ҡалырһың.

Бармаҡ оҙонлоғо ике сөй табып, Вәлетдин менән Насип Әнүәрҙең ыштан бауын алдан да, арттан да борғослап ебәрҙе. Ҡыуанысынан Әнүәр, кәзә бәрә-

сенә оҡшатып, бер һикереп тә ҡуйҙы. Борғостар ышаныслы ине.

Әле ҡояш сыҡмаған. Артта, ауыл өҫтөндә, һыйыр мөңрәгән, әтәс ҡысҡырған тауыштар ишетелә. Аҫта, шишмә буйында, шыйыҡ ҡына томан йөҙөп бара. Беҙ, туҙанлы ҡала юлында ялан тәпәй баҫҡан эрелеваҡлы ете эҙ ҡалдырып, алға ынтылдыҡ. Ҡуҙғалыр алдынан ғына Әсғәт боролоп ҡараны ла:

Беҙ илдәрҙән киткән саҡта,
Күтәрелде томандар.
Йә ҡайтырбыҙ, йә ҡайтмабыҙ,
һау булығыҙ, туғандар! —

тип йыр көйләп алды. Киттек. Дәртме, шатлыҡмы — нимәлер эсте ҡытыҡлап рәхәтләндерә. Аяҡтар үҙҙәренән-үҙҙәре югерергә тора.

Имәнлек үренә саҡлы артыҡ әңгәмәләшмәй, атлай-югерә генә барҙыҡ. Ҡояш инде байтаҡ күтәрелде. Имәнлек үренән аяҙ көндө аҡ тау башындағы аҡ ҡала ялт итеп ялтырап күренеп тора. Ошо ерҙә — беҙҙең ауыл баҫыуының сиге. Ураҡҡа ҡуна килгәндә, төндәрен ҡараһаң, ҡала уттары, йымйым итеп, былай табан килгән һымаҡ тойола. Ҡаланың ҡайҙалығын беләбеҙ, унның юлын таныйбыҙ, ә етебеҙҙән беребеҙ әле унда булғаныбыҙ юҡ. Көмөш ҡаялар өҫтөндә алтын түбәләре нур сәсеп тора бит ана! Күҙгә күренгәс, ҡала бигерәк тә асыҡ сырайлы, йомарт, ҡунаҡсыл булып тойолдо. Йомарт булмаһа, шулай саҡырып торор инеме ни? Әйтерһең, беҙ ҡалаға китеп бармайбыҙ, ә ул үҙе, бөтә хазиналарын тейәп, беҙгә ҡаршы йөҙөп килә.

— Ҡалала беҙҙең нәҫел дә бар, — тип хәбәр һалды Әнүәр, — иң бейек пожар каланчаһында тора, ул торған төштән йөҙ саҡрымдағы ерҙәр күренә, ти. Батша һымаҡ башына алтын кәпәс кейеп ултыра, ти.

— Күсемдәге беҙҙең яҡын ғына ҡоҙаның ҡоҙаһы ҡуш манаралы таш мәсеттә мейес яға,—тип маҡтанды Вәлетдин. — Барһам, күтәреп аласаҡ. Күрҙә тор бына.

Тегеләрҙең нәҫел-нәсәбен белмәйем. Әллә бар, әллә юҡ. Ә бына Әсғәттең иң өлкән ағаһы Исмәғил ысынлап та Өфөлә эшләй. Ниңә Әсғәт өндәшмәй икән? Хатта анау саҡ бер таҡтаны бүрәнә өҫтөнә

арҡыры һалып, икебеҙ ике башҡа баҫып, таған атынғанда, ул таҡмаҡ та сығарҙы бит:

Һин дә баҫтың тактаға,
Мин дә баҫтым тактаға,
Беҙҙең брат хеҙмәт итә
Универсальный лавкала.

Әсғәт урынында булһам, тегеләрҙең мин әллә ҡасан ауыҙын ҡаплар инем.

— Ниңә ағайыңды әйтмәйһең? — тип бышылданым мин, дуҫым эргәһенә килеп.

— Ҡуй, — тип ҡул һелтәне, — уны белмәҫһең: бер ҡалала, бер салала. Ташкент яғына сығып киткән ул хәҙер.

„ Имәнлек үрен артылып, байтаҡ киткәс, ҡала тағы ла күҙҙән юғалды. Беҙҙең дәрт тә, ниңәлер, һүрелә төштө. Ҡыҙыл сепрәккә төрөлгән икмәк барабара Хәмитйәндән Насипкә, Насиптән Вәлетдингә күсте. Аҙаҡ килеп, ул башлыҡтың ҡултыҡ аҫтына инеп һыйынды.

— Әле ярты юлға етәбеҙме, Шәһиҙулла ағай? — тип һораным мин.

— Ниңә, кәр бөттөмө әллә? Әйттем бит мин һиңә...

— Юҡ, бөтмәне.

— Улайһа, ниңә төпсөнәһең?

— Ауыр булһа, икмәкте, ярты юлға еткәс, әрем төбөнә ҡуйып китергә ҡушты Оло инәйем.

— Бушты һөйләмә, Оло инәйең улай тимәҫ.

— Әйтте шул. Әйтте!

— Иҫәр, ул бит «ауыр булһа» тигән. Бына ҡара, ҡош кеүек тә, — ул икмәкте күккә сөйөп, ике ҡулы менән эләктереп алды.

— Ҡуй, Шәһиҙулла, икмәкте уйнатма, ыуалсығы төшөр ҙә үҙеңә яҙыҡ булыр, — тине Әсғәт.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә яҙыҡтан үлеп ҡурҡабыҙ. Хатта башлыҡ үҙе лә. Шуға күрә ул, ғәфү итеүҙе һорағандай, икмәкте күкрәгенә ҡыҫты.

Яҡшы-яҡшы аттар егелгән әллә нисә кырандас, туҙан туҙҙырып, беҙҙе уҙып китте. Ҡаршыға ла ылауҙар осраны. Йәйәүлеләрҙән оло юлда бары беҙ генә.

— Ҡала әле алыҫмы? — тип һораны Вәлетдин арыҡ атлы бер бабайҙан.

— Ун биштән кәм булыр, ундан артыҡ булыр. Йәһәтерәк атлағыҙ. Унда һеҙҙе көтәләр.

Көткән ергә ашығырға кәрәк. Бынан һуң беҙ бер тына югереп тә алдыҡ. Югерһәк тә, артыҡ ыратып булмай хәҙер. Минән ололар ҙа әллә ҡайҙа китә алмай. Әнүәрҙең ыштаны йәнә бушаны. Насип арттағы борғосто тағы бер ҡат бороп ҡуйҙы. Бүтәндәрҙең нисектер, минең ҡорһаҡтың ҡалас ҡайғыһы китеп бара. Ҡара икмәккә лә бик риза булыр ине. Нисек инде башлап сер бирәйем, бер имгәк кеүек?

Өс-дүрт йортло бер рус ауылын үткәс, баҫыу уртаһындағы һирәк кенә ҡайынлыҡҡа туҡтаныҡ. Күләгәгә килеп ингәс, тындар иркенәйеп китте.

— Ултырығыҙ, — тип бойорҙо башлыҡ. Үҙе теҙләнеп ултырҙы ла алдына ҡыҙыл төйөнсөктө ҡуйҙы. — Ҡорбан мулла нимә, ти, шуны кем белә?

— Һин беләһең, — тине Вәлетдин, нимәлер һиҙенеп алды, ахыры, тыңҡыш.

— Ҡорбан мулла әйтә: «Аш— ашҡа, урыны башҡа», — ти.

— Мулла белеп һөйләй инде ул, — был юлы һүҙгә Әсғәт ҡеүәт бирҙе.

— Бынау икмәктән ауыҙ итһәк, ҡаласҡа урын ҡалырмы эстә?—тип һораны Шәһиҙулла беҙҙән.

— Ҡалыр! Ҡалыр! — тиештек беҙ.

— Мә, Вәлетдин, — тип башлыҡ кеҫәһенән алып бәке һуҙҙы. — Ете өлөшкә ғәҙел итеп бүл ошо ризыҡты.

Вәлетдин өтәләнеп үк китте, һә тигәнсе ул ҡыҙыл сепрәк өҫтөнә бер сама тигеҙ генә бүленгән ете киҫәк икмәкте теҙеп тә ҡуйҙы. Әлбиттә, өлөшө менән өлөшө типә-тиң тигеҙ түгел ине. Ниңәлер, башлыҡ иң ҙур киҫәккә — үҙ өлөшөнә ҡул һуҙмай тора. Унан уҙып беҙ ҙә үрелә алмайбыҙ.

— Юлда ризыҡты ғәҙел өләшергә кәрәк, — тине ул, — «бынаһы кемгә»не әйтеп.

— Малайҙар! Мин әйтеп торайым әле. Минең телем ҡотло — һәр кемгә үҙ өлөшө сығыр. — Насип һикереп үк торҙо. Ҡаршы килеүсе булманы.

Насип артына әйләнде. Вәлетдин бер киҫәкте ала ла һорай:

— Бынаһы кемгә?

— Хәмитйәнгә!

— Быныһы кемгә?
— Шәһизуллаға!
— Быныһы кемгә?
— Кендеккә...

Етебеҙгә лә өлөш сыҡты. Әммә ғәҙел үк булманы. Иң ҙур киҫәк миңә, иң бәләкәйе башлыҡҡа эләкте. Шулай ҙа теге сер бирмәне. Тик мин һиҙеп торам: был икмәк минең әсемә аш булып бармаясаҡ. Дөрөҫ килеп сыҡманы. Шәһизулла минән биш йәшкә өлкән. Дәү кешегә өлөштөң дә ҙурырағы булырға тейеш. Алмашырға кәрәк... Шулай тип уйланып торғанда, теге үҙ киҫәген умырып тешләл алды. Бүтәндәрҙең дә "ауыҙҙары сәпелдәй башланы. Был яман ғәҙелһеҙлекте нисек кенә төҙәтергә һуң?

Мин үҙ һынығымды оҙаҡ ҡына ашап маташҡан булдым. Өс-дүрт ҡабымлыҡ икмәгем ҡалғас, уны Шәһизуллаға һондом:

— Мә, ағай, ашап бөтөр.
— Үҙең аша.
— Мин туйҙым инде, валлаһи...
— Ант итмә. Бирһәң, былай ғына бир. Юғиһә антың башыңа төшөр.

Ҡорһаҡҡа аҙыҡ ингәс, аяҡҡа ҡеүәт ҡайтты. Мин йыш ҡына шундай уйға ҡалам: йоҙроҡ саҡлы ғына икмәк киҫәгендә күпме тылсым бар, асыҡҡанда шуны ашаныңмы, донъя йәмләнә лә китә. Бына әле лә... Эргәлә генә бер ҡош һайрап ебәрҙе, яңыраҡ баш ҡоҫҡан бойҙай өҫтөнән күгелйем шаян ел югереп үтте, ҡайын япраҡтары ла дәртлерәк, ихласыраҡ елберҙәргә кереште. Ҡояш та ул тиклем өтөп бармай )ҫәҙер. Бөтәһе лә ана шул бер һыныҡ икмәктән.

Беҙ ҡуҙғалып киткәс тә:

— Әйҙәгеҙ, малайҙар, Әмин бейәһе кеүек, юрғалап барабыҙ, — тине Насип. Үҙе, алдан төшөп, юрғалай ҙа башланы. Ләкин башлыҡ менән Вәлетдин уны шунда уҡ уҙып китте. Мин иң арттан лерт-лерт кенә юртып барам.

Түбән урамда уттай эш өҫтөндә урманға емешеләк йыйырға йөрөй торған Әмин бар. Майланмаған ҡабыҡ арбаһына эреле-ваҡлы бала-сағаһын тейәп, иртәнсәк ул аҡрын ғына юғары осҡа күтәрелә. Әллә ҡасандан дегёт эҫәре күрмәгән тәгәрмәстәр,

бөтә ауылды бер итеп, һуҙып-һуҙып һөрән һалып бара. Бер көн Әсғәт минән һорай: «Нимә ти Әмин арбаһы?» «Нимә тиһен, һөрән һала». «Юҡ, — ти Әсғәт, — ул Әмингә инәлә: бар-ма-йыҡ ла... бар-ма-йыҡ ла... бар-ма-йыҡ ла... ти». Юнләберәк тыңлаһаң, Әсғәт һүҙе дөрөҫкә сыға. Арба тап шулай ҡысҡыра Ә инде кис ҡайтканда ала бейә тау түбәненә юр „ғаларға керешә, ул саҡ арбаның дүрт тәгәрмәсе алмаш-тилмәш маҡтанырға тотона. Уларҙың нимә тип маҡтанғанын да белә Әсғәт, «һыҙырып һалдыҡ! һыҙырып һалдыҡ!!!» — ти улар. Хәҙер инде. Әсғәт төшөндөрөп биргәс, Әмин арбаһының телен бөтә ауыл аңлай.

— Ҡаланан ҡайтканда, беҙ ҙә, Әмин арбаһы кеүек, йырлап ҡайтырбыҙ әле:

Аҡ ҡалала аҡ ҡаласты
һыҙырып һалдыҡ, һыҙырып һалдыҡ.
Алҡымына саҡлы тулды
Ҡыҙыл һандыҡ, ҡыҙыл һандыҡ...

Әсғәттең башлап әйтеүе булды, Вәлетдин менән Насип элеп тә алды:

Аҡ ҡаласты һыҙырып һалдыҡ, һыҙырып һалдыҡ... .р

Хәҙер инде малайҙар юрғаламай, бөтәбеҙ ҙә, самокатта килгән шикелле, тубыҡтарҙы юғары сөйөп, ырғандай-ырғандай югереп барабыҙ. Күңелгә үтә ятышлы әлеге һүҙҙәрҙе көйләй биреп, бер ауыҙҙан ҡабатлайбыҙ:

Аҡ ҡалала аҡ ҡаласты
һыҙырып һалдыҡ, һыҙырып һалдыҡ...

Ҡыҙыл Һандыҡ тураһындағы һүҙҙәре йәтеш килеп сыҡманы, ахырыһы, улары шунда уҡ онотолдо. Ә быларын әйткән һайын әйтке килеп тора.

«Аҡ ҡаласты һыҙырып һала-һала», беҙ бейек таш юлға килеп сыҡтыҡ. Юлдың ике яғына йыуан-йыуан тирәктәр үҫкән. Юлға түшәлгән таш, мунса ташы кеүек, шып-шыма. Үҙе яҫы түгел, ҡабарынҡы.

‘— Был юлдан әүәл заман батша үҙе генә йөрөгән. Хәҙер, Совет власе булғас, теләһә кем йөрөй ала, — тип аңлатты башлыҡ. — Слабуда хәҙер. Хөрриәт!

Бер боролманы уҙғас та, алдыбыҙға йәнә аҡ тау башындағы ҡала килеп баҫты. Ана ғына ул — үрел дә тот! Ҡала хәҙер беҙҙеке, әллә ҡайҙа китә алмаҫ.

■— Әссәләмәғәләйкүм, ҡала! — тине Вәлетдин. — Бына беҙ һиңә килеп тә еттек!

— Ҡала беҙҙе ҡаршы ала, ҡорһаҡтарға ҡалас һала, рәхмәт уҡый ете бала, — тип теҙеп китте Әсғәт.

Беҙ бары ҡабатланыҡ ҡына:

— Рәхмәт уҡый ете бала!

Ҡайҙа күҙ ташлама, завод торбалары тырпайып тора, мәсет манаралары, сиркәү көмбәҙҙәре ялтырай. Беҙ мәсетте сиркәүҙән айыра беләбеҙ. Бого-Любтәрҙең сиркәүен көн дә күреп торабыҙ. Мин бары шуға ғына аптырайым — нимә эшләп ул сиркәүҙәрҙе әле булһа ер йотм-ай икән? Көллө ғаләм белә: бөтә сиркәүҙәр харам, улар зил-зәбәр киләсәк; бөтә кафырҙар яҙыҡлы, үлгәс улар тамуҡта янасаҡ. Сиркәүҙәре- әйҙә суҡынып китһен, ә бына кафырҙарын ҡыҙғанам. Ул ҡыҙғаныу бына нимәнән башланды.

Былтыр яҙ Лекаревканан беҙҙең знаком Тимофей минең саҡлы ғына малайы Егорка менән беҙгә ҡунаҡҡа килде. Атайҙар ашап-эсергә ултырҙы, беҙ Егорка менән берәр күмәс тотоп, ҡураға сыҡтыҡ. Ул һап-һары сәсле, зәп-зәңгәр күҙле, шалҡан төҫлө ап-аҡ йөҙлө малай, һөйләшә белмәйбеҙ. Мин ҡайҙа барһам, ул шунда бара, мин нимә эшләһәм, ул шуны ҡабатлай. Баҡсаға инеп әйләндек, лапаҫ башына менеп төштөк, шунан килеп келә г янына өйөлгән бүрәнә өҫтөнә менеп ултырҙыҡ. Мин аяҡтарымды һелкетһәм, Егорка ла ҡушыла. Мин көрһөнөп ҡуйһам, ул да көрһөнә.

Атайҙар, ахырыһы, тиҙ үк ҡыҙып та алды. Минең атайым Тимофей алдында гел генә русса йырлаған була. Ә тегеһе беҙҙеңсә һупалап маташа. Башта Тимофейҙең дәрте тышҡа бәреп сыҡты:

Әйҙә, ёңгә, урманға,
Ҡурай еләк йыйырға...
Ҡурай еләк бал кеүек.
Беҙҙең еңгә йән ке-үе-ек...

Белеп торам. Был йырҙы ул табын ҡарап йөрөгән Оло инәйемә ярамһаҡланыбыраҡ һыҙҙырҙы. Хәҙер

көт тә тор — атайымдың ҡалын тауышы яңғыраясаҡ. Уның русса бары бер генә йыры бар. Ана, әйттереп тә ебәрҙе:

Баҙар большой,
Народ много,
Русский барышня идет,
Дай ему дорога.

Егорка менән беҙ бер-беребеҙгә ҡарашып алдыҡ. Уның шундай зәңгәр, шундай моңһоу күҙҙәре мине ҡапыл шомға һалды. Тамағыма ниндәйҙер төйөр килеп тығылды. Бынау тиклем саф, бынау тиклем яғымлы, бынау тиклем гонаһһыҙ күҙҙәрҙең хужаһы мәңге-мәңге тамуҡта янасаҡ. Дөрләп-дөрләп янасаҡ. Ошо ҡәҙәр ғазаптарҙан уны нисек кенә итеп ҡотҡарырға һуң? Нисек кенә?

-— Егорка! — тип иренһеҙҙән уны ҡосаҡлап алдым. Ул башта ҡурҡып китте, унан һуң үҙе лә мине нығ итеп күкрәгенә ҡысты. Был саҡ мин уны ҡот осҡос һәләкәттән ҡурсалайым һымаҡ тойолдо. Ихтимал, бындай ҡылығым өсөн үҙемә лә шул уҡ яза килер. Хәҙер һуң инде — кафыр балаһы минең ҡосағымда. Ни күрһәк тә, бергә күрербеҙ. Атайҙар инде бер-береһенә ҡушылып йырлай башланы. Беҙҙе улар бар тип тә белмәй. Бәлки, нәҡ ошо мәлдә береһе һары сәсле, береһе ҡара сәсле ике малай мәңге тамуҡта янырға хөкөм ителгәндер — һеҙҙең балаларығыҙ. Их, атайҙар! Йөрәгем ярылырҙай булып гөп-гөп тибә. Үҙемде лә, Егорканы ла йәлләйем.

...Нимә эшләп мин Егорканы хәтерләнем һуң әле? Ә... сиркәү күргәс.

Барабыҙ. Йөрәгем леп-леп тибә. Барабыҙ, барабыҙ, ҡала һаман бер ерҙә тора. Хатта аҙыраҡ артҡа ла сигенә һымаҡ. Ташҡа баҫып та булмай, аяҡты көйҙөрөп ала. Теҙелешеп юл ситенән киләбеҙ. Аҙымдар нығ уҡ һүлпәнәйҙе. Үлеп эске килә. Баяғы һамаҡтар, әйтерһең, бөтөнләй онотолдо. Алдан Насип атлай, уның артынан Хәмитйән, Хәмитйәндән һуң — Вәлетдин... Шәһиҙулла юлдың икенсе яғынан бер үҙе бара. Минең алдан ғына, айыу табандары менрн; арҡыры баҫып, Әнүәр һөйрәлә. Уның ике үксәһендә лә ҡамыш ҡалынлығы ярыҡтар. Был

аяҡтарҙың ҡышын быйма, яҙын-көҙөн итек күргәне юҡ. һирәк-һаяҡ сабата тейһә тейә шунда. Алтын таҡыялы нәҫеле тураһында ул дөрөҫөн әйттеме икән әллә фәстерҙеме? Булыр ҙа. Беҙ бөтәбеҙ ҙә күпертергә, ҡупайырға һәүәҫбеҙ.

— Их, һыуһын ҡанғансы һыу эсһәң ине!—тине Насип.

— Мин бер уртлауға ла риза булыр инем әле, валлаһи! — тип ант итергә кереште Вәлетдин.— Уртҡа һыйғансы уртлатһалар.

— һин, оңҡот, бала-саға ҡотортоп, шыңшыма!—тип ҡырт киҫте Шәһиҙулла.

Артабан һүҙ ҡуйыртыусы булманы.

Бер ҡатлы ағас йорттар теҙелеп киткән урам буйлап байтаҡ барғас, Ағиҙел күперенә килеп еттек. Ҡайһыбыҙ түбәтәйе, ҡайһыбыҙ кейеҙ эшләпәһе менән һоҫоп алып, туйғансы һыу эстек. һыуы йылымыс, сөсө ине. Шулай ҙа беҙгә йән инеп китте. Ҡалас байрамы, әлбиттә, күпер аръяғында, тау өҫтөндә, булырға тейеш. Байрам ул гел ҡалҡыу ерҙә уҙа торған. Был тирәлә әле унын ишараһы ла юҡ. Күпер аша сыҡҡас та әллә ни тамаша күренмәне. Йорттары былай бейек кенә, ҡапҡалары ла гел урыҫ ҡапҡа, урамдары беҙҙекенән тарыраҡ. Урам тулы йә атлы, йә йәйәүле кешеләр ары-бире уҙып тора. Бер-берененә сәләм дә бирмәйҙәр.

— Әһә, малайҙар, ана, «Ҡаластар» тип яҙылған. Ҡалас лавкаһы! — Быны арала иң шәп уҡый торғаныбыҙ Вәлетдин хәбәр итте. Мин әле ҡушып уҡый белмәйем, бары хәреф кенә төҫмөрләйем.

Урамдың теге яғындағы һары йорттоң ишек төбөнә килеп туҡтаныҡ.

— Егеттәр, ишек тотҡаһына тәүҙә мин тотонайым, минең ҡулым...— Шулай тип әйтеүе булды, эстән ишектең асылып китеүе булды, алға һонолоп барған Ҡотло ҡулдың башына шап итеп килеп тейеүе булды. Күп тә үтмәй, тегенең маңлайында һарғылт күгелйем оро ла бүлтәйеп сыҡты.

— Әссәләмәғәләйкүм! — тигән булды ул ишектән сыҡҡан кешегә.

— Күм, күм, — тип үсекләне лә теге кеше китеп барҙы.

Ишек ябылмаҫ борон беҙ эскә ағылдыҡ. Индек тә, сәләм бирергә лә онотоп, ҡатып ҡалдыҡ. Шүрлектәрҙә күперелеп торған ҡаластар теҙелгән, сәйҙәргә бөйәт-бөйәт игеп бәйләнгән төрлө-төрлө керәндилдәр эленгән, әрйәләрҙә ҡыҙыл билле перәниктәр мыжгып ята. Тағы әллә ниндәй хәлүәләр ҙә әлүәләр ауыҙға керергә тора. Бына ҡайҙа ул һыйҙың ояһы!

Беҙгә ҡарап, лавкасының күҙе дүрт булды. Беҙ ҙә өндәшмәйбеҙ, ул да һүҙ ҡушмай. Тәүҙә беҙҙән шөрләне, ахырыһы. Үлсәү табағында ятҡан ҙур ғына гер ташын үрелеп алды. Беҙ, әҙәп һаҡлап, ишек төбөндә генә торабыҙ. Ни эшләптер, ул ҡуҙғалмай, сырайы ла һытыҡ күренә. Ҡайһы еребеҙҙелер килештермәне буғай. Улай әҙәм оҡшатмаҫ еребеҙ юҡ кеүек тә...

Әллә күпме шулай торғас, ҡалын йылтыр ирендәрен саҡ ҡына ҡыймылдатып, теге беҙҙән һорай һалды:

— Нимә кәрәк һеҙгә, йолҡоштар?

— Беҙ йолҡоштар түгел, иптәш, беҙ ауылдан килдек! — тине Шәһиҙулла, үҙебеҙҙең абруйҙы юғары тотоп.

— Батша һарайынан килмәгәнегеҙҙе күреп торам, иптәш йолҡоштар, ул тамаҡ төбө менән ҡых-ҡых көлөргә кереште, уның йәйенке итләс битенә бешкән сөгөлдөр төҫө инде. — Шулай ҙа ни тип беҙҙең тарафтарға рәхим иттегеҙ? — Усындағы герҙе һикертеп алДы.

— Беҙ ни, ҡалас байрамы ҡайҙа була икән тип, һорамаҡсы инек, тик... — Вәлетдиндең әйтеп бөтөрөүен көтмәй, башлыҡ уның еңенән тартты.

— Ҡалас байрамы? Ә... ҡалас байрамымы? — Сөгөлдөр бит тағы йәйелеп китте. — Ҡалас байрамы ул кеҫәлә була, бына бында. — Ул, ҡулын кеҫәһенә тығып, көмөш аҡса сылтыратты.

Беҙ ҙә, һүҙ ҡуйышҡандай, бөтәбеҙ бер юлы кеҫәләребеҙгә тығылдыҡ. Унда байрамдың әҫәре лә юҡ ине... Кәштәләрҙә теҙелеп торған ҡаластар ҙа, сәйҙәге керәндилдәр ҙә, әрйәләрҙәге перәниктәр ҙә, әлүә-хәлүәләр ҙә тәм яғынан да, йәм яғынан да баяғыға ҡарағанда күп ҡайтыш тойолдо миңә. Иҫәнләшмәй ингәйнек был йортҡа, хушлашмай сы-

ғып та киттек. Ләкин быға ҡарап ҡына беҙ әле өмөтөбөҙҙө өҙмәнек. Ары киттек.

— Беҙ ҙә инде — йыйын иҫәүән!—тине Насип. — Ҡалас байрамы бит ул урыҫтыҡы, ә беҙ мосолманға килеп ҡаптыҡ.

— Үҙ мосолманыбыҙ, ә ҡалайыраҡ мыҫҡыл итә, йолҡоштан ғына һалдыра! — тип сәпсәләнде Вәл етди н.

— Мосолмандың ҡаруны уның кафырҙан да яман була. Шуның өсөн анау ҡарун бәйете сыҡҡан да, — тип төшөндөрҙө Әсғәт.

Ҡарун мәлғүн бар ине.
Ахырҙа уны ер йотто...

Быны ла йотор әле бер саҡ.

Беҙ һаман ҡала өҫтөнә, юғарыға, күтәрелдек. Ҡалас лавкалары эргәһенә килеп, оҙаҡ-оҙаҡ баҫып торҙоҡ, урыҫ ҡапҡалы бейек-бейек йорттар тураһында туҡталып, тәҙрәләргә ҡарап ҡаттыҡ, яңы бешкән икмәк еҫе килгән өйҙәр тирәһендә уралдыҡ, әммә беҙҙе берәү ҙә иҫәпкә алманы, берәү ҙә саҡырманы. Ҡалас өләшә торған урыҫтар ҡайҙа икән? Барҙыр бит инде улар. Булмау мөмкин түгел. Быныһы башҡа һыймай: шул тиклем ерҙән кил дә, һеләгәй ағыҙып йөрөй-йөрөй, бушлай ҡайтып кит, имеш?!

Минең нимә уйлағанды һиҙгәндәй, Хәмитйән әйтә һалды:

— Йә беҙ эҙләй белмәйбеҙҙер әле... Кешенән һорашырға кәрәк.

— Байрам һиңә аҙашҡан быҙаумы ни — эҙләп табырға? Байрам ул үҙе: «Мин бында!» — тип, нур сәсеп, алыҫтан күренеп, саҡырып торорға тейеш. , Былай булғас, туйҙан һуң дөмбөрөнә генә килгәнбеҙ, байрам бөткән. Вәссәләм! — тип мөһөр һуҡты башлыҡ.

Шулай тип әйтеүе булды, минең бөтә быуындарым таралды ла төштө. Аслыҡ та, һыуһын да — икеһе бер юлы быуып алды мине. Етмәһә ҡояш, күлдәк аша үтеп, тирене генә түгел, һөйәкте өтөп бара. Бүтәндәрҙең дә хәл шәптән түгел ине.

Тәҙрә ҡапҡастары ябыҡ бер өйҙөң болдорона теҙелешеп ултырҙыҡ. 1

— Давай минең нәҫелде табабыҙ, — тине Әнүәр, — пожар каланчаһы ҡайҙа икәнен беләбеҙ ҙә... Бер самауыр сәйен йәлләмәҫ әле.

Пожар каланчаһын тиҙ һорашып таптыҡ. Тик уның түбәһендә башына алтын таж кейеп ултырған әҙәм генә күҙгә салынмай. Муйындарҙы һуҙып, әллә ни саҡлы ҡарап торҙоҡ, Әнүәрҙең нәҫеле тәки күренмәне.

— Әллә йығылып төшөп имгәндеме икән? — тип аптырай Әнүәр.— һи-һи, Йәнбирҙе ағай, һин ҡайҙа?

— Йәнбирҙегә юнь бирер, беҙгә емде кем бирер?— тип Әсғәт шаяртмаҡ булды. Тик беҙҙә ирмәк һүҙ ҡайғыһы юҡ ине. Берәү ҙә көлмәне.

— Йәнбирҙе ағай! Был — мин, Әнүәр! Ауылдан килдем!—тип ҡабатланы теге.

— Ярылырҙай булып, ниңә һөрән һалаһың? Марш! Марш бынан — йыйын эшлекһеҙ!! — Ҙур ҡыҙыл ҡапҡанан килеп сыҡҡан мыйыҡлы бер ағай шулай тип беҙҙе ҡыуып ебәрҙе. Ҡалай эре сирттерә, еҙ элмәкле киң ҡайыш быуҙым тигәс тә.

Нәҫел-нәсәп эҙләү ошоноң менән тамам тигәндә, Вәлетдин михылданы:

— Бер уңмаһаҡ, бер уңырбыҙ, малайҙар, әйҙәгеҙ ҡуш манаралы таш мәсеттә мейес яғып тороусы минең ҡоҙаға барабыҙ. Күсем ҡоҙаның яҡын ғына ҡоҙаһы ул.

- Бынау селлә ваҡытында мейес яғалармы ни? Ул ҡоҙаң әллә ҡасан ауылына ҡайтып киткәндер инде, — тип күңелгә шик һалды Насип.

— Ҡала мәсетен йәйен-ҡышын яғалар! —тип күҙгә терәп алдашты Вәлетдин.

— Алдайһың, оңҡот!

— Биллаһи! Мейес яҡмаһаң, унда сиркәү пәрейҙәре эйәләшә, — тип беҙҙе шунда уҡ һыртҡа әйләндерел һалды Вәлетдин. — Ана, ҡайҙа ҡарама, сиркәү бит.

Ҡаланы байтаҡ ҡыҙырып йөрөгәс, ҡуш манаралы таш мәсет янына ла килеп сыҡтыҡ. Тик мәсеттең ҡапҡаһы бикле ине. Шулай ҙа йәнәшәләге ҡапҡаһыҙ ихата эсендә төптә үк торған бәләкәс кенә тәпәш өйгә һуғылырға булдыҡ. Урам яҡтағы ҙур йортҡа ҡағылырға йөрәк етмәне.

Өйгә тәүҙә Вәлетдин менән мине индереп ебәрҙеләр. Ингәс тә күҙгә салынған нәмәләр шул булды: көнгә ҡараған тар ғына ике тәҙрәнән ике буй булып, туҙан ағыла (ғәжәп, нисек быяла аша үтеп инә икән ул?); ҡаҡ иҙәндә бер бала имгәкләп йөрөй, икенсеһе түшендә шыуа; һике өҫтөндә оло ғына апай яманып ултыра, ишек төбөндәге‘-ҡараңғы мөйөштә ир кеше йоҡлап ята.

— Иҫәнмеһегеҙ! — тинек беҙ бер-бер артлы. Теге апай күтәрелеп ҡарамай ғына:

— Арыубыҙ әле, — тигән булды. Шунан ул аҡрын ғына башын беҙгә борҙо. — Әлеге өйәҙ хәйерселәре! Иртә тимәйҙәр, кис тимәйҙәр, йәй тимәйҙәр, ҡыш'тимәйҙәр — киләләр ҙә керәләр, киләләр ҙә керәләр!—тип тоҡанып китте ул.—.Теңкәгә тейҙеләр бит инде! Тапҡандар'юлаусы йорто!

— Беҙ хәйерсе түгел, апай, беҙ... — тинем дә мин тотлоғоп ҡалдым.

— Хәйерсе булмаһағыҙ ҙа барыбер... хәйерсе инде. Байы уның беҙгә фатир төшәме ни? — тип ҡул һелтәне ул.

— Беҙҙең Күсем ҡоҙаның яҡын ғына ҡоҙаһы ошо мәсеттә йыл әйләнәһенә мейес яға... — тине Вәлетдин этенә-төртөнә. Апай аҙыраҡ йәнләнеп китте.

— Күсемдекеме әллә һеҙ? Иҫән-аманмы, күсемдәр?

— Юҡ, беҙ Келәштекеләр. Беҙ ошонда мейес яғыусы ҡоҙаның Күсемдәге ҡоҙаһының яҡын ғына ҡоҙаһы булабыҙ. Ғизелниса ҡартнәйҙең ейәне мин.

— Әллә тағы, — тип һүрелде апай, — ундай ҡоҙағыйҙы бер ҙә генә белмәйемсе. Эй, Ишбирҙе, ана, ҡоҙаларың килгән! — «Ишбирҙе» тигәне анау мөйөштә яткан кеше булып сыҡты.

— Ә? Ҡоҙалар? Хуш килдегеҙ, ҡоҙалар! — тип теге һикереп үк торҙо. Йоҡоһо ла сығып бөтмәгән күҙҙәрен ыуа-ыуа ҡабатланы.— Хуш килдегеҙ, түрҙән уҙығыҙ, ҡоҙалар! Бик ваҡытлы йөрөйһөгөҙ, ай, афарин!

Ул тамам уянып бөттө, ҡарашы менән өйҙө байҡап сыҡты.

— Ҡоҙалар ҡайҙа? фу, йәнә һаташтым, ахыры. Мисәп-мисәп яҡшы аттар еккән ҡоҙалар, донъяны

дер һелкетеп, ауылды бер итеп, ҡыңғырауҙар ҡыңғыратып килә ята, имеш, тимен. Күрше-күлән көнләшеүҙән ауыҙын асҡан да ситәнгә һөйәлеп ҡатҡан, имеш, тимен. Их, ҡоҙалар, ҡайҙа булдығыҙ?

— Анасы ҡоҙаларың, — тип апай беҙгә ымлап күрһәтте.

— һеҙме ни ҡоҙалар?! — тип аптыраны Ишбирҙе.

— Беҙ... Мин... Мин үҙем һинең Күсемдәге яҡын ғына ҡоҙандың ҡоҙаһы булам, — тине Вәлетдин, тынҡышлығын белдермәҫкә тырышып. — Минең ҡартнәйем, Ғизелниса ҡоҙағыйың, һеҙҙең бөтә өй әсегеҙгә күптин-күп, суҡтин-суҡ сәләм ебәрҙе...

— О минең Ғизелниса ҡоҙағыйым дан бисә ул! Баҫҡан ерендә осҡон уйната, ул йыр-бейеүгә тиһеңме — хайран тамаша, тәңкәләренең бер сылтырауы йөрәктәрҙе елкетә, — тип Ишбирҙе шаштырып кемделер маҡтап алды. — Рәхмәт ҡоҙағыйға! Сәләмдәрен ҡабул ҡылдыҡ.

«Ниндәй Ғизелнисаны һөйләй икән был?» — тип аптырап торғанда, ул миңә төбәп өндәште.

— Ғшн дә ҡоҙамы?

— Мин дә ҡоҙа, — тинем, ҡапыл ҡаушап киттем, әммә ебеп төшмәнем.-—Тышта тағы биш ҡоҙаң ҡалды әле, инергә ҡыймайынса...

Ҡаҡса яңаҡлы, оҙон буйлы, таҡыр башлы, нескә генә мыйыҡлы был ағай, ишеккә килеп, уны шар асып ебәрҙе.

— Fiafi, һай, һай, ҡоҙалар! Өйгә рәхим итегеҙ! Тартынмағыҙ!—тине ул.

Малайҙар ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына өйгә инделәр. Апай иҙәндәге бәпестәрҙе һикегә алып ултыртты.

— Хуш! Иҫкә төшөрөп, һанға һуғып, килеп сығыуығыҙ бик хуп, бик мәслихәт, ҡоҙалар, — тине Ишбирҙе. — Әсәй, самауырыңды ҡуй, сәйеңде әҙерлә!

Шулай тип әйтеүе булды, эстән ниндәйҙер бер рәхәт йылы ағым уҙып та китте.

-— Самауырын ҡуйыр ҙа инем, улым, сәйе лә, шәкәре лә юҡ. Икмәген дә килен кисен генә алып ҡайтасаҡ. Ҡунаҡтар алдында оятка ҡалдыҡсы, былай булғас.

— Оноң булһа, кәлсә бешер, ярмаң булһа, өйрә бүрттер.

Был юлы апай бөтөнләй яуап бирмәне.

— Нимәң бар һуң, әсәй?

— Бүрттерергә ҡуйған борсаҡ ҡына бар...

— Борсаҡ! — тип ҡыуанды Ишбирҙе. — Бүрткән борсаҡ ни ул — нәгеҙ ҡоҙалар һыйы инде. Дан аш ул! Ризыҡты ҡабул ҡылырһығыҙҙыр бит!

— Ҡылырбыҙ! Ҡылырбыҙ! — тиештек беҙ. Абруй һаҡлайым тип, аш талымлап торор заман түгел ине.

Иҙән уртаһына апай ҡатып бөткән һары ашъяулыҡ йәйҙе, шуның уртаһына ҙур ғына ҡоштабаҡ бүрткән борсаҡ ултыртты. Борсағы ап-аҡ, эре ине. Ь1сынлап та, бындай эре борсаҡ теләһә ҡасан эләкмәй ул.

— Әйҙә ултырышығыҙ, етешегеҙ! Барыбер бөтәгеҙгә лә ҡашыҡ сыҡмаç, ҡул менән генә һоғоноғоҙ!— тип ҡыçтарға кереште хужа. Беҙ, ҡоштабаҡты тирәләй тубыҡланып ултырҙыҡ та, ашыҡмай ғына услап, борсаҡты ауыҙҙарға ташырға керештек. Ҡабаланмаһаҡ та, эш ырамлы бара. Ошондай тәмле борсаҡты ғүмерҙә лә ашаған юҡ ине. Бына ниндәй була икән ул «ҡоҙалар һыйы» — телеңде йоторһоң!

Ҡоштабаҡтың төбөн ялтыратып ҡуйыуға, алдыбыҙға бер биҙрә һалҡын һыу ҙа килеп ултырҙы. Ситенә ҙур ғына сүмес тә эленгән.

— һыйлағанда һыу эс. тигәндәр боронғолар, — тип аңлатты Ишбирҙе, — улар белмәй әйтмәç.

һыуҙы ла төбөндә генә ҡалдырҙыҡ.

—- Йә, хәҙер доға ҡылайыҡ, — тип, үҙе табынға ултырмаһа ла, битен һыйпап ҡуйҙы хужа. Беҙ ҙә йоланы башҡарҙыҡ.

— Ҡала күрергә килдегеҙме, ҡоҙалар?—тип һораша башланы Ишбирҙе, табын һуңындағы әңгәмә ғәҙәтен һаҡлап.

— Эйе, ағай, ҡоҙа... — тип ихласһыҙ ғына яуапланы Шәһиҙулла.

— Оҡшанымы һуң?

— Әллә инде... Йорттары матур, ҡоймалары бейек, — тине шул уҡ башлыҡ, — тик кешеләре үтә ҡабалан йөрөй.

— Ярай, килеп һәйбәт иткәнһегеҙ, донъя күреп үҫергә кәрәк шулай. Ҡалала ла бөтә әҙәм гел ҡалас ҡына ашап тормай. Икмәге лә юҡ саҡ була, ғәйеп итеп китмәгеҙ... ҡаланы.

Был өйҙә Вәлетдин, һүҙгә ҡушылып бармаһа ла, беҙгә ҡарағанда үҙен иркенерәк тотто. Урындан да ул беренсе булып ҡуҙғалды. Ни тиһәң дә — төп ҡоҙа.

— Һый-хөрмәтегеҙ, яҡты сырайығыҙ өсөн рәхмәт, ҡоҙа, рәхмәт, ҡоҙағый, — тине ул, өлкәндәргә оҡшатып, — ғәйепләп ҡалмағыҙ. Беҙ ауылға ыңғайлайыҡ инде. — Бөтәбеҙ ҙә пыр итеп урындан торҙоҡ.

— Ярай инде улай булғас. Ҡайтҡас, ҡоҙағыйға сәләм тапшыр беҙҙән, үҙе ҡунаҡ булып килһен, — тине Ишбирҙенең әсәһе. — Ну, шул фәҡирлек! Биреп ебәрергә күстәнәсем дә юҡ, исмаһам...

— Яҡшы һүҙ үҙе күстәнәс ул, әсәй, — тип йыуатты улы.

Беҙ ишек төбөнә килеп өйкәлештек.

— Ҡайтыр юлығыҙҙы онотманығыҙмы? — тип һораны Ишбирҙе ҡоҙа.

— Онотманыҡ, — тине Әсғәт. Ул эт кеүек. Әллә ниндәй ҡара урманда булмайыҡ, бер үткән еренән, һис тә аҙашмай, кире әйләнеп ҡайта белә. Үҙ әҙенең еҫен тоя ул. Ә мин әрем араһында ла аҙашам. Шундай аңра мин.

Ҡат-ҡат рәхмәттәр әйтеп, беҙ был сәйер, ҡунаҡсыл өйҙән сығып киттек. Кемгә кемдең ҡоҙаһы булып сыҡты һуң әле теге Ишбирҙе? Ҡоҙамы икән әле?

— Үтә бай тормаһалар ҙа, ҡоҙаң йомарт икән, малай,— тине, тышҡа сыҡҡас, Шәһиҙулла Вәлетдингә. — Йәнен ярып бирергә әҙер тора.

— Сәйҙәре булһа, сәй ҙә эсерер ине әле, валлаһи... Күтәреп үк алыр, тинемме мин һеҙгә... — Маһайыуҙан Вәлетдиндең тыңҡышлығы кәмей төштө хатта. Маһайырға хаҡы ла бар шул: кем ҡоҙаһы тиһең, уның ҡоҙаһы һыйланы беҙҙе.

Был шыҡһыҙ ҡаланан беҙ ярайһы уҡ биҙеп ҡайтып киттек. Ҡайтыр юл тағы ла оҙонораҡ, тағы ла йонсотҡосораҡ булды. Әммә берәү ҙә һуҡран-

— Ярай, килеп һәйбәт иткәнһегеҙ, донъя күреп үҫергә кәрәк шулай. Ҡалала ла бөтә әҙәм гел ҡалас ҡына ашап тормай. Икмәге лә юҡ саҡ була, ғәйеп итеп китмәгеҙ... ҡаланы.

Был өйҙә Вәлетдин, һүҙгә ҡушылып бармаһа ла, беҙгә ҡарағанда үҙен иркенерәк тотто. Урындан да ул беренсе булып ҡуҙғалды. Ни тиһәң дә — төп ҡоҙа.

— Һый-хөрмәтегеҙ, яҡты сырайығыҙ өсөн рәхмәт, ҡоҙа, рәхмәт, ҡоҙағый, — тине ул, өлкәндәргә оҡшатып, — ғәйепләп ҡалмағыҙ. Беҙ ауылға ынғайлайыҡ инде. — Бөтәбеҙ ҙә пыр итеп урындан торҙоҡ.

— Ярай инде улай булғас. Ҡайтҡас, ҡоҙағыйға сәләм тапшыр беҙҙән, үҙе ҡунаҡ булып килһен, — тине Ишбирҙенең әсәһе. — Ну, шул фәҡирлек! Биреп ебәрергә күстәнәсем дә юҡ, исмаһам...

— Яҡшы һүҙ үҙе күстәнәс ул, әсәй, —- тип йыуатты улы.

Беҙ ишек төбөнә килеп өйкәлештек.

— Ҡайтыр юлығыҙҙы онотманығыҙмы? — тип һораны Ишбирҙе ҡоҙа.

— Онотманыҡ, — тине Әсғәт. Ул эт кеүек. Әллә ниндәй ҡара урманда булмайыҡ, бер үткән еренән, һис тә аҙашмай, кире әйләнеп ҡайта белә. Үҙ әҙенең еҫен тоя ул. Ә мин әрем араһында ла аҙашам. Шундай аңра мин.

Ҡат-ҡат рәхмәттәр әйтеп, беҙ был сәйер, ҡунаҡсыл өйҙән сығып киттек. Кемгә кемдең ҡоҙаһы булып сыҡты һуң әле теге Ишбирҙе? Ҡоҙамы икән әле?

— Үтә бай тормаһалар ҙа, ҡоҙаң йомарт икән, малай, — тине, тышҡа сыҡҡас, Шәһиҙулла Вәлетдингә. — Йәнен ярып бирергә әҙер тора.

— Сәйҙәре булһа, сәй ҙә эсерер ине әле, валлаһи... Күтәреп үк алыр, тинемме мин һеҙгә...— Маһайыуҙан Вәлетдиндең тынҡышлығы кәмей төштө хатта. Маһайырға хаҡы ла бар шул: кем ҡоҙаһы тиһең, уның ҡоҙаһы һыйланы беҙҙе.

Был шыҡһыҙ ҡаланан беҙ ярайһы уҡ биҙеп ҡайтып киттек. Ҡайтыр юл тағы ла оҙонораҡ, тағы ла йонсотҡосораҡ булды. Әммә берәү ҙә һуҡран-

Башта тәнем ҡалала булһа ла, йәнем ауылым ҡырҙарында аҙашып йөрөнө. Бара торғас, ул да таш диуарҙар эсендә төйәк тапты. Кешенең күңеле ҡайҙа һуңғы төйәген таба, шул ер — уның рухи Ватаны. Өфө минең йәнемдең ояһы, рухымдың Ватаны булды.

# ЙОМОРО
# ТАЛИП

— Анау кәзә тиреләрен Талипкә атҡараһы ине. Үҙе, ни эшләптер, күрёнмәй,— тигән булды атайым, иртәнге сәйҙе эскәндә. Үҙе, ат егеп, ҡайҙалыр сығып китте. Ағайҙарым менән Кесе инәйем алыҫ баҫыуҙа, ҡунып, тары ура. Шулай булғас, ул кәзә тиреләрен кем илтһен? Үҙҙәре бармаҫтар ҙа инде улар. Атайымдың шундай ирмәк ҡылығы бар: ул йомошто атап ҡына ҡушмаҫ. «Тегене тегеләй итергә ине, быны былай итергә ине», — тигән булыр ҙа һөйләнер. Таяҡ башы кемгә тейгәнен үҙең төшөн шунан. Анау көндө киске аштан һуң, ағайымдарға төбәп, атайым шундай хикәйәт һөйләне.

...Имеш, борон-борон заманда бер бабай буйға еткән улына кәләш әйттермәк булған икән. Уҫлаптай улын бер көнө ҡыҙҙар һыуға йөрөй торған һуҡмаҡҡа алып сыҡҡан, ти, был. Бер төркөм ҡыҙҙар яҡынлашып килеүен күреп ҡалған да ҡарт әлеге егетте ҡамсы менән ҡыйнарға керешкән, ти. Ҡыҙҙарҙың береһе һорай икән:

— Улыңды ни өсөн туҡмайһың, бабай?

— Әйткәс тә, белә, ҡушҡас та, эшләй. Шуның өсөн туҡмайым, — тигән бабай. Ҡыҙҙар шарҡылдашып көлөшкәндәр ҙә:

— һи, иҫәүән ҡарт... Бынамын тигән улын туҡмай, — тип уҙып киткәндәр.

Быларҙан байтаҡ артта уйланып ҡына тағы бер ҡыҙ килә икән. Бабай йәнә улын туҡмарға тотона.

— Ни өсөн туҡмайһың улыңды, бабай? — тип һорай быныһы ла.

— Әйткәс тә, белә, ҡушҡас та, эшләй. Шуның өсөн туҡмайым, — тигән ҡарт.

—■ Әйҙә, ныҒыраҡ, үҙәгҫнә үтерлек итеберәк яр, бабай. Улыңдың инде әйтмәйенсә лә белер, ҡушма-

йынса ла эшләр сағы еткән. — Шулай тигән дә ҡыҙ уҙып киткән. Ошо көндө үк бабай был ҡыҙға яусылар ебәргән.

Атайым һуңғы һүҙен һуҙа биреберәк әйтте лә тынып ҡалды. Өлкән ағайымдың ҡолаҡтары тырпайып китте:

— Ә яусыларға нимә тигән ул ҡыҙ? — тип һорай уҡ һалды.— Ризалыҡ биргәнме?

Атайым юрамал ғына туҡталған икән. Шунда уҡ һүҙен ялғап китте:

— Яусылар ҡайтып бына шундай хәбәр һалғандар: «Ҡыҙ ниндәйҙер килделе-киттеле булып сыҡты, һөйләгән һүҙе, ҡылған ҡылығы лөғәткә һыймай. Ырыу-заты ла шик-шөбһәлегә оҡшай. Беҙ ниәтебеҙҙе ниәтләмәй ҡайтып килдек», — тигәндәр. Шулай ҙа әлеге ҡарт иң өлкән яусыға ишеткән-күргәнен бәйнә-бәйнә һөйләп бирергә ҡушҡан. «Беҙ барып ингәндә, өйҙә ҡыҙ яңғыҙы ғына ине...» — тип алып киткән өлкән яусы.

— Атайың ҡайҙа? — тип һорауға ҡыҙ: «Дуçтан дошман яһарға китте»,—тигән яуапты ҡайтарҙы.

— Әсәйең ҡайҙа?—тигәс: «Бер кешене ике итергә китте», — тине.

Арлы-бирле итеүгә, сумарлы һурпа һоçоп, ҙур табаҡ менән беҙҙең алға ултыртты.

Ашап-эсеп ултыра торғас, өй бүрәнәләренә күҙебеҙ төштө. Яман эре бүрәнәнән һалынған икән өйҙәре.

— Был тиклем йыуан бүрәнәләрҙе урмандан ташыуы ҡыйын булғандыр инде, — тиештек беҙ. — Бер юлы нисәшәрҙе тейәй инегеҙ? «Аттар арыҡ, хәлһеҙ саҡта өсәрҙе, хатта дүртәрҙе һала инек, һимерә биргәс, икешәрҙе генә һала башланыҡ, тамам һимереп алғас, берәүһен дә ярты юлда төшөрөп ҡалдыра торған булдылар»,— тип аңлатты аңра ҡыҙ. Бына шундай ни аҡыллы, ни тиле яуаптар алып ҡайттыҡ, — тигән өлкән яусы, — ҡалғанына үҙең хөкөм сығар.

— Их һеҙ, бешмәгән башҡоҙалар! — тигән быға ҡарт, баяғы «әйткәс тә белә» торған егеттең атаһы. — һүҙҙең һөйәге була, һөйәк эсендә елеге була. һеҙ шуның һөйәген генә ялап ҡайтҡанһығыҙ ҙабаһа. Былай булғас, фәһемде биргән һеҙгә ҡыҙ!...

Атаһы унының дуҫы алып торған бурысты һорарға, әсәһе тыуа яткан бәпесте ҡабул итергә киткән. Бүрәнә тигәне лә төптө бүрәнә түгел, һеҙ ашаған сумар ул. Асыраҡ саҡта һеҙ, оңҡотланып, ҡашыҡтарығыҙға, моғайын, бер юлы өсәр-дүртәр сумар һоҫҡанһығыҙҙыр. Туя килгән һайын, кәмерәк эләктерә барғанһығыҙҙыр. Аҙаҡка табан берҙе лә төшөрөп ҡалдырғанһығыҙҙыр. Шулай булдымы?

— Шулай булды, — тиешкәндәр ҙә яусылар өйҙәренә ҡайтып киткәндәр.

Икенсе көндө ҡыҙ өйөнә ҡарт үҙе барып, бөтәһен дә яйлап, вәғәҙәләшеп ҡайтҡан. Бына Мортааағa ла шундайыраҡ кәләш кәрәк ине. Ул да бит әйткәс тә беләә... Сәлихе лә ағаһынан ҡалышмай, ҡушҡас та эшләй...

Атайым әңгәмәһен шулай тип ослап ҡуйҙы.

Ағайымдар тын да алмай тыңланы был хикәйәтте. Улар ғына түгел, атайымдың кинәйәһен мин дә аңланым. Беҙҙең башҡа ла сүбек тултырмағандар...

...Кәзә тиреһен кем илтергә тейеш булып сыға? Оло инәйем менән беҙ икәү, әлбиттә.

Бәләкәс кенә буйлы, төптән йыуан Йоморо Талип Ябалаҡ урамында тора. Үҙе ифрат йылдам ул. Йыл әйләнәһенә ул йылтырап торған ҡара тышлы меҫкен бүрек кейеп йөрөй. Көҙөн шул бүркенә сепрәктән ҡолаҡсындар тегеп ҡуя, яҙын уларҙы һүтеп ташлай. Талиптең кәпәс һалғанын күргән кеше юҡ. Хатта мунса кергәндә лә кәпәс кейеп керә, имеш, тип һөйләйҙәр. Нимә бар икән шул кәпәс аҫтында? Ҡатынын ул ҡайҙалыр байҙа торған еренән сыуаш ауылынан алып ҡайтҡан. Имеш, кәләше: «Ниңә һин, Талипка, кәпәсеңде бер ҙә һалмайһың?»—тип һорағас: «Беҙҙә, типтәрҙә, йола шундай»,— тип яуаплаған икән, ти, был. Шулай ҙа кешеләрҙең һиҙемләүенә ҡарағанда Йоморо Талип йә мөгөҙлө, йә таҙ булырға тейеш.

Мин бәләһенән инде ул, өйҙән-өйгә йөрөп, ваҡтөйәк мал, эбер-себер йәнлек, эт-бесәй тиреһе йыя. Ат-Һыйыр, айыу-бүре, болан-мышы тиреһе уға тәтемәй. Улары туп-тура кооперативкә китә. Малайҙар менән яҙын йомран, ирлән, көшөл тотһаҡ йәки ҡышын ҡапҡанға йәтсә, аҫ, эләктерһәк, тиреһен һы-



60-сы биткә. «Анау зәңгәрлек, — ти Әсғәт, — ул күктән ҡойола. Көнө буйы күк йөҙө ҡыҙҙы ла кискә табан, унан ҡубып, шулай зәңгәр туҙан һибелә».

ҙырабыҙ ҙа Талипкә югерәбеҙ. Бер нисә баҡыр, ара-тирә хатта берәй көмөш тә эләктереп ҡайтабыҙ. Уның аты ла, һыйыры ла, бүтән мал-тыуары ла юҡ. Өй тулы бала-сағаһы ла ошо кәсебе генә бар.

Оло инойем ике кәзә тиреһен төрөп ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырҙы ла, Йоморо Талиптәргә киттек. Кесе инәйем менән икәү берәй ергә бара башлаһаҡ, барып етә алмай ыҙа сигәбеҙ. Юлда осраған туған-тыумаса, ҡоҙа-ҡоҙаса менән һөйләшеп, уның һүҙе бөтмәй. Ә Оло инәйем: «Иҫән генәме, ҡәрендәш? һәйбәт кенәме, ҡоҙағый?» — ти ҙә, туҡталып та тормай, атлай бирә. Хикмәт инде, уның менән бар-ғанда, ауылдың хатта иң мыжыҡ, иң бәйләнсек эттәре лә өрөп сыҡмай.

Йоморо Талип балсыҡ аласыҡ алдында, теҙенә бәйләп, сабата ҡайтарып ултыра ине. Беҙҙе күргәс тә ул үрә башлаған сабатаһын сисеп ырғытты ла һикереп торҙо:

— һи-и-и, еңгә, әйҙә, рәхим ит!—тине ул.— Өйгә уҙ тиер инем, өй тулы бала-саға, ултырыр-баҫыр урын юҡ. Ошонда ғына ултырып доға ҡыла-йыҡ. — Аласыҡ алдындағы түмәр өҫтөнә, ҡайҙандыр килтереп, иҫке балаҫ киҫәге йәйҙе. Ултырышып доға. ҡылдылар.

— Йә, Талип, йорт-ер аманмы, күңел-хәтер именме?

— Мал-тыуар юҡ — тыныс, бала-саға иҫән — шөкөр. Күңел тигәнең инде, еңгә, төрлөсә була. Сабый бала йоҡоһондағы кеүегерәк йәшәйем бит мин: бер сәбәпһеҙ көлөп алам, көтмәгәндә илап ебәрәм.

— Бәндә күңеле түгел, ана, тәңре күңеле күк тә гел үҙгәреп тора, —тине лә Оло инәйем эйәген күккә сөйөп ҡуйҙы.

Талип, урынынан тороп, йәнә ары-бире һуғылды. Үҙе бер туҡтауһыҙ һөйләнә:

— Әле бына шуны уйлап ултырҙым, еңгә, атһыҙ кешенең ярты мөлкәте сабатаға китә. Күпме сабата туҙҙыра йәйәүле бахыр. Атлы кеше арбаһына бер менеп ултырҙымы — бара бирә. Үтер юлы үтелә, сабатаһы бөп-бөтөн. Әгәр мин йәйәү йөрөгән аралар-ҙы бергә ҡушһаң, биш тапҡыр Мәккәгә барып ҡайт-ҡан булыр инем.

— Мәккәһенә лә барырһың әле, насип булһа...

— Һи-и-и, еңгә, унда бит оло гонаһ ҡылған кешеләр генә йөрөй. Мәккәгә үк барып, ярлыҡауҙар ялбарырлыҡ ни яҙыҡтарым бар минең? Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, еңгә, мин ожмахҡа туп-тура барып инер кешемен. Ни өсөн тиһәң, шуның өсөн: мин бер кафырҙы — үҙемдең бисәмде әйтәм — ислам диненә күндерҙем, өҫтәүенә, ул итәк тулы .мосолман балалары тапты.

Оло инәйем сәйер генә йылмайып ҡуйҙы.

— Уны мөслимә итеүең дөрөҫ. Талип, — тине ул. — Әммә һин ул йән эйәһен үҙ иманынан, үҙ аллаһынан айырғанһың, быныһы өсөн яҙыҡ булмаҫмы? Һәр бәндә бары үҙ тәңренә генә табынырға тейеш...

— Был тиклеменә үк минең баш етмәй, еңгә, — тине Йоморо Талип. Дөрөҫөн әйтә ул. Минең дә баш етмәй быға.

— Бынау тиреләрҙе алып ҡалһаңсы, Талип,— тип Оло инәйем йомошон йомошларға ашыҡты.

— Минең кәсебемде һанға һанап, оло башыңды кесе итеп йөрөүеңә рәхмәт инде, еңгә, мәгәр бит әле һеҙгә элек түләп бөтөрмәгән бурысым да бар ине, яҙын алған анау өс бот тарыны әйтәм. Былары өсөн дә сығарып ҡына бирер капитал юҡ. Ни ҡылайым һуң: аҡса ла юҡ, намыҫ та бар... — тип көрһөндө хужа.

— Булыр әле. Һиндәге — илдәге, ҡасмаҫ, иҫән булһаҡ, бәхилләшербеҙ, — тип урынынан ҡуҙғала башланы Оло инәйем.

— Ҡара әле, еңгә, минең бик шәп самокат тәгәрмәсе бар, мал-тыуарлы йортҡа, бәлки, берәй ғәмәлгә ярап ҡуйыр, — тип ул аласыҡтан һыңар самокат тәгәрмәсе алып сыҡты. — Бына тимерҙәре ҡалайыраҡ ялтырап тора. Ҡала юлынан табып ҡайтҡайным.

Оло инәйем. Талиптең арҡаһынан ҡаҡты:

- Хафаланма, туғанҡайым, бурыслы булып ҡалмаҫһың, һинең ҡураға ла берәй заман ҡог керер әле.

— Һи-и, еңгә, мин сереп байыясаҡмын, тик көнө бөгөн түгел! Шулай ҙа, еңгә, хәҙергеһе ауыр бына. Онота яҙғанмын да: минең тағы бер затлы нәмәм бар. Хәҙрәттәр генә тәгәрәт ала торған еҙ ҡомған

ул. Беҙҙең ишеләргә төҫ түгел ундай зиннәтле әйбер, ал шуны. — Ул йәнә аласыҡҡа уҡталды. Оло инәйем ҡул ишараһы менән уны туҡтатты.

Ә самокат тәгәрмәсе хайран шәп ине. Мин уға ҡараным да ҡаттым. Уны урамдың юғары осонан тәгәрәтеп ебәрһәң, Тәмәнәйгә тиклем туҡтамаҫ ине, моғайын, Тәмәнәй урамының малайҙары шаҡ ҡатыр ине. Тик резинаһы ғына юҡ, күрәһең, кемдер ҡуптарып алғандыр. Оло инәйем, - һынай биреп, миңә ҡарап ҡуйҙы:

— һинеңсә булһын, Талип, тәгәрмәскә хужа сыҡты. Тире өсөн бәхилләштек тип иҫәплә, — ул тылсымлы тәгәрмәсте Талиптән алып миңә тоттторҙо. — Мә, аяғың талыу белмәһен.

Көтмәгәндә бына ниндәй хазина килеп эләкте минең ҡулға. Тире хаҡы ғына торамы ни ул? Талип бурыстан еңел ҡотолманы.

Оло инәйем ҡайтырға тип урынынан торҙо. Талип уның тирәһендә йәнә бөтөрөлә башланы:

— Көҙгө байлыҡ булһа ла, сәй-шәкәргә өҙөгөрәк ваҡыт ине, еңгә, нимә ҡылайым? һый күрһәтмәй ебәреп, оятҡа ҡалам инде. Хәйерселектән дә хурлығыраҡ нәмә юҡ!

— Ҡуйсы, Талип, өҙгөләнмә, эсмәгән сәй түгел дә, — тип йыуатты уны Оло инәйем. — Булыр әле, сәйе лә булыр, башҡаһы ла булыр.

— Туҡта әле, еңгә, былай ҡоро ғына ебәрмәйем әле. Таҡмаҡ әйтеп, үҙеңә бер бейеп бирәйем, һыйым шул булыр.

Ҡунаҡ килгән ҡураға,
Хужа ниңә урала?
Таҡмаҡ әйтеп бер бейеһә,
Бүтән һыйҙар һорама.
Аты тартмай үренә.
Ҡунаҡ уҙмай түренә.
Ауыҙын асһа, хужаһының
Үпкәләре күренә...

Борғоланып, юрғалап, ул үтә ихлас бейене. Берике тапҡыр сүгәләй биреп тә ҡуйҙы.

- Бына **афафан!** һый-хөрмәтеңә рәхмәт, — тине Оло инәйем, теге бейеп туҡтағас.

Ләкин Йоморо Талиптең йомартлығы, ҡунаҡсыллығы бының менән генә бөтмәне. Ул тағы яңы һый килтереп сығарҙы.

— Булғас булһын инде, еңгә, бер йырлап та хөрмәт итәйем. Бына тыңла:

Геүәрдиндәр сафҡа баҫҡан.
Ҡылыстары ялтырай,
Геүәрдиндәр килеп сыҡһа,
Немец мәлғүн ҡалтырай.

Был — беҙҙең йыр, геүәрдиндәр йыры. Мин бит батша ғәскәрендә геүәрдиндә хеҙмәт итТем, үҙем шулай ғына булһам да. Ҡалғандары бөтәһе лә өрлөк һымаҡ егеттәр ине. Бер мин — киле бейеклеге. Мәрәкә булды ул геүәрдингә эләгеүем дә, һи-и! Ҙур бер яланға меңәрләгән ғәскәрҙе килтереп теҙҙеләр ҙә, бер янарал геүәрдин һайларға кереште. Ун бишегерме аҙым артҡа сигенә лә баяғы янарал, югереп килеп, иҫ итмәгәндә һалдаттың теҙ аҫтына килтереп тибә. Әҙмәүерҙәй ирҙәр бөгөлә лә төшә. Йөҙҙән берәү сыҙаһа сыҙайҙыр. Сыҙағандарын алға сығарып баҫтыра. Бөтәһе лә ғифрит кеүектәр. Бер саҡ минең теҙ аҫтына килтереп типте был. Мин ыһ та итмәнем. Янаралдың күҙе шар булды. Бер алдыма, бер артыма сығып, мине күҙе менән баштан-аяҡ ҡапшап ҡараны. Шунан һуң, тағы ла алыҫыраҡ сигенеп, миңә икенсе тапҡыр килтереп типте. Мин ҡымшанманым да. «Маладис, һалдат! —тине янарал. — Сафтың иң артында йөрөй торған минең иң ышаныслы, иң беренсе геүәрдинем булырһың, һин артта саҡта, берәү ҙә беҙҙең теҙ аҫтына һуға алмаҫ». Шулай тигән булды, бахырың. Күп тә үтмәне, үҙенең теҙ аҫтына килтереп типтек. Тәүҙә сүгәләп төштө теге, һуңынан тәгәрәп үк китте. Батшаны ҡолатып, унының бөтә ояһын туҙҙырғанда булды был мажара

һөйләп бөткәс, Талип күҙҙәрен мөлдөрәтеп Оло инәйемә ҡараны:

— Артығын һөйләп, артығын ҡыланған булһам, биғәйбә инде, еңгә...

— Дөрөҫөн һөйләйем тиһәң, аҙыраҡ арттырмай ҙа булмайҙыр шул.

— Булмай шул, еңгә, булмай, — тип баш ҡаҡты «геүәрдин».

Йоморо Талип беҙҙе ҡапҡа төбөнә тиклем оҙата килде. Минең аяҡтарым — ерҙә, түбәм — күктә! Эшкә ашмаған ялбыр ике кәзә тиреһе өсөн ни саҡлы байлыҡ, хазина алып киттек: ике таҡмаҡ, бер бейеү.

бер йыр, йәнә бынамын тигән самокат тәгәрмәсе. Тәгәрмәстең тештәре ҡояшта нур сәсеп йымылдап тора. Шундай матур-матур йыр-таҡмаҡтар әйткән Талиптең ап-аҡ тештәре йым-йым итеп күҙ алдымда йымылдап китә. Бына кем хәйләһеҙ ул, исмаһам!

Мин артыма әйләнеп ҡараным. Меҫкен бүркен батырып кейгән һирәк кенә ерән һаҡаллы, неп-нескә мыйыҡлы Йоморо Талип һаман ҡапҡа төбөндә тора. Байтаҡ көндәр уҙғас, бурандар бурап, урам-дарҙы көрт баҫҡас, анау меҫкен бүрек аҫтында ниндәй баш йөрөгәнен бөтә ауыл күрәсәк...

# ИТЕ ҺИҢӘ,
# ҺӨЙӘГЕ
# МИҢӘ

Ап-аҡ ҡырау төшкән иртәлә Оло инәйем мине мәктәпкә алып китте. Мин уның ҡатарынан атламайым, үлән өҫтөнә һибелгән бәҫте ярып, үҙемә юл һалып барам.

«Балаға уҡырға төшөргә ваҡыт, көтөү кергәндә туғыҙы тула, — тине ул кисә Кесе инәйемә. — Уҡытыусыһына әллә үҙең илтеп тапшыраһыңмы?» Кесе инәйем минең күҙҙәремә оҙаҡ ҡарап торҙо ла: «Үҙең генә илт инде, көндәшем, һин һөйләшә лә беләһең...» — тине.

Мәктәп соҡорҙоң арғы яғында — Мәсет урамының түбән осонда. Мин уны ситтән генә күргәнем бар. Эсенә ингәнем юҡ әле. Инергә атлығып та тормайым. Ни ҡалған миңә ул мәктәптә? «Уҡыған берәү мулла булмаҫ, суҡыған берәү ҡарға булмаҫ», — тине анау көндө Вәлетдин, малайҙар һабаҡ уҡыу тураһында әңгәмә ҡуҙғатҡас. Дөрөҫөн әйтә ул. Бөтә уҡыған әҙәм мулла булып бөтһә, атҡа бесән кем һалыр һуң? Уныһы тағы бер хәл, бесәне булһа, һалыусыһы табылыр. Иң яманы шул: мулланан бөтә әҙәм ҡурҡа. Шулай кеше өркөтөп йәшә, имеш, албаҫты шикелле...

— Минең мулла булғым килмәй ҙә әле, — тинем мин, үҙем дә һиҙмәҫтән.

— Ниңә улай тиһең, синнай?

— Уҡый-уҡый мулла булып китермен дә унан үкенермен...

— Яҙған булһа, мулла итмәм мин һине. Мөғәллим булырһың йә землемер. Бер ҙә юҡ икән, иншалла, өй тулы дөм һуҡыр араһында күҙле бер кеше булырһың. — Оло инәйем шунда уҡ төшөндөрөп бирә.— Наҙан кеше был заманда һуҡыр менән бә-

1

рәбәр. Беҙ бөтәбеҙ ҙә наҙандарбыҙ, улым. Шуға күрә беҙҙе, ҡара халыҡты, ҡара һарыҡ тип йөрөтәләр.

— Әйҙә бөгөн бармайыҡ ул мәктәпкә, иртәгә барайыҡ! — тинем мин, ҡапыл туҡталып. Шул саҡ мәктәп тулы эреле-ваҡлы ҡара һарыҡ килеп баҫты минең күҙ алдыма. Улар бер-береһен этәрәләр, ҡысҡырышалар.

— Бөгөн күренеп, яҙылып ҡына ҡайтабыҙ, һабаҡҡа бер аҙнанан төшәһегеҙ, — тине Оло инәйем, үҙе һаман юлында булды.

Оло инәйем әйткәненән ҡайтмай, юлынан кире боролмай ул. Беҙҙән алда ғына мәктәпкә, ҡолға төҫлө нәҙек оҙон улы Ғилметдинде эйәртеп, тимерсе Әғләм инеп китте. Мин ул Ғилметдинде беләм. Әллә үтә йыуаш, әллә аҡылға бер самараҡ инде бисара: бәләкәс кенә малайҙарҙан да ҡурҡа.

Оло инәйемде уҡытыусы Мәхмүт аяғүрә баҫып ҡаршы алды:

— Әйҙә, рәхим ит, инәй! Бына бында ултырып тор саҡ ҡына... Әғләм ағайҙың улын теркәп кенә ҡуям да...

— Ярай, ярай, беҙ ашыҡмайбыҙ, — тине Оло инәйем. — Улың буйсан икән, Әғләм, игелеген күрергә яҙһын.

Әғләм унын менән ҡул биреп күреште лә Ғилметдинде етәкләп уҡытыусы алдына килтереп баҫтырҙы. Малайҙың соҡор елкәле неп-нескә муйыны бына-бына өҙөлөп китер ҙә уның таҡыр ҡаҡ башы иҙәнгә тәгәрәп төшөр төҫлө. Шулай ҙа ни мөғжизә менән эленеп тора икән ул баш?

— Бына, Мәхмүт, — тине тимерсе ҡарлыҡҡан тауыш менән, — өлкән улымды килтерҙем: ите-майы һиңә, һөйәге-тиреһе миңә. Әрәм итмә, әҙәм ит.

Мин башта ниндәй «ит», ниндәй «май» икәнен аңламай торҙом. Аңлағас, тәүҙә сыҙай алмай эс тырнап көлгөм килде, аҙаҡтан ҡотом осто. Былай ҙа күлдәк аҫтында һөйәктәре шылтырҙап торған Ғилметдинде ана ниндәй яфалар көтә икән? Әгәр Мәхмүт минең дә, итем менән майымды һурып алып, тирем менән һөйәгемде генә ҡалдырһа?.. Минең хәҙер үк тороп ҡасҡым килде.

— Ярай, ҡулдан, аҡылдан килгәнсә тырыштырырбыҙ, ағай, — тип ышандырҙы уҡытыусы.

Тегеләр сығып китте. Уҡытыусы үҙенең ҡалын кенәгәһенә мине лә яҙып ҡуйҙы.

— Бына, мөғәллим, улымды һинең ҡарамаҡҡа ышанып тапшырам. Үҙһүҙле, ҡылтым холоҡло, хөр тәбиғәтле, әммә нескә күңелле эскерһеҙ бала. Һинең ҡул аҫтында башынан бер тек сәсе төшһә лә, риза түгелмен, бәхиллегем юҡ. Ғәфү итмәм. Быныһын алдан киҫәтеп ҡуям, — тине Оло инәйем. Уның тауышы тыныс, ләкин ҡырҡыл ине.

— Был йәһәттән тыныс бул, инәй, вәғрҙә — иман, — тип Мәхмүт йәнә урынынан торҙо, — һинең кеүек хөрмәтле инәйҙең улына тырнаҡ та теймәҫ. Хафаланма, зинһар.

— Әйткәнде ҡабул итеүеңә рәхмәт, мөғәллим! — тине Оло инәйем. — Шулай башта уҡ аңлашып эш итеү яҡшы. Хуш булың тор.

Мәктәп мине артыҡ хайран ҡалдырманы. Бүрәнәгә йәбештерелгән төрлө-төрлө ҡағыҙҙарға ла, ҡара таҡтаға ла, ҡара парталарға ла иҫем китмәне. Уҡытыусының да йәшелле-зәңгәрле күҙҙәре оҡшаманы миңә. Уның «вәғәҙә — иман» тигәне лә, ни эшләптер, күңелгә ятманы. Ярай әле ҡайтып киттек.

Уҡытыусы барыбер һүҙендә торманы. Дөрөҫ, тырнаҡ тейҙермәне тейҙереүен, бүтәнсәрәк эләктерҙе ул миңә. Уҡыуҙар башланып, өс-дүрт көн үткәс тә, тәнәфес ваҡытында ҡасыш-ҡасыш уйнағанда мейескә инеп йәшеренгәнем өсөн ул минең ҡолаҡты саҡ ҡына өҙөп алманы. Унан һуң, бәке осо менән сыйып, партаға «К» хәрефен яҙғаным өсөн оҙон ағас линейка ҡыры менән ҡул һыртыма һуҡты. Өсөнсө тапҡыр миңә кеше өлөшө эләкте. Минән арттағы рәттә әллә Хәмитйән, әллә теге Ғилметдин шаярып ултырған. Ҡара таҡтаға аҡбур менән яҙып торған уҡытыусы, быны күреп, йоҙроҡ дәүмәллеге аҡбурҙы теге шаянға тондормаҡсы иткән. Аҡбур сәп итеп минең маңлайға килеп тейҙе. Хатта күҙҙән әллә ниндәй йымылдыҡ дүңгәләктәр һибелеп китте. Уҡытыусы үҙе лә шөрләне: мине көйләргә, йыуатырға тотондо. Ә мин юрамал иламаным, тегегә үс итеп.

Үҙемсә күптән ниәтләп йөрөгән ниәтемә ирешер-

гә — мәктәпкә башҡаса килмәҫкә булдым мин шул көндө. Был хәл, ҡар ятып, тауҙа выжлап сана шыуыр, Шәйхаттарҙың тимер конькиҙәрен бер тингә яллап, Аҡ Йомағол тыҡрығынан ҡоштай осоп төшөр саҡҡа тура килде, һис кемгә һис нәмә башырып тормайынса, мин ғилем алыуҙан тынып торорға булдым. Ул тыныу нәҡ ике йыл дауам итте.

Ике йылдан һуң һеңлем Сәлисә менән бергә мин йәнә беренсе синыфҡа килдем. Мине — иң артҡа, һеңлемде иң алға ултырттылар. Беҙҙе йәш кенә уҡытыусы апай уҡыта. Тәүге көндәрҙә таяҡ һыҙырға өйрәтте ул. Минең һеңлем бер таяҡты һыҙа ла, уҡытыусыға әйләнеп тә ҡарамай, миңә югереп килә. «Ағайым, дөрөҫмө?» — тип һорай. Уҡытыусы күрмәмешкә һалыша, мин уңайһыҙланған булам.

Ике йыл буш йөрөүҙең хаҡын бер ҡышта сығарҙым мин. Яҙға табан мине анау йыл һабаҡҡа бергә төшкән иптәштәремә килтереп ҡуштылар. Бөтәһе лә таныш, тик уҡытыусы ғына бүтән ине.

Ә теге ҡыштың, мин иреккә сыҡҡан беренсе ҡыштың, ап-аҡ ҡары өҫтөнә күп тә үтмәй ҡып-ҡыҙыл ҡан тамды. Башта тамды, унан аҡты...

# ИКЕ
# ХӨКӨМ

Ауылда үлем-етем булһа, һыбайлы ике малай урамдың ике яғынан һәр өй тураһында туҡтала биреп ҡысҡырып уҙа: «Йыназаға барығыҙ! Йыназаға барығыҙ! Йыназаға барығыҙ! Минең өсөн иң ҡурҡыныс оран — ошо. Әйтерһең, ул малайҙар тере кешеләрҙе мәйет оҙатырға түгел, ҡәбергә саҡыралар. Ысынлабыраҡ уйлап ҡараһаң, шулай килеп сыға ла. Ваҡыты еткәс, һәр кемде шунда саҡыралар, шунда оҙаталар.

Иртәнге эңер таралып та бөтмәç борон, урам буйлап оран һалып, аллы-артлы ике малай һыбай сабып уҙҙы.

— Хөкөмгә барығыҙ! Хөкөмгә барығыҙ! Хөкөмгә барығыҙ!

— Әллә тағы үлем-етем бар инде, хоҙайым?— тип борсолдо сәй урыны йыйыштырып йөрөгән Кесе инәйем.

— Хөкөмгә саҡыралар, Кесе инәй, кооператив башлығы Сәмиғулланы хөкөм итәләр, мир аҡсаһын ашаған, ти, бик күп. Йәмәғәт суды була, ти. Кисә сельсовет Ташбулат яман асыулы ине, — тип этенә-төртөнә хәбәр һалды кесе ағайым Сәлих, һүҙ һөйләй башлаһа, ул әллә нисек ҡаушап төшә.

— Ҡайҙан килгән ул миргә шул тиклем аҡса? — тине Оло инәйем.

Минең Мортаза ағайым бөтәһен дә белә. Ул шунда уҡ төшөндөрөп бирә:

— Бөтә йәмәғәткә урғыстар, һуҡҡыстар алырға тип көҙ көнө ҡапҡа башынан аҡса йыйғайнылар бит. Беҙҙән дә алдылар. Ана шул аҡса инде.

— Һи, бахыр! Нәфсе арҡаһында ниндәй генә гонаһтарға төшмәй бәндә?—тип бошондо Оло инәйем. Атайым, ниңәлер, өндәшмәй әле. Уйлана ул.

Йорт эсен шом баҫты. Баяғы «хөкөмгә барығыҙ!» тигән тауыш тәҙрәнән бәреп инде лә кире сыҡманы, өйҙә бүленеп ҡалды, бына хәҙер килеп-килеп һәр кемдең ҡолағына бәрелә.

— Сәмиғулланың да аҡсаға күҙе ҡыҙғас инде," коммунисмен тип йөрөүе ҡороһон. Берәүгә лә ышаныс юҡ былай булғас! — тип үртәнде Мортаза ағайым.— Һәр кемдең бармағы үҙенә табан кәкере...

— Пожар майҙанына икегеҙҙең берегеҙ аяҡ баҫаһы булмағыҙ, ишетһен ҡолағығыҙ! һеҙгә әле кеше хөкөм итергә иртәрәк, — тине атайым, хатта бармаҡ янап ҡуйҙы. Уның ағайымдарға былай ҡаты өндәшкәне юҡ ине. Ул шунда уҡ йомшара төштө. — Миңә күк алашаны егеп ҡуйығыҙ, Тимофейҙәргә барып ҡайтам, һеҙ, бер ҙә булмаһа, ҡуянға сығып инегеҙ, ана, өрпәк кенә ҡар ҙа яуып киткән.

Атайымдың бармаҡ янап һөйләшеүенә ағайымдар, бер-береһенә ҡарашып, аптырап ҡалдылар.

— Ярай, атай, ҡуянға сығырбыҙ, — тине Мортаза ағайым, турһая биреп.

Оло ирҙәр һәр береһе үҙ юлына китте. Бер аҙҙан баяғы малайҙар йәнә һөрәнләп уҙҙы:-

— Хөкөмгә барығыҙ — пожар майҙанына! Хөкөмгә барығыҙ — пожар майҙанына!

Күп тамаша күргәнем бар минең: ул томанный кәртинкә* тиһеңме, ул кәмит тиһеңме, ул бәйге тиһеңме — күрмәгән нәмәм юҡ. Ә бына «хөкөм» тигәнен күргәнем юҡ. Ҡарарға кәрәк быны.

Пожар майҙаны Мәсет урамының иң ҡалҡыу ерендә. Майҙанға иҫәпһеҙ-хисапһыҙ халыҡ йыйылған, күбеһе һаҡаллы-мыйыҡлы ағайҙар, олатайҙар. Беҙ, ваҡ малайҙар, урамдың арғы яғындағы бейек көрт башына менеп баҫтыҡ. Беҙҙең кеүектәрҙе майҙанға индермәйҙәр, ҡыуып ебәреп торалар.

— Бала-сағаны ары ҡыуығыҙ, эҙҙәре булмаһын!— тип сәрелдәне бер бабай.

— Ҡараһындар, күрһендәр, фәһем булыр!—тине бүртенгән битле йыуан әҙәм.

— Ғибрәт алһындар!—тип өҫтәне икенсеһе.

—■ Сабыйҙарҙы ҡайтарып ебәрегеҙ, кәмит ҡуймайҙар ҙа бында!

* Кнно.

— Ниндәйерәк кәмит булыр ҙа әле. Күр ҙә тор бына!

Торған һайын халыҡ нығыраҡ ҡайнаша, майҙан нығыраҡ гөжләй.

Шығыр-шығыр баҫып, Түбән остан сельсовет Ташбулат менән йәнә ике ят кеше килде. Ташбулат ул бәләкәс кенә буйлы. Оҙон ҡара тунының салғыйҙары ергә тейеп-тейеп ҡала. Ағаһына н-фәдән ҡалған тундыр, күрәһең. Ул килеп еткәс, халыҡ шымып ҡалды.

— Йә, ни ҡылабыҙ, йәмәғәт? — тине Ташбулат, бер кемгә лә ҡарамай, ҡалҡына биреп. — Ҡараҡ һеҙҙең алда, хөкөм, һеҙҙең ҡулда, ил ағалары.

Халыҡ улай-былай иткеләгәнсе, сельсовет Ташбулйт ҡаршыһына имәндәй таҙа Сибәр Мәрәһим килеп баҫты. Был кеше беҙҙең урамда, Түбән оста, тора. Уны йәп-йәш кенә көйө атаһы Ильяс мәзиндең тол бисәһенә көсләп өйләндергән, дөрөҫөрәге, йортҡа индергән. Кистәрен өй алдына сығып, Мәрәһим гармунын тартып ебәрһә, бөтә ауыл хайран ҡалып тыңлай. «Моңая, бисараҡайың, — тине бер саҡ Оло инәйем,—нисәмә йыл инде, ә күңеле һаман урынына ултыра алмай, кемделер эҙләп аҙашып йөрөй. Заяға үтә еләк кеүек саҡтары...»

«Сибәр кеше, моңло кеше бәхетһеҙ була» тигәндәре хаҡтыр, ахырыһы. Уның керпектәре шундай оҙон. Оҙон керпекле кеше, етмәһә, ҡыҫҡа ғүмерле була, имеш. Шуғалыр инде, күрәһең, Сибәр Мәрәһимде бөтә әҙәм ҡыҙғана, яҡын күрә. Бына әле лә ул уҡлау оҙонлоғо ғына Ташбулат алдына килеп баҫты.

— Ҡорҙаш, — тине ул тыныс ҡына, — Сәмиғулланың ғәйебе ҙур. Ҡайҙа китһә лә, ил мөлкәте уның ҡулынан киткән. Тейер язаһын алырға тейеш. Мәгәр уны ғәҙел хөкөм ҡулына — дәүләт ҡулына тапшырырға кәрәк.

Ташбулат ҡапыл шашып китте, уның түп-түңәрәк күҙҙәре халыҡҡа төбәлде:

— Дәүләткә бирергә дәүләт малын урламаған да ул! һеҙҙекен, йәмәғәттекең, урлаған, һеҙҙең .хәләл малды ашаған! Йәне лә, тәне лә уның һеҙҙең ҡулда, йәмәғәт! Дөрөҫ әйтәмме?!

— Дөрөҫ! Дөрөҫ! —тип ҡабатланы ялпы.

— Ашағанын ҡоҫторорға кәрәк убырҙың! — тип аҡырҙы баяғы бүртенгән битле йыуан әҙәм.

— Етмәһә, коммун булып, әҙәм ҡотортоп йөрөнө, иблес! Тамуҡ киҫәүе! Ҡайҙа ул? Нимә көтәбеҙ? — тип шашынды кемдер.

— Халыҡ алдына сығарығыҙ! Яуап бирһен! — тине икенсеһе.

Халыҡ төркөмө инде ярһыуҙың сигенән ашты. Шул саҡ Ташбулат әмер бирҙе:

— Әй, пүнәтәйҙәр, бында килтерегеҙ ҡараҡты!

Матур башын түбән эйеп, Мәрәһим ҡайтып китте. Бер аҙ барғас, ул әйләнеп ҡараны, ләкин туҡталманы.

Сәмиғулланы ҡарауыл өйөнән алып сыҡтылар. Уның өҫтөндә ҡыҫҡа ҡыптыр тун, аяғында ап-аҡ тула ойоҡ менан ап-аҡ сабата. Ни эшләптер, башында бүрке юҡ. Ҡара бөҙрә сәсе яртылаш маңлайына төшөп тора. Йөҙө көл кеүек. Ике ҡулын артҡа тартып бәйләгәндәр, артып ҡалған арҡан осон бер кеше тотоп алған. Ул ҡараҡ менән йәнәшә атлай. Баҙарға һатырға илткән һыйыр малын нәҡ ана шулай етәкләп алалар.

— Бына бында бейек урынға баҫтырығыҙ, бөтә ғаләм күреп торһон!—тип бойорҙо Ташбулат. Ул яртылаш ҡар аҫтында ҡалған арбаға күрһәтте. Сәмиғулланы шунда мендерҙеләр. Майҙан тып-тын булып ҡалды, хатта аяҡ аҫтындағы ҡар ҙа шығырҙауҙан туҡтаны, һауала һирәк кенә елбәҙәк ҡар бөртөктәре тирбәлә. Улар бүтән ергә төшмәй ҙә кеүек, бары тотҡондоң ҡара сәсенә генә ҡуна. Әгәр оҙаҡ ҡына шулай торһа, уның эйелгән башы салға әйләнәсәк. Сәмиғулланың һул яғында алыҫта сельсовет ҡыйығында елберҙәгән ҡыҙыл флаг күренә. Бер ҡарағанда, улар икәүһе йәнәшә тора һымаҡ. Кеше ҡымшанмай, флаг талпына, ҡайҙалыр ашҡына. Икеһенең дә артында күгелйем күк сите.

— Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән хәл был, йәмәғәт!—тип сарбайланы кинәт баяғы сәрелдек тауышлы ҡарт. — Илгә оят, ергә оят, дингә оят — һәммәбеҙгә оят килтерҙе был ҡара йөрәк! — Ул, ҡулдарын сәбәләндереп, Сәмиғулла яғына һелтәне.

Уға башҡа тауыштар ҡушылды:

— Сабыйҙарыбыҙ ауыҙынан ризыҡ өҙөп йыйған

тиндәребеҙҙе ҡайҙа типтереп, ҡайҙа исраф иттең, бәдбәхет! Яуап бир!

— Хәләл көсөбөҙҙө сарыф итеп тапҡандарыбыҙ боғаҙыңа тығылһын, мәлғүн!

— Түләһен! Мирҙекен миргә түләһен!

— Беҙҙең тир хаҡын ҡаны менән түләһен! Ҡаны менән! — тип ярһыны берәү.

Ҡараҡ аҡрын ғына башын күтәрҙе*. Майҙан өҫтөнә күҙ йөрөтөп сыҡты. Тауыштар аҙлап кәмей, тына барҙы. Сәмиғулла, башын юғарыға сөйөп, ике тапҡыр юткереп алды.

— Ауылдаштар, — тине ул ҡалтыраған тоноҡ тауыш менән. — Һеҙҙең алда ғәйебем ҙур. Йәмәғәт мөлкәте минең ҡулда ине, минең ҡулдан юҡ булды, әммә мин һуҡыр бер тиненә лә теймәнем.

— Нисек инде теймәнең? Аяҡландымы икән ни ул аҡса?

— Урлағандар. Кәнсәләге тимер һандыҡҡа асҡыс яратып урлағандар.

— Ҡасан алғандар?

— Асыҡ ҡына белмәйем.

— Ялған! Алдаша!

— Теге донъяла аҡланырһың!

— Ҡарауылсы ҡайҙа булған?

— Мин урлашманым, ағай-эне. Шулай ҙа ғәйеп миндә. Ғүмер буйы эшләп түләрмен.

— Бетең менәнме, зимагор?

— Быға тиклем донъя көтөп, бер ҡорсаңғы тайың да булмағанды!..

— Ҡаны менән түләһен! — тип ҡабатланы бая уҡ ҡанһыраған тауыш.

Халыҡ йәнә шашып китте:

— Самосуд яһарға кәрәк! Самосуд! Бүтәндәргә һабаҡ булһын!

— Аяҡ-ҡулын һуғып һындырырға кәрәк.

— Самосуд! Самосуд!

Инде аҡты-ҡараны күрмәҫ сиккә еткән кешеләр, ҡайһыһы йоҙроҡ йомарлап, ҡайһыһы таяҡ һелтәп, ҡайһыһы күҫәк күтәреп, арбаға табан ябырылды. Шул саҡ Йоморо Талип әллә ҡайҙан килеп сыҡты ла, үтә йылдам һикереп, арбаға менеп баҫты.

— Йәмәғәт! —тип ҡысҡырҙы ул, бөтә майҙанды яңғыратып. — Мин был кешене тыумышынан беләм.

Ата-әсәһен, нәҫел-ырыуын беләм. Харамлаша торған заттан түгел ул. Күрә тороп, кеше хаҡына кермәҫ. Хилаф эш эшләйһегеҙ, аҡһаҡалдар, дыуамал ҡылыҡ ҡылаһығыҙ, йәш-елкенсәк! Әгәр һеҙ йөҙ кеше бер булып бынау ғәйепһеҙ, бер таянысһыҙ йән эйәһен һәләк итһәгеҙ, һәр ҡайһығыҙ йөҙәр кеше үлтергән булып сығасаҡ, һәр ҡайһығыҙҙың өҫтөнә йөҙәр яҙыҡ төшәсәк. Иман хаҡында уйлағыҙ, йәмәғәт! Мин уны бынау сағынан беләм. Күңелем һиҙә — ғәйепһеҙ ул! Аҡылығыҙҙы юймағыҙ, йәмәғәт! Ташбулат! һин — ил башы кеше. Тый халыҡты. Әйт халыҡҡа. Теймәһендәр Сәмиғуллаға. Уның алма кеүек ике балаһы бар, югереп кенә йөрөйҙәр. Етем иттермә шул балаларҙы. Әйт, Ташбулат! Әйт ил ағаларына!..

— Урлағанда минән һорамаған. Үҙ язаһын үҙе күтәрһен! Йәмәғәт, хөкөм, әйткәнемсә, һеҙҙең ҡулда... — тине лә Ташбулат тун сабыуына урала-урала китеп барҙы.

«Йәмәғәт» яман шаулашырға, ҡысҡырышырға, гөжләргә тотондо. Талип йәнә нимәлер һөйләне буғай, уны бүтәнсә тыңламанылар, ләкин ул арбанан төшмәне, Сәмиғуллаға ныҒыраҡ һыйына бирҙе.

— Ялғансының геуаһы янында!

— Төш уман, йолҡош!

— Урлағанды икәү бүлештегеҙме ни?

— һуғым тирәһендә йөрөгән эт!

— һиңә лә тамдымы ни?

Талип ҡапыл ситкә тайшанды. Туҙып бөткән сәкмәненең сабыуҙарын әйләндерел, биленә тиклем күтәрҙе лә ямау өҫтөнә ямау һалынған ыштанын күрһәтте.

— Бына тамды! Аҫыл заттан ғына суҡтай итеп кейенеп алдым. Ана, уның аяғында ла өр-яңы сабата!

Талип сәкмән сабыуҙарын һаман төшөрмәй. Сәмиғулла бөтөнләй битараф ҡиәфәттә баҫҡан да ҡатҡан. Уның башын ап-аҡ сал ҡаплаған: берәм-берәм генә төшкән ҡар бөртөктәре ни арала уның ҡара бөҙрәһен шулай һырып өлгөрҙө икән?

Ҡапыл Талип, ике ҡулын алға һуҙып, йәш аралаш ялбарырға тотондо:

— Әҙәмдән оялмаһағыҙ, хоҙайҙан ҡурҡығыҙ,

йәмәғәт! Язаламағыҙ Сәмиғулланы! Юғиһә бөтә ауылыбыҙға ҡаза килер. Алла һуғыр!

Ҡанһыҙлығы менән яманаты сыҡҡан, ҡоторған эт йыйыусы Ислай енләнеп килде лә: «Алла бына шулай һуғыр!» —тип үкереп, йыуан ғына имән ҡаҙыҡ менән Талипкә киҙәнеп һуҡты. Талип арбанан осоп төштө, унын сепрәк ҡолаҡсынлы меҫкен бүрке тәгәрәп китте. Көҙгө кеүек йылтырап торған ҡаҡ баш килеп сыҡты ул бүрек эсенән. Таҙы ла юҡ, мөгөҙө лә юҡ. Сәсе генә ҡойолған — ни бары шул. Ислайҙың күҫәге, ахыры, унын сикәһенә тура килде, һул яңағы буйлап ҡан ағып төштө лә ҡар өҫтөнә тамды. Бер тамды,, ике тамды, өс тамды... Талип башын күтәрҙе. Унан аҡрын ғына тороп теҙләнде. Әҙәıй ҡаны күргәс, - Ислай оторо ҡотороп китте. Ул, күҫәген тағы ла нығыраҡ һелтәп, Сәмиғуллаға ташланды. Шул ваҡыт бөтә «йәмәғәт» арбаны һыры алды. Мин сытырҙатып күҙҙәремде йомдом. Тик ҡолағым ғына аҡылынан шашҡан «йәмәғәт»тең үкереүен ишетә. Бер аҙҙан үкереү ҙә тынды,..

Күҙҙәремде астым. Арба буш ине. Унын тураһында алыҫта сельсовет түбәһендә байраҡ ҡына моңһоу тирбәлә. Кешеләр, майҙандан сығып, таралыша башланы. Арба янында Сәмиғулланың бөкөрәйгән кәүҙәһе ята. Унын бөтә йөҙөн ҡан ҡаплаған. Башы тураһында аҡ ҡарҙы ҡыҙыл ҡан өңөп ингән. Сәмиғулла эргәһенә кәпәсһеҙ Талип теҙләнеп ултырған да унын ҡар һырыған башын һыйпай. Ул һыйпай, ә ҡар төшмәй, унын һайын сәстәренә нығыраҡ йәбешә бара. Ниндәй ҡар икән ул?

Мин ғүмеремдә беренсе тапҡыр аҡ ҡар өҫтөндә ҡыҙыл ҡан — кеше ҡаны күрҙем. Башта тамды ул, унан аҡты; аҡты ла, ҡарҙы көйҙөрөп, ергә үтте. Ул аҡрын ғына тупраҡҡа һеңәсәк — мин быныһын яҡшы беләм. Оло инәйем әйтә: «Төтөн һауала ирей, дым тупраҡҡа һеңә, йән күккә оса, тән гүргә керә»,— ти. Сәмиғулланың да йәне был сәғәттә байтаҡ юл алғандыр инде...

Әммә ул саҡта мин сөм-ҡара сәстең күҙ асып йомған арала сап-салға әйләнеүен белмәй инем әле.

— Тамаша бөттө, бар, малай, өйөңә ҡайт!— тине берәү. Мин башымды күтәрҙем. Минең алда бер күҙенә эре борсаҡ хәтле аҡ төшкән шөкәтһеҙ,

йөнтәҫ әҙәм баҫып тора ине. Унының ҡаштары ла, танауы ла, ауыҙы ла бер яҡҡа салышайған. Уға ҡарағас, минең дә йөҙөм ҡыйшая башлағандай булды. Мин артҡа ла әйләнеп ҡарамай тороп югерҙем. Төшөңә кермәһен был нишана!

...Төшөмә кермәне ул, мине ҡыҙғанды, ләкин мин уны өнөмдә тағы бер тапҡыр күрҙем. Күп усаҡтар янып һүнгәс, күп ғүмерҙәр күкрәп тынғас осраштыҡ беҙ унының менән.

Ауылға ҡайтҡан һайын, мин тәүҙә атайым менән Оло инәйем ҡәберен зыярат ҡылырға барам. Хәҙер инде мин балалар атаһы ғына түгел, үҙем олатай кеше, әммә ошонда килгәс, мин әжәл тураһында ла бөтөнләй тип әйтерлек уйламайым, сөнки таштарҙа исемдәре яҙылған кешеләр был донъянан китеүҙәре менән түгел, ошо ергә килеүҙәре, ерҙә йәшәүҙәре, эшләгән эштәре, ҡылған ҡылыҡтары менән ҡыҙыҡлылар.

**Ҡайһы бер ҡәбер эргәһендә мин уйланып торам. Ҡайһы берҙәре эргәһендә ирекһеҙҙән йылмайып ҡуям, сөнки уларҙың хужалары ер өҫтөндә шул тиклем күңелле, ирмәк, ғибрәтле иҫтәлектәр ҡалдырып киткәндәр, шуларҙың хөр рух шауҡымы, әйтерһең, ҡәберҙәре өҫтөндә әле булһа балҡып тора. Бында даһиҙәр һәм диуаналар, эше уңмаҫтар һәм хыялыйҙар, ярһыуҙар һәм сабырҙар, батырҙар һәм бисаралар ерләнгән. Бында яуыздарҙа, ҡурҡаҡтар ҙа, урта ҡул ғына кешеләр ҙә юҠ. Булһа ла, мин уларҙы күрмәйем. Күҙем шәйләһә, күңелем күрмәй, сөнки мин уларҙан ҡалған донъяла йәшәмәйем. Ана, тегеләре ҡалдырып киткән донъяла донъя көтәм мин. Мин тере булғас, тимәк, улар ҙа йәшәй. Шуға күрә лә һәр осрашҡан һайын: «һаумы, атайым!», «һаумы, Оло инәйем!», «һаумы, Йоморо Талип!» — тип өндәшәм. Тиҫтәләгән ҡәбер таштары дәррәү дөбөрҙәп миңә яуап ҡайтара: «һау!..» Бында килеп шул дөрөҫлөктө аңланым: тере саҡта бөтә кеше лә йәшәй, донъя ҡуйғас, яҡшылар ғына иҫән ҡала.**

**Ҡара тупраҡ өҫтөнә ҡыҙарып ҡына үләне шытып килгән ҡәбергә ҡарашым туҡталды. Яңы баш төртөп сыҡҡан осло ҡыяҡтар минең фекеремде әллә ҡайҙа йыраҡҡа, мәңгелек төпкөлөнә, алып китте. Ҡасан-**

дыр кешеләр ҙә, йәғни уларҙың тәүге күҙәнәктәре, бына шулай тупраҡты тишеп сыҡҡандыр һымаҡ тойолдо миңә. Бара-бара үләндән тере йән — кеше барлыҡҡа килгән, ә хәҙер кеше ҡапыл үләнгә өйләнгән...

Ҡәберҙең баш осонда бәләкәс кенә бер ҡатын бөкөрәйеп ултыра, үҙе һулҡылдап илай, аҡуан күҙ йәштәре, моғайын, табанына барып сығалыр. Быуыла-быуыла ул бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлай:

— Түр гөлдәрем һынды, байрам шәмдәрем һүнде... һынды түр гөлдәрем, һүнде байрам шәмдәрем...

Был — һуғыштың тәүге йылында уҡ хәбәрһеҙ ғәйеп булған Ҡорбанғәле ҡатыны Сабура ине. Әле теге ваҡытта уҡ, Сабура килен булып төшкәс тә, Әсғәт уның хаҡында: «Сабура самауыр бейеклеге»,— тигәйне. Үҙе шундай ғына булһа ла, ҡулында эш, телендә ут уйнаны, әммә алағайымға ләстит һатып та йөрөмәне ул.

Һуғыштың урталарында ауылға ҙур ғына бер төркөм һалдат килгән. Килгән дә, бойороҡ булғас, кире киткән. Аҙмылыр, күпмелер ваҡыт үткәс, үҙ ваҡыты еткәс, Сабура кешелек донъяһына бер ир бала өҫтәгән. Күрше-күлән шыш-быш иткән, туғантыумаса ҡара оронған, бисә-сәсә һағыҙ урынына сәйнәгән уны. Сабура ҡылғанды ҡылып та, уның көнөнә төшмәгән әхирәттәре лә быға артын әйләнгән. Тик бер генә кеше, бисараның арҡаһынан һөйөп, былай тигән: «Көн биргәнгә ем бирер. Төклө аяғы менән килһен был донъяға. Ҡорбанғәленән тоҡомһоҙ ҡалғайның. Бергәләп үҫтерербеҙ әле». Ошо һүҙҙәрҙе хәбәрһеҙ юғалған Ҡорбанғәлененең әсәһе, Сабураның ҡәйнәһе Гөлбәҙәр, әйткән. Быға тиклем ҡәйнә менән килен бысаҡҡа бысаҡ уҡ килеп тормаһа ла, үтә татыу ҙа йәшәмәгән. Йыш ҡына ҡәйнә көрәк һораһа, килен һәнәк тотторған, килен ҡашыҡ шылтыратһа, ҡәйнә табаҡ дөбөрҙәткән.

Ошо Семен исемле малай (Сабура балаға атаһының исемен биргән, яратҡандыр, күрәһең) тыуғас та, быларҙы, әйтерһең, ырымлаған да ҡуйған. Гөлбәҙәр менән Сабураға әйтеп аңлата алмаҫлыҡ татыулыҡ, ғүмер буйына етерлек дуҫлыҡ килгән. Бала үҫкән һайын килен ҡәйнәһенә, ҡәйнә килененә ғашиҡ була барған. Гөлбәҙәр, Семенды күтәреп,

башта өй алдына сыҡҡан, шунан күршеләргә ингән, һуңыраҡ бөтә ауылды бер итеп уҙған.

— Атаһына ҡалай оҡшаған!.. — тип мыҫҡыл итергә маташыусыларҙы ул ҡырт киҫкән.

— Кемгә оҡшаһа ла, әҙәм балаһы. Яуызлыҡтан тыумаған, мөхәббәттән тыуған! Гонаһһыҙ сабыйҙан көлөү — яҙыҡ! — тигән ул.

Ошо Гөлбәҙәрҙе ҡаплаған ҡара тупраҡ өҫтөндә хәҙер һирәк кенә ҡыҙғылт үлән елберҙәй. Әллә ел тирбәтә, әллә Сабураның күкрәгенән бөркөлөп сыҡҡан хәсрәт һулышы тирбәтә уны.

Ҡатындың яралы күңеленә ҡағылмаҫ өсөн, мин, уға күренмәй, сығыр яҡҡа киттем. Ҡолағымда иһә һаман уның зары яңғырай:

— Түр гөлдәрем һынды, байрам шәмдәрем һүнде...

Нисәнсе ҡат инде таш зыяраттың тимер ҡапҡаһы төбөндә мин бер ҡартты күрәм. Кеше килеп сыҡһа, ул башын ситкә бора, күҙҙәрен йәшерә. Мин дә уның менән йөҙгә-йөҙ осрашырға, туҡтап һүҙ ҡушырға, хатта иҫәнләшергә лә баҙмайым. Әҙәм күңеле — ҡара урман. Ни генә юҡ унда? Тик ҡара урманға һорауһыҙ ҙа инеп була, кеше күңеленә рөхсәтһеҙ ҡағылыу ярамай.

Был юлы ҡарт минән, тайшанманы, һүнеп барған төҫһөҙ күҙҙәрен дә ситкә алманы. Уң күҙенә зре борсаҡ дәүмәле аҡ һалған. Уныһында бөтөнләй йән әҫәре юҡ. Икенсеһе миңә төбәлде. Нимә әйтергә теләй ул күҙ? Юҡ, әйтмәй.

— һаумы, ағай? Хәлдәр имен генәме? — тигән булдым. Күңелемде ҡапыл шом баҫты.

— Мин һиңә ағай түгел. Берәүгә лә ағай ҙа, атай ҙа, бала ла түгел мин. Мин үҙемә-үҙем. Хәл һорашма минән. Бер төрлө лә хәлем юҡ минең. Мин — албаҫты.

Мин китергә ҡуҙғалдым. Ул лып итеп үлән өҫтөнә ултырҙы.

— Тороп тор әле, һөйләшәйек! — тине ҡарт.— Мин әллә ҡасан инде ошонда күсенеп килергә тейеш инем. — Ул ҡулы менән зыярат эсенә күрһәтте.

— Ә ниңә күсмәнең һуң?

— Сәмиғулла индермәй. «Ҡәберең яҡын булмаһын!»— ти миңә, ҡапҡанан да ебәрмәй.

— Ҡайһы Сәмиғулла?

— Ана теге саҡта мин үлтергән Сәмиғулла. Мин бит уны ике тапҡыр үлтерҙем: башта ил алдындағы намыҫын үлтерҙем, һуңынан үҙен... — Ҡарт шундай тыныс, ғәмһеҙ әңгәмә ҡыла, гүйә, ул миңә ваҡ-төйәк күргән-белгәндәрен хәбәр итә. Ҡотоң осорлоҡ! Уның тере күҙендә зәғиф кенә бер осҡон тоҡанғандай булды. Үҙе саҡ ҡына ҡалҡынып та ҡуйҙы.

-— Мин яманаты менән заманында тирә-яҡта дан тотҡан ҡараҡ Ярулламын, — тип һөйләп китте ул шул уҡ зәғиф тауыш менән. — Мин рәнйеткән әҙәм, мин түктергән күҙ йәштәре, минең өҫкә яуған ҡәһәр бихисап. Уҫал Ғына түгел, хәйләкәр ҙә инем мин. Йөрөгән еремдә итәк-сабыуымды йыйып, әҙемде аҙаштырып йөрөнөм. Сәмиғулла ҡарамағындағы аҡсаны ла, ишек ҡайырып, һандыҡ ватып алманым, һәр йоҙаҡҡа асҡыс яраттым. Аҡсаһын алғас, еренә еткереп, йоҙаҡтарын кире бикләнем. Ҡурҡыу-өркөүҙең ни икәнен белмәй инем, бүре йөрәкле инем. Шулай ҙа күңелемә беренсе ҡат шик инде. Сәмиғулла зирәк кеше ине, бына-бына һиҙенер, минең тамғаны таныр һымаҡ тойолдо, сөнки был минең ҡулдан ғына килерлек эш ине. Сыҙаманым, Сәмиғуллаға самосуд башланғас, ҡуйыныма киҫтән тығып, майҙанға килдем. Бүтәндәр таяҡ, сыбыҡ, бау һелтәп сәбәләнгәндә, киҫтән менән башына бер генә һуҡтым. Шунда уҡ, арбанан ҡолап, салҡан әйләнеп төштө. Ҡоралымды йәшерҙем дә ситкә сыҡтым. Мине иҫәпкә алыусы ла булманы. Тик барыбер тиҙ генә китә алманым, халыҡ таралғансы, мәйет эргәһендә ҡалдым. Мәйеттең башы күҙемә ап-аҡ булып күренде; Бөтә тәнемде ҡапыл көҙән йыйырып алды, хатта биттәрем тартышты.

Мин инде зыярат ҡапҡаһы төбөндә түгел, ана теге заманда пожар майҙаны янында көрт башында баҫып торам. Минең ҡаршыма бер күҙенә аҡ төшкән салыш битле йөнтәҫ әҙәм килеп сыҡты. Мин унан тамсы ла ҡурҡмайым. «Тамаша бөттө, бар, юлыңда бул!» — тим мин уға, ләкин тауышым сыҡмай, тымым ҡыҫыла.

Аҡрын-аҡрын ғына мин ғүмер юлының тағы был осона, таш зыярат эргәһенә, ҡайтам. Ярулла, арыҡ тубыҡтарын сәнсеп, шым^ ғына ултыра. Башыма

зиһен кергәс, мине күп тапҡырҙар борсоған нәмә тағы иҫемә килеп төштө. Был — сельсовет рәисе Ташбулаттың анау көндәге ҡылығы ине. Шул һорауҙы хәҙер ҡарттың күҙенә терәп бирҙем:

— Ул аҡсаны һеҙ Ташбулат менән бер булып урланығыҙмы ни?

— Юҡ. Ул белмәне лә. Аҡсаны кем урлауы, ҡайҙа китеүе уға барыбер ине. Ташбулаттың бында үҙ иҫәбе иҫәп ине — нисек кенә булһа ла Сәмиғулланан ҡотолоу кәрәк ине уға. Ошо хәлдәр килеп сыҡҡас, теге кәрләнең бүреһе олоно. Самосудҡа бит ул халыҡты һөсләтте-һөсләтте лә үҙе шылды.

— Сәмиғуллала уның ни үсе бар ине һуң?

— Нәғезен генә белмәйем. Граждандар һуғышы осоронда Ташбулат урыҫ ауылдары яғына ниндәйҙер этлекме, яуызлыҡмы эшләгән, ахыры. Сәмиғуллаға, күрәһең, шул мәғлүм булғандыр. Иллә-мәгәр Сәмиғулланың күҙ ҡарашынан ҡойолоп төшә ине, ә мин ҡурҡмай инем. Бер кемдән дә ҡурҡмай инем. Бары анау Сәмиғулла ғына күңелемә ҡурҡыу һалып, тәүәккәллегемде алып китте. Мин ҡурҡаҡҡа әйләндем. Шул кисте үк ҡара айғырымды ектем дә, өйөмдө, ҡатынымды, балаларымды ташлап, билдәһеҙ яҡтарға ҡарай юл алдым. Ҡырҡ йылдан һуң тыуған төйәгемдә тупраҡ булырмын тип өмөтләнеп ҡайттым. Өсөнсө йыл инде ошонда йөрөйөм. Сәмиғулла яҡын да ебәрмәй. «Ҡылған енәйәттәрең өсөн башта хөкөм үтеп, яза кисер, шунан индерермен»,— ти. Бик күп енәйәттәр ҡылдым, бихисап яуызлыҡтар эшләнем, шуларҙың береһе өсөн дә миңә үҙ ваҡытында кешеләр ҙә, тәңре лә яза бирмәне. «Минең ҙур енәйәттәрем бар, шуларҙың һәр береһе өсөн атап-атап яза бирегеҙ!» — тип хөкөм эйәләренә, закон хужаларына йөрөнөм. Ҡайҙа барһам да, тик бер генә яуап алдым: «Енәйәттәреңдең срогы сыҡҡан, гонаһтарың иҫкергән», — тинеләр. Юҡ, юҡ, срогы ла сыҡмаған, иҫкермәгән дә! Мин уныһын яҡшы беләм — минең енәйәттәрем, минең гонаһтарым бит улар. Мин түктергән күҙ йәштәре, мин ҡойған ҡандар бына бында, күкрәк ауыҙына, килеп тығылған.

Ул шунда уҡ йәһәт һикереп аяғүрә баҫты. Тамаҡ

төбөнән ғырылдап сыҡҡан үҙәк өҙгөс тауыш минең ҡолағымды ярып инде.

— Әй, бәндәләр!—тип шашып һөрәнләне ҡарт. — һеҙ үҙ ваҡытында, хатта ваҡытынан да алда мөлкәт, маҡтау, бүләк алып ҡалырға тырышаһығыҙ. Йәйегеҙҙе фиҙа ҡылаһығыҙ, бахырҙар, ҡомһоҙҙар, иҫәрҙәр! Ә һеҙ оло гонаһтарығыҙ өсөн дә, кесе ғәйептәрегеҙ өсөн дә үҙ ваҡытыйДа яза алып ҡалырға тырышаһығыҙ! һуңлап ҡалмағыҙ, ашығығыҙ! һуңлаһағыҙ, бынау тимер ҡапҡа һеҙгә кәрәк саҡта асылмаясаҡ. Сәмиғулла рөхсәт итмәйәсәк... — Ярулла ҡарт нәҡ баяғыса лып итеп ергә ултырҙы. Оҙон киң күлдәк еңе менән маңлайын һыпырып алды. Башҡаса ул миңә иғтибар итмәне. Мин үҙ юлыма киттем.

...Ҡышҡы бурандар осоронда бер көн Ярулла ғәйеп булған. Бөтә тирә-яҡты ҡыҙырып эҙләгәндәр, таба алмағандар. Тик яҙ башында ғына күрше ауылдың зыярат ҡоймаһы буйында ҡар аҫтынан ҡарттың ҡара көйгән кәүҙәһе килеп сыҡҡан. Уны шунда ҡойма тышына ғына күмеп тә ҡуйғандар...

# ИРМӘК ӨСӨН ГЕНӘ

— Әллә Сәлихе лә тәмәкегә һалышты инде, Мортазаһы етмәгән... —тип һуҡранды Оло инәйем кискә ҡаршы. — Өйҙә бөтөнләй шырпы тормаç булды.

Ул шырпының ҡайҙа киткәнен бер мин генә беләм. Йәнә Шәйхаттар белә. Уларҙың мунсаһында кәрт уйнап, мин көнөнә икешәр, хатта өсәр ҡап шырпы отторам. Ҡотом юҡ минең. Шул арҡала бөлөп бөттөм. Әммә өмөттө өҙмәйем. Бер килмәһә фарт, бер килер. Ул сағында мин Шәйхаттарға отторған бөтә мөлкәтемде кире ҡайтарып аласаҡмын. Ете тин баҡыр аҡса, дүрт мылтыҡ гильзаһы, ике булавка, Мөхтәр еҙнәм биргән һөйәк һаплы бәке, бихисап ҡап шырпы әлегеһе көндә Шәйхаттарҙың ҡомағай кеçәһендә тотҡонлоҡта ята. Хәләл хазинамды ҡотҡарып ҡына ҡалмай, тегенең үҙен муйындан бурысҡа батырмаһаммы? Беҙҙең ҡапҡаға ла Сәмреғош ҡуныр әле. Күр ҙә тор бына. Инде төшөмә лә керҙе, кәрткә һалыр бүтән рәте ҡалмағас, Шәйхаттар, берәм-берәм йолҡоп, башындағы һәммә сәсен миңә отторop бөттө, имеш. Йолҡонған һәр төк сәс алтын ҡылға әйләнә бара — тот та бау иш. Тегенең йылтыр башы турғай йоморткаһы төçлө һипкелле, имеш. Таҡыр башын һыйпап алды ла Шәйхаттар илап ебәрҙе: «Сәсемде генә ҡайтарып бир! Бынан ары тамсы ла харамлашмам. Ышанмаһаң, бына таш ашап ант итәм», — тине лә, шытыр-шытыр кимереп, мунса ташын ашарға кереште. Күп ашаны, бөтөрә яҙҙы, бик эреләре генә тороп ҡалды. Мин дә ахмаҡ түгел, йығылып уҡ төшмәнем. «Өндә Һөйләшербеҙ...»—тип кенә ебәрҙем. Ярар, ул да әҙерәк ғазапланһын әле.

Был төшөмдө мин үгкән төндә күргәйнем, ә бөгөн ул өс ҡаптырмамды, ике ҡармағымды, аҡтыҡкы ҡап шырпымды отоп алды. Хәйерселектең инде сигенә етеп ҡайтып инһәм, Оло инәйем аҡ эт бәләһен ҡара эткә һылап тора.

— Сәлих ағайым тәмәке тартмай ул, Оло инәйем, — тип тегенең араһына керҙем. Нисек инде үҙ ғәйебемде күрәләтә кеше өҫтөнә ауҙарайым.'

— Көндөң көнөндә ҡайҙа була һуң шул саҡлы шырпы?

— Әлләсе... Хәҙер бит шырпыны бик алама сығара башланылар. Өстө сыяһың, берәүһе тоҡана. Шуға күрә бәрәкәте юҡ, — тип мин кешенән ишеткән һүҙҙе әйтә һалдым. Оло инәйем йылмайып ҡуйҙы:

— һин әжәлгә лә сәбәп табырһың да ул, синнай... Бар, ҡараңғы төшкөләгәнсе, лавкаға барып ҡайт.

Бик ялҡау килһә лә, Оло инәйемдең һүҙен йығып булмай. Мин бит уның иң төп таянысы. Атайым менән Кесе инәйем, бөтә ваҡ балаларҙы тейәп, Сайран ауылына Ғәйникамал апайымдарға ҡунаҡка китте. Ағайымдар әле урман эшенән ҡайтмаған. Өйҙә ул да мин генә.

— Ҡоба һыйыр бөгөн таңда йөрөй. Төнөн быҙаулай-нитә ҡалһа, фонарь тоҡандырып сығырлыҡ та шырпы юҡ. Көндәр ана ниндәй зәһәр... Быҙауын туңдырып ҡуймаһаҡ инде... — Быларҙы Оло инәйем минең өсөн һөйләй, мин башҡарасаҡ йомоштоң үтә ҙур икәнлеген төшөндөрә. Ҡоба һыйыр тигәне — беҙҙең аҙбарҙа минең иң яраткан малым. Йыуаш ул. Тыңлаусан, илгәҙәк. Көтөүҙән аҙашып йәки ҡуранан китеп, һис быраматта йөрөмәç. Ике күҙен мөлдөрәтеп бер ҡараһа, ҡойолаһың да төшәһең, һиңә әйтер әллә ниндәй аҡыллы һүҙҙәре бар кеүек уның. Ҡайһы саҡ мин уны Оло инәйемә оҡшатып ҡуям. «Тик теле генә юҡ», — тим.

Оло инәйем усыма өс тин баҡыр аҡса һалды.

— Бейәләйең эсендә услап ҡына бар. Тик анау Сәғиҙулла кеүек булма, — тине.

Лавка беҙҙән алыç. Уны кооператив тип тә йөрөтәләр. Ҡала урамы менән Өс әтәс урамы мөйөшөндә ул. Уға барғанда, Сәлмәй хюҡоро аша үтергә кәрәк.

Элегерәк шөрләтә ине лә, хәҙер соҡорона иҫ китмәй. Ул лавкала Күркә Мәүлетбай менән Әтәс Сафуан ағай һатыу итә. Ҡушаматтары үҙҙәренә бик таман килеп тора. Икеһе лә кәпрәйергә, кешене мыҫҡыл итергә бик шәптәр.

Баҡыр тәңкәне услаған көйө югерә бирәм. Үҙем, теге Сәғиҙулла мәрәкәһен уйлап, әсемдән көлөп барам. «Бына бер бешмәгән...» — тим. Беҙҙең түбән күрше Сәғиҙулланың мажараһы көлөп туймаҫлыҡ шул. Юғары остағы Зөләйхә еңгә Сәғиҙуллаға көпө тегә икән. Инәһе бының усына өс төймә һалған да:

— Мә, тиҙ үк еңгәңә илтеп бир, көпөңә тағыр, — тигән.

Сәғиҙулла, усын йомоп, йомошон йомошларға югергән. Юл ыңғайында малайҙар менән ат тиҙәге тибеп уйнаған был, Ғариф тауында сана шыуған, унан эт талаштырған ерҙә торған, тик кискә табан ғына Зөләйхә еңгәгә барып еткән. Килеп ингәс тә, йоҙроғон асып, еңгәгә һонған.

— Еңгә! Бына һиңә өс төймә! — тип һөрәнләгән. Баҡһаң, усында бер төймә лә юҡ икән.

Сәғиҙулла хәҙер еткән егет инде. Уның малай сағында әйткән үтемле, тапҡыр һүҙен беҙҙең ауыл халҡы әле булһа онотмай. Эш көткәнсә барып сыҡмаһа йәки ниәт яҙа килһә, һаман ҡабатлай бирәләр: «Бына һиңә өс төймә!..»—тиҙәр.

Лавкаға йөрөргә мин элек ярата инем. Анау көндән һуң биҙҙем. Уның нигеҙ буйында әле булһа берәҙәк Микәй уҡшып ята һымаҡ... Бөтәһе лә шул бәхәс арҡаһында инде. Беҙҙең типтәр үлеп бәхәс ярата. Йәше-ҡарты, бала-сағаһы, бисә-сәсәһе, хатта килен-киләмәһе, бәхәс тиһәң, ҡаплана ла китә. Ерән мыйыҡ ҡоҙабыҙ Хисмәтулланы әйтеп тораһы ла юҡ. Уның әңгәмәһе әле алда булыр. Ана, беҙҙән дүрт өй аша Ғәйшә менән Гөлсирә исемле ике килендәш тора. Үткән аҙнала шулар бәхәсләшкән. Бер тауыҡтан. Гөлсирә әйтә икән: «һаҡбай Миңзифа ҡарсыҡтың кейгән ыштанын һалдырып алайыммы?»— ти икән. Ғәйшәһе сәмләндерә бирә, ти: «Булдыра алмайһың!» Тегеһе һаман: «Булдырам!»— ти. Бынһы, оторо сәмләндереп: «Юҡ! Юҡ! Юҡ!» — ти икән. Икеһе лә берәр тауыҡ тотоп, аяғын бәйләп ташлағандар.

Миңзифа ҡарсыҡ тигәнең — бәләкәс кенә ала-сыҡта ғүмер итеп ятҡан етем бер инәй. Үҙе фәҡир, үҙе бик игелекле. Гөлсирә килгән дә әбейгә былай тигән (Ғәйшәһе тәҙрәнән күҙәтеп тора икән):

— Инәкәйем, бөтә ышанысым һиндә генә! Ағайымдар Ҡара Яҡуптан, ҡунаҡҡа саҡырып, пар ат ебәргән. Кешелеккә кейергә бер генә ыштаным да ҡалмаған. Арыуыраҡ берәр ыштаныңды биреп торсо...

Миңзифа инәй шунда уҡ һандығын аҡтарырға керешкән. Ә Гөлсирәгә тегеһе оҡшамай, быныһы ярамай, имеш. Аптырағас, инәй әйтә һалған:

— Әләйһә, киленкәйем, бынау өҫтөмдәген килештермәҫһеңме икән? Кисә генә кейгәйнем. Ямауыфәләне лә юҡ.

Гөлсирә быныһын, әлбиттә, оҡшатҡан. Шул күлдәк-ыштаны менән генә ике ҡатлы әбей ҡыуана-ҡыуана һалып биргән.

Юҡҡа ғына Гөлсирәне «йылан аяғын киҫкән» тимәйҙәр шул. Ифрат уҫал, хәйләкәр нәмә.

Ә бына Микәй бөтөнләй хәйләһеҙ бер йән эйәһе. Уның ҡайҙан килеп, ҡайҙа киткәнен һис кем белмәй. Йөрөй шунда тирә-яҡты ҡыҙырып. Беҙҙең ауылға ул баҙар көндә генә килеп сыға. Бирһәләр — ашай, ҡыуһалар — китә. Зыяны ла, файҙаһы ла юҡ. «Нимә берәр ерҙә төпләнеп кенә эшләмәйһең, Микәй?»— тиһәләр, ул былай яуаплай: «Эшләп ҡарарым инде. Миңә эш сыҙамай», — ти. Тиле Ғәббәсте ирештергән шикелле, Микәйҙе бала-саға үсекләмәй, артынан таш ырғытып та ҡалмай. Ҡайһы ваҡыт уны һырып алып, ауыҙы менән мүзикән уйнаттыра^ быҙ. Ирендәрен дерелдәтеп, шундай уйнай ул мүзикәнде, гармунсы Мәрәһимең бер ситтә торһон. Көйө генә беҙҙеңсә түгел, әллә марисә, әллә керәшенсә. Шулай ҙа моңло. Эҫтәрҙе өҙҙөргәс. Микәй үҙе лә аҙашып йөрөгән бер ят йыр шикелле. Үҙе—моңло, үҙе — беҙҙеке түгел.

Үткән баҙар көн Кесе инәйем мине һабын алырға ебәрҙе. Лавкала халыҡ байтаҡ ине. Шағыр-шоғор баҫып, Микәй килеп инде. Туңып бөткән, һирәк кенә мыйығына боҙ ҡатҡан.

— Ә, Микәй! Юл бирегеҙ Микәйгә!—тип ғол-

дорҙаны Күркә Мәүлетбай.—Тауар кәрәкме, бай абзый?

— һи-и, Мәүлетбай, намыҫың түрҙә, оятың гүрҙә булғыры. Кет-кет-кет, — тип кеткелдәп ҡуйҙы Микәй.

— Низән шулай көләһең, Микәй? — тип был юлы Әтәс Сафуан һүҙ ҡатты.

— Үҙемдән. Минән дә мәрәкәрәк әҙәм бармы ни? Алаһы тауарым алынған, һарайҙарым һалынған, бына күрәһең, үҙем — керәшен, эскәнем — кәрәсин.

Микәй тағы нимәләрҙер теҙмәксе ине, Мәүлетбай тиҙ үк эләктереп алды:

— Ә һин, Микәй, ысынлап та, кәрәсин эсә алаһыңмы?

— Минме? Кәрәсинме? Әллә, белмәйем...

Ошо мәлдә лавка эсе гөж килде. Береһенән-береһе уҙҙырып, төрлө тауыштар илерҙе:

— Булдыра алмай ул!

— Хәленән килмәй!

— Ни эшләп хәленән килмәһен, ти, ир аҫылының!

— Үҙе шундай ғына булһа ла, эсе тулы ғәйрәт уның!

— Ҡуйығыҙ бушты! Микәй булдыра торған эш түгел был!

— Булдырһа, минән егерме тин көмөш! — тип Мәүлетбай тәңкә сөйҙө лә усы менән тотоп алды.

— Минән дә егерме тин! — Сафуан көмөш аҡсаны бармаҡ остары менән семтеп тотоп, тегеләй-былай әйләндерел ҡуйҙы.

Быларға бүтәндәр ҙә ҡушылды:

— Минән ун тин!

— Биш тин!

— Өс тин!

Кешегә эйәреп мин дә: «Ике тин!» —тип ҡысҡыра яҙҙым. Саҡ-саҡ ҡына тыйылып ҡалдым. Юғиһә һабындың бер сите арыу ғына кителә ине.

Иҫәүәнерәк булһа ла, Микәй аҡсаның нимә икәнен белә, ахырыһы. Мул ғына төшәсәк бит. Икеләнеберәк, ул тағы ҡабатланы:

— Минме? Кәрәсинме? Күпме эсергә кәрәк һуң уны?

— Йәмәғәт! Йыйымды бына бында һалығыҙ, —

тип берәү ҡолаҡсынын систе. Танымайым, сит ауыл кешеһе буғай. — Батыр өлөшө ошо ҡолаҡсында булыр!

— Әллә тәүәккәлләргәме икән? — тине -Микәй үз-үзенә. — Күпмерәк эсергә һуң?

— Анау бер кружка еткән, — тип билдәләне Күркә Мәүлетбай. Мискә өҫтөндә тора ул ҡалай кружка. Бер шешә һыйышлы булыр.

Ошо мәл әлеге ҡолаҡсынға көмөш ҡатыш баҡыр тәңкә, сыңлап, һикерешә башланы. Минең күңелемде ҡапыл ниндәйҙер хәүеф баҫты. Әйтерһең, әле аҡса сылтырамай, ә Микәйҙең башына, сыңлатып, баҡыр табаҡ менән һуғалар. Мин беләм инде, кәрәсиндең бер тамсыһын йотоуы ла әжәл. Беҙ аулаҡ ҡалһаҡ, ауыҙға кәрәсин уртлайбыҙ ҙа, уны янған шырпыға бөркөп, ялҡын сығарып уйнайбыҙ. Шул саҡ яңылыш йотоп ебәрһәң, эҫтәрең аҡтарылғандай була...

Ҡолаҡсын хужаһы, ҡолаҡсынын туҡтауһыҙ һелкетеп, аҡса сылтырата. Башҡа шылт иткән нәмә юҡ. Бары тәңкәләр генә сыңлай...

— Улай бик ҡыҫтағас ни... Аҡса өсөн түгел, һүҙегеҙҙе йыҡмаҫ өсөн генә хоҙайға тапшырам. Әсемдән йәнем сығып ҡасмаҫ әле. Ҡасһа тағы... Ҡойоғоҙ!

Ҡойҙолар. Микәй күҙен йомдо ла, тын алмай, бер кружка кәрәсинде эсеп бөтөрҙө. Ниңә күҙен йомдо икән? Был бәхәстең нимәһе ирмәк булыуын мин шул саҡта ла, унан һуң да аңламаным. Тик иҫәр Микәйҙең ни өсөн күҙҙәрен йомоуын бына бара торғас төшөндөм. Ул, моғайын, аҡыллы кешеләрҙең ахмаҡ ыржайған йөҙҙәрен, әшәке ҡиәфәттәрен күрергә теләмәгәндер. Ни генә әйтмә, бынан ары ла шул кешеләр араһында йәшәргә кәрәк бит... Бына шундай арзан, мәғәнәһеҙ кәйеф-сафаларҙы ваҡ аҡсаға һатып алып, рәхәт сиккәндәрҙе был ғүмерҙә байтаҡ күрергә тура килде. Ә бит берәү ҙә (мин үҙем дә!): «Туҡтағыҙ!»—тип донъя ярып ҡысҡырманы. Ҡысҡырмай ҙа. Аҡсаһы түләнгән, йәнәһе...

— Афарин, Микәй, аҡсаны көрәп алдың, — тип әлеге ағай ҡолаҡсын төбөндәге аҡсаларҙы тырмап усына йыйҙы ла Микәйгә һондо. Теге баш сайҡаны. Берәүгә лә иғтибар итмәй, лавканан сығып уҡ китте.

— Вәт, әй, аҡсанан туйған әҙәм дә булыр икән,— тип аптыраны Күркә Мәүлетбай. — Вәт, әй...

- Астан ҡойроҡ сәнсһә, килеп алыр әле. Мә, Сафуан, һиндә тороп торһон. — Сит ауыл кешеһе иғәнәне лавкасыға тапшырҙы. Ҡолаҡсынын ҡаҡҡылап башына кейҙе. Йәнәһе, күрегеҙ, һуҡыр бер тине лә ҡалманы, тимәксе була.

Мин лавкала байтаҡ йыбандым. Сират теймәй торҙо. Йомошомдо йомошлап урамға сыҡҡанда, Микәй нигеҙ буйында ҡар өҫтөндә ҡапланып ята ине. Әллә һыҡтап илай, әллә уҡшый. Мин эргәһендә байтаҡ баҫып торҙом. «Микәй, Микәй ағай!» — тип саҡырып ҡараным, иларҙай булып. Ул өндәшмәне. Ә бит, ирендәрен ҡалтыратып, нисегерәк мүзикән уйнай ул! Хәҙер йөҙтүбән ята. Әллә уҡшый, әллә һыҡтап илай. Ҡырҡ ямаулы сәкмәне арҡаһына һыҙырылып менгән. Ыштан төбө лысма еүеш. Күрәһең, баяғы кәрәсин юлды үҙенә тиҙ тапҡан.

— И кафыр, алҡымынан алынғансы тығынмаһа тағы! Тфү! —тип бер әбей төкөрөнөп үтте. — Донъя ҡороҡостар, шайтан ҡолдары... һиңә ни ҡалған тагы?! — тип миңә лә екеренеп алды. — Эт ҡоҫоғон еҫкәп тораһың. Бар, өйөңә ҡайт!

Микәйҙең ғазаптары өсөн мин әҫтәмә үҙем күтәрә алмаҫтай ғәйеп йөкмәп ҡайтып киттем. Был үткән баҙар көн булды. Бөгөн тағы шул лавкаға китеп барам. Сәлмәй соҡорона еткәндә, көн эңергә ауыша башланы. Ҡапыл шомланып ҡуйҙым. Шомланырһың да шул. Бынау күпер аҫтында бит енпәрей мыжғып тора. Ярай йыуаштар әле. Берәүгә лә тейгәндәре юҡ.

Мин лавкаға килеп еткәндә, Күркә Мәүлетбай менән Әтәс Сафуан ишеккә йоҙаҡ һалып тора ине. Таралдым да төштөм. Бөттө былай булғас...

— Ағайҙар!—тип ялбарҙым мин. — Зинһар өсөн, бикләмәй тороғоҙ! Оло инәйем шырпы алып ҡайтырға ҡушҡайны... Ағайҙар...

— Бикләнек шул инде. Ана, күрәһеңме? — Әтәс Сафуан томбойоҡ япрағы дәүмәле йоҙаҡҡа күрһәтте.

— Күрәм дә... Шырпы бик кәрәк ине шул. Оло инәйем ҡушты. Дөм ҡараңғыла ултырабыҙ юғиһә,— тип шаштырҙым. Ҡоба һыйырҙы ла ҡыҫтыра

яҙғайным, әммә тыйылдым. Көлкөгә алыуҙары бар. Был икәүҙә иман яғы самалы.

Шулай ҙа Мәүлетбай ишек эргәһенән китергә ашыҡманы.

— һин кем малайы һуң әле?—тигән булды, күрәләтә башын этлеккә һалып.

— Беләһең дә инде... Нурсафа малайы. Оло инәйемдең улы... >

— Әллә, Сафуан, был егеткә шырпы бирәбеҙме, хаҡын һәйбәт түләһә?

— Түләрмен. Һәйбәт түләрмен. Бына аҡса! — Бейәләйемде һелкеп ҡуйҙым.

— Аҡса ғына етмәй, һәнәр ҙә күрһәтергә кәрәк.

— Ниндәй һәнәр?

•— Бар шундай тылсымлы бер һәнәр... Анау мискәгә баҫып, елпенә-елпенә өс тапҡыр: «Торыйҡ! Торыйҡ! Торыйҡ!»—тип ҡысҡырһаң, лавка ишеге үҙенән-үҙе асыла ла китә,—тип ауыҙ йырҙы ҡыҙыл бөрләтәүле Күркә. Уның эйәге шулай миңә бөрләтәү булып күренде.

Ҡапыл тыным ҡыҫылды. Минең «Кендек», «Рукавказ» тигән үҙ ҡушаматтарымдан тыш «Торна» тигән ырыу ҡушаматыбыҙ бар. Бына ҡайҙа тоҫҡай Мәүлетбай үҙенең ағыулы уғын. «Кендеген» әйтһәләр ҙә, сикәгә сүкеш менән һуҡҡан кеүек була. «Торна»һын ишетеү — әжәлдән дә яман. Тегеһен атап үҙемде хур итһәләр, бынаһын атап, бөтә ырыуымды мәсхәрәгә ҡалдыралар.

— Юҡ! Әйтмәйем! Үлтерһәгеҙ ҙә, әйтмәйем!

— Улайһа, шырпы ла юҡ! Ултыра бир, әйҙә, дөм ҡараңғыла.

Тап ошо мәл ҡоба һыйырҙың бойоҡ күҙҙәре миңә төбәлде. «Бөгөн таңда йөрөйөм, — ти ул, гүйә,— быҙауымды туңдырһаҡ, ни эшләрбеҙ?»

— Ағайҙар!—тинем, үҙемде шартлатып һындырҙым.— Минең үҙ ҡушаматым бар. Миңә «Кендек» тип исем атайҙар. Әләйһә, шуны ғына әйтәйем дә... Теләһәгеҙ, дүрт тапҡыр...

Мәүлетбай яҡын да килмәй:

— «Кендек» тә булған икән ҡушамат! — Оятһыҙ нәмә, хатта минең ҡушаматымды кәмһетә. — һин беҙгә ысынын, ата-бабанан ҡалғанын, давай! — ти. Y

Мин икеләнә башланым. Ҡоба һыйыр хәҙер миңә моңайып ҡарау ғына түгел, ялбарып мөңрәй ҙә, имеш. Тауышы йәнемде өйкәй. Уның былтырғы быҙауы, үҙе төҫлө үк, һәләк һылыу ине, алғы бәкәлдәре ап-аҡ ине. Тик ғүмерһеҙ булды. Ниндәйҙер ярамаған үлән ашап, күбенеп үлде. Ҡоба һыйырыбыҙ шул хәсрәтенән һаман айный алмай йөрөй. Был быҙауы, бәлки, йыуаныс килтерер, тип торабыҙ, имен генә ҡотолһа.

- Нимә, шырпы кәрәкмәҫ булдымы ни?

— Кәрәк. — Мин баҫтырып ҡуйылған ҙур мискә эргәһенә килдем. Үҙем генә менерлек түгел. «Бейек— мендерегеҙ!» — тип бойорҙом. Әтәс Сафуан мине мискә өҫтөнә баҫтырҙы. Бына хәҙер ошонда торған көйө, ике ҡулыңды елпеп, бер Мәүлетбайға, бер Сафуанға төбәп: «Ғолдор-ғолдор кикри-кү-үк! Ғолдор-ғолдор кикри-кү-үк! Ғолдор-ғолдор кикри-кү-үк!»— тип йөҙ тапҡыр, юҡ, мең тапҡыр ҡысҡырырға ине. Ниндәйҙер мәлдә тел осомдан ысҡына ла яҙып ҡалды. Тыйҙым. Тирә-яҡҡа ҡарап алдым. Үткән-Һүткән күренмәй. Йә хоҙай! Ни көндәргә төшәм мин! Тәүҙә*ҡанаттарымды елпеп торҙом. Бик оҙаҡ елпенем. Шунан һуҙа биреп, асыҡ итеп: «Торыйҡ! Торыйҡ! Тор-рыйҡ!» — тип ҡысҡырҙым. Торнаға оҡшатып, еренә еткереп ҡысҡырҙым. Өс кенә түгел, биш тапҡыр, ун тапҡыр, егерме тапҡыр ҡабатланым. Үҙемә үс итеп ҡабатланым, йәнә тегеләргә үс итеп ҡабатланым. Торған һайын сәмем, ғәрлегем артты. Тамам ярһыным. Инде үҙемде тыя алмай ҡысҡырам: «Торр-рыйҡ! Торр-ррыйҡ!!» «Мәгеҙ! Өнөгөҙ тығылһын!» — тип ҡәһәрләйем үҙҙәрен әсемдән.

— Йә, булды инде, булды. Етер, төш, — тине Мәүлетбай, ниңәлер, йомшарып. Мин бер талай һауаға муйын һуҙып торҙом да, ҡанаттарымды киң йәйеп, ергә һикерҙем. Торна булғас, ахырынаса торна булып ҡалырға, хурлыҡҡа бер батҡас, муйындан батырға кәрәк — ғүмергә онотолмаҫлыҡ итеп...

Сафуан ишектең биген асты. Эскә ингәс, Мәүлетбай шәм тоҡандырҙы.

— Күпме кәрәк? — тип һораны Күркә.

—- Өс тингә. Бөткәнсе. Бына... — Мин бейәләй

эсенән ҡулымды килтереп сығарҙым. Усым буш ине. Икенсе бейәләйемде лә һалдым. Юҡ. Бейәләйҙәремде һелкеп тә ҡараным. Юҡ. Берҙән-бер салбар кеҫәмдең төбөн өйләндереп сығарҙым. Юҡ. — Ошо усымда ғына ине. Өс тин баҡыр ине...

— Бына һиңә өс төймәү,— тип ҡыҫҡылданы Әтәс Сафуан. Мәүлетбай унның келәүенә ҡушылмаһы, хатта мине йыуатҡандай итте. *.

— Мискә эргәһендә төшкәндер, иртәгә табып алырбыҙ әле. Бына һиңә өс тинлек шырпы, —тип миңә нисәлер ҡап һондо. Мин һанап торманым. Уларҙы салбар кеҫәмә тултырҙым. Үҙем һаман **ту**лыша киләм, тулыша киләм. Бына-бына шартлайым бит инде. Ишеккә барып етә алманым, ҡысҡырып илап ебәрҙем.

— Илама, иҫәүән, юғалһа, һинеке түгел, беҙҙеке юғалды бит, — тип ҡалды Мәүлетбай.

Сығып югерҙем. «Их, һеҙ!., һеҙҙә аҡса ҡайғыһы, миндә намыҫ ҡайғыһы. Өс тинлек шырпы өсөн олатайымдың, атайымдың — бөтә ырыуымдың яманатын һаттым мин. Намыҫты хәжәткә алмаштырҙым. Шул арҡала үҙем бөлдөм, юҡҡа сыҡтым. Бына шуның өсөн илайым мин...»

Ҡайтыр юлымда был хурлыҡҡа тешәүемдең сәбәптәрен берәм-берәм барлап сыҡтым. Иң тәүҙә, әлбиттә, Күркә Мәүлетбай менән Әтәс Сафуанға килеп төртөлдөм. Әшәке нәмәләр! Унан ары уйында харамсыл Шәйхаттарға һуғылдым. Харамлашҡан өсөн генә ота ул. Йәнә ҡоба һыйырҙы ғәйепләнем — бынау көндә быҙауларға йыйынмаһа тағы?.. Оло инәйем дә инде. Иртәгә саҡлы күршенән генә берәр ҡап үтескә алып тороп булмайҙыр шул! Кис йөҙөндә мине ебәрмәһә... Өс тин баҡырын әйтер инем — ҡуйған урынында тормай. Әгәр алтын булһа, ниҙәр ҡыланыр ине икән?!

Бөтәһен дә әҙәп хөкөмөнә тарттырҙым. Ләкин бар бәләнең башы ла, аҙағы ла булған үҙемә тел тейҙереү ул саҡ башыма ла инмәне. Хәҙер килеп үҙемдән яуап алам: ә һин һуң?

Намыҫҡа, әҙәпкә көс килтереп, шулай хәжәт атҡарыусылар, моғайын, үҙҙәрен ғәйепле һанамайҙарҙыр. Ул көндө бит мин хәжәт башҡарҙым...

Хәйер, беҙҙе шаярттылар ғына бит. Хәйләкәр



174-се биткә. «Ике ҡулын алға һоноп, бәһлеүән Мәрәһим, Аҡйондоҙҙо бәпес тотҡан шикелле күтәреп, минең эргәмдән генә уҙып китте».

Гөлсирә етмеште үткән Миңзифа ҡарсыҡтың былай ғына, ҡыҙыҡ итеп кенә ыштанын һалдыртты. Баҙар көндө бахыр Микәйҙе, ирмәк итеп кенә, үлтерә яҙғансы интектерҙеләр. Минең мохтажымдан файҙаланып, көлкө сығарыр өсөн генә йәнемде имгәттеләр. Уйындың уймағы бына шулай килеп сыға. Бәлки, мин хаҡһыҙмындыр, уйын күтәрмәй торған бер тинтәкмендер, бәлки. Ярай, шулай ҙа булһын. Ләкин барыбер уйын кешене эт итмәҫкә тейеш.

...Бик күп йылдар үткәс, алыҫ Көнсығыш илдәренең береһендә мин боронғо цирк тамашаһы ҡараным. Артистәрҙең уйындары мауыҡтырғыс булды. Әммә бер нәмә йөрәккә онотолмаҫлыҡ әрнеү һалды. Аяҡ-ҡулдары сонтоҡ, муйыны оҙон ғәрип ир аренала эт булып уйнаны: ул һикерә, аунай, өрә, оло һөйәк ҡабып югерә, ырылдай, бағана эргәһенә килеп артҡы аяғын күтәрә, тағы әллә нәмәләр ҡылана. Шундай килештерә, ысын этең ары торһон. Ваҡ аҡса түләп, тамаша күрергә килгән кешеләр, быны хуплап, гөж килә, сәпәкә итә, һыҙғыра; банан, әфлисун, кәнфит ырғыта. Мин үҙемде саманан тыш нескә күңеллемендер тип уйламайым. Шулай ҙа цирк аренаһында эт урынына өрөп йөрөгән ғәрип миңә кесе туғаным булып күренде. Ул да кеше затынан ине...

Алыҫ Көнсығыш иле әле бик алыҫ ине. Мин, туң сабаталарым менән шығыр-шығыр ҡарҙы шығырҙатып, өйгә ҡайтып барам. Тирә-яҡта һис нәмә күрмәйем, һис нәмә ишетмәйем. Тик аяҡ аҫтымда ҡар ғына шыңшый. Ниңә шыңшыйһың, ҡар? Мин йомошомдо йомошлап ҡайтып киләм бит...

## ҒӘРИПТӘРГӘ
## БАЙРАМ
## КӘРӘКМЕ?

Минең ике апайым бар: Сайран ауылындағы Ғәйникамал апайымдың етеп килгән ҡыҙҙары улар. Береһе Гөльямал, икенсеһе Өммикамал. Гөльямалы буйға һылыу, төҫкә сибәр. Үҙе хайран уйынсаҡ. Аяҡ-ҡулың • теүәл, буйың-һының ҡупшы булғас, шаярһаң, да, көлһәң дә, килешеп тора. Ә бына Өммикамал апайымдың хәле бүтәнсәрәк. Уның ярты һаны ғәрип. Мейе сиренән шулай булып ҡалған. Йөрөгән саҡта ҡыйшайып-ҡыйшайып китә. Ул да, ғәрипмен, тип көн-төн илап ултырмай. Әҙәм рәтенә эшләй ҙә, һөйләшә лә, көлә лә. Тик ҡайһы ваҡыт, ҡысҡырып көлгәндә, бер ғәйебе сыҡҡан шикелле, кинәт туҡтап ҡала. Ғәриплеге иҫенә килеп төшә, ахырыһы.

Сайрандағы еҙнәмдең исеме Хәбибрахман. Ул мәсет ҡарты. Эштән сыҡҡан динсел нәмә. Бөтә затты бары харам менән хәләлгә генә бүлә. Хатта минең фуражка козырегын да харамға сығара. «Мосолман кейеме түгел, шайтан мөгөҙө ул», — ти. Шуға күрә мин улар йортона килеп ингәндә, фуражкамдың алдын артҡа әйләндерәм, «шайтан мөгөҙөн» кире яҡҡа борам. Ишетеүемә ҡарағанда, еҙнәм, бик оҙаҡ замандар һалдатта кафыр араһында йөрөп, иманын юғалтып ҡайтҡан. Шуның арҡаһында, гонаһтарын йолатмаҡсы булып, мәсеткә эйәләшеп алған. Әллә шулай, әллә түгел — уныһын кем белһен. Әммә сит кеше алдында ул, Ч5есәй сөскөрһә лә, «ярхамбикалла!» тип кенә тора. Картуф баҡсаһына күрше тауығы килеп инһә, уны ҡатлы-ҡатлы һүгеп ҡыуып сығара. Оҫта һүгенә еҙнәм. Унан, уҙҙырһа ла, беҙҙең урамдың көтөүсе,Нуретдин генә уҙҙырыр.

Минеҡ еҙнәм ҡуянсы. Бер сәйҙә унын мылтығы, икенсе сәйҙә ҡамсыһы эленеп тора. Өйҙә малай заты булмағас, ул мине яҡын күрә. Әсем бошоп китһә, югерәм дә Сайранға барам. Башыма берәй уй төшһә, әйтеп-нитеп тормай, ҡайтып та китәм. Уй тигәнең ул сәбәпһеҙ генә килмәй инде. һәр ваҡыт сәбәбе була. Бер саҡ баҡса артында бесән сабып уйнағанда, ат атланған малай шундай йыр йырлап үтте:

Ҡырғын ҡуҙғалмай, тиҙәр...
Ул ҡуҙғалһа, донъяларҙа
Ҡатын-ҡыҙ ҡалмай, тиҙәр.

Йөрәгем жыу итеп китте. Әгәр ул ҡуҙғалған булһа? Инде беҙҙең ауылға килеп еткән булһа? Минең ике инәйемде лә үлтереп ташлаған булһа? Мин, артҡы кәртә араһынан ғына сығып, үҙебеҙҙең ауылға ҡарай югерҙем. Үҙем югерәм, үҙем илайым. «И Оло инәйем! И Кесе инәйем!» —тим. Хәлдән тайып бөттөм. Ауылға килеп инһәм, бөтәһе лә әүәлгесә. Өйҙә лә именлек. Икенсе бер ваҡыт беҙҙең ауыл яғында төтөн күренде: «Беҙ янабыҙ икән...» — тип, тыным бөтөп, ауылға саптым. Ҡайтһам, Ҡаҙнағол баҫыуында һалам яндыралар икән. Шундай һантыймын мин. Ҡурҡыуым менән уҙыша-уҙыша, биш саҡрым араны һиҙмәй ҙә ҡалам. Йә был яҡтан, йә теге яҡтан мине артымдан эҙләп киләләр. Табылғас, орошмайҙар улай. Бәлки, орошорҙар ҙа ине, Оло инәйем тел тейҙертмәй. Хәбибрахман еҙнәмдең дә миңә әйткән иң ҡаты һүҙе — «иҫәүән!» Шунан арттыра алмай. Алмаҫ та шул! Картуф баҡсаһында тибенеп йөрөгән күрше тауығымы ни мин уға? Бына Өммикамал апайымды ул ифрат ҡаға. «һи, һа-ан-һыҙ!» — тип кенә тора. Әйтерһең, ул ғәриплеген үҙе теләп алған. Сирҙән шулай ҡалмаһа, Гөльямалдан да һылыуыраҡ булыр ине әле — ошо буйы менән!

Ғәриптәрҙе мин үлеп йәлләйем. Бигерәк тә байрам осоронда. Байрам көндә уларҙың зәғифлеге тағы ла нығыраҡ күренә төҫлө. Майҙанға сыҡмаһалар ни була икән? Былтыр һабантуйҙа Өс этәстең көтөүсеһе бөкөрө Шәрәй аҡ күлдәктәр, ҡара итектәр, аҡ эшләпәләр кейеп сыҡҡан булған. Әйтерһең,

һабантуй бер уның өсөн генә яһалған. Бисараҡай! Мин дуҫым Әсғәткә үҙемдең шигемде әйтәм:

— Ғәриптәргә байрам ниңә кәрәк инде?

Әсғәт аңламай тора:

— Ҡайһы ғәриптәргә?

— Анау бөкөрө Шәрәйгә, салыш муйын Хансаға, төйәкһеҙ иҫәр Микәйгә...

Дуҫым аптырабыраҡ торҙо:

— Ғәриптәргә байрам бигерәк тә кәрәк шул. Тикәй көндө уларҙы аҙмы кәмһетәләр, байрам көндө, исмаһам, бөтә әҙәм тиң...—тип Әсғәт япраҡһыҙ ҡолағын һыйпап ҡуйҙы.

— Тиң тағы... Шәрәйҙең үркәсе барыбер шиңмәй **инде.,**

— Үркәсе шиңмәһә, күңеле күтәрелә. Ҡулымдан килһә, мин ғәриптәр өсөн байрамды күберәк яһар инем әле.

Әсғәт нимә генә тимәһен, байрам мәлендә мин ғәриптәрҙе оторо ҡыҙғанам. Кем ҡорондалыр аҙыраҡ бал төшөрөп алған Шәрәй бейеү түңәрәгенә сыҡҡан булды. Улай-былай һикергеләп, бейегән рәүешле ҡыланды, «һай, афарин, Шәрәй, оҫта баҫаһың!» — тип ихлас хуплаусылар ҙа табылды. Дәкин бер яуызы телен тыя алманы: «Иплэп, иплэп, Шәрәй арҡаңдағы йөгөң ҡойолоп бөтмәһен...»— тине. Эргәһендә баҫып торған Хисмәтулла исемле беҙҙең ерән ҡоҙабыҙ теге әшәке телле нәмәнең ауыҙына сәп иттереп тондорҙо тондороуын. Әммә унан ни файҙа? Иларҙай булып. Шәрәй түңәрәктән сығып китте.

Бына һиңә тиңлек!

Беҙҙәге шикелле, Сайранда ла яҙ көнө киске уйындар була. Бер көндө апайымдар илай яҙып инәлгәс, миңә ышандырып, еҙнәм уларҙы киске уйынға ебәрҙе.

— Күҙ бәйләнгәнсе ҡайтып етегеҙ, мәтри уны! — І ип ҡысҡырып ҡалды. Минең өҫкә төшкән бурысты айырата хәтерләтте. — Апайыңдарға күҙ-колаҡ бул!

Был инде уның миңә, күҙәтсе бул, шымсы бул, **ТИеүе** ине. Тапҡан кешеһен!

Уйынды йәштәр Бәрсүән һыуы буйында йәмйәшел сирәмдә ҡорғандар. Киске уйындарҙа ҡыҙыҡлы тамашалар ҙа, уҙыштар ҙа, көрәштәр ҙә,

П*

ярыштар ҙа булмай. Йәш-елкенсәк ҡара-ҡаршы төшөп бейей, әйлән-бәйлән йөрөп йырлай, ҡулға-ҡул тотоношоп, ҡапҡалы, сылбыр уйыны уйнай. Ҡыңғыраулы, көҙгөлө әллә нисә гармун, күректәре шартларҙай булып, ярһып моң сәсә. Яҙғы кистә шул гармун моңонан да сихырлыраҡ нәмә юҡтыр...

Башта мин үҙем кеүек малайҙар менән шапшаҡыр уйнап туйҙым да Өммикамал апайым эргәһенә килдем. Ул, аяҡтарын алға һуҙып, бер ситтәрәк яңғыҙы үлән өҫтөндә ултыра ине. Йөҙө моңһоуыраҡ күренә. Юҡ, уның күҙҙәрендә көнләшеү ҙә, кәмһенеү ҙә сағылмай. Бүтәндәрҙең уйнауына һоҡланып ултыра ул. Мин уның эргәһенә теҙләндем. Апайым минең муйынымдан ҡосаҡлап алды.

Беҙҙең Гөльямал апайыбыҙ иһә йөҙә генә. Хәҙер генә, бейеп, түңәрәк уртаһында орсоҡтай әйләнә ине, баҡһаң, ҡапҡалы уйынында эйәртеүсе лә булып алған. Еҙ ҡыңғыраулы саратовский гармунын өҙөрҙәй булып һуҙған гармунсыға атап йыр ҙа йырлап алды. Тегеһе йырылған ауыҙын яба ла алмай. Бөҙрә сәсле баһадирҙе апайымдың бер йыры ебетте лә ҡуйҙы. Ебер ҙә шул. Йыры ни ҙә күкрәгенән сыҡҡан моңо ни!

Үҙең гармунсы егет,
Ҡулыңда көмөш йөҙөк.
Байкал күлдәренә төшһәң.
Кереп алырмын йөҙөп.

Ай-Һай, шаштырыбыраҡ ебәрҙе түгелме? Мин йырҙың йыртығын табам. Бынау саҡлы әзмәүерҙе, батһа, алып сығырһың. Үҙеңде батырыр... Ул саҡта мөхәббәттең ҡөҙрәте, ҡатын-ҡыҙ рухының сикһеҙ көсө — минең өсөн әле асылмаған йыһан ине. Йәшәй-йәшәй генә аңлаясаҡмын мин: ҡатын-ҡыҙ мөхәббәте ир кешене океандарҙа батырмай, ғаләм уттарында яндырмай, өйөрмәләрҙә аҙаштырмай ҡурсалар икән. Үҙенең батыуын да, яныуын да, аҙашыуын да уйламаҫ икән. Тик һөйгәне генә ҡотолһон. Бына ни хаҡта йырлаған Гөльямал апайым теге йырҙы.

Гөльямал кисергән бәхеттең сиге юҡ. Нимә генә эшләһә лә, килешә, нимә генә әйтһә лә, урынлы. Үҙенең ике бите ал янған. Бигерәк тә анау бөҙрә ғифрит күҙ һалһа, тоҡанып китә ул. Мин, әлбиттә,

күҙәтеп ултырмайым. Ҡарағас, күренә инде. Ул югерә лә беҙҙең эргәгә килә.

— һылыуым! Туғаным! — тип инәлә беҙҙең икебеҙгә, — саҡ ҡына сыҙағыҙ инде. Тағы ә-әҙ генә торайыҡ та... — Үҙе, беҙҙең яуапты ла көтмәй, кире югерә. Беҙгә нимә. Уйнай бирһен. Мин, Өммикамал апайымдың йылы яурынына башымды терәп, тик ултырам. Өммикамал апайым һәр саҡ теһене дәртләндереп ҡала. «Уйна, танһығың ҡанғансы уйна!» — тип бышылдай.

Гөльямал йәнә безгә һуғылып уҙҙы.

— Асыуланмағыҙ инде! Тағы са-а-ҡ ҡына...— Икебеҙгә лә нескә билле берәр ҡыҙыл перәник тоттороп китте. Бының ҡайҙан килгән һый икәнен хатта мин дә беләм. Егет күстәнәсе. Тимәк, Гөльямал апайым бөгөн «тегегә» сиккән ҡулъяулыҡ биргән. Ҡаршы бүләктән беҙгә лә өлөш сыҡты. Ярар, эсте тишмәç. Өммикамал апайым үҙ өлөшөн дә миңә бирмәксе иткәйне, алманым. Үҙе ашаһын.

Беҙ ҡайтып ингәндә, нығытып ҡараңғы төшкәйне. Өйҙә тып-тын. Өслө генә лампа яна. (Ҡырмышлыҡтары сиктән ашҡан.) Инеүебеҙ булды. Хәбибрахман еҙнәм келт иттереп ишектең келәһен элеп тә ҡуйҙы. Сәйҙәге ҡамсыны алды. Тәүҙә, шыйлатып, ҡаҙауҙағы тире тунға һыҙырҙы. Гөп итеп ҡалды. Унан: «һин аҙҙырҙың уларҙы!» — тип һикелә ултырған Ғәйникамал апайыма һелтәп алды, ләкин һуҡманы.

— Шайтан кәмитселәре! Ғазраил ялсылары! Эттән тыуған кәнтәйҙәр!—тип екеренде. — Ваҡытлы ҡайтығыҙ, тип кемгә әйттем мин? һиңә түгелме ни? — Ҡамсы минең баш өçтөндә әйләнеп алды.

— Тейеп кенә ҡара! Берәйебеҙгә тейеп ҡара!! Хәҙер үк ҡайттым киттем булыр.

— Гөльямал тағы бер хәл. һиңә ни ҡалған һөйрәлеп йөрөргә, һа-а-анһыҙ! Әҙәм имгәге! — Был юлы ҡамсы Өммикамал апайым, арҡаһына төштө. Апайым ыһ та итмәне. Ҡамсы тағы, тағы шыйланы.

— Атай! Атай! Өммөкәйгә теймә! Теймә, атайым!!

— Сиратыңды көт, мәлғүн! — Ул тағы ла Өммикамалға киҙәнде.

— Еҙнә!—тип сарбайлап ҡысҡырҙым мин.— Үҙ мылтығың менән үҙеңде атып үлтерәм хәҙер! — Бүтәнсә һүҙ әйтә алмай, шашып, мин сәйҙәге мылтыҡҡа ташландым.

Хәбибрахман еҙнәм аптырап, ҡаушап ҡалды. Мин мылтыҡты алманым. Мөйөшкә һөйәлдем дә ҡаттым.

— Ярар, бынан ары һабаҡ булһын, — тип еҙнәм ҡамсыны ҡабат сәйгә элде. Мин шул һөйәлгән көйөмә быуылып иларға тотондом. Бер ғәйепһеҙгә туҡмалған Өммикамал апайымды йәлләнем. Бигерәк тә — байрамды... Хәбибрахман еҙнәм, ҡамсы шыйлатып, үҙенең ғәрип ҡыҙын ғына түгел, бөгөн Бәрсүән буйында булған шундай күңелле яҙғы байрамды ла аяуһыҙ туҡмап ташланы.

Йәнә килеп Юғары ос Зыятдин иҫемә төштө. Уның Әғзәм исемле улы былтыр, атаһына әйтмәй, бер алама ғына тальянка алып ҡайтҡайны. Зыятдин ҡарт шундай әҙәм — гармун тауышы ишетһә, енләнә лә китә. Егет-елән улар тураһынан гармун уйнап үтер хәл юҡ, теге, күҫәк күтәреп, ҡыуып йөрөтә. Гармунды «кафыр яһай, уны ҡулға тотоу харам» ти. Әғзәм үҙенең тальянкаһын ситән буйындағы кесерткән араһында йәшереп тота икән. Тегене бер көн Зыятдин ҡарт тапҡан.да, типкеләп, урамға алып сыҡҡан. Шунан, ҙур күҫәк тотоп, бөтә халыҡ алдында туҡмарға керешкән. Мүзикән, бахыр, һуҡҡан һайын «ғыр», «ғыр» килә икән. «Әле ғырылдайһың? Әле һаман ғырылдайһыңмы?!» — тип ахырҙа тегене менеп тапаған. Әғзәм ултырып ҡына иламаны. Бына шулай. Берәүһе моңло күҫәк менән дөмбәҫләй, икенсеһе байрамды ҡамсы менән яра. Ҡулдары ҡороғоро!

Шәфҡәтһеҙлеккә төбәп мылтыҡ ата алмаһам да, теге кистә уны илап ҡурҡыттым. Еҙнәм ары болармаңы. Тимәк, яуызлыҡҡа ҡаршы мылтыҡ күтәрер форсатың булмаһа, һис юҡта уға күҙ йәштәрең менән ат икән. Бәғерһеҙлеккә ҡаршы тәү тапҡыр баш күтәреүем, бәлки, ошо булғандыр. Ә бынан һуң төрлөһө үтте. Ярһып, алыш майҙанына ташланған саҡтар ҙа, ҡаушап, битарафлыҡ ышығына боҫҡан замандар ҙа булды. Төрлөһө булды. Байтаҡ булды...

...Ә хәтер, үткәндәрҙе үҙенә ҡулайлаштырып,

ҡат-ҡат һипләп, төҙәтеп сыға, уларҙан йыуаныс һәм таяныс эҙләй. Инде етмешкә етеп барған Өммикамал апайым теге саҡтарҙы тәмләп-тәмләп иҫкә ала:

— Булған инде иҫәр, шуҡ саҡтар. Гөльямал мәрхүмә менән икебеҙ тиң еттек. Икебеҙ ҙә һәләк дәртле булдыҡ. Киске уйындарҙан ҡайта алмай, төнгәсә олағып йөрөр инек. Ҡайтҡас, атайым мәрхүм, урыны йәннәттә булһын, әй орошор ине, әй орошор ине. Ни тиклем ҡыҙыу ҡанлы булмаһын, ҡул күтәреп һуҡҡанын хәтерләмәйем улай. Әрләнеү күберәк миңә эләгер ине. Күрәһең, баш-баштағыраҡ, ырғандағыраҡ булғанмындыр,тейерен алғанмын Да. һағынып һөйләргә генә ҡалды инде уйынсаҡ, ғәмһеҙ саҡтарҙы...

## КАВКАЗ
## БАТШАҺЫНЫҢ ВАРИҪЕ

Әсғәт дуҫымды йәй иленән дауыл килтереп ташлағандырмы, юҡтырмы — уныһы беҙгә ҡараңғы. Ә бына Сәнсәк Исабәктең беҙгә сит тарафтарҙан килеп сығыуы раҫ. «Яҙмыш еле мине бында ташланы», — ти ул. Әллә ун биш, әллә егерме йыл әүәл килеп сыҡҡан ул беҙҙең ауылға. Өҫтөндә билле ҡара елән икән, еләненең ике түшендәге буй-буй бөрмәләренә бармаҡ буйы аҡ сәйҙәр тығылған икән, башында бөҙрә йөнлө түңәрәк ҡара бүрек икән, аяғында үксәһеҙ ҡара итек икән. «Һин кем булаһың, ир-егет?» — тип һораусыларға: «Кавказ батшаһының бахыр улымын мин», — тип яуап ҡайтарған. Йомма йәштәр түгә-түгә, хәлен һөйләп биргән. Тамған йәштәре тупраҡты көйҙөргән. Үтә лә аянысе, үтә лә яман булған икән бының хәлдәре.

...Көндән бер көндә һары таң ваҡытында төрөк батшаһы Кавказ батшалығына ябырылған да һарайҙарын берсә көл иткән, батша муйынына мәсхәрә бауы һалған, ҡырҡ ҡатынын хур иткән, ҡырҡ ҡыҙын ҡол иткән, ҡырҡ улын ер иткән. Ҡырҡ беренсе улы Исабәк, дөлдөлөнә атланып, тарлауыҡтар аша һикереп, төрөктәрҙән ҡасып киткән. Иң һуңғы тарлауыҡты аша ырғығанда, менгән дөлдөлө, хәле бөтөп, упҡынға ҡолаған, ә һыбайлы, үҙ еле менән осоп, ҡаршы ярға килеп төшкән. Бына шулай ғына ҡотолоп ҡалған Кавказ батшаһының ҡырҡ беренсе вар

Ошо әңгәмәне ишеткән кешеләр ул заман, Исабәккә ҡушылып, зар илағандар. Иламаҫлыҡмы ни — Кавказ батшалығы шул хәлгә төшһөн дә?.. Беҙҙең типтәрҙәр башта ҡунаҡты, йола буйынса,

өйҙән-өйгә йөрөтөп хөрмәтләгәндәр, йыуатҡандар, уның ҡайғыһын уртаҡлашҡандар. Йола тылсымының срогы сығып, көсө бөткәс: «Ниндәй һәнәрең бар?» — тип һорағандар, «һыбай сабам. Йәнә тимер сүкей, ҡалай туҡый, ҡурғаш ҡоя беләм», — тигән батша улы. «һыбайҙы беҙ үҙебеҙ сабырбыҙ. Ә һин сүке, туҡы, ҡой, — тигәндәр беҙҙекеләр. — Дан һәнәр». Ана шунан бирле сүкей ул. Сәңсәк ағай минең өсөн серле лә, ҡыҙыҡлы ла, хәүефле лә. Дуҫым Әсғәт тә ошондайыраҡ. Бүтән донъянан килгән кешеләр мине шулай ғәмгә һала.

Ҡалайсы Исабәк беҙгә урам аша тора. Үҙенең балсыҡ өйөндә ул көн буйы, сәң-сәк, сәң-сәк килеп, йә биҙрә төпләй, йә сүмес һаплай, йә ҡомған тотҡаһы сейнәй. Шуға күрә уға Сәңсәк тигән ҡушамат тағылған. Күп ваҡыт исемен дә әйтеп тормайҙар. Сәңсәк тип кенә йөрөтәләр, һабан һөрмәй, бесән сапмай, ураҡ урмай ул. Бар белгәне — шул ҡалай сүкеү. Хатта Муса мулла ер һөрә, иген сәсә, ә ул сәсмәй. Сәңсәктең үҙенән байтаҡ йәш Әлифә исемле йыуан, әрпеш ҡатыны бар. Өҫтәүенә, эштән ашҡан ялҡау. Хатта өй эргәһендәге картуфтарын да утамай. Көҙгә сыҡҡас, зарлана: «Ҡотоң булмағас ни... Шул картуфы ла игелек күрһәтмәй», — ти. Ҡасан ҡарама, үҙе буҫаға янындағы таш өҫтөндә һағыҙ сәйнәп ултыра. Йә ямау ямаған була шунда. Әлифә үҙебеҙҙең ауылдыҡы — Ғәфифә ҡарсыҡтың ҡыҙы. Ошолар инде балтырған йыйып йөрөгәндә, «кем ҙурыраҡ» тип йәнәшә баҫып үлсәшкәндәр ҙә инәле-ҡыҙлы ыҙғышып киткәндәр. Инәһе: «Мин оло!» — ти икән. Ҡыҙы «Мин ҙур!» — ти икән. «Инәй оло, мин ҙур», — тигән һүҙ ана шунан килеп сыҡҡан да инде.

Әлифә ике һүҙҙең береһендә зарлана: «Үтә бит йәш ғүмеркәйҙәрем заяға ошо Кавказ батшаһының аҡ һаҡаллы йолҡош малайы менән! Ун йыл эсендә бер илаҡ баланан башҡа нимә тергеҙҙе һуң? Уныһын да мин таптым бит әле». Иса юҡта ғына ул шулай һайрап ҡала. Ире алдында бик ҡысҡырынып бармай. Ирҙе ир итә белә. Ҡайһы саҡта хатта ярамһаҡланып та ҡуя: «Ҡалайҙы нисегерәк йырлатып бейетә минең оҫтам...» — тигән була. Ә инде байрам көндәрендә Исабәк ике түшендәге буй-буй

бөрмәләренә бармаҡ буйы аҡ сәйҙәр тығылған билле ҡара еләнен, бөҙрә йөнлө түңәрәк ҡара бүркен, үксәһеҙ ҡара итеген кейеп өй алдына сығып баҫһа, Әлифә һоҡланып туя алмай. «Ана, минең тау бөркөтөм ниндәйерәк. Батша затынан түгел, тип кем әйтер? Бүтән кемдә шундай ир бар, маҡтансыҡтар, юнһеҙҙәр, ғибрәттәр? һаҡалына ла сал инмәгән, аҙыраҡ көмөш кенә югертелгән...» Быны ул, күршеһе Сәлимә ишетһен тип, юрамал ҡысҡырып әйтә. Әсе телле, уңған Сәлимәнең ире Шаһиморат буйға бәләкәй, йәнәһе. Әлифә шуға төрттөрә. Ысынлап та, байрам осоронда Исабәктән дә ҡупшыраҡ, килбәтлерәк, мөһабәтерәк ир күрмәҫһең ауылда.

Иса менән Әлифәнең Нәсимә исемле имсәк балалары бар. Ул бишегендә йә илап, йә йоҡлап ята. Вәлетдиндәрҙән ҡала минең икенсе төйәгем — Сәңсәк өйө. Йәйгә сыҡҡас, көндөң көнөндә тиерлек ошонда уҡ сүкейем мин. Ҡалай әҙер, ҡорал бар. Исабәк мине тиң күрә, серҙәрен һөйләй. Нимәһенә тотонһам да, асыуланмай. Ә хазинаның бында иҫәбе-хисабы юҡ. Баҡыр заты тиһеңме, тимере, еҙе, суйыны, ҡурғашы тиһеңме — йәнеңә ни кәрәк, бөтәһе лә бар. Теләһәң нимә яһа. Әлифәнең буҫаға төбөндә һағыҙ сәйнәп ултырған сағында, Нәсимә уянып китһә, мин уны бәүетергә керешәм. Оҫтаның эшен бүлдертмәйем. Быға унын күңеле була. Ҡайһы саҡта шартлап илаған Нәсимәне мин генә тыя алмайым. Ул ваҡыт, эшен ҡалдырып, сәңгелдәк эргәһенә Сәңсәк үҙе килә. Ҡайҙандыр күкрәк төбөнән сыҡҡан яғымлы тауыш менән татлы вәғәҙәләр һөйләп, ҡыҙын йыуатырға тотона:

Әлли-бәлли, Нәсимә,  
Баллы хөрмә мә һиңә,  
Татлы йөҙөм мә һиңә.  
Нурлы күҙем Нәсимә.  
Төрөн ебәк йоҡоға,  
Кер падишах йортона,  
Тейен аҫыл бәхеткә.  
Ултыр алтын тәхеткә...  
Әлли-бәлли, Нәсимә,  
Ап-аҡ ҡалас мә һиңә.  
Майлы бутҡа мә һиңә.  
Ай көндәше Нәсимә...

Ул шулай теҙә лә теҙә. Нәсимә һыйланмаған һыйҙар, Нәсимә эсмәгән шәрбәттәр, Нәсимә киймәгән кейемдәр ҡалмай. Хатта минең дә ауыҙыма һыуҙар килә. Исабәк һаман туҡтамай. Байлығының да, йомартлығының да сиге юҡ уның. Туя белмәҫ Нәсимә генә һаман ҡәнәғәт түгел. Баҡыра бирә.

Мине ҡапыл ҡурҡыу ала. Әгәр ҙә бәләкәс ҡыҙыҡай, бишегенән һикереп тороп, атаһы вәғәҙә иткән тәмле-татлы заттарҙы таптыра башлаһа? Тик берәһен генә таптырһа ла, харап булабыҙ бит. Мин беләм: был өйҙөң шүрлектәре һый-хөрмәттән һығылып тормай. Ярай әле Нәсимә былай ғына, һүҙһеҙ генә илай. Бөтөнләй тыйыр әмәл ҡалмағас, Исабәк йылтырап торған ҡара арыш икмәген сәйнәй ҙә, сепрәккә төрөп, бала ауыҙына тыға. Теге бер-ике тапҡыр һыҡтап ала ла шыма.

Балаһын күтәреп, Әлифә быраматка киткән саҡтарҙа, беҙ һөйләшеп, серләшеп рәхәт сигәбеҙ. Тик килгән-киткән генә һүҙебеҙҙе бүлдергеләй. Бына беҙ әле икәүҙән-икәү генәбеҙ. Юҡ, ана, кемдер килә. Ә, теге мосафир мулла икән дәбаһа! Ана, сапан салғыйы кәртәләге ботаҡҡа эләкте. Исабәктең ҡапҡаһы юҡ. Ҡапҡа урынында ботаҡлы-сатаҡлы бер кәртә генә. Йә уны аша атлап үтергә, йә аҫтынан сығырға кәрәк. Әле ботаҡҡа эләккән мулла уҙған кесаҙнала баҡыр ҡомған ҡалдырып киткәйне.

— Исабәк!—тигәйне ул. — Бер аҙнанан һуғылырмын. Ошо ҡомғанды төпләп кенә ҡуйсы. Ташларға ҡулым бармай. Атайым Иҫәнғол хажиҙән ҡалған ҡомартҡы ине...

— Ярар, хәҙрәт, башҡарырмын,— тип алып ҡалды Исабәк. Ҡомғанды мөйөштәге ҡалай-ҡолай өйөмөнә ташланы ла аҙаҡ үҙе әйләнеп тә ҡараманы.

— Исабәк ағай! Теге мулла килә,— гип хәбәр һалдым мин.

— Ниндәй мулла?

'— Баҡыр ҡомған эйәһе.

Кәртә төбөндәге мосафир ботаҡтан ысҡынырға өлгөрмәне, Исабәк атылып урынынан торҙо, мөйөштәге өйөмдән Иҫәнғол хажиҙән ҡалған ҡомартҡыны табып алды, йәнә үҙенең бүкәненә ултырҙы, тылсымлы ҡоралы менән ҡомғандың төбөн ә тигәнсе

ҡайырып та ташланы. Тап ошо мәл, тамаҡ ҡыра-ҡыра, хәҙрәт килеп инде:

— Әссәләмәғәләйкүм, Исабәк оҫта!

— Вәғәләйкүм-сәләм, хәҙрәт. Түрҙән рәхим ит. Бик маҡтап йөрөйһө,ң икән. Бына хәҙер генә һинең ҡомғанға тотонғайным. Әлегәсә ҡул теймәй торҙо, хәйерһеҙең.

— Улай икән, — тине мосафир, түргә уҙманы. — Ҡасан осона сыҡмаҡсыһың инде?

— Затлы нәмә бит, хәҙрәт, орҙо-бәрҙе эшләп булмай. Башта төпләргә, унан ҡурғашларға, унан йылтыратырға кәрәк.

— Шулай ҙә, Исабәк, күпмегәрәк һуҙылыр, тиһең?

— Иртәгә ошо ваҡытҡа ҡоям да ҡуям. Яңыға алмаштырғыһыҙ булыр.

— Көтә алмайым. Иртәгә Суҡыраҡлы ауылында бик ҙур йыназа. Ат ебәргәндәр.

— Улайһа, иркеңдә, хәҙрәт. Мә, ҡомғаныңды алып кит.

— Уйыныңмы, ысыныңмы был, кем, Иса... Исабәк. Ни эшләп мин бынау дәрәжәм менән төпһөҙ ҡомған күтәреп йөрөйөм, ти!

— Бынаһы ла иркеңдә, хәҙрәт...

— Иркеңдә... иркеңдә... имеш! Жулик, мошенник! Ярай, бер юлға ҡарғамай торам, ҡулың ҡороғоро, аяғың тартышҡыры нәмә!—тип мосафир ҡапыл сәпсәнләп китте. — Мәлғүн! Килмешәк!

— Килмешәк тигәнең ни ул, хәҙрәт, мәхәлләһеҙ имам, төйәкһеҙ берәҙәк булып сығалыр инде. Шөкөр, минең атлап инер үҙ тупһам, баш терәр үҙ мендәрем бар.

— Тфү, бәдбәхет! — тип Иҫәнғол хажиҙең вариҫе Кавказ батшаһының вариҫенә лас итеп төкөрөп сығып китте.

— Төкөрмә, төкөрмә, төкөрөгөң үҙ битеңә сәсрәр, мулла шәрәмәте! — тип оҙатты мосафирҙе хужа. Ифрат ҡыҙыу ҡанлы ул Исабәк. Тоҡанып китһә, Әлифәнең йөнөн тетә. Тик тегеһе генә ыжлап бармай. «Йә етер, шыж-быж», — ти иренеп кенә. «Шыж-быж» тиеүе — ҡыҙған беҙҙе һыуға тығыу булып сыға. Йәнәһе, уттай дөрләп торған Исабәк, бисәһенең

һалҡын дарьяһына батып, «шыж-быж»ға әйләнә лә ҡала. Ә бына илаҡ Нәсимә күпме генә теңкәһенә теймәһен, асыуланмай. Асыуы ҡабара башлаһа, Сәңсәктең маңлай тиреһе тартышырға тотона. Мосафир төкөрөнгәс тә, бер-ике тапҡыр тартышып ҡуйҙы. Имен. Ебәрҙе. Юғиһә ыҙғыш ҙурға китеүе ихтимал ине.

Шулай ҙа Исабәктең дин әһеленә ҡаты бәрелеүе мине шомландырҙы. Әгәр ҙә ул ҡәһәрләй ҡалһа?.. Шул арҡала Исабәк менән минең өҫкә яза килһә?! Байтаҡ заман беҙ шымып ултырҙыҡ.

— Изге кешегә тел тейҙергән өсөн яҙыҡ булмай-мы ул?-—тинем мин, ҡаушап.

Сәңсәк ҡулындағы еҙ ҡомғанды әйләндергеләп ҡарап ултыра ине.

— Ярай, сусҡанан бер ҡыл. Ысын баҡыр икән — ғәмәлгә ярар әле.

Мин һаман үҙемдекен тылҡыным:

— Ҡарғышы төшһә, нимә эшләрбеҙ? Ул бит хоҙай'юлында йөрөгән зат.

— Ул бисураға хоҙай юлы тағы! — тип мыҫҡыллланы Исабәк. — Ана, ат ҡарағы Иҫәнғолдоң хажилеге минең атайымдың батшалығы менән бер инде ул...

һалды был хәбәрҙе! Нисек йөрәге етеп һөйләй? Ошо мәл Исабәк менән арабыҙ йыраҡлашып киткәндәй булды, һуң, зиһен етерлекме ни? Бер һелтәүҙә Иҫәнғол хажиҙе лә, мосафир мулланы ла, үҙенең батша атаһын да йыға һуҡты.

Ул торған һайын аяуһыҙыраҡ асыштар яһай барҙы:

— Бынының ла унның Бохарала сауҙа итеп йөрөп кенә мулла булып ҡайтҡан. Сапан кейеп, салма салғап, йәнәһе.

Беҙҙең көндөң көйө китте. Мин, тештәремде ҡыҫып, уҡ сүкергә керештем. Исабәк, еҙ ҡомғанды кире мөйөшкә ырғытып, ҡалай киҫә торған ҡайсыһын игәүләргә тотондо. Эш ырамай. Сүкеш менән бер тапҡыр бармағыма ла һуғып алдым. Үҙем һаман бер нәмәне уйлайым: ниңә ул батша һынлы батша булған атаһын ат ҡарағына тиңләй?

Сәңсәк эшенән туҡтаны. Көрһөнөп ҡуйҙы. Ба- , шын күтәреп, тәҙрә aula ҡайҙалыр алыҫҡа ҡарап

торҙо. Мин дә шул яҡҡа төбәлдем. Күктә шыйыҡ болоттар аға ине. Әкрен генә тауыш менән Исабәк йырлап ебәрҙе. Элегерәк төн урталарында ошоға оҡшаш моң ишетелгеләй торғайны. Ҡайҙан килгәнен белмәй, өй әсебеҙ менән хайран ҡала инек. Бына кем йырлай икән ул.

Өйөр ҙә генә өйөр болот ҡаплай
Кавказ тигән тауҙың башҡайын,
Тыуған илкәйемде ҡайтып күрһәм,
Ҡосоп илар инем ташҡайын...

Бына һиңә Сәңсәк! Ниндәйерәк йыр йырлай ул. Уны йәлләп, илап ебәреүҙән саҡ тыйылып торам. Шулай ҙа хәленә кермәксе булам:

— Кавказ батшалығыңды һағынып моңаяһыңмы ни, Исабәк ағай? — тим.

Ул өндәшмәй. Мин уны һаман йыуатырға тырышам:

— Муйынына мәсхәрә бауы тағылған батша атайыңды, хур ителгән ҡырҡ батша әсәйеңде, ҡол ителгән ҡырҡ батша апайыңды, ер ителгән ҡырҡ батша ағайыңды мин дә йәлләйем. Урындары йәннәттә булһын! Ни ҡылаһың, үлгән артынан үлеп булмай, һәр кемдең үҙ гүре... Тереләр сыҙарға тейеш...— Мин бөтә ишеткән-белгәнемдә сәсеп һалдым.

— Их, һин, бәләкәс вәғәзсе! — тип ул башымдан һыйпап ҡуйҙы.

Исабәк яңынан минең яҡын кешемә әйләнде. Уның йәшле күҙҙәренә ҡарағас, күҙҙәремдән мөлдөрәп йәштәрем тәгәрәне. Бер тамсыһы зың итеп алдымдағы аҡ ҡалай киҫәгенә тамды. Бәлки, зыңламағандыр ҙа. Тик миңә шулай ишетелде. Кавказ батшалығының ҡанлы ҡайғыларын уйлап, икәүләшеп, шулай йәш түгәбеҙ.

— Минең турала бүтәндәр теләһә ниндәй әкиәт һөйләһен, миңә барыбер. Ә бына һинең гонаһһыҙ күҙҙәреңдә оялам. Был күҙҙәрҙе алдарға ярамай.

Исабәк әллә ниндәй сәйер һүҙҙәр һөйләргә кереште. Мине «гонаһһыҙ» тиме? Шәйхаттар менән кәрт һуҡҡанымды белһә икән...

- Батша малайы түгел, ҡасҡын мин! — тип ҡырт киҫте Сәңсәк. Был һүҙҙәр минең ҡолағымды өтөп алды.

— Ҡасып ҡотолғас, ҡасҡын була инде, — тип төҙәтеп аңларға тырыштым мин. Төҙәтмәне ул ҡабул итмәне.

— Ҡасҡын! Йолаһына, ырыуына хыянат иткән мөртәт мин! Ғәҙеллек, шәфҡәтлелек, аныҡ аҡыл яҡлы бер изге затмын мин! Йәнем шулай икегә бүленде. Ғүмер баҡый ике ярты бер-береһен ҡарғап йәшәне. Был донъяла ла, теге донъяла ла килешеү, ҡауышыу юҡ уларға. Сөнки уларҙың береһе балыҡҡа, икенсеһе ҡошҡа әүерелде. Ә Кавказ батшалығы иһә — фажиғәле матур төш кенә. Ул төштө лә үҙем түгел, минең өсөн бүтән кешеләр күрҙе —- теге замандарҙа. Иртән тороп һөйләнеләр ҙә миңә юранылар. Мин төштө кире ҡаҡманым. Бара торғас, хатта үҙем дә ышана башланым. Китте шунан Кавказ батшалығы тураһындағы ҡот осҡос әкиәт!..

Бына һиңә өс төймә!

Әсемдән генә шулай тип әйтеүем булды, Нәсимәне баҡыртып, Әлифә ҡайтып та инде. Әңгәмә, Исабәк йәйе кеүек, бүленеп ҡалды.

Өҙөлгән һүҙ тик биш-алты йыл уҙғас ҡына ялғанды.

Ауылыбыҙ колхозға күсте. Ҡайһылыр бер хәтерлеһе Исабәктең әллә егерме, әллә егерме биш йыл әүәл әйткән «һыбай сабам» тигән һүҙен хәтергә төшөргән. Колхоз йылҡыһын көтөргә төнгө көтөүсе тәғәйенләгәндә, элеге зиһенле әҙәм әйтә һалған: «Йәмәғәт! Беҙҙең Исабәк һыбайлы бар бит! Намыҫлы, тоғро кеше. Әйҙәгеҙ, был эште шуға тапшырайыҡ! Ҡулы тейгәндә, көндөҙ үҙ кәсебе менән дә булыр! Көн иткән илгә ул һәнәре лә кәрәк». Халыҡ дәррәү ризалашҡан. Халыҡтан былай Исабәк үҙе риза булған.

Һаҡал-мыйығына ныҡ ҡына сал ингәс, Кавказ һыбайлыһы яңынан ат менде. Тәүге төн ул, менге атын етәкләп, өйөнә ҡайтты. Өйгә инеп, үҙенең артынан килгән теге ҡупшы кейемен баштан-аяҡ кейеп сыҡты. Өҙәңгегә һул аяғын тығып, йәһәт кенә эйәргә һикерҙе. Онотмаған икән. Һәммә ҡыланышы килешеп тора. Көмөш ҡынлы оҙон xәнйәр тотоп, Әлифә лә килеп сыҡты. Хәнйәр! Быныһы — Исабәк аласығында күргән нәмәбеҙ түгел ине. Хәйер, беҙ күрмәгән нәмә аҙмы ни?,

— Әй, атаһы! Нәсимәнең атаһы! — тип һөрәнләй Әлифә, Сәлимәләр яғына ҡарап. — Көмөш хәнйәреңде тағырға онотҡанһың бит!

— Килтер, бисәкәй, бик мәслихәт булыр...

Көмөш ҡынлы оҙон хәнйәр һыбайлының биленә тағылып та алды. Бындай мөһабәт атлыны, бүтәнсә күрһәң дә, кәртинкәлә генә күрергә мөмкин. Исабәге ат өҫтөндә ултырып, Әлифәһе ерҙә тороп рәхәт сигә. Нәсимәһе буҫаға ташына баҫып сәпәкә итә. Бына ҡасан ул Сәңсәк ҡураһында ҡыуаныс тулып ташты. Ат башы саҡлы алтын тапҡандармы ни? Ғүмер буйы бөкөрәйеп ҡалай сүкегән кеше нисегерәк тураййып китте. Быға тиклем Исабәккә саҡ ҡына һауаланып, саҡ ҡына мыҫҡыллап, саҡ ҡына ҡыҙғанып ҡараған күрше-тирә, һоҡланып, таң ҡалды. «Бына ниндәйерәк ул — беҙҙең күрше!» — тип тел шартлатыусылар ҙа булды. Ошо сәғәттән алып ғүмеренең ахырына тиклем ул эйәрҙән төшмәне.

Һуңыраҡ ике йәй тотош мин Исабәккә йылҡы көтөштөм. Иң күркәм заман Дим туғайында бесән йыйылып бөткәс килә. Әле кистәр һалҡын түгел. Ә себен, серәкәй, күгәүен заты инде интектермәй. Йәшел йомшаҡ ҡурпы ат ауыҙында үҙе иреп тора. Дим һыуына көҙгө тәм ҡайта. Эсеп туйғыһыҙ. Шундай кистәрҙә беҙ көтөүҙе йә Барлыбай утрауына, йә Ҡапҡалы эсенә ҡыуып индерәбеҙ ҙә Димдең ярында ғына усаҡ яғып ебәрәбеҙ. Таганға сәйнүк аҫабыҙ, көлгә картуф күмәбеҙ, һәр урында беҙҙең әҙер таганыбыҙ бар. Эңер төшкөләгәнсе, Исабәк төрлө ергә таралышҡан аттарҙы яңынан барлап, һәр ҡайһыһының тиерлек хәл-әхүәлен һорашып сыға. «Йонсота төшкәндәр, ахырыһы, үҙеңде бөгөн, Ерәнсәй... Ә һин, Бурыл, хәйләкәр, бирешмәгәнһең. Ҡартлас Ҡашҡа бөгөн ял иткән икән...»—ти ул. Был аттарҙы көндөҙ егеп йөрөгән кешеләрҙе йә маҡтай, йә хурлай. Ҡолонҡайҙарҙы муйындарынан ҡосаҡлап ала, йомшаҡ ялдарын һыйпай, һөйә, һәр хайуандың үҙенә генә төбәп яҡшы һүҙ әйтә. Ҡыҙыу ҡанлы Сәңсәктең ошо ике йәй эсендә бер йылҡыға, бер ҡолонҡайға асыуланып өндәшкәнен ишетмәнем. Ғәҙәттәге көтөүсе ҡоралы сыбыртҡыны ул ҡулына ла алманы.

Һәр кис, шулай көтөүҙең кәйефен, хәл-әхүәлен

белеп сыҡҡас, өйөр айғыры Дарман эргәһенә килеп, ирҙәрсә әңгәмә алып бара. Нимә һөйләшеүҙәрен ишетеп булмай, бик шым һөйләшәләр, һуңынан Дарман ризалыҡ белдереп баш ҡаға. Күрәһең, килештеләр, мәслихәтләштеләр. Баш көтөүсе өйөр башлығына, тимәк, төнгө кәңәштәрен бирҙе. Тегеһе ҡабул итте.

Эңер төшөп бөтә. Сәй ҡайнап таша." Картуф бешеп өлгөрә. Баш көтөүсе шунда ғына усаҡ эргәһенә килә.

Ике йәй буйы һөйләшмәгән һүҙ, йырланмаған йыр ҡалманы. Исабәккә, бигерәк тә утҡа баҡһа, моң килә. Ләкин ул өйөр-өйөр болот ҡаплаған Кавказ тауы хаҡындағы моңдо ла, Кавказ батшалығы тураһындағы әңгәмәне лә ҡабатламаны. Мин һорашырға ҡыйманым.

Бер төндө ул, һүрелә башлаған усаҡҡа ҡарап, ҡапыл көрһөнөп ҡуйҙы:

— Бынау усаҡ эргәһендә беҙ һинең менән икәү генә ултырабыҙ тиһең инде. Юҡ, икәү генә түгелбеҙ. Ана, уттың теге яғында минең егет сағым баҫып тора, — тип төнгө бушлыҡҡа ымланы. — Эргәлә генә төҫлө. Ә ике арала көйрәп торған усаҡ. Ике арала — уҙған ғүмер...

Мин инде уның кинәйәле һөйләүенә күнегеп бөткәнмен. Ҡыҫылырға ашыҡмайым. Үҙе осон килтереп сығарыр әле.

— Бахыр егет сағым — батыр егет сағым... Эйе, ҡорал күтәрер өсөн генә түгел, күтәрелгән ҡоралды тыйыр өсөн дә батырлыҡ кәрәк.

Быныһы инде миңә бөтөнләй аңлашылмай, һелтәнгәс, ҡылыс сабырға, тоҫҡалғас, мылтыҡ атырға тейеш. Мин егет ҡорона инеп барам. Батырлыҡтың нимә икәнен аңлайым.

— Ниңә килгән бында һинең егет сағың? — тинем мин, Исабәктең һүҙенә яйлашып.

— Һинең менән күрешергә, танышырға. Таныштырһам, ҡабул ҡылырһыңмы, әллә, ҡәһәрләп, эргәңдән ҡыуырһыңмы?

Мин ни тип әйтергә лә белмәй шымып ҡалдым.

— Шулай ҙа таныштырайым әле...

...Ун ике йәшем тулғанда, ҡарымтасы минең ағайымды үлтерҙе. Өй эсендә ир затынан иң өлкәне

мин тороп ҡалдым. Атайым төрөк һуғышында ғәйеп булғайны. Үс алыу минең өҫкә тәшә. Ҡарымтасының йылға — йыл, айға — ай, көнгә — көн миңә тиҫтер улы бар. Боташ исемле. Ун етебеҙ тулған көндө, мин уны үлтереп, ҡон ҡайтарырға тейешмен. Йола шулай ҡуша. Әгәр ҡарымтасының үҙен юҡ итһәң, ул үлә лә ҡотола, ә бына улһыҙ ҡалдырһаң, ғүмер буйы ғазап сигәсәк. Беҙ ғазап сиккән шикелле. Ул мәлдә тау итәктәрен ҡаплап өрөк ағастары алһыу-аҡ сәскә атҡан булыр, ҡыуаҡтар араһында, ярһып, ҡоштар һайрар, яҙғы моң сығарып, йылғалар сылтырар, тәңре яратҡан һәммә йән эйәһе, тереклек ҡылыуына шөкөр итеп, рәхәт сигер. Тап ошо миҙгелдә ҡараңғы бер төндә минең хәнйәрем Боташ йөрәгенә ҡаҙалыр. Айҙан-ай, көндән-көн мин уға ҡарата үҙемдә үс яндырҙым, нәфрәт үрсеттем. Ҡыл ярырлыҡ ошо хәнйәремде биш ҡыш, биш йәй буйы ҡайраным. Осона себен ҡунһа, үтә тишеп сыға торғайны. Тәүҙә йылдарҙы, унан айҙарҙы, ахырҙа көндәрҙе һанай башланым, һәр көн Боташтың әжәлен яҡынайта. Тәҡдир сәғәте һуғыр ҙа, бына мин йән алырмын, Боташ йән бирер. Ҡарымтасының ҡаны ергә һеңер, ҡанған үсем миңә ғүмерлек ғәйрәт килтерер, рухыма көс өҫтәр.

Боташ сибек кенә малай ине. Етмәһә, аҡһаҡ. Бәләкәс сағында сакля түбәһенән йығылып имгәнгән. Шуға ҡарамаҫтан, алсаҡ йөҙлө, шаян тәбиғәтле, көр күңелле ине. Яуыз, тиҫкәре, йәмһеҙ булһа икән! Әмәлгә ҡалғандай, ундай түгел шул. Уйын ваҡытында бөтә малайҙарҙан былай уның шат тауышы яңғырай. Мин яҡыная башлаһам, ул ҡапыл шыма, йөҙө көл кеүек була. Әжәлен һиҙә. Буйға еткәс, ул майҙандарҙа оҫта бубен ҡағыусы, уйын, йыр башлаусы булып китте. Майҙанға мин килеп инһәм, ул, ҡаушап, кеше артына боҫа, унан, аҡһаҡлап, өйө яғына ыңғайлай. Әжәлен һиҙә.

Боташтың атаһы — минең ҡарымтасым, ҡоралай аулағанда ҡаянан ҡолап, йәһәннәмгә китте. Уны, буркаһына ураған көйө, эйәргә арҡыры һалып, ауылға алып ҡайттылар. Боташ ат етәкләп килә ине. Юлда мин тап булдым. Ул тәүҙә башын түбән эйҙе, унан ситкә боролоп уҙып китте. Бер мәйет ат һыртында тирбәлеп бара, икенсеһе, теҙген тотоп,

һуҡмаҡтан атлай. Уға ла атларға күп ҡалманы инде... Боташтың минән тартыныуы шулай ҙа ғәйрәтемде ҡайтара, нәфрәтемде һүрелтә. Әммә мин бирешмәйем. Әленән-әле билемдәге хәнйәремде ҡапшап ҡуям. Үсем йәнә гөлт итеп тоҡанып китә.

Өрөк сәскә атты. Биш йыл буйы көтөп алған көн килде. Гонаһ шомлоғона, төн мин көткәнсә.ҡараңғы булманы. Үтәнән-үтә күренеп торған айлы төн килде. Көндөҙ Боташ Түбән Бигимгә баҙарға киткәйне. Әле ҡайтҡаны юҡ. Мин, ауылдан сығып, уның ҡайтыр юлында таш араһына боҫтом. Айлы төн былай ҙа минең зиһенемде ала. Әллә ниндәй ырымы* бар уның. Донъя телдән яҙған тиерһең — шылт иткән нәмә юҡ. Ә ана тегендә тау киртләсенә ҡоралай балаһы килеп сыҡты. Инәһе күренмәй. Бисараҡай, әллә аҙаштымы икән төн йөгөндә? Ары ҡарай, бире ҡарай, тауыш бирер ине, бүренән ҡурҡа. Бәлки, уны яҡында ғына ата бүре аңдып яталыр. Бына бер генә һикерер ҙә быуып та ташлар. Бар ине был донъяла матур ҡоралай балаһы, хәҙер юҡ буласаҡ... Шөкөр, ҡоралай балаһы имен-иҫән көйө үҙ юлына китте, бүре-фәләнгә хәҙергә тап булманы. Ләкин ата бүре барыбер ҡайҙалыр боҫоп ята бит. Ошо бәрәс, күңелемде ҡуҙғатып, шом һалды. Мин ҡайһыһы булып сығам һуң әле? Анау ғәмһеҙ, иҫәр ҡоралай балаһымы әллә шуны аңдып ятҡан бүреме? Быға мин тиҙ үк яуап бирергә тейешмен. Юғиһә, ана, Боташтың арбаһы, шығыр-шығыр-шығыр килеп, былай табан үрмәләй. Яуабымдың кәрәген, тапҡырын һурып алмаҡсы булып, хәнйәрем һабына ҡул һуҙам. Ҡулым тыңламай, тартыша. Арба һаман шығыр-шығыр минең өҫкә тәгәрәй, үгеҙҙәр мышнай-мышнай минең өҫкә килә. Боташ, арттан арбаһын этәреп, арыған хайуандарға булыша. Аҡһаҡ булғас, уға, моғайын, ҡыйындыр. Юлдың был текә ерендә мин үҙем дә шулай үгеҙҙәремә ярҙамлашам. Әле лә арба артындағы кеше Боташ түгел, мин үҙем, имеш. Мин таҙа, көслө. Миңә бер ни ҙә түгел.

Башымда бөтә нәмә бер юлы килеп буталды — гәмһеҙ ҡоралай балаһы, ата бүре, үгеҙҙәр, ай, аҡһаҡ Боташ, үҙем... Арба һаман шығырҙай, Боташ һайтлап малдарын әйҙәй. Тау түбәһендә аҡылдан шаштырғыс түңәрәк яҡты ай тора. Ай нурында өрөк

сәскәләре йым-йым итә. Йән ала торған төнмө ни был? Йән өләшә торған изге мәл... Мәрхүм ағайымдың ҡойолған ҡанын ярҙамға саҡырам. «Үс! Үс!! Үс!!!» — тип ҡабатлайым. Ҡолағымда ырыуымдың ҡәһәре яңғырай, ҡурҡаҡлығым, йола боҙоуым өсөн ул мине ҡарғай, йәнә хәнйәремә үреләм. Ҡулым бармай. Теге тау киртләсенә баяғы ҡоралай балаһы тағы килеп сыҡты. Шығыр-шығыр итеп Боташ арбаһы эргәмдән уҙып китте. Боташ үҙе ғыжлап төшкән, тынын саҡ ала...

Ҡарымтасым ауылға инеп китте, тыуған өйөмә минең юлым киҫелде. Сөнки мин йолабыҙға ярлыҡалмай торған хыянат ҡылдым. Ҡорбанымды йолоп, ҡайтып инһәм, ырыуым мине ҡабул итмәҫ ине. Ләғнәт уҡып, илдән һөрөр ине. Ә мин үҙемде-үҙем һөрҙөм.

Ағайымдың ҡайтарылмаған ҡонон намыҫыма алып, бик күп замандар ил гиҙҙем. Олатайым һәнәре — ҡалай менән сүкеш миңә ризыҡ бирҙе. Байтаҡ йылдар төләкһеҙ-түлһеҙ йөрөгәс, ошонда килеп төләк таптым. Оям башта һалҡын, ҡотһоҙ ине. Күреп тораһың, ҡартлыҡ көнөмдә төйәгемә ҡот инде, замана атҡа мендерҙе мине...

— Бына, мырҙам, усаҡтың теге яғында баҫып торған егет ошо инде, — тип Исабәк баяғыса уҡ төнгө бушлыҡҡа ымланы. Минән яуап көттө. Мин өндәшмәнем. Нимә тип һүҙ ҡушайым һуң?

...Мин ауылдан киткәс тә, Исабәк аттарын ташламаны. Район газетаһында хатта уның исемен ташҡа баҫып сығарҙылар. Эше менән бер рәттән уның намыҫын маҡтанылар. Фронтта сағымда ауылға хат яҙған һайын, күрше-күләнгә айырмайынса сәләм ебәргәндә, Исабәккә мин һәр саҡ атап сәләм күндерҙем. Ул да сәләм ҡайтара торҙо. Инде һуғыш бөтә тигән яҙҙа күршемдең сәләме урынына үле хәбәре килде. Теге ҡара хатта былай тиелгәйне: «Бик ҙур ҡайғылы булып торабыҙ әле. Исабәк күршебеҙ үҙ аяғы менән донъянан китеп барҙы. Димдә боҙ ҡуҙғалған саҡта Ҡапҡалы эсендә йылҡы көтөп йөрөгән еренән һыуға батты. Яр буйында ғына һикергеләп уйнаған бер ҡолонҡай һыуға ҡолап төшкән икән дә Исабәк күршебеҙ, шуны ҡотҡарам тип, боҙ араһына ташланған, ҡолонҡайҙы барып

тотҡан, әммә ярға кире сыға алмағандар. Ҡосаҡлашып боҙ аҫтына инеп киткәндәр. Ул ерҙә өйөрөлмәктәр күп шул. Белмәгәндер, күрәһең, мәрхүмең... һәйбәт кеше ине. Кәүҙәһен таба алманыҡ. Үҙе урынына теге артынан килгән еләнен, бүркен, итектәрен, хәнйәрен йәнә ултырып йөрөгән эйәрен ерләнек. Йыназала халыҡ бихисап булды. Әлифә тәгәрәп иланы...»

Шулай итеп, Исабәк күршебеҙ, Дим боҙона эйәреп, мәңгелек сәйәхәтенә йөҙөп киткән.

...Исабәк теге заман усаҡ эргәһендә үҙенең егет сағы менән мине осраштырыр алдынан былай'тигәйне: «Ҡабул ҡылырһыңмы, әллә юғиһә ҡәһәрләп, ҡыуырфыңмы?»— Уның тарихен тыңлағас, мин яуап ҡайтармағайным. Кешенең ғүмерлек кисерештәренә ҡыҫылырға әле минең хаҡым юҡ.

Ҡанмаған үс... һуғыштың тәүге йылдарында, илебеҙ ғазаптарынан йән әрнегәндә, һалдат кейеме кейгән һәр бер немецте биш тапҡыр үлтерерлек үс йөрөтә инек күңелдә. Үлтерергә! Мылтыҡ атҡан сағындамы, йоҡлаған, ашаған, ғибәҙәт ҡылған ереҕдәме — үлтерергә! Аҡ сәсле ҡартмы йәки мыйығы ла сыҡмаған һеләгәй малаймы — үлтерергә! Берҙе генә булһа ла — үлтерергә! Был нәфрәтте беҙҙең күңелгә улар үҙҙәре һалды. Беҙ тыумыштан ҡанһырау түгелбеҙ. Ҡанлы барымтаны улар үҙҙәре башланы. Бөтә нәҫел-нәсәбе хәҙер аяуһыҙ ҡарымта көтһөн! Берәүһенә лә аяу юҡ.

Ә бына ҡояш сығып килгәндә, бөтә өмөттәрен өҙгән бер пар зәңгәр күҙ һиңә ялбарып ҡараһа, ошо мәл кукуруз ҡыяҡтарына, күҙ йәштәренә оҡшап, йылтырап ысыҡ тамып торһа, донъялағы бөтә ауаздар тынып ҡалған булһа, кеше маңлайына тоҫҡап мылтыҡ атыу мөмкинме һуң? Мөмкин түгел икән.

Минең менән тап ана шундай хәл булды.

Яссы — Кишинев һуғыштарында дошман ғәскәрҙәре самаһыҙ онталды. Яу барған көндәрҙә ошо яландар өҫтөндә иртәнән кискә тиклем саң ҡатыш төтөн болоттары аҫылынып торҙо. Бер тәүлек әүәл һуғыш был ерҙән ысҡынып, оса-елә, Прут ярҙарына табан юнәлде. Ялға сыҡҡан ротаның командире

ҡояш байыр алдынан мине — фронт журналисен — кисә яу уҙған ҡырҙы күрһәтергә алып килде.

— һуғыш барғанда, уны күреп бөтөрөп булмай, уҙып киткәс кенә, ниндәй мәхшәр булғанын аңлайһың,—тине ул. Эйе, быны мин үҙем дә беләм. Ана, немец армияһының ярты ҡоралы, әйтерһең, ошонда тороп ҡалған. Емерек танкылар, орудиеләр, минометтар, автомашиналар, тракторҙар... Иҫәбе лә, һаны ла юҡ. Элекке көн атлы артиллерия дивизияһы ла ҡыйратылғайны. Әле бына йә эйәрле, йә ҡамытлы аттар кукуруз баҫыуын ҡыҙырып йөрөй. Беҙҙе күргәс, кешнәй-кешнәй арттан эйәрә башланылар. Дөмөгөп өлгөрмәгән фашист шәрәмәттәре лә ошо кукуруз араһында боҫоп яталыр әле. Тик сығып эйәрмәйҙәр генә.

Беҙ шоферҙың үҙен генә ебәреп, аттарға менеп алдыҡ. Миңә тимер күк бейә эләкте. Беҙгә эйәреп, ауылға бер өйөр ат ҡайтып инде. Ауыл ситендәге бер өй ҡаршыһында ике-өс һалдат, ҙур табаҡтан кружкалар менән һоҫоп, йәш вино эсеп ултыра ине. һалдаттар янына килеп туҡтағас, минең бейәм, башы менән тегеләрҙе төрлө яҡҡа этәреп, табаҡтағы виноны һемерергә кереште. Шунда ғына беҙ аттарҙың эскеһе килгәнен аңланыҡ, һыуһаған йылҡы малы үҙе шулай кешегә ылыға икән. Беҙ өйөрҙө кескәй генә йылға буйына эйәртеп төштөк. Аттар эсеп туйғас, ошонда айырылыштыҡ та. Миңә үҙебеҙҙең редакцияны тиҙ үк ҡыуып етергә кәрәк ине. Уның Белград тигән ҡалала туҡталасағын белә инем. Картаға ҡарайым. Әгәр оло юлға кире сығып, урап барһам, ике тәүлектә лә ҡыуып етәсәк түгелмен. Ҡабат ауылға ҡайтып, бер молдаван ҡартынан тура юл һораштым. Ул бик ихлас һәм асыҡ итеп аңлатты. Бабай өйрәткәнде карта менән сағыштырып алдым. Бөтәһе лә тура килә.

— Был юл аулаҡ булыр, һаҡ йөрө,—тип теләп ҡалды ул. — Насип булһа, иртәгә кисләтеп барып та етерһең. Әммә юлда атыңа ял бир.

Эңер төшкәндә, үҙемде яҙмышҡа тапшырып, сәфәр сыҡтым. Икһеҙ-сикһеҙ кукуруз урманы эсенән тар ғына юл һуҙыла. Ай ҡалҡҡанда, бер бәләкәс кенә утарҙы үттем. Унан элекке еврей ауылын уҙҙым. Юлым бабай әйткәнсә килә. Донъя тынған-

дан-тына бара. Ул тынған һайын, эстә шом арта. Һуғыш мәлендә тынлыҡ һәр ваҡыт хәүеф һала. Ай яҡтыһы ла әллә нисек күңелде әлһерәтә. Ғүмеремдә беренсе тапҡыр бөтә йыһанда ай менән икәүҙән-икәү генә тороп ҡалдым. Уның ырымына бирелһәң, башты юғалтырға мөмкин. Был йылдар эсендә һуғыш ҡырында дыуамал ярһыу ҙа, хурлыҡлы ҡурҡыу ҙа кисерелгәндер. Ләкин бөгөн кисергән хәл бөтөнләй башҡа. Тынлыҡтан шикләнеү бизгәге эләктереп алды мине. Ярай, менгән бейәм аҡыллы, һиҙгер, шул уҡ ваҡытта сабыр булып сыҡты, һәр ҡарасҡынан өркөп бармай. Ҡатын-ҡыҙ заты шул.

Таң алдынан йоҡо баҫа башланы. Нисәмә йылдарҙан һуң беренсе тапҡыр өҙәңгегә баҫҡан аяҡтарым да ауырайғандан-ауырая бара. Балтырҙарымды, осаларымды әйәр ҡырҙы. Бейәм, киреһенсә, егәрләнеп китте. Ара-тирә юртҡылап та ҡуя.

Әллә, Германияма ҡайтып барам, ти инде? Мин йоҡо менән алышам. Бер ул өҫтөн сыға, бер — мин. Ай яҡтыһы, иреп, юғала башланы, уны килә ятҡан көн яҡтыһы ҡыҫырыҡлай. Ай яҡтыһы үҙ урынын былай ғына бушатмай. Тартыш китә. Ике яҡтылыҡ бер-береһен йоторға керешә. Яңынан эңер төшә...

Башын ҡапыл артҡа сөйөп, атым шып туҡтаны. Мин сөйлөгөп киттем. Алдымда ғына ҙур түңәрәк ҡояш тора. Күрәһең, шуға килеп төртөлгәнбеҙҙер. Ҡояш ары тәгәрәп китте. Юлдан бер-ике аҙым эстә кукуруз араһында нескә генә муйынға ултыртылған кәпәсһеҙ һарыбаш һерәйеп тора. Бүтән нәмә шәйләмәнем. «Ә» тигәнсе пистолетемде һурып алып, буй-буй ҡара тир юлдары йырғыслаған маңлайға тоҫҡаным. Шул саҡта ғына маңлай аҫтындағы бер пар зәңгәр күҙҙе күрҙем. Был күҙҙәрҙән хатта ҡурҡыу ҙа ҡасҡан. Бары ялбарыу ғына тороп ҡалған. Бына хәҙер ул берәмләп әсир төшкән һәр немец һалдаты әйтә торған дүрт һүҙҙе ҡабатлар: «Сталин хорош, Гитлер капут!» — тиер. Моғайын, шулай тиер. Әгәр шулай тиһә, валлаһи, курокты тартам. Йән һаҡлар өсөн әйтелгән ошо ялған тәүбә оторо сирҡандыра, оторо нәфрәтте арттыра.

Был һаман өндәшмәй. Хөкөм көтә. Ул — илбаҫар. Мин — ил хужаһы,» Ниндәй хөкөм сығарһам

да хаҡым бар. һәм ғәҙел дә булыр. Приговор минең пистолет көбәгендә.

— Миңә 18 генә йәш... — тине ул. Теҙ быуындары һығылып, сайҡалып китте, ләкин ауманы.

...Ҡапыл хәтеремә бер ваҡиға килеп төштө. Бынан ике йыл әүәл 18 йәшлек механик-водителде, дезертирлектә ғәйепләп, бөтә бригада алдында атҡайнылар. Дезертирлеге шул ине: резервтә торған саҡта төнөн танкыға ултырған да ун километр ерҙәге ауылға әсәһен күрергә барған. Шуның өсөн үлем язаһы бирҙеләр. Ул көн 18 йәшлек егеткә тоҫҡалған автоматтар беҙҙең һәр беребеҙҙең эсендә ятҡан ғәмһеҙлекте, алабарманлыҡты, яуапһыҙлыҡты бер ҡатарҙан атып үлтерҙе. Үҙ кешебеҙгә ҡарата булған аяуһыҙ хөкөмдө мин шуның менән аңлаттым. Аҡламаным, аңлаттым. Асылда механик-водитель бер зыян да итмәне. Тик әсәһен генә күреп килде. Килгәс, аттылар.

Ҡаршымда фашист ғәскәренең кейемен кейгән, кисә генә минең ватандаштарыма тоҫҡап атҡан дошман, минең ҡан дошманым баҫып тора. Шуның аталары, ағалары бит инде Смоленщина ауылдарын тотош утҡа үртәнеләр, Донбасс шахталарында меңәрләгән кешеләрҙе терелəй күмделәр, йылға-йылға йәштәр түктереп, Украина ҡыҙҙарын Германияға ҡоллоҡҡа олаҡтырҙылар, әсәләрҙең сал сәстәрен мәсхәрә иттеләр, сабый балаларҙы ялҡынға ырғыттылар. Быларҙың бөтәһе өсөн дә кемдән үс алырға һуң? Зәңгәр күҙле һары шайтан, ишетәһеңме? Кемдән үс алырға?

Минең уйҙарымды ул ишетмәй. Юғиһә күҙҙәрендә өмөт яралмаҫ ине. Шул күҙҙәрҙәге өмөт минең ярһыуымды баҫа. Кукуруз ҡыяҡтарынан мөлдөрәп ысыҡ тамсылары тама. Ер йөҙө шундай тыныс, аяҙ, вайымһыҙ. Әйтерһең, уның үткәне юҡ, тик киләсәге генә бар. Мин тертләп киттем. Донъя нисектер сәйер йымылдап ҡуйғандай булды.

Пистолетемде йән асыуым менән кире кобураға тыҡтым.

— Әйҙә, алдан атла!—тинем, юлға ымланым. Ул, аҡһай-аҡһай, алға сыҡты. Башҡаса мин уға һүҙ ҙә ҡушманым, йөҙөнә лә ҡараманым.

Оло юлға сыҡҡансы, беҙ шулай килдек. Ҡояш инде байтаҡ күтәрелде. Юлда осрағандар беҙгә аптырабыраҡ ҡарап уҙа. «Ҡоштоң аҫылылыр, күрәһең, был. Бер үҙенә бер һаҡсы...» — тиҙәр, моғайын. Бер күпер төбөндә әсирҙәр колоннаһына ҡаршы осраныҡ. Конвой башлығы сержантҡа «үҙемдең» әсирҙе тапшырҙым. Тапшырғанда, былай тип киҫәттем: «Аҡһаҡ тип, юлда улай-былай итмәгеҙ». Ниңә шулай әйткәнмендер, белмәйем. Бер ҡотолғас, иленә ҡайтып етһен, тигәнмендер, бәлки. Бәлки... Юҡ, әйтеп кенә аңлата торған нәмә түгел был.

# БАЯР
# БАЛАЛАРЫ

Әүәл-әүәлдән беҙҙең ауылға һауым бейәләре тотҡан кешеләргә ҡымыҙ эсеп, ит ашап ятырға төрлө түрәләр килә торған булған. Әле лә шулай. Бисә-сәсәһе, бала-сағаһы менән ҡыл да ҡыймылдатмай йәй буйы рәхәтләнеп йәшәй бирә тегеләр. Беҙҙекеләр уларҙы «баярҙар» тип йөрөтәләр. Баяр булмай, тағы кем булһын. Йоҡолары туйғансы йоҡлайҙар, эсгәре күбенгәнсе, ҡымыҙ эсеп, ит һоғоналар, унан көтөүҙәре менән йә урманға, йә тау яғына сәхрәгә сығып китәләр. Хатта сәхрәлә лә улар ҡыланып туймайҙар: үлән өҫтөнә япма йәйеп кенә ултыралар, йәнәһе, беҙҙең үлән уларҙың ниен... тәнен сәнсә, күлдәген бысрата. Бисәләре баш өҫтөндә сатыр тотоп йөрөгән була. Имеш, беҙҙең ҡояш уларға килешеп етмәй. Яуын булһа, тегеләр, өңдәге йомрандар шикелле, ҡапҡанан баш тығып ҡарайҙар ҙа кире ҡураға сумалар. Бик таман уларға! Ул баярҙар менән минең үҙемдең иҫәп-хисабым бар. Һике өҫтөндә ашап ултырғанда саҡ ҡына ҡырын ята биреп ҡуйһам, атайым: «Тура ғына ултыр. Баяр булдыңмы әллә?» — ти. Иртән оҙағыраҡ йоҡлаһам, Оло инәйем: «Шул тиклем йоҡларға —ҡайҙан килгән был баяр?» — ти. Мортаза ағайым йомош ҡушҡанда, йыбанһам: «Ҡалай һүлпән ҡуҙғала, әйтерһең, бер баяр». Бәләкәйерәк сағымда шул баяр менән битәрләп, бигерәк тә тәкәтемә тейәләр ине. Хәҙер бер сама баҫыла төштөләр, бәлки, үҙемдең дә баярлығым кәмейҙер.

Байтаҡ әҙәмдең йыл да тиерлек килеп йөрөй торған үҙ баяры бар. Беҙҙең бер ваҡытта ла баярыбыҙ булмаған. Моғайын, минең хөр рухлы ата-

йымдың үҙ ирке менән кемгәлер олтораҡ булғыһы килмәгәндер. Йәки былай ғына кеше көйләп, үҙен бимазаларға теләмәгәндер. Бәлки, беҙҙең өйөбөҙ, беҙ үҙебеҙ ул баярҙарға оҡшамағанбыҙҙыр. Ҡыҫҡаһы, үҙ баярыбыҙ юҡ беҙҙең. Булмаһын, бик һәйбәт. Кеше баярының теңкәмә тейгәне лә еткән.

Муйынға ҡыҙыл галстук тағып, бөтә донъя революцияһы өсөн йәнде аямаҫҡа ант иткәе-, беҙ — малайҙарҙың әлеге баярҙарға асыуы оторо ҡабара төштө. Беҙ хәҙер яҡшы беләбеҙ: төрлө байғуралар, баярҙар, түрәләр элек халыҡ елкәһен кимергән, кеше ризығын ашаған, ә хәҙер һуң былары, ҡ.ала баярҙары, бер ни эшләмәй, тығынын ятмаймы ни? Беҙгә ошоларҙы Сәфәрғәли исемле малай төшөндөрөп 'бирҙе.

Беҙҙең хәҙер башлығыбыҙ икәү: урамда — Шәһиҙулла, пионерҙә — Сәфәрғәли. Шәһиҙулла уға ара-тирә бәйләнмәксе лә итеп ҡуя, ләкин теге, галстугының бер осон тота биреп: «Тейеп ҡара, башың ике булһа...» тип кенә ебәрә, ә Шәһиҙулланың башы саяһын сая, әммә икәү түгел, берәү генә.

Сәфәрғәли Губернатор урамында Әсғәттәргә ҡаршы ғына тора. Вәлетдиндеке һымаҡ, уның да атаһы герман һуғышынан ҡайтмаған. Улар әсәһе менән икәү генә көн итәләр. Пионерҙә башлыҡ булғансы Сәфәрғәли гел һуҡрана, үҙен йәлләтә торғайны. Уҡ атҡанда, уғы сәпкә теймәһә, ул: «Бәхетем юҡ шул минең, бәхетем булһа, атайым да германда ҡалмаҫ ине», — тип зарлана. Берәй уйын башлар алдынан шыбаға тотҡанда, ул аҫҡа ҡалһа: «Ҡотом булһа, мин Сәфәрғәли ҙә булмаҫ инем», — тип илар сиккә етә. Былтыр яҙ Аҡманайҙа икәү балыҡ ҡаптырғанда, быға ни эшләптер аҙашып ҙур һыла килеп эләкте. Балыҡты ул ҡабалана-ҡабалана ярға тиклем тартып килтерҙе, һыланың һырты һыуҙан яртылаш ҡалҡып сыҡты. Балығы дан ине. Ҡолаҫҡа уҡ етмәһә лә, беләк буйы булыр. Сәфәрғәли күл ғифритенең айғолағынан ҡулы менән яй ғына эләктереп алырмы тиһәм, ул ҡапыл, гөрҫ итеп, ҡорһағы менән һыуға, һыланың өҫтөнә һикерҙе. Сәфәрғәли менән бер ҡатарҙан балыҡ та һикерҙе, һикерҙе лә, ҡармаҡты өҙөп, күл төбөнә сумды. Сәфәрғәли ҡул-

дарын беләк төбөнәсә һыуға тығып, ҡамыш араһында байтаҡ буталды. Аҙаҡтан ярға сығып ултырҙы ла, илай-илай, зарланырға кереште: «Әгәр ҙә минең ырыҫым булһа, немец йәҙрә ҡоймаҫ ине, герман һуғыш асмаҫ ине, атайыма тоҫҡап атмаҫ ине. Бөтөнләй ҡапмаһаң, ыһ та итмәҫ инем, и һыла! Ниңә шулай ымһындырып ҡына ҡалдырҙың мине?! Ниңә шулай һис кенә лә ҡыҙғанмайһың мине? һин ҡыҙғаныр булһаң, атайымды батша ла алмаҫ ине, яурындарына мылтыҡ та һалмаҫ ине, башҡайҙары сит ерҙәрҙә ятып та ҡалмаҫ ине...»

Вәлетдин менән Сәфәрғәли ике туған балалар. Уларҙың хәсрәт-зарҙары ла бер төҫлө — йөрәкте көйҙөрөп, әрнетеп ала. Миндә лә балыҡ ҡайғыһы ҡалманы.

— Әйҙә Былау күленә, Сәфәрғәли, унда табан һәләк шәп ҡаба, — тигән булдым мин.

— Безгә тигән ҡояш ҡайҙа ла бер... — тип көрһөндө ул.

Пионерҙә башлыҡ булғас, ошо Сәфәрғәли үҙгәрҙе лә китте. Аҙымын ашыҡмай атлар, һүҙен самалап һөйләр булды. Үҙе генә түгел, хатта муйыны ла оҙонайтөштө уның. Беҙ күрмәгән нәмәләрҙе күрә, беҙ белмәгән әллә ниндәй нәмәләрҙе белә, беҙ уҡымаған китаптарҙы уҡый. Сит илдәрҙә баласаға ҡалай ҡыйын йәшәгәнен, байҙар ярлыларҙы ҡалай йәберләгәнен, үҙе барып ҡарағандай итеп, бәйнә-бәйнә һөйләп бирә. Әллә ҡайҙағы, ер аяғы ер башы ерҙәге баярҙарға, байҙарға, буржуйҙарға беҙҙең асыуыбыҙ көслө, үсебеҙ самаһыҙ, ләкин үҙебеҙҙең баярҙарҙы ла үс һәм нәфрәттән өлөшһөҙ ҡалдырмайбыҙ. Хәлдән килгәнсә, маҙаларын алып, тәкәттәренә тейәбеҙ тегеләрҙең. Ҡараңғы төшкәс, улар йоҡлаған йорттоң бүрәнәһенә гөп-гөп таш бәрәбеҙ. Урамдан үтеп барһалар, юрамал эт һөсләтәбеҙ. Бала-сағаларына, үсекләп, мыҫҡыллап, көн күрһәтмәйбеҙ. Шулай ҙа әлегә тиклем баяр балалары менән, күкрәккә күкрәк килеп, алышҡа сыҡҡан юҡ, ә алышҡы килә. Күп тә үтмәй, дошмандан үс алыу сәғәте етте.

Соҡор аръяғы Миңнуллаларға ирле-ҡатынлы яңы баяр килде. Йәнә минең саҡлы бер малайҙары, минән кесерәк ҡыҙҙары бар. Малайы ҡыҫҡа балаҡ-

лы зәңгәр салбар, ҡыҙыҡайы теҙенә лә етмәҫ сәскәле күлдәк кейеп йөрөй. Малайҙы беҙ «һалам сираҡ», ҡыҙыҡайҙы «Сиңерткә» тип атаныҡ. Малайының сираҡтары ысынлап та һалам йыуанлығы ғына, тубыҡтары ла һалам быуыны хәтле генә. Ҡыҙыҡайы торғаны менән бер ырғандаҡ: атлағанда ла ырғый, югергәндә лә ырғый, тик торғанда ла ырғый.

Былар иртән иртүк дүртәүләп, кәрзинкәләр тотоп, Губернатор урамынан тау яғына сығалар, кис кенә урап ҡайталар, һалам сираҡ менән Сиңерткә аталарынан тотам да ҡалмай. Сиңерткәһе бер -хәл. Беҙгә уның һалам сирағы кәрәк. Тәүге көндәрҙә беҙ, йә Әсғәттәр, йә Сәфәрғәлиҙәр өйө артына боҫоп, тегеләфгә мәсхәрә яуҙырҙыҡ:

— Баяр, баяр — хәлдән таяр!

— Эй, бөлгән баяр, ы(нтан балағыңа ситсаң етмәнеме ни?

— Эй, кибеп ҡаҡланған баярҙар, тау башында ел йотоп һимерәһегеҙме ни?

Беҙҙең синфи дошмандарыбыҙҙың дүртеһе лә ни эшләптер үтә арыҡ, үтә сибек ине.

— Кешеләрҙе күп рәнйеткәндәр улар, шуға күрә үҙҙәренә ит ҡунмай, — тигән нәтижә сығарҙы Әсғәт был йәһәттән.

— һинең дә майың ташып бармай,—тине Сәфәрғәли.

— Миңә ашау етмәй... Баярҙар кеүек тығынһам, ҡорһағымдан май тамып торор ине минең.

«Эт өрөр, бүре йөрөр» тигәндәй, беҙ сәйнәшә торҙоҡ, улар, беҙгә әйләнеп тә ҡарамай, йөрөй бирҙе. Уның һайын беҙҙең ҡул ҡысый, йоҙроҡ йомарлана барҙы.

Хәҙер инде беҙ — «беҙ» тигәнем, Сәфәрғәли, Әсғәт, мин — быларҙы һай соҡорҙағы таш өйөмдәре араһына йәшеренеп, күҙәтә башланыҡ. Баярҙар йыш ҡына шул ерҙән ҡайта. Бер ҡапмаһалар, бер килеп ҡабырҙар... һәм ҡаптылар ҙа! Ер еләге бешеп өлгөргәндә булды был. Беҙҙең- һай соҡорҙа еләк тәгәрәп бешә. Урыны-урыны менән ҡыҙыл сәкмән йәйгән төҫлө тотош ҡыҙарып ята. Бер килеп тап булһаң, баш та ҡалҡытып булмай.

Көн кискә ауышҡас, әлеге кәрзинкәләрен күтәреп, Һай соҡорға килеп сыҡты былар. Баяры менән бисәһе һуҡмаҡ буйлап бара бирҙе, малай менән ҡыҙыҡай, ситкә тайшанып, еләк сүпләргә кереште. Тәүҙә улар югерә-атлай ғына өҙгәләп уҙмаҡсы иттеләр. Уҙып ҡара һин!. Еләкле урын бер эләктереп алһа, тиҙ генә ысҡындырмай ул. Бына Сиңерткә сүкәйеп ултырҙы, һалам сирағы һуҙылып уҡ ятты. Өлгөрә алмаҫтай булып, ауыҙҙарына еләк тултыра былар.

— Әй-һәй, балалар! Әйҙәгеҙ!—тип ҡысҡырҙы аталары, байтаҡ ара киткәс.

— Хәҙер! — тип сытырҙаны Сиңерткә, ләкин уларҙың тиҙ генә ҡуҙғалыр самалары юҡ ине әле. Шулай сихырлай ул бешкән еләк.

Оло баярҙар, һыртты артылып, күҙҙән юғалды. Былары, миңрәү бәрәстәр һымаҡ, соҡор төбөндә аҙашып ҡалды. Көнө килде, сәғәте һуҡты! Беҙ өҫөбөҙ өс яҡтан сығып, һалам сираҡ менән Сиңерткәне иҫ итмәҫтән ҡамап алдыҡ. «Герман һуғышы»нда алған һабаҡ ярап ҡалды.

Әһә, килеп ҡаптығыҙмы, баяр ҡалдыҡтары! — тине Сәфәрғәли. Шунда уҡ миңә әмер бирҙе. — Кендек! һин Сиңерткәнең ҡанатынан эләктер, аталарына барып ошаҡламаһын. Беҙ бынығының иҙмәһен иҙербеҙ.

Малай менән ҡыҙ, аҡ сепрәктәй ағарып, ҡалтырана-ҡалтырана беҙҙең алда баҫып тора. һалам сираҡтың моңһоу һоро күҙҙәре мине шунда уҡ арбап алды. Юҡ, мин уға ҡул күтәрергә баҙмаясаҡмын. Сиңерткә, тыпырсына-тыпырсына, сыйылдап иларға кереште. Уның шулай асыу килтергес йәмһеҙ илауы миңә ҡеүәт бирҙе. Шунда уҡ ҡыҙыҡайҙың көпшә йыуанлығы ғына беләгенән эләктереп алдым, әммә беҙ ир намыҫының, егет әҙәбенең нимә икәнен беләбеҙ, ҡыҙ балаға һуғыу түгел, тырнаҡ менән дә сиртмәйбеҙ, хатта баяр ҡыҙы булһа ла. Уның күҙ йәштәренә минең иҫем китмәй. Күҙҙәре лә, бесәй күҙе төҫлө, йәшел. Ҡыҙғаныр ере юҡ, ә бына малайҙың күҙҙәре...

— Кеше ҡаны эскән баярмы һин?—тип екеренде Сәфәрғәли. — Баяр булһаң, мә! Язаңды ал! — Ул һалам сираҡтың күкрәгенә төрттө. Әсғәт тә

берҙе өҫтәне. Малай иламаны ла, ҡасырға ла йыйынманы, рәхим дә һораманы, тыныс ҡына аҡланырға тырышты:

— Беҙ... мин баяр түгел, малайҙар. Төптө баяр түгел!

— һин булмаһаң, атайың баяр, әсәйең баяр, олатайың баяр, оләсәйең баяр! Ә һин баяр эттән тыуған баяр көсөгө! —тип ҡыҙмаҡсы булып маташты Сәфәрғәли. Тик малайҙың күҙенә ҡарағайны, ебене лә төштө.

— Әллә ниндәй баяр был, һис кенә лә асыуҙы килтермәй,— тип аптыраны Әсғәт.

— һәр һеләгәй баяр, һәр емтек буржуй ҡаршыһында шулай ҡойолоп төшһәк, беҙҙән ниндәй көрәшсе сыҡһын?! Көрәшсе ул дошманға ҡарата аяуһыҙ, ҡанһыҙ булырға тейеш! Бына минең кеүек!

Сәфәрғәли һалам сираҡҡа тағы бер һуҡты, уның елкәһенән нығытып этеп ебәрҙе. Малай ергә йөҙтүбән ҡолап төштө. Сәфәрғәли, һынай биреп, Әсғәт менән миңә ҡарап алды. Кешенән ҡалышмайым тигән булып, мин дә Сиңерткәне ебәрмәй генә, ерҙә йөҙтүбән ятҡан һалам сираҡҡа бер тибеп килдем. Типтем дә, тәндәрем сымырҙап китте.

...Бүтәндәргә эйәреп, үҙем теләмәгән йәмһеҙ эште эшләүем ғүмеремдә беренсе тапҡыр, бәлки, ошо булғандыр. Иҫемә төшһә, әле лә уң аяғым тартышып ҡуя, ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, теге тибеүем ғүмеремдә һуңғыһы ла булмағандыр... Шулар арҡаһындалыр, ахыры, юҡ-юҡ тиһәң дә, йөрәк сәнсешеп ала...

Малайға беҙ бүтәнсә ҡағылманыҡ. Ул яй ғына башын күтәрҙе. Уның эйәгендәге яранан ҡан аға ине. Күрәһең, ул шул ере менән ҡырлы ташҡа килеп төшкәндер. Ҡулы менән эйәген тотто. Усына шунда уҡ ҡан тулды. Ҡан күргәс тә, ул үҙгәрмәне, шул өнһөҙ көйө ҡалды. Аяғөҫтө баҫып, салбар балағындағы юҡ туҙанды ҡаҡҡылаған булды. Яралы ағаһын ҡыҙғанып, Сиңерткә оторо сәбәләнеп иларға тотондо. Мин уны инде ысҡындырып ебәрҙем.

— Илама, һылыуым, тамсы ла ауыртмай, һыу менән йыуғас та, бөтә ул, — тине малай. Ул беҙҙең беребеҙгә лә күтәрелеп ҡараманы, һеңлеһен етәкләп алды ла ашыҡмай ғына китеп барҙы.



208-се биткә. «Мәрәһим атын туҡтатып ҡайырылып ҡараны. Шул саҡ Аҡйондоҙ ҡоралай һымаҡ ҡапыл үрә һикереп, китеүселәр артынан тороп югерҙе».

Беҙ аптырап ҡалдыҡ. Туҡмауын беҙ туҡманыҡ, ә кем еңде һуң әле? Ҡыҙ менән малай түбәгә күтәрелде, унан, ҡалҡыулыҡтың теге яғына китеп, бөтөнләй күмелде. Күҙҙән юғалдылар улар, ә күңелдән китмәнеләр.

...Был баярҙар беҙҙең ауылға башҡаса килмәне. Йыл артынан йыл уҙа торҙо. Мин дә ҡала кешеһе булып киттем. Сәс ебәреп, шиғырҙар яҙа, уларҙы хатта баҫтыра башланым. Тәүге китабымдың ҡулъяҙмаһы типографияға киткәс, бер-ике көндән үк шунда югереп килдем. Көтөргә сабырлыҡ етмәй ине.

— Анау ағайың йыя һинең китабыңды, — тип күрһәттеләр миңә.

Хәреф йыйыусының эргәһенә үк килеп баҫтым. Ул мине шәйләмәне. Муйынымды һуҙып ҡарап торам. Ҡулдарына күҙем эйәрмәй. Мин яҙған һүҙҙәрҙе ул хәрефләп йыя. Бармаҡтары, әйтерһең, ҡурғаш хәреф түгел, ә ҡиммәтле аҫыл таш сүпләй: шундай ҡәҙерләп ала уларҙы.

— һаумыһығыҙ! — тип иҫәнләштем мин, байтаҡ ваҡыт үткәс.

Ул миңә әйләнеп ҡараны, һарғылт аҡ йөҙөнә йылмайыуға тартым нәмә сыҡты, ләкин ҙур моңһоу күҙҙәре миңә битараф ҡалды. Ул баш ҡаҡты. Мин шунда уҡ ситкә боролдом. Эйе, был әҙәр., һис шикһеҙ, ул — Миңнулла баяры — һалам сираҡ менән Синерткәнең атаһы ине. Нимә эшләп ул бында килеш сыҡҡан? Әллә был синфи дошман эҙ яҙҙырыр өсөн шулай иттеме икән? Үткәндәрен йәшерер өсөн? Мин йырынып сыҡмаҫлыҡ шиктәргә баттым... Ә һуңыраҡ шик урынына эске әрнеү, выждан ғазабы килде.

«Миңнулла баяры» тигәнебеҙ, бала саҡтан уҡ типографияла эшләп, ҡаты үпкә сире алған эшсе — наборщик булып сыҡты. Анау йылды, хәле бик мөшкөлләнгәс, шифаһы булмаҫмы тип, ул беҙгә ҡымыҙға килгән икән. Бына кемдең балаларын йәберләгәнбеҙ беҙ! Ә ул, хәрефен хәрефкә килтереп, шик-шөбһәһеҙ минең яңы морон төртөп сыҡҡан шиғырҙарымды йыя, ташҡа баҫтырып, уларҙы ғүмерле итергә әҙерләй. Гүйә, уның өсөн донъяла шунан да кәрәкле, шунан да ашығыс эш юҡ.

Мин уға бер тапҡыр ҙа һүҙ ҡуша алманым. Ҡыйманым. Намыҫым тыйҙы.

...Дүрт йылдан һуң тағы бер осрашыу буласаҡ. Ошондай уҡ уйсан ҙур һоро күҙҙәр миңә төбәләсәк. Мин өн менән төш, үлем менән йәшәү араһында ҡаласаҡмын... Алыҫта офоҡтар сайҡала, мин ятҡан ер бәүелә. Ер бәүелмәй, мине, носилкаға һалып, ҡайҙалыр алып баралар. Мин үҙем тирбәлӘм. Манма тиргә батҡан арыҡ һалдат мине көс-хәл менән күтәреп килә. Уның эйәк өҫтөндәге арҡыры йөйҙән күҙҙәремде айырып ала алмайым... Йөйгә тиклем һәр ваҡыт яра була, яранан ҡан аға. Был йәрәхәттән тамған ҡан биҡ алыҫта, һай соҡорҙағы һоро ташҡа йоғоп ҡалған булырға тейеш. Йоҡҡанды ямғыр йыуғандыр, ҡояш киптергәндер. Оноторға, тынысланырға мөмкин... Ә ул, йылдар уҙғас, ут тамсыһы булып, һинең йөрәгеңә килеп тамһа? Әйтәйек, туранан-тура һинең ғәйебең дә юҡ кеүек. Уның һуң, уның ғәйебе бар инеме ни? Ергә тамған һәр тамсы ҡан өсөн кемдер ғәйепле, кемдер яуаплы — ике яҡтың береһе, әлбиттә. Ике яҡ та бер юлы ғәйепле йәки бер юлы ғәйепһеҙ булмай.

Эйе, носилкала ятҡанда уҡ әле мин уны таныным. Тән яраларымдың һыҙлауы баҫылды хатта...

## АЌЙОНДОЗ

Иртәгә һабан туйы тигәндә, күршебеҙгә килен төштө. Терәлеп торған ут күршегә түгел, арырағына — бер өй ашаһына. Хәлле генә көн иткән Ғәлләм ҡарт уртансы улын — йомоҡ Хәмзәне шулай башлыкүҙле яһаны.

Беҙҙең яҡта туйҙарҙы ҡышын ҡыҙ йортонда үткәрәләр ҙә йәйҙең иң йәмле көндәрендә, мисәпмисәп еккән аттарға ҡыңғырауҙар тағып, кәләште кейәү төйәгенә алып ҡайталар — килен төшөрәләр. Тышҡы туйҙан һуң килен төшөрөүгә тиклем кейәү кеше һәр кесаҙна һайын ҡыҙ йортона «кәләш кейәүләргә» ҡуна бара. Урам аша әрме, утыҙ-ҡырҡ саҡрым арамы — барыбер уЛ, шартына килтереп, юлға әҙерләнә: атының ҡойроҡ-ялын тарап үрә, уны таҫма-тоҫма менән биҙәй, югән, эйәр еҙҙәрен ҡом менән ышҡып ялтырата. Атын ул ҡуранан уҡ атланып килмәй, урамға сыҡҡас ҡына, ҡупшы итеп эйәргә һикерә. Унда ла тиҙ үк һайтлап сабып китмәй, ҡупырая биреп, бер талай туп-тура ҡарап тора: күрмәгәндәр күреп ҡалһындар, йәнәһе...

Былтыр минең Мортаза ағайым, унан әүәлге йылды Ҡорбанғәле Хәжимуллаһы ана шулай итә торғайны. Әрпеш кенә әҙәм дә, кейәүгә әйләнгәс, ҡупшылана ла китә.

Ә бына Хәмзәнең «кәләш кейәүләргә» йөрөүе бөтөнләй тип әйтерлек һиҙелмәне. Яҙғы һабан бөткәс, бары бер тапҡыр ғына, ағаһына эйәреп, барып әйләнде, буғай. «Ниңә йәш кәләшеңдең күңелен күрергә йөрөмәйһең?—тип интектергән тиҫтерҙәренә Хәмзә былай тип яуап бирә икән: «Ара алыҫ, юл өҙөк, юлда аҙған-туҙғанға тап булып ҡуйыуым

бар. Ундай зат осраһа, булыр бисәӊ тол ҡалыр, тыуыр балаӊ етем үҫер. Тамғаһы һалынған, аҙашмаҫ әле, тәғәйенләнгән еренә килер...»

Кистәрен нигеҙ буйында тәмәке тарта-тарта әӊгәмә ҡороп ултырған ағайҙар бүтәнсәрәк тә һөйләп ташлай торғайны. Имеш, кәләш үҙе шундай шарт ҡуйған: арсыйҙар килгәнсе, күренеп, йөрөмәһе, тигән. «Ниӊә шулай тигәнен бер хоҙай ғына белә, белеге етһә», — тине анау көндө көтөүсе Нуретдин.

Хәмзәнеӊ һүҙе дөрөҫкә сыҡты. Тамғаһы һалынғас, килен аҙашманы, кейәү йортона тура килеп төштө. Алыҫтан килде, тинеләр, киленде — бик алыҫтан — Дим үренән. Килене килен генә түгел, күрнр күҙгә тамаша, һиҙгер күӊелгә бер мөғжизә ине. Беҙҙеӊ ауылда ла сибәр ҡыҙҙарҙы, һылыу киленДәрҙе, ҡуштан ҡатындарҙы үләт ҡырмаған. Шөкөр, иҫәндәр. Ана, беҙҙеӊ үрге күрше Мансур ҡыҙы Гөлбостан үҙе генә лә ни тора. Буйы-һыны ҡойоп ҡуйған шикелле. Йөрөгәндә лә, атлап йөрөмәй, берсә оса, берсә йөҙә ул. Уныӊ биш төрлө йөрөшө генә бар, тиҙәр. Быйыл яҙ артҡы баҡсала картуф ултыртҡанда. Мансур ҡарт, нимәгәлер асыуланып, ҡыҙына ҡысҡырып ебәрҙе: «Шул «барыня» атлауыӊды ҡуй әле, Гөлбостан!» Күрәһеӊ, теге эш ваҡытында яӊылыш «барыня»сә атлап киткәндер.

Әле Мортаза ағайыма кәләш әйттергәнсе, Гөлбостанға яусы ебәрергә лә ниәтләп ҡарағайныҡ, әммә аҙаҡтан кире һүрелдек. «Уӊған ҡатын ир күрке, матур ҡатын ил күрке, — тиештек, — үтә сибәр Гөлбостан йортҡа төҫ бирмәҫ», — тип шикләндек. Ағайыма Тәмәнәй осонан урта матур Бикә еӊгәмде алып бирҙек. Үҙенеӊ дә күҙе төшөп йөрөгән икән. Атайым бешер-бешмәҫ башҡоҙалар ебәреп мәшәҡәтләнмәне, ҡыҙ атаһына туп-тура үҙе барҙы. Барҙы ла көйө китеберәк ҡайтты. Киске сәй табынында ул ошолай тип хәбәр һалды:

— Буласаҡ киленде күргәс тә, оҡшаттым, һөйәге беҙгә тартым. Тик ҡоҙалар ғына бер аҙ күӊелде китте, һаранға оҡшайҙар.

— Мал күп һорайҙармы ни? —тине Оло инәйем.

— Юҡ, күп һорамайҙар. Улар ҡомһоҙ түгел, һаран, һыҡмыр булырға оҡшай.

0*

— Һи-и, бер күреүҙә ул ҡәҙәреһен үк ҡайҙан белеп бөтәһең, быға са аралашҡан кешеләребеҙ түгелсе,— тип ҡаршы төшкән булды Оло инәйем.

— Сирек тумалаҡ май ҡуйҙылар табынға, шәкәрҙәре лә үтә ваҡ ватылғайны, борсаҡ саҡлы ғына...

Оло инәйем бүтәнсә өндәшмәне.

Еңгәм дан бисә булып сыҡты. Ҡыуанып бөтә алмайбыҙ. Ә ҡоҙалар, ысынлап та, һарандың да һараны инде...

Гөлбостан кеүектәрҙе меңләптер тип әйтә алмайым, ә шулай ҙа, тырышыбыраҡ һанаһаң, байтаҡ йыйылыр. Бер ҙә юҡҡамы ни тирә-яҡтың иң сая егеттәре, бал тәпәненә ябырылған һағыҙаҡ һымаҡ, беҙҙең тирәгә һырыла. Урала-Һарыла ла һемәйеп ҡайтып китә. Ҡыҙҙарҙың һылыуҙары үҙебеҙҙең егеттәрҙән дә артмай. Артыу ғына түгел, хатта етмәй ҙә ҡала әле. Шулай булмаһа, анау Хәмзә, әллә ҡайҙа Дим үренә барып, кәләш әйттереп йөрөр инеме ни?

Сибәрҙәре менән дан тотҡан ауылға төшкән был килен шулай ҙа быҙау көтөүенә аҙашып килеп ингән болан балаһына оҡшай ине. Төҫө-башы, торошо-йөрөшө менән дә, күҙ ҡарашы, хатта тауышы менән дә беҙҙең өсөн ят, сәйер, тылсымлы ине, гүйә, ул бөтөнләй башҡа тупраҡта, башҡа күк аҫтында, башҡа һауаны һулап үҫкән. Эскәне лә һыу түгел, моғайын, шәрбәт булғандыр. Юғиһә шундай яғымлы тауыш ҡайҙан килһен ти ул? Әйткәнемсә, бер ҡарауҙа ир-атты әсир яһап, мәжнүн итер ҡатындар күп ине беҙҙә, ә быңдайы әле юҡ ине. Исеме лә быға са ҡолаҡ ишетмәгән исем бит — Аҡйондоҙ. У^ың исемен тәүтапҡыр ишеткәс тә, мин ирекһеҙҙән күккә ҡараным, баш осомда көпә-көндөҙ балҡып яныр аҡ йондоҙ күрерҙәй булдым — күрмәнем, ләкин ғүмерем буйы шул еңгәмдең исеме ҡолағыма салыныу менән, уның һыңарын күрмәмме тип, күккә баш сөйҙөм. Улай иткән бер мин генәме икән әле?

— Мәгәр ҙә ниндәйерәк ине ул хайран илаһи зат, тасуирләп бирһәңсе,—тиеүселәр булыр, бәлки.

Мин бары шуны ғына әйтә алам: ҡояшты, айҙы нисек тасуирләйһең? Ҡояш һәр кем өсөн бер ҡояш,

ай һәр кем өсөн бер ай инде. Аҡйондоҙ ҙа бары Аҡйондоҙ ғына, берәү генә ине.

Аҡйондоҙҙоң, ҡыҙ-ҡырҡынға эйәреп, һыу юлы башлап ҡайтыуын бөтә урам, тамаша ҡылып, ҡаршы алды. Килендең ике күнәге лә мөлдөрәмә тулы ине. Әмәл өсөн бер тамсыһы сайпылһын да! Атлағанда, үксәләре ергә теймәй, тик аяҡ остары ғына ҡағылып ҡала. Үҙе һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йылмая."'Нимә күреп йылмая икән ул? Ҡойма башында әсирләнеп ултырған ун ике йәшлек мин бисараны шәйләйме икән? Шулай ҙа кемгә йылмая ул — үҙ-үҙенәме, кешеләргәме әллә бөтә донъяғамы? Бер ҡараһаң, бына-бы(на), тыйыла алмай, илап ебәрер кеүек...

„.Быға хас йылмайыуҙы миңә ғүмеремдә тағы ике тапҡыр күрергә насип буласаҡ: бер тапҡыр үҙем менән тупраҡташ, замандаш бик һылыу ҡатын, был донъяға китер өсөн генә килгән Ер ҡыҙы, миңә ҡарап, миңә атап, йән тетрәткес шулай йылмаясаҡ, о икенсе тапҡыр бөйөк Леонардо да Винчиҙең хыялынан яралған үлемһеҙ Джоконда — мәңгелек Мона Лиза йылмайып, рухымды берсә күккә ашырасаҡ, берсә упҡынға атасаҡ...

Килен төшкән Ғәлләмдәр йортонда шау-шыулы мәжлес төн уртаһына тиклем барҙы. Беҙ Сәлих ағайым менән ике буйҙаҡ лапаҫ башында ҡунабыҙ. Күк тулы йондоҙ. Мин шуларға ҡарап ятам. Уларҙың береһе лә аҡ түгел, йә зәңгәрһыу, йә йәшкелт. Моғайын, аҡ йондоҙ берәү генәлер, үҙ ваҡыты еткәс кенә ҡалҡалыр. Бәлки, ул хәҙер бөтөнләй күктә лә түгелдер, ҡыҙ һынына инеп, ергә төшкәндер... Әсғәт иимә әйтер ине икән был хаҡта? Өйҙә юҡ шул ул, күрше ауылда көтөү көтә.

Ғәлләмдәр ҡураһында ла ығы-зығы тынды. Эттәр ҙә өрөүҙән туҡтаны. Инде тәүге әтәстәр ҙә хәбәрләшеп алды. Нәҡ ошо мәл Түбән остан тулҡын-тулҡын булып гармун моңо ағылып килде. Башта ул кемгәлер йомшаҡ ҡына, яғымлы ғына һуҙып өндәшкәндәй булды, унан һуң ярһып-ярһып эс серҙәрен һөйләргә кереште, бара торғас, нимәлер инәлергә, ялбарырға, үтенергә тотондо, аҙаҡ килеп, үкереп илап ебәрҙе; ҡапыл тынды ла быуылып-быуылып үкһеп алды. Юҡ, гармун үҙ йәшенән үҙе сәсәмәне. Ул саҡ ҡына тын алды ла, ашҡынып-

ашҡынып һайрап, төнгө ғаләмгә үҙенең буласаҡ шатлыҡтарын, өмөттәрен, күкрәгенә һыймаç дәрттәрен һибә башланы. Был моң ағышын мин инде ишетеп кенә түгел, хатта күрәм дә төçлө. Ул ағыш, нурҙар сәсә-сәсә, Түбән остан Юғары осҡа һуҙыла.

— Мәрәһимдең тағы ене ҡуҙғалды, ахырыһы, — тине Сәлих ағайым йоҡо аралаш.

Их, ағайым! Ниңә шулай тинең инде? Енден ни ҡыçылышы бар бында? Һин шулай тинең дә хырылдап йоҡлап киттең, ә үҙең шул бер ауыҙ һүҙең менән әле генә бөтә донъяны сихырлап алған моңдо, иç киткес яҡты балҡышты һүндерҙең.

Оло инәйем, моғайын, улай итмәç ине. «Кемделер эҙләй сыҡты йәнә был бахыр Мәрәһимдең яңғыҙ йәне», — тиер ине. Ул саҡта әле мин ете төн уртаһындағы яңғыҙлыҡтың нимә икәнен танып та, татып та белмәй инем. Яңғыҙлыҡтың иң яманы —төн уртаһындағы яңғыҙлыҡ булыуын бик күп замандар үткәс кенә аңлаясаҡмын, шулай ҙа әле мин барыбер йәнем-тәнем менән Мәрәһим яҡлымын. Уның зары ла, ҡыуанысы ла төнгө бушлыҡҡа батып юғалмай, минең күңелемә һеңә бара. Был сәғәттә бөтә йыһанда уяуҙарҙан беҙ бары икәү генәбеҙ һымаҡ — ул да мин...

Янып һүнгән йылдарымдың һоро көлдәре сәстәремә ҡунғас, шул хәҡиҡәткә ирештем мин: кешеләр бөтәһенә лә күнегә — матурҙың матурлығына, йәмһеҙҙең йәмһеҙлегенә, яманың яманлығына күнегә. Эйәләшә лә ғәжәпләнмәй башлай. Шулай итеп, матурҙар һәм яҡшылар хатта оттора, йәмһеҙҙәр һәм ямандар ота, ә бына Аҡйондоҙға беҙ ай үткәс тә, йыл үткәс тә, ғүмер баҡый ҙа, уны ғәҙәти итеп, күнегә алманыҡ. Нисектер, ул бөтөнләйгә ергә төшөп етмәне, беҙҙең араға инеп юғалманы, саҡ ҡына юғарыраҡ ерҙә, буй етмәçерәк арала, ҡалды. Был уның тәкәбберлегенән, эрелегенән түгел ине. Унда маһайыуҙың, һауаланыуҙың әçәре лә булманы. Кешеләр үҙҙәре уны шулай юғары ҡабул итте һәм әллә ниндәй хәлдәрҙә лә түбән төшөрмәне.

Беҙҙең Серсә урамы башта Аҡйондоҙҙоң сибәрлегенә, һылыулығына һоҡланды, тора-бара уның уңғанлығына, булдыҡлылығына, илгәҙәклегенә хайран ҡалды. Ғәлләм килене иләгән еп, һуҡкан

киндер ебәккә алыштырғыһыҙ, киҫкән туҡмасы ҡылдан нескә, кейем текһә, ҡойоп ҡуя, тип һөйләйҙәр. Быға тиклем дүрт аяғын тышағас ҡына һауҙыра торған ала һыйырҙары, хәҙер көтөүҙән ҡайтҡас та, килен артынан үҙе эйәреп йөрөй. Унығы хаҡ. Көн дә үҙебеҙ күреп торабыҙ. Ғәлләмдең сығынсы ерән бейәһе лә хоҙай мәхлүгенә әйләнде — бер тапҡыр ире менән утынға барғанда, Аҡйондоҙ, дилбегәне үҙ ҡулына алып: «Әйҙә, малҡай, әйҙә, аҡыллым, әйҙә, күндәмем!» — тип кенә әйткән, имеш. Ошо һүҙҙәрҙе ишеткән ерән бейә әйләнеп ҡараған да ике тапҡыр бащ ҡаҡҡан, йәнәһе, төшөндөм, бынан ары һин әйткәнсә булырмын...

Аҡйондоҙ бесән йыйған, ураҡ урған ерҙән кешеләр ғәмһеҙ генә, битараф ҡына уҙып китә алмай, уның эшләгәнен, бер тамаша ҡараған һымаҡ, донъяларын онотоп, үҙ эштәрен ҡалдырып ҡарап торалар. Торалар, торалар ҙа: «Эшең ырамлы булһын!»— тип теләк теләп китәләр, «һеҙҙеке лә шулай булһын!» — тип яуаплай килен өндәшмәҫ иренән уҙып булһа ла. Кәләш алғас та, Хәмзә шул йомоҡ, шыҡһыҙ көйө ҡалды.

Усына ҡош ҡундырып һайратыр, тыны менән өрөп сәскә бөрөләре астырыр ҡатындар булыуын **мин** әле белмәй инем. Улар бар икән. Ана, шуларҙың береһе Аҡйондоҙ булған икән. Ул уҙып киткән һа**йын,** Шәһиҙулланың әсәһе Миңлекәй еңгә:

— Ошо Аҡйондоҙҙоң урамдарҙы йәмләтеп бер **үтеп** китеүе үҙе ни тора. Тфү, яман күҙем теймә**һен!**— тип һоҡланып ҡала.

Ғәлләмдәр күрше-күлән менән бик аралашып **бармайҙар,** бүленеберәк көн итәләр. Шуға күрә **улар** йортонан сер сыҡмай, хәбәр таралмай. Миң**лекәй** еңгәнең бер өтәләгән аҙғын тауығы картуф **баҡсаһына** инеп тибенһә, был хаҡта бөтә Серсә **шунда** уҡ тулы • мәғлүмәт ала, ә тегеләрҙең аты **йығылып** үлһә лә, тауыш-тын сыҡмай. Нисек кенә йәшәйҙер ул өйҙә Аҡйондоҙ — бынығы илгә бил**дәһеҙ.**

Килен төшкәндән һуң ҡабалан-ҡорһалан йәй уҙ**ҙы,** һарғайып, моңайып көҙ үтте, башланмаған оҙон **бер** ҡыш бөттө, йырғанаҡтарҙан йәнә ҡар һыуҙары **юғерҙе.** Бына күпме заман Мәрәһимдең гармуны бер

генә тапҡыр ҙа тауыш сығарманы. Бөтөнләй телдән яҙҙы. Баштараҡ кешеләр быға бик аптыраны, хатта хәтерҙәре ҡалды, күңелдәре төштө. Бер йыуаныстан мәхрүм булғандай тойолдо уларға. Нисек инде ул? Айҙан-ай, йылдан-йыл, көн һайын булмаһа ла, аҙна һайын Мәрәһимдең һағышлы көйҙәре бөтә ауылды моңландырып яңғыраһын да ҡапыл өҙөлөп ҡалһын, имеш... Тиктәҫтән генә булмаҫ был хәл, тиҙәр. Мин дә шулай уйлайым. Күрәһең, бисара Мәрәһимдең йәне тамам аҙашҡандыр, эҙләгәнен табыуҙан өмөт өҙгәндер, шуға күрә гармун телдән ҡалғандыр, көйҙән яҙғандыр. Моғайын, шулайҙыр.

Бәлки, улай ҙа түгелдер...

...Кескәй ваҡытта минең ифрат алама бер ғәҙәтем бар ине. Кистән юрған аҫтына инеп сумам да, йоҡлаған булып, ололарҙың һөйләшкәнен тыңлап ятам. Етмәһә, шартына килтереп, ара-тирә мышнап та ебәрәм. Торғаны менән бер шымсы. Тфү, шаҡшы! Хәтеремә төшһә, әле ҡолаҡтарым янып китә. Быныһы минең икенсе әшәкелегем, ә беренсеһен унан да элегерәк — дүрт-биш йәшемдә ҡылдым. Ике йөҙлөлөк күрһәттем. Бына нисек булды ул.

Беҙҙән ҡыйғасыраҡ урам аша Ҡәюп ағайҙар тора. Бер ара мин уларға бик ныҡ эйәләшеп алдым. Көн дә киләм. Уларҙың Зәйнәп менән Йәмилә исемле етеп килгән ике ҡыҙы бар. Былар, береһе йорт болдорона, икенсеһе келәт алдына ултырып ала ла әрләшә лә әрләшә. Бер көндө Зәйнәп мине, үҙ эргәһенә саҡырып, берәй төймә-фәлән бирә лә Йәмиләгә атап төрлө насар һүҙҙәр әйттерә. Ул шым ғына ҡолағыма шыбырҙай, мин ул әйткәнде ҡысҡырып ҡабатлайым:

— Һине сабатасы кәкере Хәбетдин ҡосаҡлап ятҡан! Ҡыйыш ауыҙлы тешһеҙ һеләгәй Ханса үпкән. Тәмле булдымы һеләгәй Ханса үпкәс? Етмәһә, һин тиле Ғәббәскә ғишыҡ хаты яҙғанһың. Мәсхәрә! Хат яҙғансы, Ғәббәскә ыштан тегеп кейҙер лутсы. Юғиһә ана йәйен-ҡышын ыштанһыҙ йөрөй. — Йәмиләгә тағы әллә ниндәй ғәйептәр тағып, тегене илатмай туҡтамайбыҙ.

Икенсе көндө, берәй буш шырпы ҡабы һоноп, мине Йәмилә ҡулға төшөрөп ала. Мин инде келәт алдына күсәм. Хәҙер шул уҡ тырышлыҡ менән Йә-

миләнең Зәйнәпкә төбәлгән һүҙҙәрен һөрәнләп •кабатлайым: —һин бур! һабын буры! Тараҡ буры! һин мөртәт! Ҡасып ураҙа асаһың. Алдаҡсы һин! Шуның өсөн һине берәү ҙә яратмай. Диуана Ғәббәс тә һиңә әйләнеп ҡарамай. Ырғаҡ төҫлө кәкере танауыңа кейәү эләктерә алырмын тип өмөт тә итмә. Бисура! Албаҫты! Мунса пәрейе!!*-

һүҙ кәкере танауға барып еткәс, Зәйнәп, югереп килеп, Йәмиләнең сәсенә йәбешә. Ошо ерҙә инде минең бурысым үтәлеп, эшем тамамлана.

Алдағы көндәрҙә, тағы шулай ҡулдан-ҡулға күсеп, әлеге иҫәрлегемде эшләнем. Ошо ҡылған ҡылығымды мин ғүмер буйы онота алманым. Иҫемә төшкәһ һайын тертләп киттем. Яман төш күргәндән һуң шулай тертләп уянаһың бит: «Ярай әле төш кенә булкаң...» — тиһең. Мйн дә: «Ярай әле был яманлығым өндө төштән айырмай торған сағымда ғына эшләнгән», — тип үҙемде йыуатҡан булам, ә онотоп булмай. Тимәк, ғүмер буйы һабаҡ алам. Танылған хаталарыбыҙ, хатта ғәйептәребеҙ тормошта беҙҙең кәңәшселәребеҙгә, ярҙамсыларыбыҙға, шулай итеп, бара торғас, талапсан дуҫтарыбыҙға әйләнәләр, ә танылмағандары йәки йәшереп килгәндәре дошмандарыбыҙ булып ҡалалар. Ҡатмарлы хәтәр хәлдәргә тап булғанда ла, мин шуны онотмаҫҡа тырыштым. Бер көндө Зәйнәп тауышы, икенсе көндө Йәмилә тауышы менән ҡысҡырһаң, бөтөнләй тауыштан яҙыуың бар.

...Мин инде байтаҡтан бирле юрған аҫтында ятам. Өйҙә бары ике инәйем генә. Оло инәйем нимәлер яманың ултыра. Кесе инәйем ҡаҙан төбө кыра.

' — Ишеттеңме әле, ил өҫтөндә имеш-мимеш йөрөй бит, — тине Кесе инәйем, — Мәрәһим менән Аҡйондоҙ хаҡында.

— Быш-быш йөрөгән һәр хәбәрҙе тыңлай ҡалһаң, зиһененә көс килер. Ҡуй, Вазифа!—тип ҡырт киҫте Оло инәйем. Бөтә ишеткәнен һөйләп бөтөрмәй гуҡтарға текеһенең самаһы юҡ ине.

Бик ҡаты ғишыҡ тотошҡандар, ти. Таһир менәм Зөһрә кеүек...

Оло инәйем көрһөнөп ҡуйҙы. Бер аҙҙан тыныс кынн әйтә һалды:

— Мөхәббәт яҙыҡ түгел. Мөхәббәтһеҙ уйнаш яҙыҡ. Әгәр ҙә һин беҙҙекенә яратып килмәһәң, белмәйем, нисек икебеҙ бер донъяға һыйып йәшәр инек... Мөхәббәт бөтәһен дә аҡлата, ярлыҡата...

— Яҙығын да, сауабын да үҙе өсөн һәр кем үҙе күтәрә. Мин бит уларҙы ғәйепләп әйтмәйем, — тип аҡланды Кесе инәйем. Байтаҡ өндәшмәй торғас, ул тағы теҙеп алып китте. — Мәрәһим менән Аҡйондоҙ, күрәһең, электән үк бер-берейһен белгәндәр. Анау йыл беҙҙең ауылдыҡылар Дим үренә барып ураҡҡа ялланғайнылар бит. Шунда күрешкәндәр, тиҙәр. Имеш, Аҡйондоҙҙоң, риза булып, Хәмзәгә килеүе лә шул Мәрәһим өсөн генә икән. «Мәрәһимде ғүмеремдә тағы бер күрер булһам, Хәмзәгә кейәүгә сығырға ғына түгел, туп-тура йәһәннәмгә китергә лә ризамын», — тип әйткән тиме, уйлаған тиме.

— Шул кешеләр белгән саҡлыны хоҙа белһә, донъя ниндәй төҙөк, ипле булыр ине. Хәйерһеҙгә, әҙәмдәр артығыраҡын белә, унан да артығыраҡын һөйләй.

— Мәрәһимдең йәше лә утыҙға етеп баралыр инде, — тигән булды Кесе инәйем, йәнәһе, һүҙен ослап.

— Баяғы ғишыҡ тигәнең мал һанап та йәш һорап тормай шул. Быныһын һин үҙең дә яҡшы беләһең, Вазифа.

Кесе инәйем минең атайымдан егерме йәшкә йәшерәк. Оло инәйем ана шуға ишара яһаны, буғай. Юҡ, асыуланып түгел, былай ғына, һүҙ уңайында ғына...

Бына ниндәй серҙәр асылды миңә! Ғишыҡтың нимә икәнен мин үҙем дә татып беләм. Уҙған йыл партала йәнәшә ултырған ҡыҙ менән (исемен әйтмәйем) ярты ҡышҡа тиклем янып-көйөп көн һайын хат алыштыҡ, һәр кис һайын тегегә оҙон-оҙон хаттар яҙам. Йырҙар ҙа ҡушып ебәрәм:

Бер ҡуҙғалһа, машиналар.
Бара ла бара икән.
Ғишыҡ уты бер ҡабынһа,
Яна ла яна икән.

Беҙҙекеләр ҡыуанып бөтә алмай: «Оҙаҡ уҡымай йөрөгәс, һабаҡты ҡалай танһыҡлаған Кендек.

Иллә тырыш бала булып сыҡты. Баш та күтәрмәй дәрес ҡарай», — тиҙәр. Оло инәйем, бүтәндәрҙән тамаҡ айырып, ара-тирә мине тәмле нәмәләр менән һыйлап ҡуя. «һабаҡ уҡыған кешегә тәм-том кәрәк ул. Зиһенең артыр. Башың тағы ла ныҕыраҡ эшләр», — тип битемдән һөйә.

Әммә тиҙ үк ҡара көн килеп етте.

Бер иртәлә (хаттарҙы беҙ иртә менән дәрес башланғансы алмашабыҙ), бер ҡәһәрле иртәлә, теге ҡыҙыҡай миңә хат урынына ҡағыҙға төргән ҡара күмер валсығы бирҙе. Ғишҡыбыҙ янып, көл-күмергә әйләнде тигән һүҙ ине был. Тимәк, бөтәһе лә бөттө! Ул башҡаса миңә әйләнеп тә ҡарамаҫ булды. Ниндәй г.енә ғәйептәремде тапты, ниндәй генә еремде оҡшатманы икән? Уф! Ғишыҡ тотоуҙары ҡыйын ине, ғишыҡһыҙ тороп ҡалыуҙары бигерәк тә әрнеүле, бигерәк тә ғазаплы икән. Үҙ башына төшмәгәндәр белмәйҙәр быны.

Кис ҡайтҡас, Оло инәйемдең йылы усына башымды һалып, шым ғына илап ебәрҙем.

— Ниңә илайһың, синнай?—тине ул. Мин яуап ҡайтарманым. Ярай әле башымды ҡуйып иларға **унын** йомшаҡ ҡулдары бар. Яңағымдан бер һыйпаны ла бөтә ғазаптарымды алып ташланы. Бынан **күп** замандар һуңыраҡ та һағыштарҙан бушамаҫ тынғыһыҙ был башым һыйыныр төйәккә күп тапҡырҙар мохтаж ҡаласаҡ, тик инде ул саҡ Оло инә**йем,** шул тылсымлы ҡулдары менән был донъяның ишеген үҙ артынан ябып, мәңгегә киткән буласаҡ...

Мәрәһим менән Аҡйондоҙҙоң хәлен аңлайым мин. Тик анау имеш-мимеш һис кенә лә дөрөҫкә оҡша**май.** Әсәйемдәр һөйләшкән теге кистән һуң аҙна **уҙҙы,** ай уҙҙы, ә ғашиҡтәр хаҡында урамда ләм-мим **һүҙ** юҡ. Беҙҙең Юғары ос халҡы, ғәйеп табып, кеше **сәйнәргә,** мыҫҡыл итеп көлөргә үтә һәүәҫ — һылтауы ғына табылһын. «Фәләндең бисәһе фәләндең **иренә** күҙ ҡыҫҡан икән, фәлән ҡоҙа фәлән ҡоҙаса**һын** әүрәтә яҙған икән, фәлән ағай фәлән тол бисә**нең** тәҙрәһен сиртҡән икән...» кеүек юҡ-бар хәбәрҙе катындар һөт айыртҡан ерҙә, ирҙәр ҡарауыл өйөнә **йыйылғанда,** ҡыҙ-ҡырҡын һыуға барғанда ауыҙ **тултЫрып** һөйләй. Әсғәт кеүек йор һүҙлеләр әскелтем-сөскөлтөм төртмә йыр ҙа сығара. Анау бешмә-

гән ҡоҙа тураһында киске уйында бер егет, бейергә төшкәс, былай тип таҡмаҡланы:

Ҡоҙасаның бармағы,
Бармағында балдағы.
Тал төбөнә килом, тине,
Килмәҫ булды, алданы.
Ҡоҙасаның шәле
Ергә тейер әле,
Яҙған булһа, иншалла.
Бер үбермен әле.

Олораҡ яҙыҡ ҡылған йәки яман шик аҫтында ҡалған ҡыҙ-ҡырҡын, бисә-сәсә йәшәгән йорттоң ҡапҡаһына тән эсендә дегет бурап, аттарының ҡойроҡ-ялын тунап сығыу ғәҙәте лә булған әүәлерәк. Хәҙер уныһы һиҙелмәй. Мәгәр бер тапҡыр, күҙҙән төшөп, телгә эләккән әҙәм тиҙ генә ысҡына алмай: тирмәндә тарттырып, иләктән иләйҙәр уны.

Аҡйондоҙ менән Мәрәһимгә ел-ямғыр ҡағылмай. Тимәк, Кесе инәйемә кемдер төптө буш хәбәр һөйләгән, һөйләгән дә шымған. Ярай, хәйерлеһе шулдыр. Онотайыҡ инде был хаҡта...

Ләкин улар үҙҙәре онотторманы. «Әҙәм ышанмаҫ һүҙҙе дөрөҫ булһа ла һөйләмә», — тиҙәр. Эйе, үҙең күреп, үҙең ишеткәнгә лә ҡайһы саҡ ышанып бөтмәйһең. Раҫмы икән, тип икеләнәһең. Мин дә тәүҙә күҙем күреп, ҡолағым ишеткәндәрҙең хаҡлығына шикләнеп, юғалып ҡалдым. Был шаһитлегемә сәбәпсе беҙҙең гел әллә ҡайҙа юғалып йөрөй торған ҡышлау үгеҙебеҙ булды. Кис ул тағы көтөүҙән ҡайтманы. Шуны эҙләп беҙ, өйҙәге ир-ат, көтөү йөрөгән туғайҙың төрлөбөҙ төрлө яғына таралыштыҡ. Минең әлһерәп йөрөүем бушҡа ғына булды. Үгеҙ табылманы. Әллә ҡасан эңер төшөп, төн тамам ҡуйырып бөткәндә, мин, арып-талып, Ҡыҙҙар тауына килеп мендем. Көндөҙ Мортаза ағайымдың кеҫәһенән сәлдергән бер семтем тәмәкене төрөп тартмаҡсы булып, тау битләүендәге яңғыҙ имән төбөнә ултырҙым. Ҡағыҙын табып, тәмәкеһен ураным, ә шырпыһын таба алманым. Күрәһең, ҡайҙалыр төшөрөп ҡалдырғанмын. Ризыҡҡа яҙманы был харамдан килгән мал!

Инде ҡуҙғалып киттем тигәндә, күҙемә ғәләмәт ҙур сәйер нәмә салынды. Әҙәм тиһәң, әҙәм түгел,

\

януар тиһәң, януар түгел. Үҙе шөкәтһеҙ. Ул тау аҫтынан аҡрын ғына өҫкә, миңә табан, үрмәләй. Минең йәнем бармаҡ осома килеп етте. Бына-бына атылып сығып китәсәк ул. Мин һаҡ ҡына имән артына һыйынып боҫам. Йөрәгем дөп-дөп тибеүҙән имән һелкенә. Теге ғифритте инде асығыраҡ шәйләйем. Уның аяҡтары ла, башы ла икешәр, ҡулдары әллә дүрт, әллә алты. Һанап бөтөрөрлөк түгел. Ағас башына үрмәләһәм инде? Улай ҙа ҡотолоп булмаҫ шул. Ни күрһәм дә ошонда күрермен, ҡымшанырға ярамай. Ҡышлау үгеҙҙе эҙләйем тип, әжәлемде эҙләп йөрөгәнмен икән. Тегеһе табылманы, быныһы үҙе мине килеп тапты. Иртән тороуға беҙҙең бөтә өй әсебеҙ, мине йәлләп, ҡанлы йәштәр түгәсәк. Бәлки, .мине һанға һанамаҫ булған теге ҡыҙыҡай ҙа үкенер әле. .Сытырҙатып күҙҙәремде йомдом, йомолған күҙ алдымдан беҙҙең таш зыярат ҡапҡаһы, мәсет айы, яңы ғына ҡаҙылған ҡәбер сағылып үтте. Мин уларҙы, гүйә, табутта ятҡан килеш күреп барам...

— Яратаһыңмы? — тине ғифриттең бер башы ирҙәр тауышы менән.

— Яратам... Яратам... — тип үтә яғымлы раҫланы ҡатын тауышлы баш.

— Бик, бикме? — тип ныҡышты тегеһе.

— Бик-бик-бик булмаһа, ошо бер семтем бәхет өсөн анау саҡлы ғазап йөктәре йөкмәп йөрөр инемме ни? Барыбер үкенмәйем, һинең ҡосағыңдағы мыҫҡал ғына бәхетемде алтын тауҙарға алыштырасағым юҡ. — Шул саҡ сут итеп ҡош һайрап ҡуйҙы, һаташҡан ҡош булды, ахырыһы.

— Ошо көйө һине анау аҡ йондоҙға алып менәйемме? — тине ир тауышы, — һинең йондоҙоңа...

Күк йөҙөндә байтаҡ бейектә был саҡ, ысынлап та, аҡ йондоҙ балҡып яна ине. Ул, талпына-талпына, ергә табан ынтылып ҡуя. Бына-бына күктән ысҡынып китер ҙә Ҡыҙҙар тауына килеп ҡуныр төҫлө. Мин инде тынысланa төштөм. Ғифрит тигәнем миңә зыян килтермәйәсәк. Уның ҡайғыһы миндә түгел.

— Һинең менән ерҙә лә бик рәхәт миңә. Ул йондоҙҙа нимә ҡалған беҙгә. Мин үҙ исемемде былай ҙа яратмайым, һине генә яратам — исемеңде

лә, үҙеңде лә... — Баяғы һаташҡан ҡош йоҡо аралаш сут-сут итеп был юлы, һуҙа биреп, ике тапҡыр һайрап алды.

— Күңелем ғүмер буйы һине эҙләне, һине зарығып көттө...

— Эҙләгән — тапҡан, ташҡа ҡаҙау ҡаҡҡан, — тип һамаҡланы ҡатын. — Сабыр итеп көткән-— һөйгән йәрен үпкән... — Баяғы ҡош тағы сут итеп алды.

— һин һис кенә лә бойоҡмайһың, Аҡйондоҙ, ә мин гел һағыштамын, — тип зарланды ир.

— Әйттемсе, икәүебеҙ бергә саҡта, был донъяла минең өсөн һағыш та, хәсрәт тә, хәүеф тә юҡ. Уларҙың урыны башҡа ерҙә.

Ике ҡулын алға һоноп, бәһлеүән Мәрәһим, Аҡйондоҙҙо, бәпес тотҡан шикелле күтәреп, минең эргәмдән генә уҙып китте. Тау башына менеп китте. Мине күрмәнеләр. Ғашиҡтәрҙең күҙе ерҙәге бөжәктә түгел, һауалағы бөркөттә икәнен мин шул төн тәүтапҡыр аңланым, һөйөшкән кешеләрҙең ни өсөн бейеккә, тау түбәләренә ынтылыуын шул төн мин беренсе тапҡыр һиҙендем, ә ни өсөн икәнен бына һүҙ менән әйтеп аңлатып булмай.

Күргәнемдән, әлбиттә, башта ҡаушап төштөм, унан шаҡ ҡаттым, ә тегеләрҙең аяҡ тауышы алыҫлашҡан һайын, тирә-яғым, нисектер, бушап, моңһоуланып китте, донъя йәме кәмегәндәй булып ҡалды. Хатта күңелемде үҙҙәренә ылыҡтырып китте улар. Матур тауыштары, һөйләгән һүҙҙәре оҡшаны миңә. Тик Мәрәһимдең Аҡйондоҙҙо бәпес урынына күтәреп йөрөтөүе генә оҡшаманы. Нығытып оҡшаманы. Тапҡан һәнәр! Атлап ҡына йөрөргә аяғы юҡтыр шул тегеһенең дә?!

...Йәнә ҡырҡ өс йылдан һуң, Чехия тауҙарында ҡояш батып килгәндә, шундай уҡ күренешкә тап булдым. Мәрәһим һынлы бер йәш егет, һөйгәнен ике ҡул осонда тотоп, юлһыҙ-ниһеҙ текә үргә югереп менеп китте. Үҙе көлә. Миңә оҡшаны был, бик оҡшаны. «Афарин, егет, афарин!» — тип ҡалдым әсемдән. Был саҡ беҙ Рауза менән етәкләшеп, бормалы һөҙәк һуҡмаҡтан һаҡ ҡына түбән төшөп килә инек. «Афарин, егет!» — тип ҡабатланым мин, боролоп ҡарап. Үкенескә ҡаршы, берәүҙе лә шулай күтәреп

тауға менә- алманым мин. Хәҙер бик менерҙәй булам да — хәлдән килмәҫ. Хәлдән килһә, былай килешмәҫ, әҙәм көлөр. Менер тауыңа үҙ ваҡытында менеп ҡалырға кәрәк икән... Ҡырҡ өс йылға артҡа әйләнеп ҡарайым да йәнә ҡабатлайым: «Афарин, Мәрәһим, афарин!» — тим...

Мәрәһим менән Аҡйондоҙ үтеп киткәс, төндөң ҡараңғы шомо таралғандай булды. Улаф йөрөгән ерҙә шик-шөбһәнең, ҡурҡыныстың булыуы мөмкин түгел кеүек ине. Мин, тамам һушыма килеп, ҡайтыр яҡҡа ыңғайланым. Бер аҙ барғас, ни эшләптер, фуражкамды һалдым. Нимәлер шылтырап- ергә төштө. Шырпы ҡабы ине был. Күрәһең, мин уны ғәҙәтемсә башымдағы фуражка эсенә йәшергәнмен дә онотканмын.

...Әле уйлайым: әгәр шул шырпы ҡабы мин эҙләгәндә табылған булһа, һаҡһыҙ һыҙылған бер шырпы ике кешенең ниндәй дәү шатлығын өркөтөр, ниндәй ҙур серҙе фашлап, хур итер ине.

Ҡалай итеп кенә әсемә һыйҙырайым был серемде? Бер көн сыҙаным, ике көн сыҙаным. Өсөнсө көн сыҙар әмәл ҡалманы. Мәсет манараһына мен дә аҙан урынына ҡысҡыр хыт.

Аулаҡ мәлде тура килтереп, Оло инәйемде аласыҡҡа саҡырып сығарҙым.

— Нимә, ҡаймаҡ ашағың килдеме ни, синнай? — тине ул.

— Юҡ, Оло инәйем. Минең һиңә әйтә торған серем бар.

— Улай ҡаймаҡтан да баш тартырлыҡ булғас, хәтәр серҙер, күрәһең.

— Хәтәр шул, Оло инәйем. Аҡйондоҙ менән Мәрәһим хаҡындағы теге һүҙ дөрөҫ булып сыҡты бит.

— Ниндәй һүҙ, кем һүҙе?

— Ниңә, анау кисте Кесе инәйем... — Минең телем, тешемә тейеп, абынып ҡалды. Шымсылығым саҡ-саҡ ҡына асылманы. — Кеше һүҙе инде, халыҡ һүҙе... — тип мығырҙаным.

— Ҡуй, бушты һөйләмә.

— Буш түгел шул! Анау төн үгеҙ эҙләп ғәйеп булғанымда, уларҙың икеһен бергә Ҡыҙҙар тауында **күрҙем.** ***1**

— Тфү, тфү, балам, күзеңә күренгәндер. Ҡара төндә бәндә күҙенә әллә нәмәләр аймылышып күренә ул. Төн бик ҡараңғы ине шул.

— Мин уларҙың һүҙҙәрен дә ишеттем, Оло инәйем. Валлаһи! Икмәктер, ҡояштыр! Мин алдаҡсымы ни?

— Алдаҡсы түгел. Хата күргәнһең, яҙа күргәнһең. Хаталаныу ул алдашыуға инмәй.

— Күрҙем дә, ишеттем дә.

— Әҙәмдең ҡайһы саҡ шулай күҙе тейешһеҙҙе күрер, ҡолағы тейешһеҙҙе ишетер була. Ҡуй, балам, юҡ менән башыңды бутама.

Мин бөтәһен дә теҙеп һөйләп бирмәксе инем дә, Оло инәйем ышанырҙан булмағас, һөйләмәнем.

— Әҙәм ышанмаҫ һүҙҙе һөйләмә бынан һуң, — тине ул ахырҙа. — Ғәйбәтсе яманаты күтәреп мәсхәрәгә ҡалырһың.

Мәсхәрәгә ҡалыуҙан беҙ бөтә өй әсебеҙ менән ҡурҡабыҙ. «Менгән атың йығылып үлһә үлһен, әйткән һүҙең нахаҡҡа сығып үлмәһен», — ти атайым. Ысынлап та, әллә бөтәһе лә күҙемә генә күрендеме икән? Оло инәйем, шулай ғына булғандыр, ти бит. Ә ҡолағыма өҙләкһеҙ сыңлап торған «Яратаһыңмы?», «Яратам»... тигән ауаздарҙы нисек баҫырға һуң миңә. Минең ҡолағымда тынһа ла, ул ауаздар Ҡыҙҙар тауында барыбер ҡаласаҡ бит.

...Оло инәйемдең сәйер ҡылығын — минең дөрөҫ хәбәремде ныҡышып-ныҡышып нахаҡҡа сығарырға тырышыуын мин бары әле килеп төшөндөм. Боронғо гректәрҙә ғашиҡтәрҙе яҡлаусы, уларҙы хәүеф-хәтәрҙән ҡурсалаусы Афродита исемле илаһиә булған. Минең Оло инәйем, әлбиттә, ул илаһиә тураһында ишетмәгән дә, белмәгән дә... Әммә үҙе лә һиҙмәҫтән, ул Аҡйондоҙ менән Мәрәһимдең мөхәббәтен һаҡлаусы шул алла вазифаһын үтәгән. О, Сесә урамының мәрхәмәтле Афродитаһы!

* * *

Теге ҡышлау үгеҙе табылды. Шул шатлыҡтан беҙ быйыл арыш урағына өмә яһарға ниәтләнек. Мейес башында ике мискә балыбыҙ үкереп әсеп

ултыра, һуғымға әлеге ҡот бирмәç берәҙәк үгеҙҙе тәғәйенләнек. Төшкөлөктө ашатыр өсөн оло-оло өс тәпән баллы ҡатыҡ бешмәксе булдыҡ. Күп итеп икмәк бешерҙек, йыуаса һалдыҡ.

Ураҡ өмәһе — үҙе бер байрам ул. Көн буйы яныпбешеп эшләйҙәр ҙә кисен ҡура тултырып табынға йыйылалар. Ит һоғоналар, һурпа һемерәләр. Олораҡ ир-ат, саяраҡ бисә-сәсә, шау-шыу килеп, бал эсә. Егет-елән менән ҡыҙ-ҡырҡын табыны былай ҙа, бал эсмәй ҙә, ҡыҙмаса була. Сулаҡ Кәшфулла кеүек берәй йырлаусы моғңло итеп һуҙып та ебәрә.

Өмәләрҙә эскән әсе балдың
Шифалары етте тамырға
Өмәләрҙә күҙем төшкән йәрҙе
Форсат килде туйлап алырға.

Был йырҙың хикмәте бар уның. Өмәлә уңғанлығы менән данға сыҡҡан ҡыҙҙың баҙары тиҙ үк күтәрелеп китә. Уның йортона уң балағын сығарып һалған яусы ҡарсыҡтар йышыраҡ һуғыла башлай.

Өмәгә һайлап ҡына, көндөҙ ҡулынан эш килер, кисен табын ҡәҙерен белер кешеләрҙе генә саҡыралар. Унда эләгеү мәртәбәгә һанала. Дөрөç, ҡайһы бер әрһеҙерәк әҙәмдәр саҡырғанды ла көтөп тормай.

Дүрт-биш көн алдан уҡ беҙ киске сәй ваҡытында кемде-кемде саҡырасағыбыҙҙы самалап, барлап сыҡтыҡ. Мин хисапсы эшен башҡарҙым.

— Мәрәһимгә әйтәһегеҙҙер бит? — тине Оло инәйем.

— Бисәһе сирле икән,—тине Сәлих ағайым, ашыға-бошоға.

— Үҙе килер.

Мин ҡәләм менән һыҙа барған ҡағыҙға тағы бер таяҡ өçтәлде.

— Күрше-күләндең һәммәһенә лә ҡағылдығыҙмы? — тип белеште был юлы атайым.

— Ғәлләмдәргә генә һуғылманыҡ. Йомоҡ Хәмзә барыбер өңөнән сыҡмаç, тинек, — тип яуапланы өлкән ағайым.

- Килмәһә, саҡырыуыбыҙ ҡалһын. Күрше хаҡы бар. Хәтер ҡалыштай булмаһын...

Мин тағы ике таяҡ өҫтәп ҡуйҙым. Ошоноң менән вәссәләм.

Ҡояш сығыуға, беҙҙең ҡапҡа төбөндә мәхшәр ҡайнай ине. Яурындарына ураҡтарын һалып, бөтәһе лә килгәндәр. Мәрәһим дә, Хәмзә менән Аҡйондоҙ ҙа бар, хатта бер-ике «туң аяҡ» та күренә. Ҡыш көнө ҡунаҡ-төшөм осоронда саҡырылмай ғына өйзән-өйгә йөрөп, аяҡтары боҙланып ҡатҡан әрһеҙ бәндәне «туң аяҡ» тип атайҙар. Йәй көнө ундайҙарҙың аяғы туң булмаһа ла, ҡәҙерҙәре барыбер шул уҡ була.

Яҡыныраҡ ҡәрҙәш-ырыу, алдан әйтеп ҡуйылғанса, атын егеп килгән. Быйыл арыш баҫыуы алыҫ. Йәйәүләп оҙаҡ барырға кәрәк буласаҡ. Унан да былай, өмә урағына йәйәү йөрөү үҙе килешә торған эш түгел. Йәме китә.

Минең күҙем, билдәле, теге икәүҙә. Улар бер-береһенән ҡасмай ҙа, һарылып та бармай. Аҡйондоҙ ҡыҙ-ҡырҡын араһында. Улар шырҡ-шырҡ көлөшәләр. Ҡултыҡ аҫтына ҡыңғыраулы гармунын ҡыҫтырған Мәрәһим, Мортаза ағайым менән һөйләшкән булып, ике генә аҙым арыраҡ баҫып тора. Әйтерһең, улар Ҡыҙҙар тауына ла менмәгән, сут-сут үбешмәгән дә... Былар бөтөнләй икенсе кешеләр. Теге төндө мин, тимәк, бүтән ир менән бүтән ҡатынды күргәнмен булып сыға. Хәтер ҡалып китте хатта. Әммә уларға һынай биреп ҡараусы бер мин генә түгел икән. Әле теге яҡта, әле был яҡта шул икәүҙең йә быныһына, йә тегеһенә юнәлгән күҙ ҡарашы йылт-йылт итеп ҡала.

Күк алашаны егеп, ҡапҡанан атайым сыҡты.

— Йә, өмәселәр, хәйерле сәғәттә! Ҡуҙғалайыҡ,— тине. — Ултырышығыҙ арбаларға. Ҡыҙҙарҙың иң уңғандарын, иң сибәрҙәрен үҙ эргәмә алам. Арба минеке, йыр һеҙҙеке...

Ҡапыл ығы-зығы ҡупты. Ҡыҙ-ҡырҡын менән килен-киштә, сыр-сыу килеп, әле теге арбаға, әле был арбаға барып һуғылды. Береһе әхирәте, икенсеһе ҡәрҙәшең өсөнсөһө күршеһе янына эләгергә тырышты. Йә күсер һайлаған булып ҡыландылар: йәнәһе," быныһының сәсе бөҙрә түгел, тегеһенең бисәһе көнсөл, анауһының танауы ҡыйыш. Табыла инде, шаярырға тиһәң. Байтаҡ сыуалышҡас, ҡыҙҙар

ултырышып бөттө. Тейешле арбаһына, тейешле кешеләре эргәһенә егеттәр ҙә тауыш-тынһыҙ ғына һыйынып алды. Олораҡ ҡатындар менән ир-ат тегеләрҙән ҡалған арбаларҙы тултырҙы.

— Минән дә сибәре, минән дә уңғаны юҡтыр, күрәһең, ағайым, — тип атайым арбаһына әрпешлеге менән дан тотҡан ҡара шаҙра Ниса апайым менеп ултырҙы. Мин уның беҙгә нисек ҡәрҙәш икәнен дә белеп бөтөрмәйем. Ярты ауыл уның нәҫеле инде.

— Әйҙә, әйҙә, Ниса, — тип хупланы атайым,— шаҙра ла йөрәк яндыра.

— Әтеү!— Ул ваҡ ҡына аҡ тештәрен күрһәтеп йылмайып ебәрҙе. Ниса апайым йылмайҙымы, бөттө, үҙгәрә лә китә. Йөҙөнә ҡарап туймаҫһың. Ул атайыма боролдо. — Әйткәс, әйтеп үк бөтөр инде: «Аҡ ҡатындың эсе боҙ, ҡараҡайҙың эсе ҡуҙ», — тиң.

Мин, ни эшләптер, шунда уҡ Аҡйондоҙға боролоп ҡараным — аҡмы, ҡарамы ул? Юҡ. Аҡ та түгел, ҡара ла түгел икән.

Алдағы аттар ҡуҙғалып китте. Бары өс кеше генә нимәгәлер икеләнгән, аптыраған һымаҡ, өс яры һаман баҫып тора, әйтерһең, өс ҡағана: Хәмзә, Аҡйондоҙ, Мәрәһим. Бына Мәрәһим дә, йәһәт кенә боролоп, Мортаза ағайымдың арбаһына һикерҙе. Киттеләр.

— Сибәрҙәр көймәһенә беҙҙе лә алығыҙ әле! — тине Аҡйондоҙ уйынсаҡ тауыш менән. Әммә бындай уйынсаҡлыҡ уға — «бер семтем бәхет өсөн анау саҡлы ғазап йөктәре йөкмәп йөрөгән» кешегә — килешмәй ине. Мин оҡшатманым. Атайым өндәшмәй генә күк алашаны уның яғына табан борҙо. Аҡйондоҙға тәғәйенләнгән урындағы бесәнде сыбыртҡы һабы менән тетеп күпертеп ҡуйҙы. Хәмзә әллә быны күрмәне, әллә юрамал күрмәмешкә һалышты: һикерә бирҙе лә лып итеп шул урынға ултырҙы, һөмһөҙ нәмәкәй! Аҡйондоҙ арбаның икенсе яғына сыҡты. Ниса апай уға ҡулын һуҙҙы.

— Әйҙә, аҡҡошом, үҙемдең эргәмә!—тине,— ике сибәр тап киләйек әле бер. Беҙ уларға төҫ түгел, һәү, үшән! — Ул Хәмзәнең ҡабырғаһына төртөп алды.

Аҡйондоҙ иренә арҡа биреп, арбаның ситенә генә, үрәсәһенә генә ултырҙы. Күк алаша тертләп

алға ынтылды. Аҡйондоҙҙоң ап-аҡ ойоҡ менән ап-аҡ сабата кейгән аяҡтары ҡапыл артҡа сайҡалып китте. Ул, сөйләгәп, саҡ-саҡ ҡына ҡолап төшмәне. Әлдә үрәсәгә тотоноп ҡалды. Иң аҙаҡтан ғына арба артына ырғып үҙем менеп баҫтым. Алдағы аттар юрта ла башланы. Беҙ һөйләшмәй генә барабыҙ. Телгә бөткән Ниса апай ҙа, йор һүҙле атайым да шымып ҡалды. «Аласығы бикле» Хәмзәне әйтеп тораһы ла юҡ.

Ауыл осона етер-етмәҫ үк Мәрәһим гармунын тартып ебәрҙе. Мин йылт итеп Аҡйондоҙ яғына әйләндем. Күңелем һиҙеп тора: гармун моңо бер уның өсөн генә шулай һибелә. Быны Аҡйондоҙ үҙе лә һиҙәлер, моғайын. Уның яңағында гөлт итеп ҡуйы ҡыҙыллыҡ балҡыны. Балҡыны ла һүнде. Гармун ашҡынып-талпынып моң түгә, ләкин уға ҡушылып йыр башлаусы юҡ. Ни өсөн тигәндә, эшкә барғанда ауыҙ күтәреп йырлау ғәҙәтен маҡтап бөтөрмәйҙәр беҙҙең урамда. Ҡайтҡанда ана теләһәң күпме йыр-ла. Өс әтәстәр генә ул ваҡытлы-ваҡытһыҙ тауыҡ урынына ҡытҡылдашалар, әтәс урынына ҡысҡыра-лар. Беҙ саманы самалай, әҙәпте һаҡлай беләбеҙ.

Һаҡланың!.. Ана бер ҡыҙ, сәрелдеген сығарып, йыр башланы. Уға тағы ике-өс тауыш ҡушылды. Дәрттәре иртә ҡуҙғалған быларҙың! Тегендә йыр көсәйгән һайын, беҙҙең арбала һағыш арта бара төҫлө. Аҡйондоҙҙоң йөҙөн ниндәйҙер моңһоу шәүлә ҡаплай килә, ҡаплай килә. Уның ысынлап та аҡҡош муйынына тартым муйыны һығылып, башын түбән эйҙергән.

...Ул саҡта Хәмзә менән Аҡйондоҙҙоң, арҡаға арҡа ҡуйышып, ике тораташ шикелле, һүҙ ҙә ҡу-шышмай кеше арбаһына ултырып барыуы мине әллә ниндәй хәүефле уйҙарға төшөрмәгәйне. Йомоҡ Хәм-зәнең бар тәбиғәте шул булғас, нимә ҡылаһың. Ауыҙындағы һүҙен ҡыҫҡыс менән тартып алаһыңмы ни? Ярай әле алда моң, йыр бар. Беҙ шуларға эйәреп барабыҙ. Арыш баҫыуына ул ваҡыт тиҙ барып еттек. Юл әллә ни оҙон булманы. Ә бына әле хәҙер, ошо икәүҙең оҙон ғүмере тураһында уйлағанда, йәнемде ҡапыл ҡалтырау алды. Бөтә ғүмер юлын тап ошолай, кеше арбаһында аяҡ һалындырып, арҡаға арҡа биреп ултырған көйө үтмәҫме икән был икәү, тим.

Алда саҡырып торған моң булһа, тағы бер хәл ине. Әгәр ул да булмаһа, булып та, һуңынан тынып ҡалһа...

Беҙҙең арыш ерҙәребеҙ баҫыуҙың төрлө урынына таралған — тегендә бер дисәтинә, бында бер пирәйәз, тегендә бер әсминник, бында бер түтәрәм. Шуға күрә өмәселәр, икегә бүленеп, береһе — Ҡуянлы бүләк яғына, икенсеһе Бәрҫеүән буйына китте. Төшкә тиклем айырым-айырым урҙылар ҙа, төшлөктө, бергә йыйналып, Бәрҫеүән буйында ашанылар. Бәрҫеүән һыуы — ул беҙҙең ауыл биләмәләренең сиге. Аръяғында сит ерҙәр китә.

Төшкөлөккә баллы ҡатыҡ менән йыуаса булды. Беҙ түңәрәк аҡ икмәкте йыуаса тибеҙ. Өмә ашы үҙе бер тамаша ул. һәр табынға ҙур-ҙур табаҡтар ҡуйылған, тау-тау итеп йыуаса киҫелгән. Табаҡ тирәләй ултырған өмәселәр ҡашыҡтарҙы бейетә генә. Оялып, йыбанып ултырһаң, ас ҡалыуыңды көт тә тор. Унан да бигерәк «ашағанда ҡолағың һелкенһен, эшләгәндә йөрәгең елкенһен» тигән фәһемле һүҙҙе беҙҙекеләр бик күптән төшөнөп алғандар, һүлпән көйшәү — үшән эшләүҙән дә мәсхәрәлерәк нәмә. Быныһын эштән сыҡкан ялҡау ҙа белә.

Туя биргәсерәк шаярыу, көлөшөү ҙә башланды. **Йә** берәүҙең ҡулындағы ҡашығын ҡапыл табаҡка бәреп төшөрәләр, йә икенсеһенең ҡулынан, инде ҡаптым тигәндә, йыуасаһын тартып алалар. Теге асыҡ ауыҙҙарҙан бөтәһе лә гөж килеп көлә шунан. Был юлы ҡашығын семтеп кенә тотҡан Өс әтәс ҡыҙы Сажидә менән һүлпән Хәмзә мәрәкәгә юлыҡты. Ҡашығынан яҙған Сажидә турһайып тороп уҡ **китте.** Йыуасаны умырҙым тип ауыҙын асҡан Хәмзәнең хатта тештәре шаҡылдап ҡалды. Әммә быға уның иҫе китмәне. Бары танауын ғына тартып ҡуйҙы. Шунда уҡ үрелеп икенсе телемде алды, ә Аҡйондоҙҙоң баяғыса ике яңағына берсә ҡыҙыллыҡ югерҙе. Мин үҙ ихтыярымдан тыш шулай күҙәтсегә әйләндем. Аҡйондоҙ менән Мәрәһимдән күҙемде **ситкә** алһам, күңелемде айырып ала алмайым. Арбанылар бит былар мине!

Мин баллы ҡатыҡты ҙур ғына туҫтаҡка үҙемә айырым һалып алдым. Мин уны һалам менән һурыр**ға** яратам. Ҡашыҡ менәФ һоҫкан ише түгел, былай

шәрбәте тамаҡты ныҒыраҡ рәхәтләндерә. Ир етеп, донъя гиҙә башлаҒас, ҙур ҡалаларҙа һалам аша төрлө коктейлдәр һемерергә тура килгәндә, мин гел уйлай торҒан булдым: ошондай хикмәтле һәнәрҙе, моҒайын, беҙҙән күсереп алҒандарҙыр әле был тәмле тамаҡтар, тинем. Баштары еткән. Өйрәнер өсөн дә аҡыл кәрәк бит...

— Әллә ҡатыҡ үтә баллы булып сыҡты инде, Нисаның ана ирене иренгә йәбешкән, — тине атайым. — Бер ҙә тауышы сыҡмай.

— Кисен майлы ит һоҒонҒанда ҡубыр әле, аҒайым, — тип ваҡ ҡына аҡ тештәрен ялтыратты Ниса. — Итең генә мул булһын.

Бөтә халыҡ урынынан торҒанда, иң ситтәге табында бер Исхаҡ ҡына ултырып ҡалды. Ул бөтә ергә — туйҒа ла, йыназаҒа ла, эске мәжлесенә лә, өмәгә лә — саҡырҒанды көтөп тормай, үҙе килә. Ауылдың беренсе «туң аяҒы» ул. Исхаҡты ҡыумайҙар ҙа, түргә лә саҡырмайҙар. Ул үҙ урынын, үҙ дәрәжәһен белә. Уның урыны — иң түбәндә, иң ситтә. Нәҙек оҙон буйлы, уҡлау йыуанлыҒы Ғына муйынлы, бәләкәс башлы был ҡоро һөйәк әҙәмдең әкәмәт ҡушаматы бар. Уны «батша ҡаҙнаһы» тип йөрөтәләр. «Ҡаҙна» тигәне шуны аңлата: үҙе бихисап убыр, үҙенә семтем дә ит ҡунмай, йәҒни, туймай ҙа, оялмай ҙа. Кем, ҡасан таҡҡандыр уҒа был ҡушаматты, берәү ҙә белмәй. Әммә иллегә етеп барҒан был бахыр, ҡыйырһытылҒан яңҒыҙ кеше, батша төшкәндән һуң да, «батша ҡаҙнаһы» булып йәшәй бирә. Ул бисәләр мендәр тышы яһай торҒан эре сәскәле ситсанан тегелгән күлдәк кейеп йөрөй. Ни өсөн тиһәң — ул иң арзан тауар. ТаҒы алҒа уҙып әйтәйем: хәҙерге заманда Исхаҡ иң модный кейенгән ирҙәрҙән иҫәпләнер ине — тот та үҙен Бродвейгә сыҒар ҙа ебәр!

Исхаҡ табаҡты күтәреп эсте лә төбөн ялап ҡуйҙы.

— Йә, туйҙыңмы инде Исхаҡ? — тине атайым.

— Туйманым, аҒай, тулдым, — тип яуапланы теге, тире аҒып торҒан оҙон муйынын һыйпап.

— Эй, Исхаҡ! Бәхәс бар. Отһаң, билемдәге ҡайышты сисеп бирәм, — тине беҙҙең ерән мыйыҡлы Хисмәтулла исемле ҡоҙабыҙ. Ул тирә-яҡта беренсе

бәхәссе. Ҡайҙалыр сыуаш ауылында, бәхәсләшеп, атын отторған ул бер заман. «Аттың бит йығылып үлеүе лә ихтимал ине», — тип йыуатҡкан ул бисәһен. «Ярай әле отторғанһың ғына икән, иҫән ҡалған, йығылып үлһә, үтә ҡыҙғаныс булыр ине, атыбыҙ һәләк дан ине», — тип ҡыуанған бер ҡатлы ҡоҙасабыҙ.

Исхаҡ та тәүтапҡыр ғына бәхәскә инмәй. Дөрөҫөрәге, ул үҙе түгел, уның ҡорһағы алышҡа сыға. Әле лә ул тиҙ үк төшөнөп алды.

— Күпмегә? — тип һораны.

— Сүмәкәй тулы ун туҫтаҡҡа.

— Бәхәс бар! Бәхәс бар! — тип шаулашты өмәселәр. — Исхаҡ бәһлеүән алышҡа сыға. Мәхрүм булып ҡалмағыҙ!

Халыҡ тиҙ үк бәхәсселәр эргәһенә йыйылып алды.

— Ҡана, ҡайышыңды сисеп күрһәт, — тине Исхаҡ. Тегеһе шунда уҡ ҡайышын систе. Ерән ҡоҙаның киң еҙ перәшкәле һары ҡайышы мөғжизә ине. Исхаҡ уны, ҡулына алып, әйләндереп-әйләндереп ҡараны ла:

— Ас саҡ булһа, ҡайышың ун биш туҫтаҡҡа, хатта егермегә лә торорлоҡ. Хәҙер биштән арттыра алмайым, — тине.

— Туғыҙ! Туғыҙға ризалашығыҙ! — тип ҡысҡырҙы берәү.

— Алты, — тип ныҡышты Исхаҡ.

Ерән ҡоҙа тегенең ҡулынан ҡайышты тартып уҡ **алды,** ә ҡайышы — хазина ине.

— Алты туҫтаҡҡа ана мин Кендек менән дә бәхәсләшмәйем! — Ул башы менән минең яҡҡа ым**ланы.** Миңә ҡыйын бу^ып китте. Их ҡоҙа, ҡоҙа! Минән дә кәрһеҙ, минән дә кәм кеше юҡ инде һи**неңсә,** ә? Уң ҡулым йылт итеп башымдағы кәпәскә **үрелде.** Үрелде лә кире һүрелде. Кәпәс ташлап **бәхәскә** сығыр инем, кешеләрҙән генә оят. Ни тиһәң дә, **теге** «ерән мыйыҡ» **ҡоҙа** шәрәмәте бит.

—- Туҡ Исхаҡтың хәленә керәйек, ағай-эне! **һигеҙҙе** түңкәрһә, еткән, — тип гөрһөлдәне Соҡор **башы** Тимербай. Уның тауышы һикәлтәле ерҙән буш **мискә** тәгәрәткән төҫлө дыңғырҙап ишетелә. Тимер**байға** бүтәндәр **ҙә** ҡушылды:

— һигеҙе бик еткән. Шуныһын һыйҙырһа ла ярай...

— Исхаҡтың да эсе эсәкһеҙ түгелдер бит!

— һигеҙҙе лә булдыра алмай ул! Хәленән килмәй!

— Элекке Исхаҡ түгел инде, рәте бөткән хәҙер!

Быныһын күрәләтә тегене сәмләндереү өсөн әйтәләр — беленеп тора.

Исхаҡ гөп иттереп ҡорһағына ике тапҡыр һуғып алды:

— Аллаға тапшырҙыҡ. Ярылһаң, ярыл, мине хур итмә! — тине ул. — Килтерегеҙ ҡатыҡты, һигеҙгә тиклемен теүәл һанағыҙ. Ҡалғанын күҙ күрер.

Оло табаҡ ҡатыҡ, ҡоштабаҡтан саҡ ҡына ҙурыраҡ тоҫтаҡ килтерҙеләр.

— һоҫ, Тимербай ҡорҙаш! һин ғәҙел кеше, ҡулың еңел булыр, — тине Исхаҡ.

— Йә, ултырышайыҡ. Исхаҡ, һин дә ултыр, — тине атайым. Бөтә кеше баҫҡан ерендә лап итеп ергә ултырҙы, ләкин Исхаҡ аяғүрә көйө ҡалды.

— Мин баҫып эсер инем, рөхсәт булһа...— Ул ялбарып атайыма ҡараны.

— Рөхсәт юҡ!—тип ҡырт киҫте ҡайыш эйәһе. — Ашҡа хөрмәт кәрәк!

Мин һиҙеп торам: аш ҡәҙерен яҡлап әйтмәне ул быны. Баҫҡан көйө эсһәң, ҡарынға күберәк һыя. Бына нәмәнән шөрләй ерән шайтан.

— Ярай, һинеңсә булһын, — тип ризалашты Исхаҡ. Ул табаҡ алдына килеп тубыҡланды. Йәйелеп ултырманы, бары тубыҡланды ғына; уның бөтә ҡиәфәте бына-бына осоп китергә йыйынған торнаға хас ине.

Тимербай тәүге тоҫтаҡты һоҫоп бирҙе. Исхаҡ уны яй ғына һемерергә кереште. Шундай яй һемерә, хатта арыҡ боғаҙы буйлап ҡатыҡтың эскә төшкәне лә һиҙелмәй. Икенсе тоҫтаҡты ла шулай ашыҡмай эсте. Өсөнсөһөн һемергәндә, халыҡ һуҡрана башланы:

— Ошо тиклем һүлпән ҡыланғас, знамо, отор.

— Кискә саҡлы һуҙмаҡсы бит был!

— Кит, шул да булдымы бәхәс!—тине бер ҡыҙ. — Етем быҙау сепрәк имгән шәйле, биллаһи!

— Ойотаһың, Исхаҡ!

Исхаҡ быларға әйләнеп тә ҡарамаңы. Шулай ҙа дүртенсе туҫтаҡты тиҙерәк бөтөрҙө. Бишенсеһе менән алтынсыһын бер-бер артлы түңкәреп кенә ҡуйҙы. Уның бүлтәйеп сыҡҡан ҙур күмәгәйе, эйәк аҫты менән үңәсе араһында арлы-бирле югереп, кәләп һалып торҙо. Был саҡ өмәселәр ултырған ерҙән аҡрын-аҡрын Исхаҡҡа табан шыуышты. Бара торғас, уны бөтөнләй ҡамап алдылар. Етенсеһенә ҡул һонғанда, ул тәрән көрһөнөп ҡуйҙы. Маңлайынан бығаса тамсылап торған тир, юл-юл булып, сөбөрҙәп ағырға тотондо. Туҫтаҡты ауыҙына килтергәс, бүлт-бүлт итеп, уға эре тамсы тама башланы. Сәйкәле күлдәк аҫтындағы ҡорһағы, тығыҙ тышлы мендәргә оҡшдп, күбеп сыҡты. «Мендәр» саҡ ҡына ла бәүелмәй. Тынын ҡайҙан ала икән был кеше? Етенсе туҫтаҡты ул өскә бүлеп эсте. Эсте лә кикереп ебәрҙе.

— Емерелеп төштө! — тине кемдер. — Урын бушаны.

Урын шулай ҙа күп бушаманы, ахыры, һуңғы туҫтаҡты Исхаҡ бик ауыр, бик яфаланып һемерҙе. Уртлағаны тамағына китмәй ыҙаланы, һәр йотомо ғазапҡа әйләнде. Уның ауыҙына ҡарап торған кешеләр, муйындарын һуҙып, үҙҙәре тырышып-тырышып йоторға керешге. Йәнәһе, Исхаҡҡа булышалар. Тәүҙә уртламлап, аҙаҡҡа табан тамсылап кәмене ҡатыҡ. Шулай ҙа кәмене. Төбөнә төшә башлағас, Исхаҡ һемереүҙән туҡтаны ла, оҙон аҡ телен һуҙып, бесәй һымаҡ яларға кереште. Ялап бөтөргәс, буш туҫтаҡты һауаға сөйҙө лә тотоп алды. Унан тамсы ла тамманы. Ерән ҡоҙа һүҙһеҙ-ниһеҙ генә уның муйынына киң еҙ перәшкәле һары ҡайышты килтереп элде. Ҡайышы илдә бер ине. Шул мәлдә мин ғүмеремдә тәүге һәм һуңғы тапҡыр Ҡаҙна Исхаҡ йөҙөндә шаян, хәйләкәр йылмайыу күрҙем.

— Әйҙә, мыйыҡ, — тине ул, — бәхәсте дауам итәбеҙ.

— Шартыңды әйт! — тип йәнә тоҡанды беҙҙең ҡоҙа.

— Бөтә әҙәм алдында ыштан бауыңды һурып алып бирер булһаң, тағы икене түңкәрәм.

Йәнә шау-шау ҡупты:

— Давай, давай, мыйыҡ!

— Ну маладис Исхаҡ, сая ир икән!

— Һигеҙ һыйған ергә ун да һыйыр, бирешмә!
— Әйҙә, тәүәккәллә!
— Кит, оятһыҙҙар!—тип сәрелдәне бер бисә.— Тапҡандар тамаша, өмә йәме китәреп.
— Мин риза! һоç. Тимербай!—тип әтәсләнде ерән ҡоҙа. — Оятҡа ҡалһам, оялғандар ҡарамаç.

Ләкин был арала еңеүсе батыр, эсен тотҡан көйө югерә-атлай барып, ҙураттар артына боçто. Ураҡсылар араһында ла, киске мәжлестә лә ул бүтәнсә күренмәне. Әммә шул көндән алып донъя ҡуйғанға тиклем Исхаҡ биленән теге ҡайыш төшмәне; әйтерһең, уның бер ағзаһына әйләнде. Ерләгәндә лә ҡайышын быуҙырып ерләгәндәр уны: әжәле алдынан берҙән-бер васыяты итеп мәрхүм шуны әйткән, имеш. Бәлки, кешенең үҙ ғүмерендә алған иң ҙур бүләге ошо булғандыр...

Әммә бәхәстең ҡатыһы, ярыштың хәтәре алда ине.

Төштән һуң был яҡтағы ваҡ өлөштәрҙе ике төркөм бергә ҡушылып урҙы. Өмә ваҡытында, халыҡ күп булғас, ерҙең буйына түгел, арҡырыһына төшөп уралар. Ҡояш төшкөлөктән байтаҡ уҙғас, өмәселәр, бер-береһенән өс-дүрт аҙым ара ҡалдырып, һуңғы әсминниктең ыҙанына буйҙан-буйға килеп теҙелде. Ап-аҡ алъяпҡыслы ҡыҙҙар, яулыҡтарын артҡа сөйөп бәйләгән килендәр, асыҡ иҙеүле егеттәр, арҡалары тоҙланып бөткән ағайҙар, яурындарына ураҡтарын һалып, бер талай шымып ҡалды. Алда ағарып бешкән арыш ере, тымыҡ күлгә оҡшап, ойоп ултыра. Анау кешеләр бына-бына ярҙан һикерерҙәр ҙә, ҡолас йәйеп, йөҙөп китерҙәр төçлө.

Ниса апай менән Хәмзә араһында торған Аҡйондоҙ ҡапыл атылып алға сыҡты. Сыҡты ла йылт итеп артына боролдо. Башта ул балитәкле йәшел сатин күлдәгенең итәген ике яҡтан да ҡыçтырып ҡуйҙы, терһәгенә саҡлы еңдәрен һыҙғанды, сулпылары сылтырап торған ике толомон, бер ҡат муйынына урап, артҡа салып бәйләне. Шунан ғына, ҡындан ҡылыс һурып алған шикелле, һул иңбашындағы ҡыҙыл һаплы ай урағын уң ҡулы менән тартып алды. Уның күҙендә быға саҡлы беҙгә таныш булмаған сая осҡондар һикерешеп уйнаны. Башҡа саҡта гел йыл-

майырға ғына торған матур ирендәре ҡапыл тарайып, ҡатып ҡалды.

Көтәләр. Аҡйондоҙ ҙа аяҡтарын айыра биреп баҫҡан килеш әлегә ҡуҙғалмай. Бик оҙаҡ ваҡыт үткәндәй булды. Ниндәйҙер бер арала был хәл миңә төштәге һымаҡ тойолдо, ләкин быныһы өн ине. Ә һуңыраҡ әле арыш ыҙанында баҫып торған ошо сибәр еңгә йә бейек ҡая түбәһендә, йә ҡурҡыныс шарлауыҡ ҡырында, йә ҡоторонған янғын эргәһендә торған көйө күп тапҡырҙар төшөмә керәсәк. Уң ҡулындағы ҡыҙыл һаплы йылтыр ай урағын юғарыға Һоноп, ул инде ҡаянан ҡоланы, инде шарлауыҡҡа атылды, инде ялҡынға ташланды тигәндә генә, у уянып китәсәкмен. Уянғас, ҡыуанысымдың сиге булмаясаҡ. Бәлки, төштәрем бөтөнләй үк буш та булмағандыр; бәлки, Аҡйондоҙҙоң өндәре минең ошо төштәремә оҡшабыраҡ үткәндер...

Үтә сабыр, үтә әҙәпле килендең был ҡылығынан халыҡ ғәжәпкә ҡалды. Нимә булыр икән? Ҡымшанған да әҙәм юҡ. Бөтә күҙҙәр бер Аҡйондоҙға төбәлгән. Тик Хәмзә генә был тамашаға күҙҙәре менән түгел, ослайып асылған ауыҙы менән ҡарап тора.

— Беҙҙең яҡта ирҙәр ашта түгел, эштә ярыша!— тине Аҡйондоҙ. Уның тауышы, элекке кеүек **үк,** сылтырап сыңлап китте. Сәм дә, ғәм дә юҡ **кеүек** ине был тауышта. — Йөрәге еткән ир сыҡһын **минең** менән алышҡа! Ҡайһығыҙ тәүәккәлерәк? **Йәгеҙ.**

Өмәселәр, әле булһа ни тиергә лә белмәй, аптырап тора. Аҡйондоҙ, үсекләй биреп, тағы өндәште:

— Ир заты юҡмы ни был ауылда?

Мин, үҙем дә иҫ китмәҫтән, күҙҙәрем менән Мәрәһимде эҙләп таптым. Ул ыҙандың арыраҡ осонда башын баҫып тора. «һиңә әйтә бит, һиңә! Нимә **ебеп** тораһың унда?» — тип ҡысҡырғым килде.

— Давай, Хәмзә, — тине беҙҙең әлеге ерән ҡоҙа, — бисәң менән ярышып, булмаһа, үҙең күрһәт әле ирлегеңде!

— Әйҙә, Хәмзә, әйҙә! — тиештеләр бүтәндәр.

— Мыйыҡ дөрөҫ әйтә — Хәмзә ярышһын!

— Кемдең баҙары күпме икәнен күрәйек әле!

— Күрмәйерәк торһаң, да ярар, — тип мөңгөрәне

Хәмзә. — Мин үҙ бисәмде ярышһыҙ ҙа әллә ҡасан еңгәнмен. Ярышып маташырға нису.

Шау-шыу бер аҙға йәнә тынды.

— Ауылыбыҙ менән мәсхәрәгә ҡалабыҙ бит, ағай-эне!-—тип үрһәләнергә кереште беҙҙең сәмсел ҡоҙабыҙ. — Үҙем сығыр инем, урағым үтмәҫ, ҡулым — булдыҡһыҙ. Тел менән урып булмай шул. Минән башҡа бер генә сая ир ҙә юҡмы ни?

Ыҙан буйлап һалмаҡ ҡына атлап, Аҡйондоҙ ҡаршыһына Мәрәһим килеп баҫты. Уның мөһабәт кәүҙәһе янында буйға-һынға ҡайтышыраҡ сибегерәк бөтөн кеше ғәҙәттә тағы ла кесерәйеп, меҫкенләнеп ҡала. Шуға күрә кәрлә әҙәмдәр уның тирәһендә сыуалмаҫҡа тырыша. Ә был юлы бәрҙе балығы һымаҡ нескә генә Аҡйондоҙ бәһлеүән алдында бәләкәйләнеп, юғалып ҡалманы, нисектер, үҫеп, ғәйрәтләнеп киткәндәй булды. Бына бер мөғжизә!

— Мин сығам,—тине баһадир. — Өсәр аҙым үлсә, Мортаза.— Үҙе бары шунда ғына Аҡйондоҙҙоң йөҙөнә күтәрелеп ҡараны. Тегеһенең ике битендә әлеге ҡыҙыллыҡ гөлт итеп балҡыны ла тиҙ үк һүнде.

— Бирнәһе шул булыр: еңеп тә генә сыҡһаң, бер үберһең, йығылып үлһәң, шаһит үтерһең... — тип йыр һүҙҙәре менән әйтеп ҡуйҙы ҡайышын отторған ҡоҙабыҙ.

— Ир намыҫы бил ҡайышы түгел, береһен һалдырып алһалар, икенсеһен быуып булмай, — тип төрттөрөп алды тегегә кемдер.

— «Батыр үлеме бисәнән» тигәнде ишеткәнебеҙ бар.—Мәрәһим ҡапыл батырайып китте. — Ни булһа ла булыр, Аҡйондоҙҙан еңелеп хурлыҡҡа ҡалыуымды ла бер мәртәбәгә, бер бүләккә һанармын.

— Бик үк ҡиммәтле бүләк өмөт итмәйһең икән, Мәрәһим... — Аҡйондоҙҙоң матур ирендәрендә беленер-беленмәҫ кенә йылмайыу сағылып ҡалды.

— Яҙғаны шул булһа ни...—тип тегеһе лә көлөмһөрәгәндәй итте. Үҙенең зәңгәр күҙҙәре шундай бойоҡ ине. Ул иңбашындағы урағын алды. Күҙҙәре кинәт йәнләнеп китте.—Тәүәккәлләнек, Аҡйондоҙ! Һин янһаң, мин һүнмәм...

Ниндәй матур һүҙҙәр әйтеп һалды Мәрәһим!

Мин уларҙың айышына яҡшы төшөнәм. Бүтәндәрҙең, әлбиттә, быға зиһене етмәй.

Өмәселәр, бер-береһен бүлдереп, шарт ҡуйырға тотондолар:

— Көлтәләрен үҙҙәре бәйләй барамы?—тип һораны Ниса апай.

— Үҙҙәре, үҙҙәре!

— Ура барһындар, бәйләй барһындар!

— Юҡ, юк! Башта урып сыҡһындар, аҙаҡтан бәйләһендәр!

— Әй, йәмәғәт! Үҙҙәренә ҡалай йәтеш, шулай итһендәр!

— Эйе, үҙҙәре теләгәнсә ҡылһындар, бәхәс барыбер һуңғы көлтәгәсә барасаҡ бит!

Был' арала Мортаза ағайым әсмипниктең арҡырыһына, башта бирге ыҙандан өсәр аҙым үлсәп, арыш һабаҡтарын өс урында төйнәп, ике алым билдәләне; шунан, ҡаршы ыҙанға сығып, ошондай уҡ билдәләр яһаны. Бүтәндәр дилбегәгә дилбегә, арҡанға арҡан ялғап, һәр береһе әсминниктең арҡырыһына етерлек өс оҙон бау әҙерләне. Шул бауҙарҙы, ҡара-ҡаршы әлеге билдәләргә тура килтереп, бер ыҙандан икенсеһенә тарттылар. Тип-тигеҙ ике бүлем булды — ғәҙелдең дә ғәҙеле килеп сыҡты.

Хәҙер башланасаҡ. Мин Аҡйондоҙ өсөн хафаланмайым. Уның беренсе ураҡсы икәне илгә мәғлүм. Мәрәһим өсөн борсолам бына. Дөрөҫ, ул да эшкә уңған ир, булдыҡлы, маһир кеше. Ул ситән үрһә, ҡыҙҙар бәйләгән селтәр шикелле, ҡупшы килеп сыға. Кәбән һалһа, сиркәү көмбәҙе шикелле, килбәтле була. Ул яһап буяған тәҙрә ҡапҡастары әллә ҡайҙан йылмайып тора. Хатта урмандан утын алып ҡайтҡанда ла йөгөн нисек етте улай өймәй, уны ыҫпай итеп, кәртинкә кеүек итеп тейәй. Гармунды ҡалайыраҡ уйнауын әйтеп тә тормайым инде, уныһын бөтә тирә-яҡ үҙе ишетеп тора, ә бына ураҡка нисегерәк икән — дөмбөрө батамы икән? Аҡйондоҙ еңелһә, тағы бер хәл, ул бисә кеше. Мәрәһим еңелһә, бөтә ауылға мәсхәрә. Ай-Һай, хәйерлегә булһын. Баҡһаң, әсемдә ултырған ҡотҡосо — бәләкәс кенә шайтан балаһы Аҡйондоҙҙоң еңеүен дә теләп ҡуя. Ниңә, бисә кеше еңелергә генә тигәнме ни?

— Йә, башлағыҙ! .Еңелгән иламаһын. — Әлегә

тиклем бәхәскә ҡатнашмай торған атайым ярышсыларға шулай тип фатихаһын бирҙе.

Аҡйондоҙ менән Мәрәһим урталағы бауҙың икеһе ике яғына килеп баҫты. Был икәү бер-береһен ошо һары дарьяға батырырмы әллә, киреһенсә, ҡотҡарып алып сығырмы? Икеһе лә йәл миңә, сөнки улар минең кешеләрем. Мин уларҙың серен һаҡлайым. Хәҙер инде был серҙе бүтән кешегә сискем дә килмәй. Ул минеке генә, юҡ, Оло инәйем менән икебеҙҙеке генә... Ә ниңә һуң улар йәнәшә баҫҡандар? Һәр ураҡсы үҙ өлөшөнөң уң мөйөшөндә булырға тейеш бит. Уңдан һулға ураларсы. Мәрәкә икән был Мәрәһим — тиҫкәре яҡта тора, уңды һулдан айырмай. Көлкөгә ҡала бит инде! Уның хатаһын төҙәткем килә минең, тик баҙнат ҡына итә алмайым.

— Башлап ҡул һал, Аҡйондоҙ, — тине Мәрәһим.

Аҡйондоҙҙоң ҡыҙыл һаплы йылтыр урағы беренсе ҡабымын ҡырт иттереп тешләп өҙҙө. Икенсеһен, өсөнсөһөн дә семетте. Шунан китте был, эй китте! Уң ҡулындағы урағы йылт-йылт итеп кенә ҡала, һул ҡулындағы усмаһы ураҡ көйөнә, ниёктер, әйләнә-әйләнә бейеп бара. Усмаһы тулғас, урағы менән башаҡ янынан тота биреп, уны артҡа өйләндереп һаЛа. һала ла яңынан башлай. Кәкере башкиҫәр тағы уйнарға, һәр һикереүҙә тығыҙая барған усма тағы бейергә керешә. Әле генә алымының уң яғында булған ураҡсы ә тигәнсе һул яғына килеп сыға. Артҡа урап ҡуйған толомондағы сулпылары ғына ара-тирә сылтырап ҡуя. Йөҙөн күреп булмай. Башын күтәрмәй. Ул торған һайын ергә йәбешә бара, йәбешә бара төҫлө. Инде арыш һабаҡтарын ул үҙе усламай, тегеләр үҙҙәре, уҡмашып, уның усына килеп инә, тик усыңды бер асып, бер ябып ҡына өлгөр. Ә йылтыр ураҡ бөтөнләй ярһыны, бөтөнләй шашты. Аҙаҡтар тыйып туҡтатып булһа ярар ине... Ураҡ урыу түгел был, торғаны менән бер тамаша — бәйге! Күҙҙе айырып алып булмай, ә шулай ҙа айырырға кәрәк. Сөнки йәнәшәлә икенсеһе бар.

Яны ғына килеп төшөндөм: Мәрәһим һулаҡай икән. Ул, бәләкәйерәк йәйә саҡлы урағы менән усмаларҙы умыра-умыра, тиҫкәре яҡҡа урып китте.

Унының көрәк саҡлы усына бер юлы, һантыйҙыҡы, ярты кәлтә һыялыр. Быныһы һалмаҡ һалдыра, ләкин бер һелтәүҙә әллә ни саҡлы ялмап ала. Ай-Һай, алпамышамы ни?!

Ике аралағы сиктә улар һирәк тап килешәләр. Тап килешһәләр ҙә, шунда уҡ икеһе ике яҡҡа айырылып китә. Эйе, бер-береһенә күтәрелеп тә ҡарай алмайынса, ҡауышалар ҙа айырылышалар, ҡауышалар ҙа айырылышалар. Күҙгә-күҙ килешмәү, бәлки, яҡшылыр ҙа әле. Ана, Мәрәһимдең аҡ күлдәге арҡаһына йәбеште. Тәүҙә япраҡ саҡлы ғына күренгән дымлы тап, йәйелә-йәйелә барып, биленә етте. Аҡйондоҙҙоң арҡаһында әлегә дым әҫәре күренмәй. Быныһы һәйбәт. Булмаһын да. Шундай һылыу бисәгә ҡара тиргә батыу һис тә килешмәҫ ине. Бәйгелә аҡ күбеккә батып килгән байталды ла йәлләйем мин.

Алымдарҙың яртыһына еткәнсе, улар типә-тиң килделәр. Аръяғында хәлдәр үҙгәреп китте: башта Аҡйондоҙ Мәрәһимде бер. аҙым, һуңға табан ике аҙым самаһы артта ҡалдырҙы.

Ярышты бығаса тауыш-тынһыҙ ғына күҙәткән кешеләр, һәр кем үҙенсә, йә ҡыуана, йә борсола башланы. Берәүҙәр Аҡйондоҙҙо дәртләндерҙе: «һай, килене лә килене! Килен түгел, хазина!», «Бүреһе олоған икән был йомоҡ Хәмзәнең...», «Ҡәҙерен бел, бурһыҡ!» «Бурһыҡ» тип Хәмзәгә яңы ҡушамат та сәпәп ҡуйҙы берәү.

Икенселәр Мәрәһимде әйҙәне: «Эй, гармунсы, йышыраҡ баҫ урағың телдәренә!», «Еңелһәң, ғәрлегенән ят та үл инде», «Ашыҡмағыҙ әле, айыу сәмләнһә, ҡоралайҙы баҫтырар, ти!..», «Ҡоралайҙың ҡойроҡ ҡыҫҡа, тотторорға самаһы юҡ!» Ҡайһылыр оятһыҙы әҙәпкә һыймаҫыраҡ һүҙҙәр ҙә ысҡындырҙы. Кемдәрҙер хахылдап көлөп ебәрҙе. Ниса апайым сыҙаманы, ике ҡулын бөйөрөнә таянып, теге йырыҡ ауыҙҙар алдына килеп баҫты.

- Тыйнаҡһыҙҙар, иҫәүәндәр, хәсистәр! Бынау хозур тамашаны, мөнәжәт тыңлаған төҫлө, тын да алмай ҡарау тейешле. — Ул башы менән ураҡсыларға ымланы: — Ә һеҙ ауыҙ күтәреп кешнәйһегеҙ, карт алашалар. Күңел биреберәк ҡарағыҙ, юнһеҙҙәр. — Унының тауышы кинәт йомшарып, йөҙө яҡты-



230-сы биткә. «Людмила менән беҙ — елдә елберҙәп ултырған ике үлән ҡыяғы ғынабыҙ. Беҙҙе ҡояш та, ай ҙа, диңгеҙ ҙә күрмәй».

рып китте. — Собханалла-машалла! Тфү, тфү, күҙ теймәһен. Матурлыҡ менһн Көс ярыша бит бында! Сибәрлек менән Ғәйрәт алыша. Ошондай байрамды ғүмерҙә бер генә тапҡыр күрергә мөмкин, әгәр насип булһа... һоҡлана белергә кәрәк. Ә һеҙ, иманһыҙҙар, көсөк талаштырған ише, һөсләтәһегеҙ.

Ниса апайымдың һүҙҙәренән һуң был ярыш, бөтөнләй бүтән сифатҡа инеп, бүтән мәғәнә алған һымаҡ булды. «Матурлыҡ менән Көс ярыша бит бында!..» Ҡайһыһы еңер икән быларҙың? Нәк мөнәжәт тыңлағандағы шикелле, халыҡ шымып ҡалды.

«Ҡоралай» инде, ике ҡулы менән тылсымлы хәрәкәттәр яһай-яһай ғына, үҙ алымының осона сығып бара. Ул үҙенең сихри уйыны менән шундай мауыҡҡан, әйтерһең, бөтә донъяла ошо арыш баҫыуы ла ул ғына. Мәрәһим дә ҙур-ҙур усмаларҙы, ҡарағош ҡанат елпегән һымаҡ һелтәп, артына йышыраҡ әйләнеп һала башланы. Аҡйондоҙ һуңғы усмаһын ҡулына тотҡан көйө, орсоҡ кеүек бер бөтөрөлөп, әйләнеп ҡуйҙы. Мәрәһимдең йәнә бер сажиндәй ураһы бар ине, ләкин әле бәхәс бөтмәгән. Кем һуңғы көлтәһен алдараҡ бәйләп ташлай, шул еңә. Аҡйондоҙ инде кәлтә бәйләргә тотондо. Ни арала бауын яһай, ни арала усмаларын йыя, ни арала көлтәһен быуып ташлай. Артында тәгәрәшеп кенә торалар. Көлтәләре лә кәлтә генә түгел, тығыҙ билле һары ҡурсаҡ һынлы шундай ыҫпайҙар, көлөп торалар.

Шулай ҙа был эштә Мәрәһим тағы ла таҫыллыраҡ булып сыҡты. Байтаҡ һуңлап тотонһа ла, ярты юлды үтеүгә, ул Аҡйондоҙҙо ҡыуып етте. Дөрөҫ, уның көлтәләре бер аҙ эрерәк. Эре көлтәгә усма күберәк керә, эш ырамлыраҡ бара, ләкин барыбер ул, ҡулым ҙур, көсөм бихисап тип, саманан арттырмай. Ир әҙәбен һаҡлай. Ерҙең осона сыҡҡансы тиерлек улар бергә барҙылар. Иң ахырҙа ғына Мәрәһим бер-ике көлтәгә уҙып киткәйне лә, тегеһе шунда уҡ ҡыуып-.етте. Утыҙ-ҡырҡ пар күҙ алдында улар саҡ ҡына ла харамлашманы, бер-береһенә аҙ ғына ла буй бирмәне. (Күп ғүмерҙәр үткәс, әле килеп, бына мин нимә аңланым: Аҡйондоҙ был ярышты, моғайын, Мәрәһимде еңеп хур итеү йә үҙе еңелеп мәсхәрәгә ҡалыу өсөн башлағандыр. Күрәһең, шулай итеп, ул Мәрәһимдән һыуынырға һәм тегене үҙенән

биҙҙерергә теләгәндер. Бәлки, мин хаталанамдыр ҙа... Ҡатындар күңеле төпһөҙ дарья, төбөндә ниҙәр ятҡанын ҡайҙан беләһең?)

Бына Аҡйондоҙ һуңғы көлтәһен бәйләне лә, һелтәй биреп, уны Мәрәһим яғына ырғытты. Аҡтыҡҡы көлтәһен ҡыҫып торған ирҙең яурынына килеп тейҙе ул. Әммә теге әйләнеп тә ҡараманы. Йәһәт кенә эшен бөтөрөп, әле бәйләгән ғәләмәт йыуан көлтәһенең ялбыр башынан тотоп, ҡатын алдына килтереп баҫтырҙы. Үҙе, башын эйә биреп, шымып ҡалды. Аҡйондоҙҙоң ирендәре буйлап әлеге арбаусан йылмайыу югерҙе. Ул тәүҙә толомдарын сисеп артҡа ташланы, ҡыҫтырылған итәктәрен тартып төшөрҙө. Шунан ғына Мәрәһимдең зәңгәр күҙҙәренә туп-тура ҡарап:

— Ир икәнһең, Мәрәһим... — тине.

«Мөнәжәт тыңлау» тынлығы шартлап ярылды. Кешеләр, үҙҙәре еңеп сыҡҡан шикелле, бөтәһе бер юлы иркен тын алды. Рәхәт итеп тын алды.

— Шауҡымлы бит әй былар! Енле! — тип һоҡланды беҙҙең ерән мыйыҡлы ҡоҙабыҙ.

— Бына, исмаһам, былар бер-береһенә торорлоҡ— пар килгәндәр! — тип мөһөр һуҡты Ниса апай.

Ике ураҡсы араһына атайым килеп баҫты. Ниндәйҙер бик кәрәкле һүҙ әйтергә уйлай, ахыры. Төбөнән үк һаҡалын услап тотто. Иң аҡыллы һүҙен шулай һаҡалынан һығып сығара ул.

— Һеҙ икегеҙ ҙә еңдегеҙ, — тине ул. — Матур итеп еңдегеҙ. Бындай еңеүселәргә затлы бүләктәр тейеш тә бит, затлы малдарым юҡ. Һеҙ йәшһегеҙ, уңғанһығыҙ, матурһығыҙ, һәр ҡайһығыҙ — үҙ-үҙенә бүләк... Минең өмәмде ололанығыҙ, күтәрҙегеҙ, йәмләнегеҙ, һағынып һөйләрлек тамаша яһанығыҙ. Рәхмәт һиңә, килен! Мәрәһим, һиңә рәхмәт!..

Ҡалай ирмәк һөйләп ташланы атайым. Нимә был — рәхмәтме, хуплаумы, һоҡланыуымы? Ә миңә ҡалһа, атайымдың һүҙҙәре фатиха һымағыраҡ булып ишетелде. Булмаҫ та! Ниндәй ғәҙәт ул миндә — кеше күрмәгәнде күрәм, кеше ишетмәгәнде ишетәм? Әллә бер хыялыйға әйләнеп барам инде?

Бынан һуң өмәселәр яңынан ерҙең буйынан-буйына ыҙанға теҙелде. Күҙ асып йомғансы бер әс-

минник арышты ҡырып та ташланылар. Шуның менән вәссәләм — беҙҙең арыш урағы бөттө. «Бәләкәс кенә бөкөрө — бөтә ҡырҙы бөтөрҙө» тигән йомаҡтың яуабы килеп тә сыҡты бына...

Ҡураның төрлө еренә balaçтар йәйеп әҙерләгән киске табында Мәрәһим менән Аҡйондоҙ ҡара-ҡаршы тура килде. Мин лапаç башынан бөтәһен дә күреп ултырам. Мәрәһим ашаманы ла, эсмәне лә, баштан ахырға тиклем бары гармун ғына уйнаны. Эй уйнаны ла һуң! Бер саҡта ла был тиклем үк ярһығаны юҡ ине уның. Минең күкрәгемде берсә күҙгә күренмәç ниндәйҙер йылы нурҙар бәрелеп рәхәтләндерә, берсә утлы уҡтар өтөп тишкеләй; йөрәгем берсә ҡыуанып талпына, берсә, әрнеүенә сыҙай алмай, күкрәк ауыҙын дөмбәçләргә тотона. Ҡара моңдарҙан тыным ҡыçыла. Бына бөттөм, быуылып үлдем тигәндә, йәнә аҡ моңдар килеп, мине әжәлемдән ҡотҡара. Мин яңынан һауаларға ашам.

Табындағы лампа быçҡып ҡына янғанға күрә, мин гармунсының йөҙөн шейләй алмайым. Аҡйондоҙ миңә бөтөнләй арты менән ултырған. Шулай ҙа мин уларҙың бер-береһенә йә өмөтлө, йә үтә моңһоу ҡараш ташлауҙарын һиҙәм. (Бына тағы — ни ғәләмәт— күҙем күрмәгәнде үҙем күреп ултырам!) Был тиклем ярһыу, был тиклем һағышлы моңдарға нисек түҙә икән Аҡйондоҙ, нисек дөрләп янып китмәй икән? Гармунсыға ара-тирә йырсылар ҡушылған була, ләкин улар бөгөн көйҙө генә боҙалар, һандуғасҡа әтәс эйәргән төçлө килеп сыға.

Бер арала Мәрәһим беҙҙең яҡта бөтөнләй ишетелмәгән матур оҙон көй тартып ебәрҙе, уйнап сыҡты ла тағы башланы. Бөтә табынды хайран ҡалдырып, Аҡйондоҙҙоң йомшаҡ моңло тауышы яңғыраны. Хайран ҡалыуыбыҙ шунан: йылдан ашыу ваҡыт үтеп, уның йырлауын тәүтапҡыр ишетәбеҙ. Беҙҙә халыҡ йырға әүәç. Һүҙ һөйләргә тартынғаны ла йырларға тартынмай. Моңо бармы, юҡмы — мөңгөрәй бирә.

Ниндәй матур, талғын йырлай Аҡйондоҙ. Бүтән табындарҙа ла шау-шыу тиҙ үк баçылды. Быға тиклем, күршеһен дә тыңламай, тик үҙ һүҙен генә һөйләп ултырған ҡыҙмаса ирҙәр ҙә шымып ҡалды.

Аҡйондоҙҙоң тауышы, төнгө ауыл өҫтөнән аҡрын ғына ағылып, әллә ҡайҙа алыҫтарға юл алды. Бәлки, сит ерҙәрҙә аҙашып ҡалған йыр үҙенең тыуған төйәгенә, Дим үренә, ҡарай киткәндер? Китһен. Бөтә донъяла шылт иткән өн уға ҡамасауламай, уны тыймай. Юҡ, китеп олаҡманы, кире урап ҡайтты. Миңә бынан, юғарынан, бөтәһе лә күренеп тора.

Айҡай ҙа ғына сайҡай керҙәр йыуа.
Талмай микән уның, беләккәйҙәре
сайҡағанда,
Күршелә генә тороп, күрә йөрөп,
Янмай микән уның йөрәккәйҙәре
кис ятҡанда, —

тип йырланы беҙҙең сибәр еңгәбеҙ. Унан һуң, башын түбән эйеп, байтаҡ заман ҡымшанмай ҙа ултырҙы. Ошо йыр — Аҡйондоҙҙоң беҙгә мәғлүм ғүмерендәге тәүге һәм һуңғы йыры булды. Уның моңло тауышын башҡаса мин дә, бүтәндәр ҙә ишетмәнек. Ҡыуаныстарын да, хәсрәттәрен дә йырһыҙ уҙғарҙы ул.

Бынан ары табындың ғәйрәте ҡайтты. Бүтәнсә йыр көйгә килмәне, юлынан яҙҙы. Халыҡ таралыша башланы. Иҫергәнерәктәр, һәр кем үҙенсә кәмит күрһәтеп, бер аҙ ултырҙы ла, улар ҙа ҡайтып китте. Байрам һүнде...

Иртәгеһен таң менән Мәрәһим башын алып сығып китте. Ҡуйынына бер түтәрәм икмәк тыҡҡан, ҡултыҡ аҫтына гармунын ҡыҫтырған да шулай ауылдан сығып киткән. «Мине тиҙ арала көтмә, мин оҙаҡ кәсепкә юл тоттом», — тигән ул ҡатынына. Күҙҙәрен, ҡыштарын ситкә кәсепкә йыш йөрөгән Мәрәһимдең ҡатыны быға артыҡ аптырамаған да. «Ярай, иҫән йөрө, ҡалған бар игенде үҙем йыйыштырып ҡу йырмын. Тик шулай ҙа самаһыҙ оҙаҡлама, буйымда бар...» — тигән. Был тиклемен ситән аша теге Кара Йомағол бисәһе ишетеп торған. Мәрәһим урам ҡапҡаһынан түгел, ырҙын артынан сығып киткән. Шунан, Ғәлләм ҡарттар ҡойроғона килеп, бик оҙаҡ баҫып торған. Торған, торған да, ҡапыл боролоп, туғай яғына югергән. Имеш, башҡаса ауылға әйләнеп тә ҡарамаған. Быларын кем күҙәтеп торғандыр, уныһы беҙгә ҡараңғы.

Аҙна үтте, ай үтте. Турғай менән ала ҡарғанан

башҡа ҡош ҡалманы ауылда, юнлерәктәре йылы яҡҡа ынғайланы. Әбейҙәр сыуағын йәмләп, һауала үрмәксе ауының алтын ептәре оса. Ә Мәрәһимдән хат та, хәбәр ҙә юҡ һаман. Халыҡ шомлана башланы. Шулай ҙа ҡаҙ өмәләре осоронда ҡош телендәй генә хат килеп төшкән, буғай. Унда ла иҫән-һаулығын ғына һөйләгән дә йөклө ҡалған бисәһенә үтенесен әйткән: «Ул тыуһа, исемен үҙең тап, ҡыҙ тыуһа Аҡйондоҙ тип ҡуш», — тигән. Ҡатын иренең һүҙенән сыҡмаған. Ыжғырып торған ғинуар числоһында донъя күргән ҡыҙ балаға атаһы теләгән исемде бирҙе — Аҡйондоҙ тип ҡушты. Мин беләһенән икенсе бала үҙ исеме менән донъяға килде. Тәүгеһе — Ҡара Йомағолдоң игеҙ һыңары Хәбибулла ине. Бәләкәс Аҡйондоҙҙо, әлбиттә, минең Оло инәйем ҡабул итте. Әммә мин инде хәҙер ундай эштәргә ҡатнашмайым.

Өлкән Аҡйондоҙҙоң һыуға барғанын да, мал эсереп йөрөгәнен дә, ҡурала утын киҫкәнен дә күреп торабыҙ. Ара-тирә ул, йомош табып, минең Бикә еңгәм эргәһенә лә инеп сыға. Ул әүәлгесә үк' — үҙе баҫалҡы, үҙе алсаҡ, үҙе итәғәтле. Тик анау йәнде елкетә торған сихри йылмайыуы ғына әллә ҡайҙа китеп олаҡты. Иң-иң серҙәше булған бер ҡатынға бик-бик ҡаты сер итеп кенә Аҡйондоҙ былай тигән, имеш: «Бөтәбеҙҙе лә ғазаптан ҡотҡарайым тип киткәндер ҙә бит... Ул тигәнсә килеп сыҡманы. Уғата әрнеүҙәргә төштөм, уғата һағыштарға һабыштым, эс-бауырҙарыма ҡара ҡандар һауып, яна-яна ҡара күмерҙәргә ҡалды. Күкрәк әсемдә йөрәк түгел, көйрәп торған ҡуҙ йөрөтәм. Тағы күпмегә сыҙармын, белмәйем... Ә сыҙарға кәрәк. Эстән үлһәң дә, тыштан йәшәргә кәрәк...» Бәлки, ул был һүҙҙәрҙе әйтмәгәндер ҙә. Уның өсөн кешеләр үҙҙәре һөйләйҙәрҙер, ихтимал. Әммә ғәйеп итеп түгел... Йәнә Аҡйондоҙ былай ҙа тигән икән: «Бер килеп, ҡурҡаҡлыҡта ғәйепләп, үҙен ҡәһәрләйем дә шунда уҡ ҡәһәрҙәремде кире ҡайтарып алам. Ҡарғыштарым башына төшмәһен, тип ҡоттарым оса. Һаҡла үҙен, һаҡлай ғына күр, тип хоҙайға ялбарам...» Бына ниндәй серҙәр бәреп сыҡҡан һағышлы еңгәнең эсенән. Серҙең ҡанаты етеҙ. Бер ысҡынһа, илде тиҙ урап сыға ул. Бер ҡауырһыны беҙгә лә ҡағылып үтте. Әммә

Аҡйондоҙ исемен ҡыҫтырып, һис кем ғәйбәт тә, гибрәт тә һөйләмәне. Әүәлгесә, хатта әүәлгенән дә былай һәр кем уны ах итеп торор булды.

Бер көндө Аҡйондоҙ, беҙгә инеп, Бикә еңгәм менән шаршау эсендә байтаҡ һөйләшеп ултырҙы. Был юлы ул миңә үтә бойоҡ күренде. Киткәндә, Бикә еңгәм дә уға эйәреп сыҡты. Өйҙә беҙ Оло инәйем менән икәү генә ҡалдыҡ. Тегеләр киткәс, Оло инәйем, эс-бауырына ут тоҡанғандай, тәрән көрһөнөп, уфылдап ҡуйҙы.

— Ниңә уфылдайһың, Оло инәйем? — тинем мин.

Ул тәҙрә аша ҡайҙалыр алыҫҡа ҡарап, байтаҡ заман өндәшмәй ултырҙы. Шунан боролоп минең күҙҙәремә туп-тура ҡараны ла һөйләп китте.

— Хәҙер инде һин ун дүрт менән бараһың. Егет ҡорона инеп киләһең. Уҡыуың да ҙур. Мин һөйләгәнде аңларһың, шәт. Тыңла... Әҙәм балалары әсәнән яртышар ғына булып тыуа. Аяҡ-ҡулдары бөтөн, башы-күҙе төҙөк көйө донъяға ҡабул итәм мин кешене, ә үҙемдең эҫтәрем өҙөлә: «И, бахырҡайым,— тим, — үҙ яртыңды табырһыңмы икән? Тапһаң ғына ярар ине», — тим. Табышмаһалар, күктәге анау бихисап йондоҙҙар кеүек йымылдашып, ғүмер буйы бер-береһен эҙләп йөрөй бисара бәндәләр. Уларҙы ҡушырға, күрәһең, хоҙайҙың да ҡөҙрәтенән килмәйҙер. Ҡөҙрәтенән килһә, йыһан буйлап аҙашып йөрөгәндәр шул тиклем күп булмаҫ ине... Ана, Аҡйондоҙ менән Мәрәһим ике яртынан бер бөтөн булырға тейеш йән эйәләре лә бит... Үҙ ваҡытында табышмағас, зар-интизар булып, аҙашып йөрөйҙәр.

«Егет ҡорона инеп килһәм дә», Оло инәйем әйткәндәрҙең төп айышын аңлап етмәнем. Күңелемә һеңһә, аҡылыма һыйманы. Ул һүҙҙәрҙең фажиғәле мәғәнәһен төшөнөү миңә бик күп йылдар уҙғас ҡына — йөҙәрләгән кешеләрҙең яҙмышы өсөн янып, үҙ яҙмышымдың ҡарлы бурандарын, эҫе елдәрен татып, ғүмер баҡый үҙем аҡылға ултырырга тырышып та, аҡылға ултырыуҙан бар өмөттәрҙе өҙгәс кенә — насип буласаҡ. Был ҡот осҡос дөрөҫлөктө аңлау өсөн әле үҙ йәнеңдең ҡырҡ тапҡыр уртаға бүленеп, ҡырҡ тапҡыр ҡушылыуы кәрәк буласаҡ...

Әммә мин Оло инәйемдең тел төбөн бөтөнләй үк

аңламайым түгел, аңлайым. Уның үҙ яртыһы тураһында һорайым тип ауыҙ асҡас, тыйылып ҡалдым, Ярай тыйылдым, һораһам, ахмаҡ була инем. Үҙем күреп торам бит инде: атайым берәү, әсәйем икәү. Ҡайһыһы ярты, ҡайһыһы бөтөн икәнен белеп бөтөрөрлөкмө бында? Буталышып бөткән. Балалары ғына ла өс төрлө. Мортаза ағайым Оло инәйемдең кинйә улы, Сайран ауылында торған уның өлкән ҡыҙы Ғәйниямал апайым — Кесе инәйемдең әхирәте. Сәлих ағайым Кесе инәйемдең артынан килгән малайы. Ул ярты етем иҫәпләнә. Шуға күрә уны тиҙ үк ҡағып-һуғып бармайҙар. Ҡалғандарыбыҙ өсөнсө ояныҡы. Мин быларҙы, әлбиттә, күптән түгел генә белдем.

Минең ирендәрем ҡыймылдағанды Оло инәйем шунда уҡ һиҙеп алды:

— Йә, һора. Уйлағаныңды әйт.

Байтаҡтай инде сәс ебәрҙем, үҙемә ҡыҙыл тараҡ һатып алдым, ҡышын муйыныма зәңгәрле-йәшелле ебәк шарф быуам, резинкалы бийма кейәм, кистәрен клубҡа ла, тула баҫҡан ергә лә йөрөйөм. Мине һанға һанамаған теге ҡыҙ үҙе хәҙер төрлө ишаралар яһай, мин генә сер бирмәйем. Мөхәббәттән күңелем ҡайтты. Уның ҡарауы төрлө йәмәғәт эштәренә ихлас ҡатнашам. Мәктәптәге йыйылыштарҙа ҡыҙып-ҡыҙып телмәрҙәр һөйләйем, ә бына Оло инәйем эргәһенә килдемме, сабый булам да ҡуям.

— Юҡсы, — тигән булдым, — былай ғына.

— Хәйләләмә, һин бит минең яртым тураһында һорамаҡсы инең.

Минең сәс төптәрем семерҙәп китте. Әллә күрәҙә инде минең был Оло инәйем!

— Һорауыңа бына яуап бирәм. Беҙ, бәндәләр, бүтәндәрҙе еңелерәк төшөнәбеҙ, уларға тиҙерәк баһа бирәбеҙ, башҡаларҙы һағалаған бәләләрҙе үҙҙәренән алдараҡ күрәбеҙ. Кеше тормошо ҡола яланда, үҙ тормошоң ҡара урманда үтә. Мин үҙ уйҙарымдың, үҙ хәстәрҙәремдең осона бер ваҡытта ла сыға алманым. Үҙ урманымда үҙем аҙашып йөрөнөм... Эйе, атайың һинең бик һәйбәт кеше, әммә мине ул үҙ яртыһы итеп ҡабул ҡылманы. Ул гәйепле түгел быға. Мин үҙем уға тура килмәнем, уның ише булып сыҡманым. Мин ултырып ҡалған ҡыҙ инем.

Ярлы булһаҡ та, малға алданып, атайым мине телəһə кемгə тотоп бирмəне, үҙ иркемə ҡуйҙы. Башта, күңелемə оҡшағанды көтөп, ни еттегə ризалыҡ бирмəнем, аҙаҡтан яусылар беҙҙең буҫағаға бөтөнлəй аяҡ баҫмаҫ булды. Егерме дүрткə еттем шулай. Тирə-яҡта минəн ҡарт ҡыҙ юҡ ине — ғəрип-ғөрəбəһенəн башҡа. Бер көн беҙҙең өйгə сибек кенə ҡарт менəн һөлөк кеүек һылыу егет килеп инде.'Ҡарты — һинең олатайың, егете — Буҙ егеттең ише — ун ете йəшлек һинең атайың ине. Мин ҡойолдом да төштөм. Шунда уҡ йəнемде əсир итте ул. «Шомло яҙмышым бына кем икəн!» — тип уйланым. Мине тиңһенмəйəсəген дə шунда уҡ'һиҙҙем мин — йөрəгемде əрнеү өйкəп үтте. Шигем дөрөҫкə сыҡты. Тиңһенə алманы ул мине. Минəн былайыраҡ үҙе ғазапланды. Əле йəш саҡта, Имəнлек үрендə ҡунып ураҡ урғанда, төн уртаһында торам да, бөтəһен дə ташлап китмəксе булып, үҙебеҙҙең ауыл яғына ҡарай югерəм. Югерəм-югерəм дə таң атыуға кире урап ҡайтам. Йөрəгем баҫылғандай була. Өс-дүрт тапҡыр шулай иттем. Бишектəге бала уянғас, атайың тороп, ҡысҡыра-ҡысҡыра мине эҙлəп йөрөй икəн. Мин урап килгəс, һис ни булмағандай: «Ят, аҙыраҡ серем итеп ал», —ти. «Күңелең шулай бер ҙə генə тартмағас, ниңə мине алдың һуң? Ниңə боролоп ҡына кире сығып китмəнең?» — тип быуылып илайым. Ул өндəшмəй. Бик күп йылдар үткəс кенə, минең əлеге һорауыма былай тип яуап бирҙе: «Йəллəнем. Йəллəп алдым. Шул йəйҙе генə бесəн сапҡанда, иҫ итмəҫтəн, бер бүҙəнəнең ике аяғын да салғы менəн сабып өҙгəйнем. Теге бисара ҡанаттарын бер-ике генə тапҡыр ҡаҡҡан булды ла ҡырын ятты. Башын күтəрə биреп, «их, кеше!» тигəндəй, шундай бойоғоп ҡараны миңə — йөрəгем жыу итеп китте. Тəүге күреүемдə шул бүҙəнəне иҫкə төшөрҙөң һин. Йəллəнем».

Рəнйетмəне лə, ҡаҡманы ла атайың, əммə иш күрмəне. Беҙ уның менəн ҡушылып бер бөтөн була алманыҡ. Бында йəш айырмаһының да, холоҡ төрлөлөгөнөң дə, аҡыл-фиғел дəрəжəһенең дə ҡатнашы, бəлки, аҙ булғандыр. Беҙ төрлө һыңарҙар булып сыҡтыҡ — бөтə хикмəт шунда... һəр кешенең үҙ хəҡиҡəте була, əмме^ бөтə əҙəм өсөн уртаҡ, һəр

кемдең ғүмерлек таянысы булған, бөтә хәүеф-хәтәрҙәрҙән ҡурсалай торған тағы бер хәҡиҡәт бар. Ул хәҡиҡәттең исеме мөхәббәт. (Оло инәйем әүәлгесә минең битемдән һөйөп ҡуйҙы.) Һин, тәүтапҡыр ҡолҡоноп, минең муйыныма һарылғас, мин үҙемә былай тип әйттем: «Хәҙер инде был донъяла йәшәү ҡурҡыныс түгел миңә...»

Беҙ һағынғанды белгәндерме, үҙ һағышына түҙә алмағандырмы — унылһы беҙгә ҡараңғы — яҙғы йырғанаҡтар йырылғанда, Мәрәһим ауылға кире әйләнеп ҡайтты. Мин һағыныу хаҡында ерле-юҡҡа ғына әйтмәнем. Кешене үҙ йортонан ситкә хыял йәки әрнеү алып китә, ә һағыш алып ҡайта, һуңынан быны мин үҘем дә күп тапҡырҙар татыным.

Был юлы Мәрәһим, тубығына етеп торған ҡуңыслы ҙур ҡара итектәре менән урам уртаһынан эре-эре атлап, Юғары остан Түбән осҡа көпә-көндөҙ үтте. Кешеләр йә тәҙрәгә ҡапланып, йә ҡапҡа төбөнә сығып баҫҡан көйө ҡарап ҡалды уны. Осраған берәүгә, асыҡ йылмайып, ихлас сәләм бирҙе, ләкин, туҡталып, берәүҙән дә хәл-әхүәл һорашманы, атлауын белде. Арҡаһындағы йөгө артыҡ дәү булмаһа ла, ҡултыҡ аҫтындағы гармуны бығаса беҙ күреп, беҙ ишеткән ише генә түгел ине. Ҡала ҡала шул. Мәсеттәре лә, сиркәүҙәре лә, йорттары ла, хатта гармундары ла ҙур уның.

Ҡояш ҡыҙҙырып, гөрләүектәр аға башлағас, бөтә әҙәм урам яҡ кәртә буйындағы ҡарҙы, көрәк менән ырғытып, ситкә тарата, һәр кем үҙ өйө тураһына яҙҙы тиҙерәк килтерергә тырыша. Беҙ, егетеләр, ошо эш менән булашҡанда ҡайтып төштө Мәрәһим. Автомобиль уҙып киткәндәге шикелле, бөтәбеҙ ҙә көрәктәребеҙгә таяндыҡ та ҡаттыҡ. Ғәлләмдәр тураһынан уҙғанда, ул башын уңға бора бирҙе. Шул саҡ — әллә аяғы тайып китте инде — саҡ ҡына сайҡалғандай булды. Күпме тилмереп ҡараһаң да, Аҡйондоҙ унда юҡ инде... Хәмзә башҡа сыҡты. Аҙна эсендә генә соҡор аръяғындағы Туҡран урамына күсеп киттеләр. Уларҙың өйө бынан, беҙҙең ҡапҡа төбөнән, күренеп тә тора.

Мәрәһим ҡайтыуға көллө ғаләм ҡыуанды. Унан башҡа илдең йәме, моңо кәм ине. Ул ҡайтҡансы ауылда алмашыныуҙар артыҡ булманы. Тик сель-

совет кенә бүтән. Әүһлге сельсовет Ташбулат үткән көҙҙә тирмәндән ҡайтышлай, йоҡлап китеп, арбанан йығылып имгәнде. Арт тәгәрмәс тегенең билен тапап уҙған икән. Иҫерек булған тиһәң, ауыҙына ла ала торған зат түгел. Халыҡ хайран аптыраны быға. «Бәлә аяҡ аҫтында ята шул», — тиештеләр кешеләр. Ташбулат хәҙер, уртаға бөкләнеп, арт һанын һөйрәп йөрөй. Шулай ҙа яҙға табан Сәмиғулланың ҡәберенә, үҙе яһап, бик матур рәшәткә ҡуйҙы. Ҡулы һәнәр белә икән.

Тап Мәрәһим ҡайтып төшкән көндәрҙә ауылда ғәләмәт шау-шыу күтәрелде, ығы-зығы ҡупты. Берәүҙәр ҡыуана, икенселәр борсола, өсөнсөләр шикләнә-. Ҡайҙа барма — әңгәмә, ҡайҙа ҡарама — бәхәс. Клубта көн һайын йыйылыш. Ҡайһы саҡ таңда ғына таралышалар. Тула өмәләре, бәпес туйҙары, аулаҡ өйҙәр бөтөнләй туҡталды.

Колхозға яҙылыу башланды.

Беҙҙең өйҙә тартыш ҙур булды. Колхозга инергә теш-тырнағы менән ҡаршы торған Мортаза ағайым, үҙенә тейер малды алып, бүленеп сыҡты. Ул тиҫкәре нәмәне Бикә еңгәмдең күҙ йәштәре лә еңә алманы. «Ялҡау Дүсмәт менән Ҡаҙна Исхаҡ тиңе булып йөрөр хәлем юҡ! — тип кәпәс һуҡты ул. — Минең ҡулымдан эш килә. Әгәр минең ишеләр һайланып ҡына бер колхоз булһа, дүрт ҡуллап ризамын. Төҙөһөндәр шундай колхоз!» (Минең Мортаза ағайым өсөн, әйтергә кәрәк, ул йылды ла, унан һуң да махсус колхоз төҙөлмәне. Ике йылға яҡын ҡаңғырып йөрөнө лә, шаҡтай бөлгәс, шул беҙгә яраған артелгә килеп инде. Күпмелер ваҡыттан хатта бригадир булып китте.)

Өйҙә нәҡ әлеге бәхәстәр ҡуйырған саҡта, беҙҙең Кәлимулла исемле ҡылыйыраҡ күҙле йыуаш ҡына бер нәҫелебеҙ инеп илап сыҡты. «Атай-олатайҙарым күрмәгән атка тейендем. Ҡарап торған ошо мөлкәтемде ят ҡулдарға нисек итеп тапшырайым? Имеш, бисәләрҙе лә бергә йыялар икән. Суҡынһын бисәләре! Атым ғәзиз, атым... Ялындағы бер төк ҡылы өсөн йәнем фиҙа!» — тип ул йоҙроғон ҡапыл юғары сөйҙө лә матсаға аҫылынған етеле лампаны яңылыш бәреп төшөрҙө. Кәлимулла баштан-аяҡ кәрәсингә ҡойондо.

*

— Ошонда туҡта, бажа, ары ҡыҙма, — тине атайым, — юғиһә өҫтөңдәге кәрәсин гөлтләп янып китер...

— Янһа... — Ул, икенсе ҡулын һелтәп, һикегә ултырҙы. — Атым юҡ ине аранда, ҡайғым юҡ ине буранда. Ат тигәнем ҡайғы булып сыҡты, былай булғас...

— Бына атыңды илтеп тапшыр ҙа ҡайғыңдан ҡотол, — тип кәңәш бирҙе атайым. Кәлимулла йәйләнеп китте.

— Ысынлап та, әллә шулай итергәме икән, бажа? Әйткәнеңсә, ғүмер буйы атһыҙ йәшәнем, иншалла, үлмәнем, хатта уфтанманым да. Балдыҙың да нәфселе булманы мал йәһәтенән... Уның ҡарауы, шөкөр, балаларға бай булдыҡ. Береһе артынан икенсеһе тупылдап ҡына торҙо.

— Донъяңдың етешмәгән ере юҡ, хайран... Ә үҙең бында килеп илап ултыраһың, •— тип төрттөрмәксе итте Мортаза ағайым. Бер ҡатлы Кәлимулла әсе кинәйәне аңламаны.

— Шулай шул, Мортаза, зарланыр урыным юҡ. Бөтәбеҙ ҙә һау-сәләмәтбеҙ, ғәрип-ғөрәбә түгелбеҙ. — Ипкә килеүсән Кәлимулла ауып та төштө. — Инде, бажа, һинең ише ҡара аҡылы менән дан тотҡан әҙәмдән уҙып, мөгөҙ сығарып булмаҫ. Тәүәккәлләрмен, шәт. Тик бына лампаны ғына әрәм иттем. Алабарман...

Беҙҙең нәҫелебеҙҙең ошо күндәмлеге, тиҙ ышанып барыусанлығы тураһында төрлө имеш-мимештәр йөрөй. Йәнәһе, беҙҙең апайыбыҙ, әле йәш саҡта, бер көн эңер ваҡытында тыҡрыҡ ситәне буйында мут ҡына бер ир менән һөйләшепме, серләшепме торған икән. Еҙнәбеҙ быны үҙ күҙҙәре менән күреп ҡалған. Бисәһе өйгә ҡайтҡас, был бәйләнмәксе итә башлаған, ә тегеһе шыр тана, ти.

— Һуң бит, бисәкәй, үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, ышан инде, зинһар өсөн, ышан,—тип инәлә икән был, иларҙай булып.

— Ышанма күҙеңә, ышан һүҙемә! —тип бойорған бисәһе. — Нимә эшләп әле һин үҙеңдең ҡылый **күҙеңде** минең тура һүҙемдән өҫтөн ҡуяһың? Ҡайпан килгән ундай баш-баштаҡлыҡ?

Кәлимулла шым булған. Бисәһенең әренән ҡур-

ҡып түгел, үҙенең хатаһын танып, оялыуынан шымған ул.

— Эҥер ҡуйы ине бит... — тип аҡланған Кәлимулла. — Минең бисә тауышы менән кем былай һөйләшә икән, тип шикләнгәйнем шикләнеүен. Баҡһаң, шигем тәки дөрөҫкә сыҡты.

Ә Кәлимулланың ат алып ҡайтыуы теге саҡ бөтә урам өсөн бер мәрәкә булды. Ҡыҫҡа тороҡло йөнтәҫ ерән алашаны хужа, алып ҡайтҡас та, аҙбарына япманы. Уны урам яҡ кәртәгә бәйләп ҡуйҙы. Туйғансы күреп ҡалһындар әйҙә! Ҡасырға* тартым был хайуан, оло башын кәртәгә һалып, кискә тиклем тамашасылар ҡабул итте. Әммә теләһә кем алдымда баш' эйеп, эйелеп-һығылып барманы. Дәрәжәһен юғары тотто. Ат эргәһенә халыҡ иң күп йыйылған мәлдә генә ҡурағa ниндәйҙер бер һөмһөҙ берәҙәк эт килеп инде. Минең апайым, оҙон сыбыҡ тотоп, этте ҡыуырға кереште. Эт тиҙ генә буйһонманы. Аҙбар ягына ынтылды. Кәлимулланың кәртәгә атланып ултырған кесе малайы Зәһидулла ҡапыл һөрәнләп ебәрҙе:

— Әсәй, әсәй, тим! Ат менеп ҡыу этте! Ат менеп! Йәйәү йөрөү етер инде!!!

Беҙҙең еҙнә тейешле кешебеҙ бына ошо дан арғымаҡты үҙ ҡулдары менән колхозға илтеп тапшырырға ҡарар ҡылды һәм тапшырыр ҙа.

Минең атайым алға ла ынтылмай, артҡа ла ҡалмай— бер көйө бара донъяла. Шуга күрә уны «урта хәлле» тиҙәр. Әле лә шулай. Әҙәмдән уҙмай ҙа, ҡалмай ҙа колхозға керҙе. Күк алашаны, бер келәтте, тимер һабан менән ағас тырманы, арба менән сананы яҙҙырып ҡайтты. Был хаҡта киске сәй ваҡытында алдан кәңәшләшеү булғайны. Кәңәштә ике инәйем дә, Сәлих ағайым менән мин дә — йәғни ололарҙан бөтәбеҙ ҙә ҡатнаштыҡ.

Колхозға яҙылған кешеләрҙең исемлеген, һәр өй эсендәге һәммә йән эйәһен теҙеп, ауыл Советенә элеп ҡуйҙылар. Унда Мәрәһимдәр етенсе, Аҡйондоҙҙар егерме дүртенсе, беҙ утыҙынсы урында торабыҙ. (Минең исемде асыҡ итеп, айырыуса килештереп яҙғандар.) Тегеләрҙе мин ихтыярымдан тыш бер

* Ат менән ишәктән яралған.

саҡ үҙ ҡарамағыма алдым да хәҙер шунан һис кенә лә ҡотолоп булмай. Ниндәй генә хәл килеп сыҡһа ла, Аҡйондоҙ менән Мәрәһимде йәнәшә ҡуям. Минең аңымда улар әллә ҡасан икеһе бер бөтөнгә әйләнгән. Их, тим, донъяла ла улар, минең күңелемдәге шикелле, бүленмәй йәшәһәләр ине! Ә Хәмзәне мин үҙ уйым менән етәкләп алам да Мәрәһимдәр йортона индереп ебәрәм. Ҡасандыр боҙолған ғәзеллекте үҙемсә төҙәтәм, һәр кемде, йәнәһе, тейешле урынына ҡуям. Иҫәрмен дә инде... Төптәнерәк уйлағанда, ғаилә таратыусы, ояу туҙҙырыусы булып сығам бит. Быының өсөн мине бик ҡаты орошорға, хөкөм итергә кәрәк.

Тегеләрҙең бер теҙмәлә тороуына күңелем үтә риза. Һәм, иҫән ваҡытта, улар бер теҙмәлә ҡалдылар ҙа. Тик һуңыраҡ береһен әжәл генә юйып ташланы. Ә уға тиклем әле күпме һыуҙар ташып ҡайтты, күпме ҡоштар һайрап тынды...

Аҡйондоҙ менән Мәрәһимдең икеһен бергә мин тағы ике генә тапҡыр күрҙем.

Ҡоштар һайрап торған бик матур көндә бөтә колхоз тиерлек Усман төбәгенә бесән эшенә сыҡты. Арыш урағы ҡыҫып килгәнгә, бесәнде дәррәү генә бөтөрөп ташларға кәрәк ине. Ҡыҙ-ҡырҡын бесән йыя, үҫмер егеттәр, атҡа атланып, һөйрәтке менән сүмәлә тарттыра, бисә-сәсә менән ир-ат, пар-пар булып, беҙгә сүмәлә тейәп ебәрә, оло ағайҙар кәбән ҡоя. Төбәктең иң алыҫ ситендәге ваҡ ереклек буйында «минең кешеләрем» сүмәлә оҙатып тора. Мәрәһим һәнәк менән тейәй, Аҡйондоҙ арттан тырматып таҙарта бара. Хәмитйән менән минең өлөшкә ошо икәү төштө, юрттырып, алмаш-тилмәш былар тирәһенә киләбеҙ ҙә етәбеҙ. Мин бигерәк тә ашығам. Уларҙы бергә күреү рәхәт миңә. Аҡйондоҙҙоң йоҡа, матур ирендәренән теге сихри йылмайыу көнө буйы тиерлек китмәне. Бер мәл саҡ ҡына һүнеп торҙо ла тағы тоҡанды.

Мәрәһим һәнәге менән бер сәнскәндә, арттыра тимәгеҙ, ярты сүмәләне килтерә лә һала. Үҙе, зәңгәр күҙҙәренән нур сәсеп, хахылдап көлә. Бына, исмаһам, кемдә ғәйрәт! Мин ат өҫтөндә ятылаш боролған көйө уларҙан күҙемде айырып та ала алмайым.

Быныҡ әҙәпһеҙлек икәнен дә аңлайым, әммә һис нәмә ҡылып булмай.

Бер мәл, сүмәлә тейәлеп бөтөр-бөтмәҫтә генә, Мәрәһим Аҡйондоҙҙо ҡапыл биленән ҡыҫып алды ла бесән өҫтөнә ырғытты. Минең өркәк атым, үрә ырғып, ситкә тайшанды, мин осоп төштөм, ул тороп сапты. Шунда уҡ минең әҫтәмә Аҡйондоҙ ҡоланы. Ул, моғайын, сүмәлә башынан тәгәрәп төшкәндер. Шул саҡ миңә, күктең зәңгәр шаршауы йыртылып, әллә ҡайҙа төптә ятҡан йондоҙҙар йымылдап күренде. Береһе ап-аҡ ине. Мин, уға табан ҡарап, осоп та киттем. Офоҡ ситендә тотош йылмайыу балҡьЛй... Юнһеҙ аттан ҡолап төшөүем мине, ана, ниндәй бейеклектәргә ашырҙы. Аҡйондоҙ шунда уҡ теҙләнеп минең сәсемде һыйпарға тотондо.

— Берәй ерең ауыртманымы, бөҙрә баш? — тине. Мин, рәхәтлектең сигенә сығыуҙан иҫереп, өндәшә алмайым. Ул хафаға ҡалды. — Ни ерең ауырта?— тип ҡабатланы шундай яғымлы итеп. Күҙҙәренән һағыш эркелеп сыҡты. Кешене ҡыҙғанғанда **унын** күҙҙәре үтә хәсрәтле була икән. Мин ерҙән айырмай ғына башымды сайҡаным.

— Уф! Ҡоткайҙарым осто! — тине.

— Минең бер ерем дә ауыртманы. Ат тәпәшәк, ер йомшаҡ, — тигән булдым, тороп ултырғас. Шулай ҙа һырт буйы арыу ғына янып тора ине.

Был арала Мәрәһим иҫәр атты тотоп килтерҙе. Күрәһең, алыҫ китмәгәндер. Хатта сүмәләһе лә ҡойолоп бөтмәгән.

— Бына бер дыуамал, — тип шелтәләгән булды тегене Аҡйондоҙ, — әҙәм имгәтеүең бар бит. Ике әҙәмде бер юлы. — Ул йәнә минең сәсемдән һыйпап **алды.** Мин, һикереп, аяғүрә баҫтым. Мәрәһимдең оло ҡатынды, бала урынына ҡул осона алып, йомшаҡ бесәнгә ырғытыуын был юлы ғәйепкә алманым. Киреһенсә, килешеп торғандай булды был эш.

Шулай ҙа Мәрәһим минең алда ни эшләп былай шуҡ ҡыланды икән? Мине иҫәпкә алмауымы әллә үҙ итеүеме был? Әллә дәртенә, ашҡыныуына сыҙай **алманымы** икән? Ярай, яҡшыһына юрайыҡ. Етеп **килгән** егетте һанға һанамаҫҡа хаҡы юҡ унын... Минең шундай тоғролоҡ; менән сер һаҡлауымды

улар һиҙенергә тейеш. Тоғролоҡто әҙәм түгел, зирәгерәк ат та һиҙә.

Минең сүмәлә яңынан тейәлеп бөтөүгә Хәмитйән дә юрттырып килеп етте. Эш тағы ла үҙ яйына һалынды. Кискә тиклем был донъяла беҙ өсөбөҙ бер булып йәшәнек - Аҡйондоҙ, Мәрәһим, мин... Аҡйондоҙ менән Мәрәһим икәүһе бергә бәхеттең йәнле һыны ине. Ә мин ошо бәхеттең шаһите булдым. Аҙаҡтан да мин ҡайта-ҡайта ҡыуанасаҡмын: бәхеттең шаһите булыу — үҙе бәхет икән!

Бынан һуң Усман төбәге минең хыялымда бәхетлеләр төбәгенә әйләнде. Шул туғайҙан уҙған һайын, теге ереклек яғына боролоп, оҙаҡ-оҙаҡ ҡарап торам. Мәрәһим һәнәген, Аҡйондоҙ тырмаһын ҡулбашына һалып, миңә ҡаршы килеп сығыр төҫлө. Улар һаман йәштәр, һаман бәхетлеләр. Ә ваҡ ереклек бер күргәндә кәртәлек, икенсе күргәндә бүрәнәлек урманға әйләнде. Буйға етеп бөткәс кенә, уны ҡырҡып ташланылар. Шул уҡ урында яңы ҡурпылар үҫеп сыҡты, йылдан-йыл тамыры ныҡыны, буйға үрләне. Бына күнме япраҡ шаулап ҡойолдо! Ә теге икәүҙе тағы бер тапҡыр йәнәшә күреүҙән һаман өмөт өҙмәйем! И хыялдар! Йөҙҙән берегеҙ генә ғәмәлгә ашһа икән!

Мин йән өшөткәс бәхетһеҙлектең дә шаһите булдым. 1941 йылдың егерме дүртенсе июнендә улар айырылыштылар, һуғышҡа китеүселәрҙең тәүге төркөмө ул көн клуб алдына йыйылды. Майҙан тулы эйәрле ат, парлап-парлап егелгән арбалар, бричкалар...

һөйләнәһе телмәрҙәр һөйләнеп, биреләһе өгөттәр бирелеп, әйтеләсәк теләктәр әйтелеп бөттө. Бына-бына юлға сығырға тейештәр. Хушлашаһы ғына ҡалды. Оҙатыусыларҙың күпселеге — ҡатын-ҡыҙ ҙа йәш-елкенсәк. Яуға китеүселәргә ата-әсәләр боронғо йола буйынса, йортта ғына фатиха биреп ҡала. Улар оҙата сыҡмайҙар. Эйәрҙәге яугирҙең өҙәңгеһенә тотоноп, уның бисәһе генә бер аҙ эйәреп бара. Яуға оҙатканда һыҡтау-сеңләү ғәйеп һанала, әҙәпкә һыймай. Сыҙамлыҡ менән сабырлыҡ — фатихаға бәрәбәр. Китер юлға тамған күҙ йәштәре яугирҙең күңелен болоҡһота, ихтыярын ҡаҡшата.

Һәр китеүсенең эргәһендә ҡатыны йәки кәләше

баҫып тора. Байтағы бәләкәс улын йәки ҡыҙын күтәргән. Бүтәндәр ситтәнерәк уларҙы уратып алған. Халыҡ шул тиклем күп булыуға ҡарамаҫтан, шаушыу ҙа, ығы-зығы ла юҡ. Хатта имсәк балалары ла иламай.

Беҙ, ни эшләптер, Аҡйондоҙ менән йәнәшә тура килдек. Был юлы уның иренә саҡырыу килмәгәйне әле. Ул китмәй. Мин Сәлих ағайымды оҙатам. Ағайым аҙ ғына ҡыҙмаса. «Соландағы ҡумтала беҙҙең тракторҙың асҡыстары ята,—тип шыбырҙай ул еңгәмдең ҡолағына, — шуларҙы иртәгә үк Сәйфуллаға илтеп тапшыр... Донъяла иң кәрәкле нәмә — асҡыс ул. Ни өсөн, тиһең, алтын асҡыс тураһында әкиәт сығарғандар...» Еңгәм өндәшмәй. Унда асҡыс ҡайғыһы юҡ.

Өрләктәй Мәрәһим төркөм эсендә айырылып тора. Бер яғына уның, ыҡсым ғына тары көлтәһе төҫлө, төптән йыуантыҡ, күрер күҙгә мөләйем генә бисәһе, икенсе яғына — сөм-ҡара сәсле, атаһыныҡы шикелле зәп-зәңгәр күҙле ҡыҙы Аҡйондоҙ баҫҡан. Ун йәштәр самаһындағы был бала нимәһе менәндер өлкән Аҡйондоҙға тартҡан һымаҡ. Ирекһеҙҙән мин Аҡйондоҙҙарҙың тәүҙә ҙурыһына, унан бәләкәсенә тағы бер ҡат һынай биреп күҙ ташлайым. Оҡшашҡандар шул! Бына бер мөғжизә! Әллә үҙем һаман юҡты бар итеп күрәм инде?!

Эргәһендәге ҡыҙын Мәрәһим ике ҡулы менән һаҡ ҡына биленән алды ла баш өҫтөнә күтәрҙе:

— Хушлашайыҡ, ваҡыт, — тине. Уның көр тауышы майҙан өҫтөнән күкрәп үтте. Ул оҙатыусыларға күҙ югертеп сыҡты. Тауышын аҙ ғына түбәнәйтеп, дауам итте: —Ауылдаштар! Аҡйондоҙ менән ант итәм, ике ҡаг ант итәм: ил йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәм. Әйтер һүҙем шул.

«Ыҡсым тары көлтәһе», гүйә, сөйлөгөп китеп, иренең уң ҡабырғаһына һөйәлде, һөйәлде лә, сайҡалып, кире үҙ урынына ултырҙы. Эргәмдәге Аҡйондоҙ һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә минең еңемдән тотоп алды. Шунда уҡ кире ебәрҙе. Мәрәһим ҡыҙын ергә баҫтырҙы. Тыңҡыш Вәлетдин, бисәһе ҡулынан алып, кескәй генә малайын һауаға сөйҙө:

— Улым Йыһандар менән!..

- Тупрағыбыҙ менән^. — тип өҫтәне Әсғәт.

Унының балаһы түгел, әлегә ҡатыны ла юҡ. Ә тупраҡтың, шул тупраҡтағы бөтә йәмдең баһаһын да, ҡәҙерен дә белә ул.

Һаубуллашыу башланды. Ҡатындары ирҙәренә, кәләштәре тиҙҙән буласаҡ кейәүҙәренә һыйынды. Әлбиттә, тиҙҙән буласаҡ... Дошманды йәһәт кенә еңеп, һуғышты бөтөрөп ҡайтырҙар ҙа гөрләтеп туйҙар яһарҙар. Әлбиттә, яһарҙар... Берәүҙәр ҡул бирешеп, икенселәр ҡосаҡлашып, үтә саялары үбешеп хушлаша. Мәрәһим тура ҡатҡан көйө беҙҙең яҡҡа ҡарап тик тора. Һул ҡултыҡ аҫтына ҡыҙының башын ҡыҫҡан да бармаҡтары менән унының сәсен һыйпай. Уң яғындағы ҡатыны, кемгәлер урын биргәндәй, сигенеп, иренен артына баҫты. Ошо мәл Аҡйондоҙ минең беләгемде умырып тотто. Үҙе ҡайҙалыр ынтыла, үҙе мине ебәрмәй.

Хушлашып бөткәс, тауыш ҡуйыра төштө. Берәүҙәр арбаларға, бричкаларға ултырышты, икенселәр аттарына атланды. Мәрәһим өлөшөнә колхоздың иң атаҡлы ҡара айғыры Ҡоҙғон тура килгән. Арбалылар юлға сығып теҙелгәс кенә, Мәрәһим айғырын бағананан сисеп ауыҙлыҡланы. Шунан оло кәүҙәһен, йылт иттереп, эйәр өҫтөнә ҡундырҙы. Ҡуҙғалып киттеләр. Китеүселәр, уларҙы районға саҡлы оҙата сығыусылар бөтөнләй шымып ҡалған майҙандан аҡрын ғына алыҫлаша барҙы. Унының һайын Аҡйондоҙҙоң бармаҡтары минең беләгемә тәрәнерәк батты. Ер буйы ер киткәс, Мәрәһим, атын туҡтатып.ҡайырылып ҡараны. Шул саҡ Аҡйондоҙ, ҡоралай һымаҡ ҡапыл үрә һикереп, китеүселәр артынан тороп югерҙе. Мәрәһим, атының башын ҡайырып кире борҙо ла ҡатынга ҡаршы елдереп килде. Аҡйондоҙ, өҙәңгегә тотоноп, йәнәшә атламаҡсы ине, тегеһе ирек бирмәне, ғәйрәтле ҡулдары менән эләктереп алды ла үҙ алдына ултыртты. Ултыртты ла, арбаларҙы, һыбайлыларҙы уҙа һалып, сабып китте. Уларҙы Мөкөш үренә еткәнсе ҡарап ҡалдыҡ. Унан һуң бер талай күҙҙән юғалдылар. Хуплаусы ла, хурлаусы ла булманы. Хатта Мәрәһимдең ҡатыны ла сыҙаны, буйға үҙенән саҡ ҡына ҡайтыш ҡыҙын етәкләп, башҡалар рәтенә ҡымшанмай ҙа ҡарап торҙо. Ошо мәл мин был ҡатын алдында үҙемде, нисектер, ғәйепле һымаҡ һиҙҙем. Бынығы ла бит «минең кешем», ә

үҙем уны хәсрәтле иткән серҙәрҙе һаҡлайым... Бара торғас, бөтөнләй буталдым, ахыры. Бөтәһен дә ҡыҙғанам...

Тегеләр тағы бер түбәне артылғас, офоҡ ситенә инеп тамам баттылар. Ҡабат ҡалҡырҙармы икән?

Береһе ҡалҡты, икенсеһе батты.

Яҙмыш мине, күрәһегеҙҙер, йыш ҡына хәтәр ваҡиғаларҙың, көтөлмәгән фажиғәләрҙең, ғәҙәттән тыш хәлдәрҙең геуаһы яһаны.

Һуғыш бөтөүгә йыл тулып ашҡайны инде. Ауылға ҡайтҡас, ниндәйҙер йомош менән ауыл Советенә индем.

— Еңеүҙән һуң күпме ғүмер үтте, ә кешеләр һаман -һәләк булалар. Үҙҙәре өсөн әллә ҡасан үлгәндәр, әле килеп беҙҙең өсөн икенсе ҡат гүр эйәһе булалар,— тип зарланды председатель. — Әле береһе, әле икенсеһе хаҡында «Пал смертью храбрых» ҡағыҙы килеп тора.

Ул миңә таушалып бөткән ҡағыҙ киҫәге һондо. Похоронная. Усымды өтөп алды. Бындай яман яҙыуҙы мин беренсе ҡат ҡулыма тоттом. Кеше үлемен тегендә мин күп күрҙем. Ә үлем хәбәрен үҙ күҙҙәрем менән тәүтапҡыр күрәм. Былай ҡарағанда, һыйыр һатырға бирелә торған рөхсәт ҡағыҙынан һис кенә лә айырылмай. Ә үҙендә бөтөн бер кешенең әжәле ята. Был яҙыуҙы төҙәтеп тә, үҙгәртеп тә, яндырып та булмай. Ул — кешенең мәңгелек шәхси танытмаһы: «Батырҙарса һәләк булды...» Кем? Гвардия старшинаһы Мәрәһим Зәбиров.

Председатель, минең ҡулдан ҡағыҙҙы кире алып, әйләндереп-әйләндереп ҡараны. Әйтерһең, унан хата эҙләй, шул хатаны табырға өмөт итә.

— Бындай хәбәрҙе эйәһенә тапшырыу хәҙер бигерәк тә ҡыйын, ҡайғы яңыртып... Торҙом-торҙом да, нимә ҡылаһың, Аҡйондоҙға кеше ебәрҙем инде. Һуғыштың һуңғы айҙарында ғына Хәмзә лә ҡайҙалыр Венгрияла госпиталдә үлеп ҡалды. Килгәс килә инде бәндәгә... Мәрәһимдең бисәһе ҡар аҫтында ҡалған ағыулы бойҙай ашап үлде анау йәй. Бер ай эсендә бик күп халыҡ ҡырылды ул саҡ. Аслыҡ бәләһе инде. Мәрәһимдең бөтөнләй үкһеҙ ҡалған ҡыҙын Аҡйондоҙ ^үҙенә алып ҡайтты. Те-

рәүгә таяныс булып йәшәп яталар шулай. Ҡыҙы етеп килә инде.

Бер юлы күпме ҡайғы-хәсрәт һөйләп ташланы уң ҡулын Сталинград янында күмеп ҡайтҡан был кеше. Ҡулы тураһында ул күрешкәндә үк әйтте: «һулы менән генә күрешергә тура килә инде. Уңын Мамай убаһына күмеп ҡалдырҙым. Данлы убаға», — тине.

Тыштан уҡ ҡысҡырып-уҡыныпмы, ҡарғанып-мы — таяҡ таянған бер ҡарсыҡ килеп инде.

— Собханалла, машалла! Хоҙайҙың асы ҡәһәре һуҡҡыры! — тине ул, буҫағаға абынып. Йәһәт кенә атлап, председатель алдына килеп баҫты. Был— Өс әтәс урамын дер ҡалтыратып тотҡан Майтап инәй ине.

— Ултырып һөйләшәйек, еңгә, бына түрҙән уҙ, — тип председатель урын күрһәтте.

— Ултырмайым!—тип бартанданы ҡарсыҡ.— Баструкта серет анау Әлмисаҡты, берсиҙәтель булһаң. Минең хөкөмөм бөттө ул ристанға. Кисә тағы кәзәмде һауған. Тамағына ағыу булып барғыры! Көтөүсе түгел был, бер бур булып сыҡты бит. Көпә-көндөҙ әҙәм талай! Бирән!

Майтап инәй түр башындағы ултырғысҡа уҙып ултырҙы, ҡулындағы таяҡ осон эйәк аҫтына терәне. Таяғын шунда уҡ кире ситкә алды:

— Сығар хөкөмөңдө! Юғиһә бөгөн һөтөн һауһа, иртәгә үҙен һуйып ашар кәзәмде. Иманы юҡ уның!

— Ярай, сара күрербеҙ.

— Сара кәрәкмәй миңә, яза кәрәк. Әлмисаҡҡа ҡаты яза бир! Бүтәндәргә ғибрәт булырлыҡ итеп...

— Ярай, яза ла бирербеҙ, әгәр ғәйебе иҫбат ителһә.

— Иҫбаты-ние бары ла шунда — бер кәзә елен-дә! Элекке көн өс сеүәтә сыҡҡайны, кисә икегә тороп ҡалды. Ибраһим пәйғәмбәр тотоп иммәгәндер бит инде уны! — Ҡарсыҡтың тауышы ҡапыл йомшарып, хатта ҡалтыранып китте. — Үҙем өсөнмө ни ул һөт? Миңә үҫергә түгел, үлергә генә ҡалған. Ана, ике етем ейәнем, ҡулдарына сеүәтә тотоп, көтөү ҡайтҡанды көн һайын тилмереп көтөп ултыра. Шул етем сабыйҙар ризығын ашай бит ул убыр.

Бер-ике минут эсендә Майтап инәйҙең зары мине

ҡырҡҡа дүндерҙе. Башта ул асыуымды килтерҙе, унан ирмәккә әйләнде, аҙаҡ килеп, йөрәгемде өтөп, бөтә рухымды ҡурып алды.

— Һүҙең расҡа сыҡһа, Әлмисаҡҡа ҡаты яза бирермен, — тип вәғәҙә итте председатель. — Бик ҡаты яза...

— Бир шул. Әммә баструкка яптырма. Уның да балаһы итәк тулы. Яҡшы көндән эшләмәгәндер был эште, бахырың, һин уға тел язаһы бир. Ныҡ иттереп...

Беҙҙең ауылда әллә килделе-киттеле кешеләр күп, әллә тормош үҙе шулай килделе-киттеле инде. Бер ҡараһаң, тегеләйбеҙ, бер ҡараһаң, былайбыҙ. Үҙебеҙ'ут сәсәбеҙ, үҙебеҙ һыу һибәбеҙ. Ләкин был беҙҙең аумаҡайлығыбыҙ түгел. Беҙҙең кәйефебеҙ уйлаған уйыбыҙға, ишеткән һүҙебеҙгә буйһона, бөгә хикмәт бына шунда.

Майтап инәй таяҡ осона эйәген йәнә ҡуйҙы. Тағы ишек асылды. Хәлдә барынса ыҡсым, бөхтә кейенгән Аҡйондоҙ күренде. Уның аяғында ап-аҡ ойоҡ, тәрән резина калош. Төҫкә-башҡа артыҡ үҙгәрмәгән. Яулығын ул әүәлгесә үк артҡа сөйөп бәйләгән. Сикәһендә берәм-һәрәм аҡ сәстәр күренә. Толомоноң осонда шул уҡ сулпылар сылтырай. Ул йылмайғандай итте, ләкин мин күреп өйрәнгән, мин һоҡланып туймаған балҡыштың әҫәре лә юҡ ине. Ул ҡуш ҡуллап башта Майтап инәй менән күреште, шунан председатель менән миңә ҡул бирҙе. Минең ҡулды тиҙ генә ысҡындырманы:

— Ҡунаҡ бар ҙаһа.. Бына, иҫән йөрөгәс, әйләнеп тә ҡайтҡанһың. Бәхетле икәнһең . Бүтәндәрҙе лә бәхетле иткәнһең... Оҙон ғүмерле бул. — Кинәт матур ирендәрендә теге йылмайыу гөлт итеп тоҡанып китте. — Усман төбәгендә бесән йыйғанда, һин малай ғына инең. Ғүмер буйы иҫемдә булды шул төбәк... Матур булып төштәремә керә... Өмөт өҙмәйем әле...

Эйе, мин ҡайттым. Ләкин күпмегә ҡайтыуым ғына билдәһеҙ. Ике үпкәмде лә туберкулез өңөп бара. Шулай ҙа ҡайтып күҙгә күрендем, үҙем дә күрҙем.

— Саҡыртҡанһың икә^, — ул, ике күҙен мөлдө-

рәтеп, председателгә ҡараны. — Әллә Мәрәһим йәһәтенән бер-бер өмөтлө хәбәр бармы?

— Ултыр әле, Аҡйондоҙ.

Ул шунда уҡ мейес эргәһендәге тимер тышлы һандыҡ өҫтөнә барып ултырҙы. Ике ҡулын ҡаушырып, теҙҙәренә ҡуйҙы. Бүлмәне таш тынлығы баҫты. Мин тимер тышлы һандыҡты таныным. Ул күптән тора бында. Сәмиғулла ҡарамағындағы йәмәғәт аҡсаһы теге саҡ ошо һандыҡтан урланғайны. Ул миндә күргән һайын шом уятты, ҡараҡҡа бирешкәне өсөн асыуымды килтерҙе. Бына әле лә. Юҡҡа унда ултырҙы Аҡйондоҙ. Хәйер, хәҙер инде барыбер.

Председатель иҫән ҡулы менән маңлайын ыуып алды.

— Нимә тип кенә башлайым икән?.. Өмөт үлтереү — әҙәм үлтереү менән бер. һуңғы өмөтөңдән яҙҙырам. Ҡәһәрләмә, ҡәрендәш. Мә, үҙең уҡы...— Председателдең ҡалтыранған ҡулы баяғы ҡағыҙҙы Аҡйондоҙға һуҙҙы.

Алайыммы икән, юҡмы икән тигәндәй, Аҡйондоҙ икеләнеп торҙо. Шунан, ике ҡулын һоноп, яңы сыҡҡан тауыҡ себешен тотҡандай, яҙыуҙы ҡуш усына алды. Уның сибәр аҡ йөҙө минең күҙ алдымда ҡарая барҙы, ҡарая барҙы. Ләкин уның аҡҡош муйынындай нескә муйыны һығылып төшмәне, ауыр хәсрәт тулы башы эйелмәне. Ул таш һынға әйләнде. Тәне ҡалды, йәне ҡайҙалыр осоп китте. Әммә күпкә түгел. Ул йән тағы үҙ тәненә урап ҡайтты:

Ярабби!—тип әсе ҡысҡырып ебәрҙе ул.— Ошо тиклем мөхәббәт тә кешене үлемдән һаҡлай алмағас инде! Нимәгә ышанырға, нимәгә таянырға ҡала һуң? Ә мин шул тиклем ышанғайным... Мөхәббәттең әжәлдән өҫтөн булыуы тураһында күпме китап яҙғандар. Ул китаптарҙы бит мин иман урынына күреп уҡыным, һәр бер һүҙен ятлап алдым. Бөтәһе лә ялған, бөтәһе лә уйҙырмамы икән ни? — Үлем ҡағыҙы ятҡан ҡуш усын ул тағы алға һуҙҙы. — Анау тиклем баһадирҙән ошо ғына тороп ҡалһын инде. Ғәҙеллек ҡайҙа?!

Аҡйондоҙ йәнә шымды. Майтап инәй эйәген таяҡ осонан алды.

— Ә мин әйтәм, килен, шул мөхәббәт арҡаһында

башын һалған ул, — тип аяуһыҙ хөкөм сығарҙы ҡарсыҡ. — Ғашиҡ булдымы, ирҙең аҫылы шаша ла китә, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй уның, ҡурҡыу-өркөүҙе онота. Мәрәһим аҙамат та, йәнәһе, һиңә шәпле күренергә тырышып, алдын-артын ҡарамай, ғәрәсәттең эсенә ингәндер, һин күҙәтеп торғанды һиҙгәндер ул. Уғата алға, яуҙың уғата хәтәрерәк еренә ташланғандыр. Имеш, ҡара: бына минниндәйерәк! Ана шулай харап булғандыр уның башҡайҙары. —- Ул туҡтаны ла уфылдап өҫтәп ҡуйҙы. — Әллә йыйын ерле-юкты һөйләп ташланым инде?..

Ҡарсыҡтың шәфҡәтһеҙ һүҙҙәре Аҡйондоҙға* бер төрлө лә тәьҫир итмәне, ахыры. Ул хатта ҡуҙғалып та ҡуйманы. Ә минең гимнастеркамдың ике кеҫәһендә йөрөгән ике хат тере күмер урынына күкрәгемде берсә өтөп алды.

Береһе уның былай башлана...

Юҡ, ашыҡмайыҡ әле. Хатҡа тиклем Аҡйондоҙ тураһындағы әңгәмәне тамамлайыҡ. Ул башҡаса өндәшмәне лә, бөрсөк йәш тә тамыҙманы. Майтап ҡарсыҡ сығып китте. Беҙ өсәү, белмәйем, күпме ултырғанбыҙҙыр, башлап Аҡйондоҙ ҡуҙғалды. Беҙ уны, болдорға сығып, оҙатып ҡалдыҡ. Ҡатын өйөнә табан ыңғайламаны, анау йыл Мәрәһим үҙ алдына эйәргә ултыртып сапкан Мөкөш үре яғына китте.

Сибәрлеген ғүмер ташламаҫ был еңгәмде, байтаҡ йылдар уҙғас, тағы осраттым. Урамда тап булыштыҡ. Йөҙө уның яңынан яҡтырып киткән, нисектер, тынысланып ҡалған. Ҡиәфәтенә, төҫөнә әле булһа ҡартлыҡ ҡағылмаған. Ниндәй ныҡлы тоҡом, бирешмәҫ зат был?! Ул дүрт-биш йәшлек малай етәкләп алған. Баланы аҙ ғына алға уҙҙыра биреп, ҡыуанысын йәшермәй, әйтә һалды:

І у — Аҡйондоҙҙоң улы. Мәрәһим исемле.

Малай олатаһына шул тиклем оҡшаған — һуйған да ҡаплаған. Усман төбәгендәге йәш ерек үҫентеләре лә ошолай үҙҙәренең төп аталарына оҡшайҙар. Мин беләһенән генә өсөнсө быуын урман ғүмер һөрә.

Бына шулай. Күпме ташҡындар, әйләнмәләр, өйөрмәләр үтеп, Аҡйондоҙ үҙенең ярына килеп сыҡты. Әлбиттә, күңеле көткән теләге, йәштән йәне теләгән яры ошо булмағандыр... Хәйер, йәш сағында

ул ҡайҙа, ҡайһы тарафҡа барыуы, ниндәй ярға килеп һуғылыуы тураһында, бәлки, уйламағандыр ҙа. Теге ваҡытта уның бары бөгөнгө көнө һәм иртәгәне көтөүе генә бар ине. Шунан арыһы томанда ине.

■— Йыуанысым, таянысым ошо инде, — тип малайҙы үҙенә һыйындырҙы ул. Тегеһе, башын күтәреп, ике бөртөк фирүзә ташы кеүек күҙҙәрен Аҡйондоҙға төбәне. Моғайын, был малайҙы һөйгәндә лә уға аңлашылып уҡ бөтмәгән һүҙҙәр әйтеләлер: «Мәрәһим сатҡыһы — донъямдың яҡтыһы». Бәлки, һүҙҙәре бүтәнерәктер, ләкин асылы барыбер шулдыр.

Беҙ хушлаштыҡ, һәр кем үҙ юлына китте.

...Түш кеҫәмдәге хаттарҙың береһе былай башлана ине: «Минең ҡатынымдың үлеменә һеҙ сәбәпсе булдығыҙ».

## **ИКЕ**
## ХАТ

Ҡот осҡос приговор. «Эйе, уны мөхәббәтегеҙ менән, һеҙ һәләк иттегеҙ. Үлем ғазабы кисергәндә ул, гел һеҙҙең исемде әйтеп, һаташты, һушына килгән арала, хәле еткәнсе, һөйләргә тырышты. Мендәр аҫтынан алып, һеҙҙең хаттарҙы күрһәтте. Мин уларҙы уҡыным. Әүрәтеүсе иблес тоҙаҡтары ине улар. Ҡатынлы ир була тороп, һеҙҙең ирле ҡатынды яратырға ни хаҡығыҙ бар? Нисек баҙнат иттегеҙ? Кем бирҙе һеҙгә ундай хоҡуҡты? Ниндәй моралгә, кем моралenә һыя был?!.

Мин уны дауаланырға ебәрҙем, ә һеҙ һәләк иттегеҙ. Ишетәһегеҙме? Мин һеҙгә ләғнәт яуҙырам. Мин һеҙҙең хатты уҡып торғанда, Людмила әйтте: «Ҡәһәрләмә уны, — тине. — һеҙ икегеҙ ҙә минән тороп ҡаласаҡһығыҙ. Ҡәһәрләмә. Киреһенсә, минең үлемем һеҙҙе яҡынайтырға тейеш. Башыңды юғалтма». Ул ғазапланғанда минең һеҙҙә ҡайғым юҡ ине әле. Мин уны аҡылымдан шашып ярата инем. Бөтә донъяла бер ул ғына ине. Людмиланы июлдең егерме туғыҙында ерләнек. Йыназа бөткәс, ҡойоп ямғыр яуҙы. Яман йәшен булды. Үҙемде йәшен атыуын теләнем. Атманы. Ул да теләһә ни ваҡытта атмай шул... Төнгә саҡлы мин ҡәберенең аяҡ осонда ултырҙым. Ниндәй. бөйөк, ниндәй илаһи йән ине! Хәйер, ундай булмаһа, һеҙҙе лә шул тиклем үк яндырмаҫ ине... Шайтан алғыры! һеҙҙең яныуығыҙҙа минең ни эшем бар?! Онторға, һеҙҙе бөтөнләй оноторға теләнем. Булманы. Дарья саҡлы хәсрәтем һеҙгә булған нәфрәтте кәметмәҫме тип уйлағайным баштараҡ. Кәмемәне. Ҡайғыға нәфрәт килеп ҡушылды. Иң тәүҙә һеҙҙең, хаттарҙы, өҙгәләп, елгә



269-сы биткә. «Снаряд төшөп өҙгән урынды барып тап-
тым. Бейәләйҙәремде һалып ташлап эшкә тотондом».

осорҙом... Асыу баҫылманы. Мин һеҙҙе күрә алмайым. Мен ҡат ҡарғайым. Әгәр Людмиланы алып киткән чахотка һеҙҙе тиҙ арала быуып ташламаһа, мин һеҙҙән үс аласаҡмын. Әжәлдән ҡотолһағыҙ ҙа, минән ҡотола алмаясаҡһығыҙ. Аҡланыу ҙа, ярлыҡау ҙа юҡ һеҙгә! Ғүмер буйы баш осоғоҙҙа, үткер ҡылыс һымаҡ, минең нәфрәтем, минең янауым аҫылынып торасаҡ. Әҫтәгеҙгә ниндәй генә бәлә килһә лә, минең язам булыр ул. Ҡотолоу юҡ һеҙгә! Юҡ!!!»

Хәсрәттәре, ғазаптары эсенә һыймаған кеше бына шулай тип яҙғайны.

Ә миңә һуң, миңә ниндәй енәйәттәрем өсөн сыҡты әле был ҡаты хөкөм? Яҙыҡтарым шул тиклем үк ҙурмы икән ни?

Бына бәйнә-бәйнә һөйләп бирәм.

Әүәл әйткәнемсә, һуғыш бөткәс, минең үпкәләремде туберкулез кимерә башланы. Башта байтаҡ ваҡыт Румынияла Предял тигән ерҙә дауаланып яттым. Тау һауаһы, ҡарағай урманы, яҙ ҡояшы — бөтәһе лә минең ҡарамдкта ине. Ләкин шифаһы теймәне. Етмәһә, күрше палатала, кис булдымы, берәү йөрәк әрнеткес итеп йырларға тотона:

> Что стоишь, качаясь,
> Тонкая рябина,
> Головой касаясь
> До самого тына?..
> Там через дорогу
> За рекой широкой
> Тоже одинокий
> Дуб стоит высокий...
> Но нельзя рябине
> К дубу перебраться,
> Видать, сиротине
> Век одной качаться.

Мин үҙемде миләштең йәре — йылға аръяғындағы бахыр имән хәлендә хис итәм. Яңғыҙлыҡтан, һағыштан минең япраҡтарым һарғая, тамырҙарым ҡорой. Мин тамам ерһенем. Шуны күреп, врачтар мине тыуған илгә, Ҡырымға, күсерҙеләр.

Симферополдән Ялтаға беҙ госпиталь автобусында барҙыҡ. Төрлө поездарҙа төрлө госпиталдәргә килгән ауырыуҙарҙы башта, ҡысҡырып, вокзал майҙанына бергә йыйҙылар. Төш етеүгә генә ҡуҙ-

ғалып киттек. Борма-борма тау юлы, бөркөү һауа беҙҙе бик нык йонсотто. Алда ултырған йәш кенә бер ҡатын бигерәк тә ғазап сикте. Быуылып-быуылып ютәлләй ҙә уҡшырға тотона. Алуштала туҡталғас, уны күршеләре етәкләп алып сыҡты. Маңлайы борған аҡ сепрәк төҫлө ине, йэн әҫәре юҡ. Үҙе дер-дер ҡалтырай. Етмәһә, уңайһыҙланып, башын түбән эйә. Әйтерһең, ул ғәйепле.

— Тәрән итеп, күкрәгеңде тултырып тын ал,— тип кәңәш бирә бер майор.

— Тын алып булһа икән ул... Былай интркмәҫ тә инем, — тине ҡатын, үҙе тағы быуылып ютәлләргә кереште.

— Ҡапыл климат үҙгәртеү шулай итә инде, күнегерһең әле, — тип йыуатты беҙҙе ҡаршы алған сестра.

Алуштанан тиҙ үк китмәнек. Арыу ғына тын алдыҡ. Теге ҡатынға ла бер аҙ хәл керҙе. Юлдың икенсе яртыһында ул артыҡ яфаланманы. Хатта ара-тирә ойоп та киткеләне, буғай. Мин иң артта ултырам. Бөтәһен дә асыҡ ҡына - күрә алмайым. Шулай ҙа шәйләйем: урындыҡтың йомшаҡ артына ҡырыныраҡ ҡуйылған башы тыныс ҡына бәүелеп бара. Бынығы һәйбәт.

Ялтала тау яғындағы бер урам тупигенә килеп туҡталыу булды, автобустан халыҡ шыбырҙап ҡойола ла башланы. Йәшел вещмешоктар аҫҡан йәки сит яҡтарҙан ҡайтҡан ҡупшы саквояждар тотҡан хәрбиҙәр, ҡатырға сумаҙан күтәргән йәки ҡултығына төйөнсөк ҡыҫтырған ҡатын-ҡыҙҙар төрлө яҡҡа һибелде. Мин иң аҙаҡтан сыҡтым. Беҙҙең госпиталгә тиклем әле байтаҡ күтәреләһе бар икән. «Байтаҡ» тигәнем сирле кеше самалаған сама инде ул. Булһа, ике йөҙ аҙым булыр. Туҡтай-туҡтай барам. Бер аҙ үткәс, ҡараһам, өй күләгәһендә баяғы ҡатын сумаҙаны өҫтөндә ултыра. Мин уның тураһына еткәс, тағы туҡтаным.

- Миңә ҡарамағыҙ, атлағыҙ. Мин үҙ яйым менән барып етермен әле. Хәҙер миңә хәл керҙе инде, — тине.

Мин тәүтапҡыр уның йөҙөнә ентекләп ҡараным. Ул әйтерлек сибәр түгел ине, әммә оҙон керпекле ике ҡара күҙенә бөтә йыһан инеп батҡан тиһәм,

саҡ ҡына ла арттырыу булмаç. Ошо тиклем үк төпһөҙ, ошо тиклем үк һағышлы күҙҙәрҙе минең быға саҡлы ла, бынан һуң да күргәнем булманы. Йәнә ҡулдары. Оҙон бармаҡлы моңһоу ҡулдары иғтибарымды тартты. Уларҙы мин аҙаҡтан «аҡыллы ҡулдар» тип атаясаҡмын.

— Барығыҙ һеҙ, бара тороғоҙ...

Һиңә әйтеүе еңел. Ә бына мин шул саҡлы ла ғазаплы күҙҙәрҙән айырылып китерлек көстө ҡайҙан алайым?

— Мин булышайым һеҙгә. Сумаҙандарҙы алмаш-тилмәш илтәйем.

Ул көләмһерәп ҡуйҙы:

— Һеҙҙең дә ниндәйерәк бәһлеүән икәнегеҙҙе баянан бирле ҡарап торам...

— Һеҙгә булышһам, бәлки, көсөм артын китер.

— Мин әле ултырам. Миңә рәхәт. Ана, диңгеҙ ҙә күренеп тора.

—- Улайһа мин дә... — тип сумаҙаныма атланмаҡсы иттем.

— Ултырмағыҙ, барығыҙ, зинһар, китегеҙ.

Ғәжәп. Кеше уға ярҙам тәҡдим итә, ул эргәһенән ҡыуа. Минең аптырауыма яуап иткәндәй, әйтеп ҡуйҙы.

— Хәтерегеҙ ҡалмаһын. Мин һеҙҙе ҡыумайым. Үтенәм генә...

Сумаҙанымды күтәреп, мин китеп барҙым. Күпмелер ер үтеүем булды, ул тағы, тыны бөтөп, ютәлләргә тотонды. Мин әйләнеп ҡарарға баҙманым.

Ҡабул итеү бүлмәһендә лә байтаҡ йыуандым. Теге ҡатын килеп етмәçме тип көттөм. Үҙ палатама оҙатырға килгән сестраға ла: «Саҡ ҡына тын алайым әле», — тип ваҡытты һуҙҙым. Ләкин ул килеп етмәне. Күрәһең, бер-бер хәл булғандыр. «Их, һин!—тип әрләнем үҙемде. — Шундай хәлдә ташлап киттең кешене...»

Аҙна самаһы әлһерәп яттым. Тәүге көндәрҙә теге һағышлы ике күҙ юҡ-юҡ та минең күңелемде борсоп ҡуйҙы. Ләкин оҙаҡҡа барманы был хәл. Онотолдо.

Аяҡҡа баçып, тышҡа сыҡтым. Күрше корпус эргәһенән үтеп барғанда, ҡолағыма ҡатын-ҡыҙ тауышы килеп сағылды:

— Әй, капитан! Капитан!

Мин артыҡ иғтибар итмәнем. Юлымда булдым. Бөткәнме ни бында — хәрби госпиталдә капитандар.

— Капитан, мин һезгә өндәшәм бит! Юлдаш!

Ҡараһам, әлеге төпһөҙ ике күҙ. Ҡатын икенсе ҡатта тәҙрә төбөндә ултыра.

Миңә йән кереп килә инде. Тик тышҡа ғына сығармайҙар. Донъя һәйбәтме тышта?

— һәйбәт. Сығармағас, урлап ҡасайыммы һуң һеҙҙе? — тигән булдым. Хәлһеҙлектән үҙемдең теҙ быуындарым ҡалтырай.

- Күптән инде ҡараҡ көтөп ултырам. УрлЗғыҙ. Мин риза, — тип ике ҡулын алға һондо. — Башта анау тау түбәһенә күтәреп мендерегеҙ, унан диңгеҙ буйына алып төшөгөҙ. — Уның ирендәре йылмая, хатта көлә. Ә күҙҙәре тулы — хәсрәт.

— Теге көндө мин һеҙҙе приемный покойҙа көттөм, көттөм дә... Ташлап китеүем өсөн аҙаҡтан үкендем хатта... — тип аҡландым мин.

Нимә, һеҙ мине, был үҙе һикереп төшөр, тип көтәһегеҙме?

Мин уның эргәһенә күтәрелдем. Ул палатала яңғыҙы ғына. Күршеләре сығып таралышҡан, ахыры. Мин ингеләгәнсе, ул, тәҙрә төбөнән төшөп, койкаһына ултырған. Йөҙө тағы ағарған.

— Башта танышайыҡ әле. Миң Людмила исемле. Ә һеҙҙе «Капитан» тип кенә йөрөтөрмөн. — Ул күрешергә ҡулын һуҙҙы. Уның ҡулын ҡыҫыуым булды, шунда уҡ йөрәгем аша тетрәү уҙҙы. Ниндәйҙер бик мөһим, бик фажиғәле хәбәр һалғандай булды ошо ус, ошо бармаҡтар. Бынан һуң мин күп тапҡырҙар шәйләйәсәкмен; Людмиланың күҙҙәре генә түгел, ҡулдары ла бойоҡтар. Улар гел генә ауыр уйға батҡан төҫлөләр. Кеше ҡулдарының уйланыуын, хәсрәтләнеүен, килеп-килеп шатланыуын ошо яҙҙы мин тәүтапҡыр үҙем күреп белдем, үҙем күреп аңланым. Шул тиклем дә зирәк, шул тиклем дә һиҙгер ҡулдар булыр икән...

— Атыңды хәҙергә бәйләп ҡуй, батыр, хан ҡыҙының көйө тағы китеп тора, — ул юрғанын асмай ғына койкаһына ятты. — Ошо температура теңкәгә теймәһә... һеҙ ултырып тороғоҙ.

Ул бүтәнсә зарланманы ла, һуҡранманы ла.

Беҙҙең сир менән сирләүселәрҙән мин зар һүҙҙәрен, ғөмүмән, бик аҙ ишеттем. Ауыртыныу-һыҙланыу булмаҡас, күрәһең, ихтыяр бирешмәй, өмөт тиҙ үк ҡаҡшап бармай. Оҙаҡ ваҡыттарға больница биналарына ябылғанлыҡтан беҙҙең үҙ мөхитебеҙ, үҙ тормошобоҙ, үҙ мәшәҡәттәребеҙ барлыҡҡа килә. Бара торғас, беҙгә больница ҡапҡаһынан тыштағы тормош түгел, үҙебеҙҙең яҡтағыһы ысын булып күренә башлай. Тегендәге ығы-зығы юрамалға әйләнә. Сөнки ундағылар әле үҙ ғүмерҙәренең хәүефһеҙ ерендә ғәмһеҙ аҙашып йөрөйҙәр, кисә боҙғандарын бөгөн төҙәтә алалар, бөгөн ҡылған яҙыҡтары өсөн иртәгә яза кисерәләр, ә беҙ инде ғүмер яланының ситен, юлдың ахырын төҫмөрләйбеҙ. Беҙҙе ваҡтөйәк менән алдатып ҡына йыуата алмаҫһың. Шулай ҙа беҙ ышанабыҙ — һуңғы тамсының әле таммай тороуына, һуңғы япраҡтың әле өҙөлмәй ҡалыуына ышанабыҙ. Үлемгә дусар ителгән әҙәм, үҙ ҡеүәтен юғалта барған һайын, инерция көсөнә нығыраҡ буйһона.

...1942 йылдың яҙында беҙҙең бригада иртәгә һөжүмгә күсә тигәндә, фажиғәле, яман шундай хәл булды: ревтрибунал хөкөмө буйынса бөтә ғәскәр алдында бер дезертирҙе язаланылар. Башта уға урман аҡланында тар ғына йылға янында ҡәбер ҡаҙҙылар. Приговор иғлан ителгәс, енәйәтсене ошо ҡәбер янына баҫтырып аттылар. Ул туп-тура үҙ гүренә ҡолап төштө. Был ғәҙел һәм шәфҡәтһеҙ ваҡиғала мине иң тетрәткән нәмә — язалаусы залп яңғырағанға тиклеме булды. Яланаяҡ дезертирҙе йылғасыҡтың арғы яғынан алып килделәр. Конвойҙағы һалдаттар, итектәре менән һыуҙың күҙенә баҫып, сәпелдәтеп атлап сыҡтылар. Ә тотҡон аяғын сылатмаҫ өсөн йылғасыҡты аша һикерҙе. Ҡоро аяҡтары менән ул ни бары ун биш-егерме аҙым ғына атланы. Үҙ ҡәберенә еткәнсе генә...

Бына шулай: һуңғы аҙымына тиклем әҙәм аяғын сылатыуҙан ҡурҡа.

— Магнолия сәскә атһа, бәлки, юнәлеп тә китер инем. Магнолия сәскәһен ифрат яратам мин... Уны еҫкәп иҫергәнем дә бар, бәләкәй сағымда... — Ул бер талай күҙҙәрен йомоп торҙо. — Атайым мине ул саҡ Гурзуфтағы апайыма ҡунаҡҡа алып килгәйне.

Людмила йонсоно. Уны башҡаса ялҡытмайым тип, китергә булдым.

— Иртәгә тағы килермен... — тинем, урынымдан тороп.

- Бая тәҙрәгә менгәндә харап шәпле булыр кеүек инем дә, ҡапыл рәт китте. Кисерегеҙ инде.

— Мин һеҙҙе барыбер урламай ҡуймам, һаҡ булығыҙ.

— Мин әҙер торормон. Икенсе юлы ошо тәҙрә төбөнән эйәрегеҙгә үҙем генә һикереп төшөрмөн. Бында инеп йөрөһәгеҙ, мәшәҡәт тағы оҙаҡҡа һуҙылыр.

Ул хушлашырға ҡулын бирҙе. Усыма ҡыҫҡас та, әлеге бармаҡтар миңә ниндәйҙер шомло нәмә әйтте. Тойҙом, ләкин аңлап еткермәнем.

Мин иртәгеһен дә, аҙна буйына ла Людмила эргәһенә бара алманым. Үпкәмдән бик күп ҡан китеп, түшәккә йығылдым.

Инде мине сығармайҙар. Бер аҙ һушыма килгәс, эргәмдә ятҡан лейтенанттан магнолия япрағын өҙҙөрөп, Людмилаға сәләм хаты яҙып ебәрҙем. Япраҡка яҙылған хат бик йәтеш килеп сыҡты. *«Хөрмәтле синьора!* – тип башланым хатты.— *һеҙгә тәғәйенләнгән һүҙҙәрҙе мин, йәнһеҙ аҡ ҡағыҙға төшөрөп, кәмһетә алмайым. Уларҙы һеҙ яратҡан ағастың йәшел япрағына уйып яҙырға булдым. Был япраҡ һеҙҙең йөрәгегеҙгә әйләнһә ине лә, минең һүҙҙәрем шунда теркәлһә ине тип уйларға баҙмайым. Сөнки Һеҙҙең йөрәгегеҙҙе осло тимер менән сыйырға барыбер минең ҡулым бармаç ине. Һынан да бигерәк, ул йөрәккә инде бүтән ҡулдар бүтән һүҙҙәрҙе яҙып өлгөргәндер. Хөрмәтленән хөрмәтле синьора!! Һеҙҙең илаһи һынығыҙ алдында үҙем килеп теҙ сүгеү бәхетенә ирешә алмауыма ифрат дәрәжәлә үкенәм. Ғәҙеллек һәм матурлыҡ өсөн көрәш юлында көтөлмәгән ваҡ-төйәк бәләләргә әсрарға тура килде. Фон Тубер-кулез тигән королден әллә нисә миллион һөңгө күтәргән ғәскәре бер үҙемә ҡаршы яу асты. Ошо яу менән алышҡанда, ике яҡтан да байтаҡ ҡан ҡойолдо. Хәҙерге мәлдә алда торған ҡаты алыштар өсөн яңы көс туплап ятам. Әммә, ғәзиз синьора, һеҙҙең кескәй генә йомошоғоҙҙо ла оло итепЪбашҡарыу бәхетенә ире-*

*шергә минут һайын әҙермен. Ишара ғына яһағыҙ. Ишетәһегеҙме, минең арғымағым, һауа ярып, ҡалай кешнәй. Ишетәһегеҙме, синьора?!*

*Бойоҡ йөҙлө капитан...»*

Төштән һуң уҡ ышаныслы ҡулдар аша яуап килеп төштө.

*«Батырҙарҙан батыр, намыҫ ҡоло бойоҡ Капитан! Һеҙҙең ҡуш ҡанатлы арғымағығыҙҙың ғаләм ярып кешнәүен ете төн урталарында ишетәме н. Минең йөрәк япрағыма сыйып яҙған сәләм хатығыҙҙы алып уҡыным. Борсолмағыҙ, Капитан, һеҙ сыйғанда минең йөрәгем саҡ ҡына ла сәнсешмәне, киреһенсә, рәхәтләнеп торҙо.*

*Мин һаман да шул бейек-бейек һарайҙың бейек-бейек манараһында бикле көйө ултырам. Бына минең батырым килер ҙә ун ҡоласлы осло һөңгөһө менән тимер ишектәрҙе төртөп тишер. Шул саҡ мин ап-аҡ күбәләккә әйләнермен дә һауаға осоп сығырмын, оҙон көн буйына ғәмһеҙ уйнап йөрөрмөн. Көнө көн генә түгел, бөтөн бер ғүмер, имеш... Минең ғүмерем, шулай итеп, һеҙҙең ҡулда булып сыға, эскерһеҙ, сая Капитан. Һеҙгә кескәй генә үтенесем шул; ғүмер бирегеҙ миңә. Берҙе генә, бәләкәсте генә... Оло итеп башҡарығыҙ ошо кескәй генә йомошомдо. Әгәр Һеҙ шундай ғәйрәтле, шундай киң күңелле булмаһағыҙ, мин Һеҙҙе бындай ваҡ-төйәк менән бимазаламаҫ та инем. Ваҡыты еткәс, мин һеҙгә манаранан яулыҡ болғармын. Аҡ яулыҡ. Күҙәтеп торорғоҙ.*

*һеҙгә мәғлүм Людсения».*

Ниндәй хәтәр шаярыу! Был ҡатын әллә бөтә өмөттәрен өҙөп, бөтә ҡурҡыуҙарын ҡурҡып бөткән, әллә, киреһенсә, уға әжәл шауҡымы хәҙергә ҡағылып өлгөрмәгән. Уның хаты мине хәүефкә һалды. Минең шаярыуым, ахыры, урынһыҙ булып сыҡты. Кешене ул, ана, ниндәй уйҙарға төшөргән.

Әлеге магнолия япрағына икенсе көндө мин ошондай уҡ моңһоу-шаян хат яҙҙым, һарайҙың тимер ишектәрен тишер өсөн хәҙерге мәлдә һөңгө осон ҡайрап ултырыуымды әйттем. Уның аҡ яулыҡ

түгел, аҡлы-ҡыҙыллы яулыҡ болғауын үтендем. Ҡыҙыл төҫ минең дәртемде арттырыуын аңлаттым. Көн аша яуабы килде.

*«Бойоҡ йөҙлө шаян Капитан! Һеҙҙең пар ҡанатлы арғымағығыҙҙың кешнәүе көн һайын сағыуыраҡ ишетелә,* — тип әүәлгесә шаярып башлаған яуабын. — *Ул кеишәп ебәргәндә, мин бикләнгән һарайҙың диуарҙары ҡалтырап ишелергә тотона. Бына кем ул тауышы менән таш яра! Былай булғас, тиҙҙән ирекҡә сығырмын тип өмөт итәм... Мине барабан ҡағып ҡаршы алһалар ине. Мин барабан ҡаҡҡанды яратам...»*

Ошо арала Беренсе май байрамы килеп етте. Палаталағы минең күршеләрем байрам күрергә ҡалаға китте. Улар нығынып киләләр инде. Аяҡ өҫтөндәләр. Асыҡ тәҙрәнән, бөркөлөп, хуш еҫ керә. Магнолия сәскә ата башланы, тинеләр, әле кисә үк. Тороп тәҙрә эргәһенә барыр инем, хәл юҡ, башым әйләнә. Ятын торғанда былай арыу ғынамын да бит...

Юҡ, шулай ҙа ниәт итеп ҡарарға кәрәк. Пижама салбары өҫтөнән аҡ күлдәк кейҙем, сәсемде тараным, тумбочка өҫтөндәге ярты стакан емеш һыуын эсеп ҡуйҙым. Инде тәҙрә янына барып етерлек кенә дәрт тә, дарман да бар кеүек. Тороп бер-ике аҙым атлауым булды, һаҡ ҡына ишек ҡаҡтылар. Мин тауыш бирҙем. Ишек асылды. Бер бөртөк ҡыҙыл lәлә-тотҡан ҡул күренде тәүҙә, унан Людмила инде.

— Байрам ҡотло булһын, Капитан. Бына һеҙгә ҡыҙыл төҫ килтерҙем. Дәртегеҙ артһын.

Мин сайҡалып ҡуйҙым бугай. Ул килеп минең билемдән тотто. Карауатҡа табан алып китмәксе итте.

— Юҡ, былай ғына, һеҙҙе күргәс кенә ҡаушап ҡалдым мин, — тип аңлаттым хәлемде. — Әйҙә, тәҙрә эргәһенә барабыҙ.

Беҙ тәҙрә төбөнә килеп таяндыҡ.

— Ошо хәлендә шаян хаттар яҙа бит әле, — тип миңә байтаҡ ҡарап торҙо. Шул саҡ мин теге төпһөҙ ике ҡараңғы күлгә бер юлы баттым да ҡуйҙым.

— Мин бирешеп бармайым да ул... — тип мығырҙаным бары.

Ғәйрәт һәм өмөт алып, теге күлдәрҙән тиҙ үк ҡалҡып та сыҡтым. Шундай матур, йәш донъя күрәм. Ап-аҡ сәскәле магнолия ботаҡтары араһынан зәп-зәңгәр диңгеҙ күренә. Ҡайҙалыр түбәндә йыр ағыла. Бында тынлыҡ. Ни бары бер ҡош ҡына сырҡылдай. Беҙ әлегә үҙебеҙ йәшәмәгән донъяға ситтән ҡарап торабыҙ. Шулай ҙа һәйбәт.

— Минең һеҙгә бер төрлө лә байрам бүләгем юҡ бит әле,— тип бошондом мин. — Кисә егеттәр миңә лә бер шешә вино алып ҡайтҡайнылар. Әйҙәгеҙ шуны эсәбеҙ. Байрам беҙҙең өлөшкә лә тейәлерсе.

— Әйҙәгеҙ! — Людмила йәйләнеп үк китте. Аҡыллы ҡулдары менән хатта сәпәкәй итеп ҡуйҙы.

— Шуға өҫтәп, мин һеҙгә бер шиғыр ҙа уҡырмын...

— Улайһа беҙҙең табын батшалар мәжлесенә бәрәбәр буласаҡ!

Мин сос ҡына шешәне астым, һалдат таҫыллығы онотолмаған икән әле. Людмила башта бер стаканға һыу һалды ла, минең ҡулдағы ҡыҙыл ләләне алып, шуға ултыртты; унан, тағы ике стакан табып, тумбочкаға сәскә эргәһенә ҡуйҙы. Ултырыштыҡ. Мин вино ҡойҙом.

— Йә, нимә өсөн эсәбеҙ? — тинем мин.

— Байрам өсөн. Байрам мәңгелек нәмә ул.

— Мәңгелек нәмә былай ҙа йәшәр...

— Ә мәңгелек булмағаны барыбер мәңге йәшәмәй. Байрам өсөн! — Ул йылт иттереп стаканды алды. Беҙ сәкәштерҙек.

— Байрам өсөн! — тип ҡабатланым мин. Икебеҙ ҙә эсеп бөтөрҙөк.

Людмиланың йөҙөнә алһыулыҡ югерҙе. Төпһөҙ моңһоу күҙҙәренең төбөндә йәнле нурҙар сағылып ҡалды. Минең бөтә тәнемде талдырып рәхәтлек югерҙе. Күккә ашһам да, ергә һеңһәм дә — барыбер миңә хәҙер.

— Инде шиғыр уҡығыҙ.

— Юҡ әле, градусы етмәгән, — тип кәпәрендем мин. Шунда уҡ шешәгә үрелдем. Людмиланың аҡыллы ҡулы һаҡ ҡына минең югәнһеҙ ҡулымды тотоп алды.

— Етер, Капитан, — тип ялбарҙы ул. — Кескәй

генә шатлығыбыҙҙы өркөтмәгеҙ. Юғиһә беҙҙе ташлап китер ул.

Эйе, был мәлдә минең әсем тулы шатлыҡ ине. Күптән онотолған хозурлыҡ, ҡайҙалыр аҙашып йөрөгән ҡыуаныстарым кире әйләнеп ҡайтты. Мин үҙем генә бәхетле түгел, теләһә кемде бәхетле итә алам хәҙер. Минең ҡөҙрәтемдең сиге юҡ. Мин баш сайҡағанда күктәр тирбәлеп китә.

— Улайһа, рәхим итеп, тыңлағыҙ, мәрхәмәтле синьора!..

— Юҡ, кәрәкмәй, бөгөн шаярмайыҡ, капитан. Бөгөн ысынлап та күңелле, ысынлап та рәхәт миңә.

Мин мөхәббәт шиғыры уҡыным. Кеше йөрәгендә шытып, донъяға йәм биргән сәскәләр, шул уҡ йөрәктә оя ҡороп, йыһанға моң сәскән ҡоштар тураһында әйтелгәйне унда. Сәскәне мөхәббәт аттыра, ҡошто мөхәббәт һайрата.

Башын эйеп, оҙаҡ ҡына тынып торғас, Людмила миңә күтәрелеп ҡараны:

— Һеҙҙең эргәләге ҡатынға ышыҡтыр, йылылыр... Моғайын, ул бәхетлелер... Бәхетле булыр...

Мин ҡапыл айнып киттем. «Бәхет» һүҙе сәйер ҙә, шомло ла булып ишетелде. Ул һүҙҙең инде миңә лә, бынан алыҫта мине һағынып көткән кешемә лә ҡағылышы юҡ кеүек ине. Шул уҡ ваҡытта, йәшермәйем, «һеҙҙең эргәлә ышыҡтыр, йылылыр» тигәне мине иретеп ебәрҙе. Ундай һыйлы һүҙҙәр ир затына һирәк эләгә ул. (Тағы байтаҡ йылдар үткәс, эргәмдә атлап барған ҡатын шулай тип әйтәсәк: «Ә бит бынау ҡала тулы халыҡ минең ни тиклем бәхетле икәнде белмәй. Белһәләр, былай ашыҡмаҫтар ине, туҡтарҙар ҙа, һоҡланып, хайран ҡалып, миңә ҡарап торорҙар ине. Икәү урамдан уҙып ҡына барабыҙ, ә бәхетемдең сиге юҡ...» Бына ниндәй һүҙҙәр ишетәсәкмен мин! Эйе, бәхетле итмәйҙәр, бәхетле булалар ғына. Был хәҡиҡәт беҙгә үтә һуңлап килә.)

— Мине бигерәк ҙур үлсәү менән үлсәп ташланығыҙ,— тинем мин, уңайһыҙланып. — Уны бәхетле итеү хәлдән килерме һуң? Ғүмерлек эш бит был. Ә ғүмер тигәнең...

— Бәхет өсөн ғүмер түгел, миҙгел кәрәк... Ә һеҙ ғүмерле лә буласаҡһығыҙ, — тине ул, әллә

ҡасан билдәле нәмәне хәбәр иткәндәй, тыныс ҡына. — Һеҙҙең керпектәрегеҙ ҡыҫҡа. Күҙегеҙҙә өмөтһөҙлөктөң әҫәре лә юҡ. Тәүҙә кешенең күҙҙәре донъянан ваз кисә, унан — үҙе. Ҡана, бирегеҙ әле ҡулығыҙҙы.

Людмила минең һул ҡулымды усына алды.

- О-һо! Һеҙҙең ғүмер юлының осо ла, ҡырыйы ла юҡ,—тине.— Өс упҡын аша үтә, әммә өҙөлмәй. Ҡулығыҙ бәләкәс, ҡаҡса икән. Минең был иремдең ҡулдары ҙур, итләс. Ул бик көслө. Ә тегеһе, үҙ ирем, һеҙгә тартымыраҡ ине. Бөҙрә сәсе, маңлайы, ҡулдары, йылмайыуы... һуғыштың тәүге йылында .уҡ һәләк булды.— Минең ҡулымды нығытып ҡыҫып алды ул,— Ә һеҙ йәшәгеҙ! Йәшәгеҙ! Зинһар, йәшәй күрегеҙ!

Ҡапыл беҙҙең баш өҫтөндә аҡ шәүлә ҡалҡып сыҡты. Был — дыуамаллығы менән яманаты сыҡҡан, бөтә госпиталде айҡап-байҡап торған начмед Мария Аристраховна ине. Уны беҙ «Страховка» тип кенә йөрөтәбеҙ.

— Госпиталме был, шайтан алғыры, әллә ғашиҡтәр баҡсаһымы? Ҡайҙа барма, парлы-парлы тауистәр, ҡойроҡтары елпеүестәй, — беҙҙең вино шешәһен күреп алгас, ул оторо шашып китте. - Вино? Былар бөтөнләй • шартына килтергәндәр. — Ул Людмилаға төбәп екеренде. — Марш бынан! Хәҙер үк сығып китегеҙ. Ире уны дауаланырға ебәргән, ә ул бында ҡыҙарып бүртенгәнсе вино эсеп ултыра. Былайға китһә, һеҙҙе дауалауҙан беҙ баш тартасаҡбыҙ. Ниңә һеҙ урыныгыҙҙан тормайһығыҙ? Аяғүрә баҫырлыҡ та юнегеҙ ҡалманымы ни?

— Миңә екеренмәгеҙ. Минән баш тартһағыҙ, тартығыҙ, ләкин екеренмәгеҙ, — тине Людмила, урынынан тормай ғына. — Мин инде өркөүҙән уҙғанмын, Мария Аристраховна, быныһы һеҙгә мәғлүм.

Көтөлмәгән был өйөрмәнән мин ҡаушап ҡалдым. Ауыҙ асып, һүҙ әйтергә зиһенемде йыя алмайым. Ошондай мәғәнәһеҙ ҡырҡыу хәлдәрҙә оятһыҙ тупаҫлыҡ алдында ҡойолоп төшөү ғәҙәтем ғүмер буйына барҙы.

— Ни, Мария Аристраховна...—тип йығырҙайым.

Һеҙҙең менән һуңынан һөйләшербеҙ. Марш

түшәккә!—Мин ҡуҙғалманым. Ул яңынан Людмилаға ташланды.

— Нимә һеҙ, карета көтәһегеҙме? Карета подана! Рәхим итегеҙ! — Ул ишек яғына күрһәтте.

Людмила ашыҡмай ғына урынынан торҙо. Мин уға табан ынтылдым:

— Людмила!

— Йә, хуш булып тор. Мин тағы килермен, — ул начмедҡа әйләнеп тә ҡарамай, сығып китте. Шунда уҡ Мария Аристраховна ла юҡ булды. Беҙҙең байрам осланды.

Ә мин һуң, мин! Ниндәй меҫкен, ниндәй юнһеҙ, ниндәй мәсхәрәле хәлдә ҡалдым. Теге мәғәнәһеҙ, яуыҙ ҡатын, ауыҙ асып, тәүге һүҙен әйткәс тә, мин:

— Вон бынан, Мария Аристраховна! Вон! Людмиланы ла, үҙемде лә рәнйетергә һеҙгә ирек бирмәм! Марш! Марш бынан, медицина майоры Мария Аристраховна! — тип һөрәнләргә тейеш инем. Шап итеп өҫтәл һуғырға, эргәмдәге тумбочканы тибеп осорорға, иҙеүемде умырып йыртырға тейеш инем мин. һуңғы сиктә Людмиланы ишек төбөндә ҡыуып етергә лә, ҡулынан тотоп, кире урынына ултыртырға тейеш инем. Тейеш инем!.. Ә шуларҙың береһен дә эшләмәнем. Ебегән! Ҡурҡаҡ йзн! Мөртәт! Ә Людмила үҙен ниндәй ғорур, ниндәй юғары тотто. Бына ошондай кешеләр донъяга мәңгегә килергә тейеш тә бит...

Людмила иртәгеһен дә, унан һуц да килмәне. Хәбәр ҙә ебәрмәне. Күрәһең, минән күңеле ҡайтҡандыр. Шулай тейеш тә. Ул мине арғымаҡҡа атланған сая егет тип күҙ алдына килтерҙе, минән азатлыҡ көттө, бәләкәс кенә булһа ла ғүмер һораны. Ә мин ишәктән ҡолап төшкән юнһеҙ бер бахыр булып сыҡтым. Йәнәһе, мин уны, әжәлгә бирмәй, урлап ҡасасаҡмын. Ғәмәлдә, бер сәркәш бисәнән аралап ҡала алманым, битенә төкөрттөм. Хыянаттың бер төрө түгелме ни ошо? һабаҡ булһа ярай ҙа... Әйтергә кәрәк, киләсәктә тормош минән был бурысымды артығы менән түләтте. Алышҡа — биреш. Үпкә булмаҫка тейеш. Ә мин үпкәләп маташтым...

Сығып йөрөй башлағас та, Людмила торған корпус яғына барып әйләнергә йөрәгем етмәне. Гел

тиҫкәре яҡта уралдым. Бер көндө киске аштан һуң кескәй генә записка килде. «Ниңә шымдығыҙ. Капитан? һеҙҙе тышта күргәндәр. Килә алһағыҙ, килегеҙ!» Мин икеләнеп торманым. Киттем.

Ишектәре ярым асыҡ ине. Шулай ҙа шаҡыған булдым.

— Инегеҙ!

Людмила, бейек мендәргә һөйәлеп, койкаһында ярым ултырып тора. Уның йөҙө ал янған. Күҙҙәре тағы ла моңһоулана төшкән. Юрған аҫтынан сығарып, күрешергә ҡул һуҙҙы. Ҡулы ут кеүек ине.

— Мин һеҙҙе көттөм. Күрәһегеҙ, үҙем йөрөрлөк хәлдә түгелмен.

— Мин килергә оялдым. Шундай мәсхәрәнән һуң...

— Онотайыҡ. Ул минутта һеҙ түгел, бүтән кеше ине. Мин шулай хәл иттем. Ә бынıһы — һеҙ үҙегеҙ. Ултырғыс алып, эргәмә ултырығыҙ.

Мин ултырғас, ул, ҡулын күтәреп, оҙон бармаҡтары менән минең сәсемде тарап алды. Эйе, бармаҡтары минең сәсемде иркәләй, ә маҙаһыҙ, етем күңеле әллә ҡайҙарға китеп олаға. Уның күҙҙәренән бер нисә бөрсөк эре йәш тамды.

— Ғәфү итегеҙ. Мин үҙем өсөн түгел... Уның өсөн... Һеҙҙең өсөн... Белмәйем, бүләкме был әллә язамы? — Ул минең сәсемде услап алды лә ҡапыл ебәрҙе. Ҡулы аҡрын ғына юрған өҫтөнә шыуып төштө. — Ғәфү итегеҙ...

Эйе, был минутта мин бүтән берәүҙе алмаштырам. Минең сәстәрем, ҡулдарым, маңлайым, йылмайыуым үҙемдеке ге-нә түгел. Мин уларҙы икенсе кеше менән бүлешәм. Бәлки, киреһенсә, ул үҙ өлөшөн дә миңә ҡалдырып киткәндер. Бигерәк тә — йылмайыуын. Бәлки, мин уның өсөн дә йылмаямдыр?!.

— Исмаһам, һеҙ йәшәһәгеҙ ине. Оҙаҡ итеп йәшәһәгеҙ ине...

— һеҙ ҙә, Людмила...

— Мин тейерен йәшәрмен. Хатта аҙ ғына артығын да... Оҡшатыуыма хәтерегеҙ ҡалмаһын. Ул бик һәйбәт кеше ине. һеҙ алама әҙәм менән оҡшаш түгелһегеҙ.

- Ни тип әйтәйем? Иң хәйерлеһе — өндәшмәүҙер.

—• Рәнйенегеҙ, ахыры, өндәшмәҫ булдығыҙ.

Мин үҙем дә белмәйем, Людмила, яҡшымы был әллә насармы? Яҡшыға юрайыҡ.

— Шулай итәйек.

Йәш сылатҡан ике битен ул ҡул һырты менән тик әле генә һөртөп ҡуйҙы.

— Әйҙәгеҙ, күңеллерәк нәмәләр тураһында һөйләшәйек,— тине ул.

— Әйҙәгеҙ, әгәр ундай нәмә табып булһа.

— Ундай нәмә — бөтә донъя! — тип Людмила асыҡ тәҙрәгә күрһәтте. Ул кинәт юрғанын асып ташланы. — Артығыҙға әйләнегеҙ, мин хәҙер кейенәм.

— Ниңә?

— Тышҡа сығабыҙ.

— Ә температурағыҙ?..

— Температураны бында ҡалдырып торорбоҙ. Бер ҡайҙа ла ҡасмаҫ.

Ул тиҙ үк кейенеп алды. Мин уны кире һүреп маташманым. Барыбер файҙаһыҙ. Людмиланың ниндәйерәк заттан икәнен аҙыраҡ беләм хәҙер.

— Ҡулығыҙҙы бирегеҙ, бойоҡ йөҙлө Капитан.

— Рәхим итегеҙ, синьора Людсения.

Ул минең беләгемә таянды. Аҡрын ғына баҫҡыстан төшөп, өй алдына сыҡтыҡ.

Кешеләр киноға ашыға. «Минең хыял ҡыҙым» тигән трофейный фильм күрһәтәләр бөгөн. Мин уны былтыр Венала ҡарағайным. Ул картинала бер актриса бер-береһенә үтә оҡшаған ике ҡатын ролен башҡара. Үҙе менән үҙе ҡара-ҡаршы килеп һөйләшә. Шаҡ ҡатҡайным. Ана бит, хатта фильмдә лә кеше үҙе өсөн генә уйнамай, бүтән берәүҙәрҙең дә ролен башҡара.

— Бөгөн кино күрһәтәләр, — тинем мин.— «Минең хыял ҡыҙым» исемле.

— Ә беҙ анау эскәмйәгә ултырайыҡ та кис килгәнен ҡарайыҡ, эңер төшкәнен күрәйек.

— Эңер, миңә ҡалһа, юғарынан төшмәй, ер аҫтынан күтәрелә һымаҡ.

Людмила быға сабыйҙарса ғәжәпләнде.

— Ҡалай мәрәкә! Улайһа эңер күтәрелгәнде ҡарайыҡ!

Бик ҙур магнолия төбөндәге эскәмйәгә барып ултырҙыҡ. Магнолия әле сәскәһен ҡойоп бөтөрмәгән. Ләкин хуш еҫе элеккесә танауҙы ярып бармай. Йыуашайған.

Аяғөҫтө йөрөгән ауырыуҙар бөтәһе лә киноға инеп тулды. Тирә-яҡ тып-тын булып ҡалды. Ҡояш инде тау артына инеп йәшеренде, әммә ул сәсеп ҡалдырған нурҙар әле бирешмәй, үҙ эшен бернәсә дауам итә — йылытмаһа ла, яҡтырта. Ә тегендә, диңгеҙ аҫтынан тәгәрәп, ай сыға. Ул ҡып-ҡыҙыл. Ҙур тулҡынга тап булды, буғай, бәрелеп, өҫкә һикерҙе, һикерҙе лә кире төшмәне, һауала аҫылынып ҡалды. Ҡояшҡа алмашҡа килдем, уның урынын алдым, тип уйлайҙыр әле ул, бахырҡай. Ниңә ҡояш менән ярышырға инде? Үҙ вазифаһын тырышып, һәйбәт кенә башҡарһа, айға шул еткән.

Донъя ҡайһы мәл миңә саманан тыш ҙур һауыт һымаҡ тойола. Иртәнгә ҡарағанда кисен ул тағы ла һыйҙырышлыраҡҡа әйләнә. Бигерәк тә—-йәйге кистә. Ошо һауытҡа диңгеҙҙәр, тауҙар, урмандар, далалар, болоттар инеп юғала; хыялдар, өмөттәр, шатлыҡтар төшөп һыйына; иң төбөнә бөтә серҙәр батып йәшеренә.

Людмила менән беҙ — елдә елберҙәп ултырған ике үлән ҡыяғы ғынабыҙ. Беҙҙе ҡояш та, ай ҙа, диңгеҙ ҙә күрмәй. Ләкин улар ҡаршыһында беҙҙең бер өҫтөнлөгөбөҙ бар: беҙ һәммәһен дә шәйләйбеҙ, һиҙәбеҙ; донъяны үтәнән-үтә күрәбеҙ; бар ғаләмде күңелебеҙгә һыйҙыра алабыҙ. Бына һиңә үлән ҡыяғы! Шуға күрә беҙгә рәхәт тә, яманһыу ҙа. Беҙ тын ғына кис килеүен ҡарап ултырабыҙ. Беҙҙең тамашабыҙ — ошо.

Людмила үҙен егеттәрсә тота. Киске еләҫ һауа уға кәр өҫтәне. Ютҡереүе лә һирәгәйҙе. Минең ҡулымды алып, аҡрын ғына ҡыҫып ҡуйҙы. Ҡулы баяғы кеүек ҡайнар түгел ине.

«Рәхмәт», — тине аҡыллы ҡул. Ни өсөн рәхмәт әйтеүен аңлап еткермәнем.

— Донъя камил. Ҡарағыҙ, унда бөтә нәмә, бөтә еҫ, бөтә өй кәрәгенсә теп-теүәл. Тик бер генә нәмә етешмәй... — Людмила тәүтапҡыр көлөп ебәрҙе.

— Нимә етешмәй. Людмила?

—- Әйтһәм, көлөрһөгөҙ.

- Әйтегеҙ, көләйем. Бергәләп көләйек.

— Ебетелгән алма.

— Нимә, нимә?..

— Ебетелгән алма.

Ни өсөн хөрмә түгел, әлбә түгел, кишмиш түгел? — тип шаярып теҙеп алып киттем мин.

— Алма шул. Кәйефем һәйбәт, күңелçм бөтән, донъям теүәл саҡта миңә шул бер ебетелгән алма ғына етешмәй. Ни бары бер бөртөк алма... Бына әле лә шулай булып китте.

— Сәйер икән...

— Сәйер шул. Бер уйлаһаң, сәйер ҙә түгел. Сөнки уның сәбәбе бар. һөйләйемме?

—ч һөйләгеҙ.

— Минең әсәйем миңә ауырға ҡалғас, бер мәл ебетелгән алма теләгән, үлә яҙып теләгән. Йыл миҙгеле шундай тура килгән, таба алмағандар. Әсәйем ымһынып ҡалған. Шул ымһыныу ғүмерлеккә миңә күскән. Иң рәхәт сағымда ебетелгән алма теләйем. Иçәрлек инде — белеп торам. Үҙем нәфсемде тыя алмайым... — һүҙен ул ҡапыл икенсегә борҙо. — Мин төнгә ҡаршы, бына ошо мәлдәрәк тыуғанмын. Ә һеҙ ни ваҡытта?

— Мин иртәнсәк ҡараңғылы-яҡтыла тыуғанмын. Шуға күрә Оло инәйем ул йылды йомортҡа һалмай дуғаҙаҡ йөрөгән ала ҡаҙҙы — аҡлы-ҡаралы миҙгелдең төçө итеп миңә атаған. Минең бәхеттән теге ала ҡаҙ алдағы яҙҙы оя тултырып йомортҡа һалған, бәпкә сығарған, имеш. Әллә сығарған, әллә юҡ...

— Оло инәй тигәнегеҙ бабушкағыҙ буламы инде ул?

— Юҡ, Оло инәйем. Атайымдың өлкән ҡатыны. Уның бисәһе икәү ине.

— Ә-ә-ә, беләм, — тип һуҙҙы Людмила, шәриғәт! һеҙҙеке лә икәү булырмы икән? Кәрәкмәй. Икәүҙең береһе бәхетһеҙ буласаҡ. Йә икеһе лә... Хатта өçөгөҙ ҙә... Ә теге ала ҡаҙ, моғайын, яҙын йомортҡа һалғандыр, һеҙҙең ҡотоғоҙ бар. Мин уныһын башта уҡ һиҙҙем.

Ерҙән бөркөлөп сығырға ҡараңғылыҡҡа ай ирек бирмәне, шыйыҡ яҡтыһын таратып, донъяны үҙ ҡарамағыңа алды. Еләç кис аҡрынлап һалҡынса



292-се биткә. «Бәхетле булһа ла, бәхетһеҙ булһа ла, беҙҙең бала сағыбыҙ оҙон-оҙаҡ йылдар буйынса артыбыҙҙан эйәреп килә».

төнгә әйләнде. Мин Людмиланы өйгә инергә димләнем. Ул башта ҡарышып ҡараны ла тиҙ үк күнде. Сөнки, дәлил итеп, уның үҙ һүҙҙәрен ҡабатланым:

— Кескәй генэ шатлығыбыҙҙы йонсотмайыҡ. Юғиһә беҙҙе ташлап китер ул.

Мин уны палатаһына саҡлы уҡ оҙата килдем.

— Ғәжәп,—тине ул, — мин бөтөнләй арыманым. Киреһенсә, еңелһенеп киттем. — Күрешергә ҡулын һуҙҙы: —Хуш, мине онотма, — тине ҡул.

Ҡайтҡас, мин байтаҡ заман йоҡлай алмай яфаландым. Кино ҡарап килгән ике күршем, йәнәһе, мине уятмаҫ өсөн шым ғына сисенеп ятты. Тиҙ арала улар хырылдап йоҡлап та китте, һөмһөҙ ай, әҙәпте онотоп, бөтә бүлмәне байҡап йөрөй. Ҡағылмаған, һуғылмаған нәмәһе юҡ. Ултырғыс артына эленгән ҡайыш перәшкәһенә, гимнастерка төймәләренә хәтле ҡапшап сыҡты. Людмиланың йөҙөнә, маңлайына, ҡулдарына ла шулай төшәме икән? Етмәһә, уң ҡулында уның йөҙөгө лә бар. Күҙҙәре инде йомолғандыр, йоҡлайҙыр ул. Тыныс йоҡо һиңә, Людмила!

Ә ниңә минең үҙемдең йоҡом ҡасты? Ебетелгән алманың тәме, еҫе ниндәй икән? Мин уны ашау түгел, ғүмеремдә күргәнем дә юҡ. Моғайын, ул бик тәмле нәмәлер... Ҡасан һуң әле был ай, тап ошолай ҡыланып, миңә йоҡо бирмәгәйне? Теге саҡ малайҙар менән ҡалаға сәйәхәткә китер алдынан шулай тәҙрә төбөнә төшкәйне ул. Ләкин былай уҡ маҙамды алмағайны. Бәлки, һуңыраҡ, дәрт ташып, күңел ярһыған саҡтарҙа, булғандыр ай менән бындай осрашыуҙар. Булғандыр инде...бынан ары ла буласаҡтыр әле...

Мин иртүк тороп баҙарға киттем. Урамда әле кеше бик һирәк осрай. Бер өй тупһаһында төрөпкә тартып ултырған ҡарттан мин баҙарҙың ҡайҙалығын һораштым. Ул, төрөпкәһен ауыҙынан алып, ихлас өйрәтергә кереште. Ләкин шул тиклем яй, шул тиклем ентекләп һөйләй: ул төшөндөрә бара, мин онота барам. Ҡарт быны һиҙеп, буғай, яңынан тотона. Бара торғас, бер сама аңланым шикелле. Рәхмәт әйтеп, ары киттем. Икенсе урам сатында кәрзинкә күтәргән оло ғына ҡатынға тап булдым. Бһнаныслыраҡ булһын тип, унан да һораштым.

**— Баҙар ана бит,— ул эйәген сөйөп күрһәтте.— Танауың аҫтында.**

**Ысынлап та, баҙар «танау аҫтында» ғына булып сыҡты. Минең тәүге юл күрһәтеүсем саҡ-саҡ ҡына юлдан яҙҙырманы. Теләһә кемдән юл һораһаң, шулайыраҡ та килеп сыға шул.**

**Ҡарсык-корсоҡ баҙарҙа тоҙло ҡыяр/, кәбеҫтә, һарымһаҡ, кипкән өрөк: картуф бөккәне, эремсек, тағы бик күп нәмә һатып тора. Бындағы әйберҙәрҙең һәммәһе лә таныш миңә. Мин белмәгән, мин күрмәгән әйбер күҙгә салынмай. Бөтә рәттәрҙе .башта ҡарап, унан үҙемә кәрәкте һорашып сыҡтым. «Юҡ»тан башҡа яуап ишетмәнем. Ҡайһы бер йәшерәк ҡатындар шаяртып та алды:**

**— Был ҡорһағың ебетелгән алма теләйме ни?**

**— Теләү генә түгел, бола күтәрә,— тип раҫланым мин.**

**— Улайһа ҡыҙ тыуғанын көт тә тор.**

**— Яҙған булһа, арба тәртәһе лә шартлатып ата, ти.**

**Биҙрә, кәрзинкә, сумка күтәреп яңынан-яңы һатыусылар килә торҙо, мин рәттәр буйлап һораштыра йөрөнөм:**

**— Ебетелгән алма юҡмы?**

**— Юҡ.**

**— ...Юҡмы?**

**— Юҡ.**

**Ноҡот борсағы һатып торған мөләйем генә бер апай миңә үҙе өндәште:**

**— Баянан бирле ҡарап торам, һалдат, юкты эҙләп баҙарҙы биш ураның. Әжәл дарыуымы ни ул ебетелгән алма?**

**— Әгәр әжәл дарыуы булмаһа, шулай ҡаңғырып йөрөмәҫ тә инем. Мин уны үҙем ҡабып та ҡарағаным юҡ.**

**— Минең өйҙә сапсаҡ төбөндә бер нисә бөртөк ҡалғайны, буғай. Саҡ ҡына сабыр ит. Бынау дүртбиш стакан тауарымды һатып ҡына бөтөрәйем дә өйгә ҡайтырбыҙ.**

**— Миңә дүрт-биш стакан ноҡот борсағы ла кәрәк ине. Үҙем генә алайым да...**

**— Хәйләләмә, һалдат, һиңә борсаҡ кәрәкмәй.**

Юҡҡа аҡса әрәм итмә, былай ҙа муйының ҡыл кеүек. Бар, анау ағас күләгәһендә көтөп тор.

Мин күләгәгә киттем.

Тауарын әллә һатып бөтөрҙө, әллә юҡ, апай тиҙ үк минең эргәмә килде.

— Киттек.

Мин уға эйәрҙем. Бер аҙ барғас, ул шып туҡтаны.

— һи-и-и, үҙеңдең дә эштәрең мөшкөл икән. Ҡамытың ҡыҫа бит. Яйыраҡ барайыҡ.

Тар-тар урамдар, кәкере-бөкөрө тыҡрыҡтар буйлап, әле тегендә, әле бында боролоп, байтаҡ ара үттек. Тау сатлығына ҡыйшайып терәлгән фәҡир генә өй алдына килеп туҡтаныҡ. Ҡатын бәләкәй ҡапҡаның еп элмәген ысҡындырҙы.

—- Беҙҙең утарыбыҙ ошо инде.

—- Ниндәй булһа ла, үҙ ояғыҙ.

—• Үҙем ҡорған оя түгел шул, туғанҡайым. Етем ҡалған ташландыҡ оя ине, сараһыҙҙан килеп индек...

Нигеҙ ҡырындағы тәпәш ултырғыста бер ҡарсыҡ ултыра ине. Ҡапҡа шығырҙауға ул һағайып ҡалды.

— һинме был, Галина?

— Мин, әсәй.

— Аяҡ тауышыңды .әллә ҡайҙан уҡ ишеттем шул. Ҡунаҡ та бар, ахыры...

— Эйе, әсәй.

Өйгә ингәс, Галина миңә аңлатып бирҙе:

— Әсәйем бомба шартлауҙан шулай күҙҙән яҙҙы. Тегендә, Украинала, өйөбөҙгә бомба төштө. Бөтә донъябыҙ шунда күмелеп ҡалды. Ярай әле әсәйҙең ҡураға сыҡҡан сағы булған.

Галина, өйҙән сығып, һай тәрилкәгә ҡарайып, бөршәйеп бөткән өс түңәрәк нәмә һалып инде. Алмаға ла оҡшамаған.

— Бар байлығым ошо. Тәрилкәһе менән бирә алмайым, һауыт-һаба ҡытлығы.

Шкаф артына ҡыҫтырылған ҡаты һары ҡағыҙҙы алып алмаларҙы шуға төрҙө. Мин, бәхилләтмәксе булып, аҡса сығарҙым.

— Әжәл дарыуы өсөн беҙ аҡса алмайбыҙ. Хоҙайға шөкөр — беҙ украиндәрбеҙ,—• тип ояltты мине Галина,—ашаған кешегә шифаһы тейһен.

Был етем өйҙән өс бөртөк алма ғына түгел, әллә ни саҡлы күңел хазинаһы алып киттем. И кешеләр! һеҙ мәңгелек сер. Кемдә ниндәй йомарт рух ятҡанын бер ҡасан да алдан белеп булмай. Галина! Мин һеҙгә күҙ төбәйем, һеҙҙе күргәндән һуң минең мөһабәт һарайҙарҙа оло бүләктәр алғаным, ил уҙамандары ҡулынан маҡтау, дәрәжә ҡағыҙҙарын ҡабыл иткәнем, намыҫлы, ғәҙел, айыҡ ирҙәр ауыҙынан үҙемә ҡарата хуплау һүҙҙәрен ишеткәнем булды. Былар өсөн һәр ваҡыт ихлас ҡыуандым. Ләкин ул ҡыуаныстар, Г алина, һеҙ рәхим иткән хазинаның һәм шуға оҡшаш бүтән барлыҡ хазиналарҙың яҡтыһын да, йылыһын да томаламаны. Әгәр томалатырға ирек ҡуйһам, мин үҙ-үҙемде талаған, бөлдөргән булыр инем.

Баһа ҡуйһаң, баһаларға һыймаҫ мөлкәтемде күтәреп, мин госпиталгә -ашыҡтым. Әллә нисә тапҡыр аҙаштым, әллә нисә тапҡыр юлыма төштөм. Имен ҡайтып еттем. Туп-тура Людмила янына индем. Хәле уның һәйбәт күренә. Ыҫпай итеп кейенгән, күперелеп торған ҡара сәсенә аҡ таҫма бәйләгән. Ул йәшәреп киткән төҫлө. Ҡабарынҡы ирендәре бөтөнләй үҫмер бала иренենә тартым бөгөн. Ул тәҙрә эргәһендәге табуреткала нимәлер бәйләп ултыра. Балалар башлығы буғай. Ниңә балалар башлығы бәйләй икән?

Мине күргәс, ул, эшен ташлап, «бөгөн бына мин ниндәймен» тигәндәй, аяғүрә баҫты.

— Мннен ҡулда нимә икәнеп белһәгеҙ, үҙегеҙгә бирәм,— тип хәбәр һалдым мин, хәл-әхүәл һорашырға ла онотоп.

— Иҫәнмеһегеҙ!— тине ул.

Мин ҡаушап киттем: 5’’

— һаумыһығыҙ! Ғәфү итегеҙ.

— Әгәр белмәһәм,— ул минең ҡулдағы.төргәккә күрһәтте,— кемгә бирәһегеҙ?

— Белмәһәгеҙ ҙә, һеҙгә инде...

— Ҡалай мәрәкә!—«ҡалай мәрәкә»не ул күңеле күтәренке ваҡытта йыш ҡабатлай. — Үлһәм дә, беләсәгем юҡ. Мине йәшәтәһегеҙ килһә, күрһәтегеҙ тиҙерәк!

— Мәңге йәшәтәһем килә...

Мин ашыҡмай ғына төргәкте һүттем. Унан бөрөшөп бөткән баяғы өс йоморо нәмә килеп сыҡты.

— Алма? Ебетелгән алма?! Ярабби! Ниндәй кеше һеҙ?! Мин уларҙы һеҙ юҡта ғына ашармын,— төргәкте кире төрөп, ул тумбочка өҫтөнә ҡуйҙы.— Рәхмәт, Капитан! Был онотола торған бүләктәрҙән түгел.

Бәлки, был алмалар Людмилаға киҫәгенә хәжәт булғандыр. Ихтимал, бөгөн уларҙы ҡабып та ҡарамаҫ. Ләкин уның шатлығы ла, рәхмәте лә ихлас ине. Ҡайҙан, нисек табып килтереүемде ул төпсөнмәне. Бының үҙендә —бер күркәмлек, әҙәплелек, юғарылыҡ бар ине.

— йә, ултырышайыҡ.

Ултырғас, бәйләй торған нәмәһен ул тағы ҡулына алды.

—- Ҡыҙҙарыма башлыҡ бәйләргә булдым әле,— тип ябай ғына хәбәр итте ул.— Тәүге иремдән ике игеҙәк ҡыҙым ҡалды. Дүрттәре тулып килә. Береһе атаһына, береһе миңә оҡшаған, һәләк ирмәктәр.

Людмила бөгөн сабыр: бәргеләнмәй, өҙгөләнмәй, ҡулдары ла тыныс, хәсрәтһеҙ. Күҙҙәренә текләп ҡарарға мин һәр ваҡыт тартынам, шикләнәм. Моғайын, улар соңғолонда ла бөгөн дауыл баҫылғандыр.

— Минең дә дүрт йәшлек улым бар,— тинем. Шунда уҡ ҡолаҡ төбөмдә, әйтерһең, улымдың әле мин ауырымаҫ борон отпускыға ҡайтҡас әйткән һүҙҙәре яңғыраны. Муйынымдан ҡыҫып ҡосаҡланы ла ул: «Мин һинең бер үҙеңде генә бынан ары һис ваҡытта ла, һис ваҡытта ла һуғышҡа ебәрмәйем!»— тине.

— Ҡалай мәрәкә! һеҙҙекенә лә дүрт йәш. Теләһәгеҙ, мин уға ла башлыҡ бәйләрмен.

— Ул егет кеше. Инде кепка кейеп йөрөй.

— Кемгә оҡшаған?

Мин немец минаһының ярсығы тишкән комсомол билетенең эсенән алып, әсәле-уллы төшкән рәсем күрһәттем.

— Әсәһенә оҡшаған икән. Сибәр булыр. Мин ҡыҙҙарымдың һүрәтен үҙем менән алманым. Ҡараған һайын, әсем өҙөлөп, илармын тип ҡурҡтым.— Ул фотографияны ҡулына алды.— Ҡатынығыҙҙың

күҙҙәре аҡыллы. Матур ҡатындарға аҡылдың хәжәте юҡ, тип бушты һөйләйҙәр. Матур ахмаҡтан да аяныс нәмә юҡ. Тәбиғәттең иң ҙур хатаһы ул...

Бынан ары беҙ икебеҙ ҙә, юнәйеп, аяҡка баҫтыҡ. Тау яғына ынтылырға батырлыҡ етмәһә лә, көн эҫеһе баҫылған мәлдәрҙә, диңгеҙ буйына төшөп ултырғыланыҡ. Диңгеҙ эргәһендә Людмиланың күңеле, күҙгә күренеп, күтәрелә. Беҙ тулҡындарҙың шартлап сәсрәүен күҙәтәбеҙ, сәләмәт кешеләрҙең, дарья менән алышып, йөҙгәнен ҡарайбыҙ, алыҫта, офоҡ ярында төтәп барған караптарҙы бүлешәбеҙ: береһе уныҡы, береһе минеке, береһе уныҡы, береһе минеке... һәр ҡайһыбыҙҙың өлөшөнә байтаҡ тейә. Щул тиклем караптарыбыҙ була тороп, үҙебеҙ яр башында ултырабыҙ.

Хәлдәребеҙ арыуланғас, Людмила әллә минән һыуына төштө, әллә былай баҫалҡыға әйләнде: сәстәремде лә һыйпамай, күрешкәндә-хушлашҡанда ҡулдары ла бер ни әйтмәй. Улай тиһәң, саҡ ҡына күрешмәй торһаҡ, үҙе, тәҙрә алдына килеп, тауыш бирә. Мин дә уның эргәһенә барырға атлығып ҡына торам. Людмиланың күршеләре лә, минең күршеләр ҙә беҙгә инде айырылмаҫлыҡ ғашиҡтәр итеп ҡарайҙар. Ғашиҡ булышыу — сирҙең иң яманы икәнен аңлап, улар беҙгә теләктәшлек белдерәләр, беҙҙе ҡыҙғаналар. Хатта Мария Аристраховна ла беҙгә иғтибар итмәҫ булды. Киевтән килгән бер йәш подполковник кенә, бик тырышып, Людмилаға тоҙаҡ һалып маташты. Урамда күрһә, артынан эйәрҙе, киноға инһәк, мине бар тип тә белмәй, уның эргәһендә һырпаланды. Людмила торған палатаға минең алда ғына әллә нисә тапҡыр килеп ишек шаҡыны. Ләкин ауыҙы тиҙ беште тегенең. «Күрәһегеҙ бит, подполковник, мин капитан менән мауығам», — тине уға, үҙе аңламағас.

...Егерме биш йыллап ваҡыт үткәс, әлеге подполковник ниндәйҙер эш менән Өфөгә килеп сыҡты. Кешеләрҙән һорашып, мине эҙләп тапты, өйөмә килде, сәй эстек. Анау ваҡыт Людмилаға күҙе төшөү генә түгел, илереп ғашиҡ булыуын, ғүмер баҡый онота алмауын һөйләне. «Әллә ниндәй тылсымлы йән эйәһе ине шул. һеҙ бәхетле, һеҙ уның эргәһендә булдығыҙ... Ул яҙҙы һеҙгә ҡарата нәфрәтем-

деӊ, үсемдеӊ сиге юҡ ине. Ә хәҙер үҙем эҙләп таптым. Ниндәйҙер сихри көс етәкләп килтерҙе мине һеҙгә, йәнем бер йыуаныс алды -бына...» Ул күптән инде хәрби түгел икән. һүҙгә-ҡылыҡҡа сабыр, йыуаш күренә. Теге саҡта уны, күрәһеӊ, мөхәббәт кенә шундай ҡыйыу, сая яһаған...

Людмила өсөн мин хәҙер берәүҙе лә алмаштырмайым, үҙем генә -булып йөрөйөм. Шуға күрә мөнәсәбәттәребеҙ талғын, ипле. Етмәһә, мин уны, күреүгеҙсә, төрлө -ирҙәрҙеӊ һөжүменән, нәфселе ҡарашынан һаҡлаусы ҡалҡан хеҙмәтен дә башҡарам. Туҡта әле! Был ни мөғжизә? Баҡһаӊ, мин барыбер кемдеӊдер, нимәнеӊдер вазифаһын үтәйем икән: хәҙер бына ҡалҡан вазифаһын үтәйем...

Ҡайтыр ваҡыт та етте. Беҙ бергә китергә тейешбеҙ. Кистән байтаҡ тышта ултырҙыҡ. Теге ай бөтөп, инде бөкөрө генә, зәғиф кенә икенсе ай тыуған. Ул күктә түгел, магнолия ботағында аҫылынып тора. Үрел дә тот. Ләкин миндә уныӊ ҡайғыһы юҡ. Людмила бойоҡ. Әйтер һүҙҙәр ҡайҙалыр аҙашып йөрөй. Иҫтәлектәр һөйләшергә әле иртә, вәғәҙәләр бирешеү — ялғанлыҡ булыр ине. Тәүләп ул өндәште:

—- Рәхмәт, һеҙгә, Капитан.

— Нимә өсөн?

— Нимә өсөн икәнен айырып-ваҡлап әйтә белмәйем.— Ул минеӊ ҡулымды усына алды. Килке-килке ҡыҫып ҡуйҙы, ләкин ебәрмәне, «һин үҙен генә лә миӊә ҡәҙерлеһеӊ. Артығын әйтергә ҡурҡам...»— тине уныӊ ҡулы. Иәнә нимәләр өҫтәп ҡуйҙы, уныһын аӊлап еткермәнем.

Иртәнсәк еләҫтә юлға сыҡтыҡ. Автобус туптулы ине. Симферополгә имен килеп еттек. Людмиланы юл, бөтөнләй тип әйтерлек, йонсотманы. Беҙҙе вокзалдан алыҫ түгел бер йортҡа урынлаштырҙылар. Поезд кисләтеп кенә китәсәк.

Автобустан төшкәс тә бәләкәс кенә буйлы, өтөргө тешле бер һары лейтенант минеӊ тирәлә урала башланы. Нимәләр әйтергә теләне, ҡайҙалыр китергә ымланы. Уныӊ менән аӊлашып торорға әлегә ваҡыт юҡ. Сумаҙандарҙы индерергә, Людмиланы урынлаштырырға кәрәк ине.

Әйберҙәрҙе ҡуйып сығыуым булды, «өтөргә теш» минең алға килеп тә баҫты.

—• Лейтенант Уточкин! Леня Уточкин! Таныш булайыҡ!— Ул кинәт башын артҡа сөйҙө. Был мәл ул боғаҙындағы аҙығын йотоп ебәргән өйрәк балаһына оҡшап ҡуйҙы. Әгәр фамилияһын «Уточкин» тимәһә, уның был хәрәкәтенә, бәлки, иғтибар ҙа итмәҫ инем. *J.*

— Таныш булайыҡ. Капитан...

— Беләһегеҙме, капитан, кискә тиклем һыуһап үлергә мөмкин бит бында. Етмәһә, көн заяға үтә.

— Заяға үтмәһен өсөн ни эшләргә кәрәк?

—• Иртүк вино, эсә башларға кәрәк. Мин' ифрат йәтеш бер урын беләм. Киттекме?

'Был «һөнәр»гә тигәндә, минең дә тамаҡ ҡытҡылдап ҡына тора ул. Ымлаусы ғына булһын! Тик Людмилаға белдермәй кңтеү килешмәҫ.

—• Мин әйтеп кенә сығайым да...

— Ка-пи-тан!.— тип һуҙҙы Леня Уточкин.—■ Европаны азат иткән һалдат бит һин. Үҙ иркендең ҡәҙерен бел. Ниндәй рөхсәт һорап тороу тағы? Киттек!

— Ҡатын кеше унда...

—- Ҡатындар көтөргә тейеш. Анау йырҙа нимә тип әйтелә әле: «һалдаттар шарап эскәнде йәрҙәре көтөп тора...»— тип әйтелә. Йыр ул, брат, точно һөйләй.

Сибек кенә лейтенант мине өтөп бара. Ай-вайыма. ҡарамай, алып та китте. Уның был үтә әрһеҙ ҡылығына әсемдән ҡаршы төшәм, ә ғәмәлдә буйһонам, һис нәмә эшләй алмайым.

Леня Уточкин мине вино һата торған ҙур ғына аласыҡ эргәһенә алып килде. Аласыҡтың алғы ишеге бикле, тәҙрә ҡапҡасы ябыҡ ине.

— Быныһы һәйбәт. Аулаҡ буласаҡ,— тине юлдашым. Ул артҡы ишекте барып шаҡыны. Яуап булманы. Шунан Морзе азбукаһы буйынса туҡылдатырға тотондо. Ниндәй ҡөҙрәт менәндер ишек үҙе асылып китте. Беҙҙе ағас аяҡлы әрмән ҡарты ҡаршы алды:

-— Ә лейтенант? Әйләнеп тә килдегеҙме?

—■ Илгә ҡайтам, олатай, аҡ билет тотторҙолар. һинең ағас аяғың шикелле, ғүмерлеккә...

**4**

— Минең ағас аяҡ сыҙамлы булды, өшөмәне, һыҙламаны, үпкәм юҡ үҙенә. Нимә әсәһегеҙ?

— Нимә һәйбәт, шуны.

Башта беҙ берәр стакан әскелтем аҡ шарап эстек, унан татлы алһыуынан ауыҙ иттек, бара торғас, ҡыҙылына күстек. Кире аҡҡа әйләнеп ҡайтҡас, Леня Уточкин шап иттереп өҫтәл һуҡты:

— Мин бит генерал булыр өсөн тыуған кеше инем. Кавалерия генералы! Хәҙер — отставной лейтенант... Буш гильза...

—■ Иҫән ҡалыуыңа, йәшәүеңә шөкөр ит, иҫәүән,— тип орошто уны хужа ҡарт.

— Тиреҫ ҡорто ла йәшәй ана! Түшемде ҡаплап торған бынау хәситәмде көтөүсе сәкмәненә тағайыммы ни?— Ул ҡулының ҡыры менән түшен һыпырып алды. Күкрәк тулы орден, миҙалдары сылтырап ҡуйҙы.— Егерме өс йәшеңдә хыялдарың менән хушлашыу еңел түгел. Ой, еңел түгел!..

Мин арыу ғына иҫерһәм дә, Леня Уточкинде аңларлыҡ, хатта ҡыҙғанырлыҡ хәлдәмен. Беҙ икебеҙ, гүйә, ике донъяла, ике заманда йәшәйбеҙ. Уның өмөттәре артта тороп ҡалған, ә минекеләр, иҫән булһам, әле алда. Баяғы тәүәккәл, ғәмһеҙ, шуҡ лейтенант ҡайҙа булды һуң? Бынылы бөтөнләй бүтән кеше бит. Күрәһең, ул үҙенең ғазаптарын, әрнеүҙәрен тыштан ялтырауыҡ ҡабыҡ эсендә йәшереп йөрөтә. Нимә тип йыуатайым? Мин тәүтапҡыр бындай хәлгә осраным. Беҙ, иҫән ҡалғандар, әрмән ҡарты әйтмешләй, йәшәүебеҙгә шөкөр итәбеҙ. Ә Леня Уточкингә был ғына аҙ.

Шуныһы сәйер: лейтенант зарҙарын ошо урында шып туҡтатты, ҡабат үҙенең ялтырауыҡ ҡабығын кейҙе. Беҙ, донъябыҙҙы онотоп, типтерергә тотондоҡ. Әрмән бабайынан һуң, ниндәйҙер вино мөгәрәбенә инеп, тағы берәр кружка түңкәрҙек, унан баҙарға барып сыҡтыҡ, ҡайтышлай вокзал буфетенә һуғылдыҡ. Бында ҡолас йәйергә өлгөрмәнек, кемдер минең еңемдән тотто.

— Капитан!? Мин һеҙҙе бөтә ҡаланы ҡыҙырып эҙләйем. Ҡоттарым осто. Иҫән... Ярай иҫән!

Мин күтәрелеп ҡараным, ләкин өндәшә алманым. Тел әйләнмәй, аңҡауға йәбешкән.

— Хоҙайым! Ниндәй көнгә төшкән...

Тәүҙә буфет кәштәһендәге шешәләр, унан тәҙрәләр, стеналар сайҡалып китте. Улар ауып төшөртөшмәҫтән, йорт үҙе әйләнергә тотондо. Бөтә нәмә әйләнә, тик төпһөҙ ике ҡара күҙ генә ҡымшанмай, үҙ урынында тора. Мин иреп юғала барам, юғала барам. Юҡ, иремәйем, батам, һеңәм. Ошо ике күҙ мине үҙенә йота.

Мин нимәлер дыңғыр-дыңғыр килеүҙән уянып киттем. Вагонда барабыҙ икән. Маңлайымда дымлы сепрәк. Уны кемдеңдер ҡулы баҫып тора. Таныйым мин ул ҡулды — Людмила. Кисәге көндөң иҫерек мажаралары кинәт күҙ алдыма килеп баҫа. Мин ҡурҡып күҙҙәремде йомам. Ә ул күренештәр торған һҙйын асығыраҡ, мәсхәрәлерәк төҫ алалар. Күҙҙе сытырҙатып йомоп ҡына, хурлыҡтан ҡотолоп булмай шул.

— Һыу әсәһегеҙ киләме?

— Килә.

Ҡулын елкәмә ҡуйып, ул минең башымды күтәрҙе. Ҡулдары эҫе. Әллә аҙ ғына ҡалтырайҙар ҙа инде...

— Мөмкин булһа, көсөгөҙҙән килһә, кисерегеҙ мине, Людмила.

— Ваҡ-төйәкте ҡуйып торайыҡ. Мә, әсегеҙ, һаҡаллы сабый, һулышығыҙ туҡтай ҙа ҡуя, туҡтай ҙа ҡуя биг. Шул тиклем ҡурҡтым... Әсегеҙ инде!— Стаканды ул үҙе тотоп эсерҙе.

Өҫтәге һәндерәнән кемдеңдер ҙур арыҡ аяғы һәленеп төшкән. Ул вагон көйөнә аҙ ғына бәүелеп бара. Әрмән ҡартының ҡырҡылған аяғын аҫып ҡуйғандармы әллә? Моғайын, шулдыр... Тамам һаташам, аҡылдан яҙам бит инде!

— Мин һаташам, ахыры, Людмила.

— Хәҙер һаташмайһығыҙ инде. — Ул минең башымды йәнә мендәргә төшөрҙө.— Йоҡлағыҙ!

— Һеҙ ҙә...

— Мин дә йоҡлармын.

Төн буйы Людмила мендәргә баш та терәмәне. Нисә уянһам да, шул бер хәлдә, минең маңлайыма дымлы сепрәк баҫҡан көйө, ултыра ине. Таңға табан хәлем арыуланды. Людмила ла, сисенмәй генә ятып, ойоп китте. Ғүмеремдә тәүге һәм һуңғы тапҡыр мин уның йөҙөнә, оҙаҡ итеп ҡарап торҙом. Оҙон

керпектәренә, аҙ ғына ҡабарынҡы ирендәренә, киң маңлайына, күпереп торған ҡара сәсенә, кескәй генә ҡолаҡтарына танһығым ҡанғанса ҡарап ҡалдым. Минең ҡараштарымды һиҙеп, буғай, ул күҙҙәрен асты.

— Нимә, Капитан? Ниңә шул тиклем текләп ҡарайһығыҙ?

— Айырылышабыҙ бит. Аҙаҡ бик ҡарарҙай булырмын да...

—• Ваҡытынан элек бойоҡмағыҙ. Алда — башланмаған көн бар. Йылдың иң оҙон көнө — 23 июнь.

Бынан да ҡыҫҡа, бынан да тиҙ үткән көпөм булмағандыр. Саҡма саҡҡан шикелле, сағылып ҡына ҡалды. Үҙебеҙ менән бер купелә барған кешеләрҙе лә, тәҙрә аръяғында тороп ҡалған йәйге йәшел донъяны ла шәйләргә өлгөрмәнем. Ул көн — Людмиланың күҙҙәрендә генә ине. Күҙ асып йомоуы булды — янды ла һүнде көн.

Төнөн беҙ Сталинградҡа килеп еттек. Поезд бында ярты сәғәт тора. Людмила, ошонда төшөп, Ростовҡа китәсәк. Уны ире ҡаршыларға тейеш. Беҙ, нәмәләрҙе алып, вагондан сыҡтыҡ. Ҡойоп ямғыр яуа. Людмиланың ирен көтәбеҙ. Беҙҙең эргәгә килеүсе юҡ. Моғайын, биш минут, ун минут үткәндер. Торабыҙ, һөйләшергә һүҙ юҡ. Тиҙҙән башҡа кеше менән башҡа һүҙҙәр һөйләнеләсәк.

Ә ул юҡ та юҡ. Юҡты көтмәҫкә, вокзалға инергә булдыҡ. Вокзал тигәне байтаҡ ситтә торған таҡта бина булып сыҡты. Людмиланы шунда илггем. Болдорға еткәс, ул хушлашырға ҡулын бирҙе:

— Хуш, Капитан, бәхил бул... Хат яҙ. Берҙе генә...

Мин уны сумаҙаны-ние менән ишек төбөндә ҡалдырҙым. Эскә индереүемде теләмәне. Мин поезд эргәһенә ашыҡтым. Тыным ҡыҫҡылап туҡтайым да йәнә югерәм. Ямғыр көсәйгәндән-көсәйә бара. Етмәһә, елләп тә ебәрә. Мин үтәнән-үтә сыландым. Перронға еткәс, үҙебеҙҙең составты күреп, тынысландым. Аҙыраҡ туҡтап хәл алдым. Ҡапыл, ямғыр шауын баҫып, буш перронда ҡеүәтле тауыш яңғыраны; ул тауыш шундай хәүефле; был ҡараңғы

хәтәр төндә ул йә үҙе аҙашҡан, йә аҙашҡан берәүҙе эҙләй булырға тейеш. Кемде саҡыра ул?

— Людмила! Людмила Соколова, ҡайҙа һин? Людмила!!

Ул минең арттан составтың ҡойроғона югереп үтте. Мин уға әйләнеп ҡараманым. Ваҡытынан һуңлаған ошо тауыш, ямғыр эсенә инеп батҡансы, бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатланы:

—• Людмила Соколова, ҡайҙа һин?! Людмила! Людмила Соколова!

Был саҡырыу минең йөрәгемде телеп үтте. Поезға ултырғас та, төшкәс тә, ятҡас та, торғас та ҡолағымда һәм күңелемдә шул ауаз яңғыраны. Хәҙер инде мин үҙем һөрәнләйем, аҙашҡан йәнем үҙе саҡыра: «Людмила Соколова, ҡайҙа һин?!» Яуап юҡ.

Мин уға бер-бер артлы ике хат яҙҙым. Мөхәббәт хаттары ине улар. Людмиланың көндәре һанаулы икәнен дә беләм, тойғоларымдың фажиғәле икәнен дә аңлайым, һүҙҙәремдең йыуанысһыҙ икәнен дә күрәм, шулай ҙа яҙам. Сөнки янам. Бәлки, хаттарым уға әжәле алдынан ғына барып етер, бәлки, уның аҡыллы ҡулдары был ҡағыҙға ҡағылып та өлгөрмәҫ, шулай ҙа яҙам. Сөнки әле мин теремен:

Хаттарым барып өлгөргән. Яуап килде.

*«Ҡәҙерле кеше!*

*Яҙыуыка ҡарап, һиҙерһегеҙ, бармаҡтарым миңә буйһонмай. Хәрефтәрем таралып тора. Шулай ҙа яҙам. Мин бары шуны ғына әйтергә теләйем: мин һеҙҙе, инде һеҙҙе үҙегеҙҙе яратып үләм. Симферополдәге сағығыҙҙы түгел, Ялталағы сағығыҙҙы яратам. Юҡ, дөрөҫ түгел! Бүлеп-айырып ваҡлашыу – дөрөҫ түгел. Мин һеҙҙең бөтә үткән ғүмерегеҙҙе, бөтә ҡалған ғүмерегеҙҙе яратам... Әле мин апрель уртаһында ук донъя менән бәхилләшергә тейеш инем. Теге сак, автобустан төшкәс, мин сумаҙаныма ултырып диңгеҙ менән хушлаштым, тауҙар менән һаубуллаштым, һеҙ килеп туҡтаныгыҙ. Мин, яфаланыуымды күрһәтмәҫ өсөн, һеҙҙе ҡыуып ебәрҙем. Ҡыуып ебәрҙем дә үкенеп ҡуйҙым. Юҡһынып ҡалдым. Шөкөр, яңынан тап булыштыҡ. Беләһегеҙме, Һеҙ нимә эшләнегеҙ1? һеҙ миңә өс ай, тулы өс ай*

*ғүмер бүләк иттегеҙ. Үпкәләрем бөткәйне, йөрәгем көрсөккә килеп терәлгәйне. Өс ай буйы мин мөхәббәт иҫәбенә йәшәнем. Өс ай буйы мине әжәлдән һаҡлап торҙо ул. Элегерәк осрашһаҡ, бәлки, еңер ҙә инек. Һуң, һуң, һуң ине шул... Быныһы өсөн дә Һеҙгә, яҙмышҡа рәхмәт. Шатланмаған шатлыҡтарымды, ирешелмәгән бәхеттәремде һеҙгә ҡалдырып китәм. Минең өсөн дә шатланығыҙ, минең өсөн дә бәхетле булығыҙ. Бойоҡмағыҙ...*

*Людмила.»*

Гимнастерка кеҫәмдәге икенсе хат бына ошо ине.

Кем устарына башымды һалайым икән? Оло инәйемдең йомшаҡ, йылы ҡулдары күптән һыуында шул. Уның мәңгелек ҡара юрғаны өҫтөнә берсә йәшел, берсә һары, берсә аҡ япма ябыла. Унда ла миҙгелдәр алмашына...

## ОЛО ИНӘЙЕМ ХУШЛАША

Зирәк кешеләр әжәлдең дә ниндәй көндә, ниндәй сәғәттә килерен беләләр, ахыры. Минең Оло инәйем һуңғы йылдарҙа сырхауыраҡ булды. Эс-бауыры маҙа бирмәне. Йәйен-ҡышын тиерлек йә андыҙ тамыры, йә әрем ҡайнатып эсте. Ул әрем һыуы ауыҙға алырлыҡ түгел, һәләк әсе. Оло инәйем сырайын да һытмай эсә шуны. Сиренән дә, әрем әсеһенән дә зарланманы ул. (Кемгә зарланһын? Йортта ул иң өлкән кеше. Уның үҙ хәсрәте лә, хәстәре лә, хатта сире лә юҡ. Уның ауырыу ере һыҙламай, бешкән ере әрнемәй. Бүтәндәрҙеке генә әрней. Ул эскән әрем дә әсе түгел, бүтәндәргә генә әсе... Әлбиттә, быларҙы мин һуңыраҡ аңлаясаҡмын.)

Кискә ҡаршы талғын ғына күбәләк ҡар яуа башланы. Тәүге ҡар. Оҙаҡҡа һуҙылған ҡара көҙ күҙ алдында ап-аҡ ҡышҡа әйләнә. Иыл миҙгелен үҙгәртеү өсөн ана нимә генә — ҡар болотоноң ер өҫтөнән бер елпенеп үтеүе генә — кәрәк икән. Бары шул ғына, ләкин ошо аҡ донъя күҙ асып йомған арала яңынан сөм-ҡараға ла әйләнә икән. Бынаһын да мин үҙем күреп кисерҙем.

Һауала беренсе ҡар күҙәнәктәре бәүелешә башлаған мәлдә Оло инәйем түшәккә ятты. Элек гел эске яҡтағы иҫке өйҙә бала-саға менән бергә ғүмер иткән кеше урынды Кесе инәйемдән урам яҡтағы ҙур өйгә һалдырҙы. Ятыр алдынан ул сәскәле яңы күлдәген, тәңкәле йәшел камзулын кейҙе, башына ап-аҡ яулыҡ бәйләне. Сәлих ағайым менән икебеҙҙән үлемтек һандығын үҙ янына сығартты.

«Үлемтек һандығы» нимә, тиһегеҙме? Ифрат серле нәмә ул. Әбей кешеләр, үҙ әжәлдәрен алыҫтан

уҡ ҡаршылап, хәлдән килгәнсә яйлап ҡына үлемтек туплай. Үҙе өсөн кәфен, кәфен тегергә энә-еп, кәфен эсенән кейҙерелә торған әхирәт күлдәге *,үҙен йыуырға һабын, үҙенә һибергә хушбуй һәм башҡа йыназа кәрәк-яраҡтары әҙерләй. Былыһы — һандыҡлағы мөлкәттең кескәй бер өлөшө генә. Ундағы төп хазина — мәрхүмдең терeләргә таратыласаҡ бүләктәре. Әлбиттә, тереләргә ул үҙ ҡулы менән өләшә алмай. Уның исеменән бүтән берәү өләшә. Иҫ китерлек йола инде: әҙәм гүргә керә, ә үҙе, туйға килгәндәй, бүләк тарата. Беҙ күтәреп килтергән һандыҡта Оло инәйемдең ана шул байлығы ине. Тос булып сыҡты. Байтаҡ тупланған.

— Мин оҙаҡ юлға йыйынам, Вазифа, ике-өс көн генә ошонда яңғыҙым ятып хәл алайымсы... — тине ул, яҫтығына башын терәгәс.

Минең йөрәгем жыу итеп китте. Бөтәбеҙ ҙә ҡаушап ҡалдыҡ. Нимә был? Әллә Оло инәйем алмашына башланымы? Улай тиһәң, күҙҙәре тыныс, яғымлы тик бер аҙ йонсоуҙар гына.

—• Хоҙайым, аталары ла өйҙә юҡ бит, исмаһам! Әллә Сәлихте артынан ебәрәйекме икән? — тип үрһәләнде Кесе инәйем.

— Ҡайтып етер. Әле тиҙ үк түгел. Тейешле мәшәҡәттәрҙе лә башҡарып өлгөрөрбөҙ.

Ысынлап та, нимә һуң әле был? Оло инәйем бит ҡот осҡос һүҙҙәр әйтте, ә тауышы, ҡылығы шундай, әйтерһең, ул көн дә киске сәй ваҡытында һөйләнә торған ғәҙәттәге хәлдәрҙе генә хәбәр итә.

Күңелемдән тәүге өнһөҙ һыҡтау бәреп сыҡты, ә аңым ҡурҡынысты ҡабул итмәй, уға ышанмай. Бына шулай, күктең бер яғынан дауыллап, йәшенләп килгән ямғырҙы икенсе яҡтағы ҡояш башта иҫәпкә алмай, ләкин, күпмелер ваҡыт үткәс, ҡояш үҙе ҡара болот аҫтында тороп ҡала. Өҫтөнә емерелеп килгән афәт минең зиһенемде томалап ҡына өлгөрмәгән әле.

Атайым ҡалала. Мортаза ағайым колхоз өсөн Уралда ағас ҡырҡа. Ирҙәрҙән өйҙә Сәлих ағайым да мин генә.

* Әхирәт күлдәге — әхирәткә (ожмахҡа) кейеп инә торған күлдәк.

— Уландарым, килегеҙ әле, — тип Оло инәйем беҙҙе үҙ эргәһенә саҡырып алды.— һеҙҙең икегеҙгә лә үтенесем бар.

Беҙ, ахыры, баштарыбыҙҙы үтә ныҡ эйгәнбеҙҙер.

— Баштарығыҙҙы былай эймәгеҙ. Сабыр булығыҙ. һеҙгә йомош күп төшәсәк был арала.

- Беҙгә, ни, Оло инәй, йомошоңдо ҡушып ҡына тор. Беҙ, ни, ул жибы-жибы ғына... йомош, ни, ул булһын ғына, Оло инәй... — Ҡаушай-ҡаушай әйтә һалды Сәлих ағайым.

— Үҙем кендеген киҫкән балаларҙы күргем килә. Иртәгә шуларҙы йыйығыҙ. Утыҙ көнлөгөнән алып утыҙ йәшлегенә тиклем йәммәһе лә килһен'—Уның тауышында бойороу яңғырап ҡалды. — һәммәһе лб! Өйҙән-өйгә йөрөмәгеҙ, хәбәр генә таратығыҙ.

Хәбәрҙе ә тигәнсе ауылға таратып ебәрҙек. Кәрәк кеше үҙе белер,-, белмәгәненең атаһы-әсәһе төшөнөп алыр. Шулай ҙа ғәжәп хәл был, сәйер тамаша. Оло инәйем юҡ менән булмаҫ. Күрәһең, шулай кәрәктер.

Үҙ теләге менән Оло инәйем төнөн яңғыҙ ҡунды. Урында көйө генә иртән бер сынаяҡ сәй эсте. Бүтән ризыҡ ҡапманы. Мин инде малдарға аҙыҡ биреп аҫтарын таҙартып индем. Ҡар туҡтағайны. Шыңғырҙап торған салт аяҙ көн тышта. Көндөң аяҙлығы, саф сабыйлығы, күктең зәңгәр ғәмһеҙлеге беҙҙең өйҙәге хәлдәргә һис тә тура килмәй. Донъя үҙ алдына, беҙ үҙ алдыбыҙға көн күрәбеҙ.

Эске өйҙә сәй урыны йыйылып бөтөр-бөтмәҫтән, беҙгә кеше ағыла башланы. Тәүҙә, имсәк балаһын күтәреп, суйын ҡара йәнә дүрт малайын эйәртеп, Ҡара Йомағол бисәһе килеп керҙе. Өлкән игеҙәктәре Хәбибулла менән Хисбулланы мин беләм. Улар инде мәктәпкә йөрөй. Икенсе игеҙәктәре, тағы иң бәләкәстәре, минең ҡатнашлыҡтан тыш тыуған малайҙар. Быларын белмәйем. Йомағол себештәренең артынса уҡ ишектән Өс әтәс урамындағы Ҡәҙерғол ҡарттың ҡоҙғон танаулы Ишмырҙаһы суҡышын һондо. Әсғәт менән Хәмитйән мөйөшкә һыйынды. «Бейек-бейек ыҙмала йәштәр түгә» торған Фәриҙә, кереп, мейескә һөйәлде. (Ул инде тамам еткән ҡыҙ. һылыулығына хайран ҡалырлыҡ, ләкин әле берәүгә лә күҙ һалмай, һалһа, һиҙелер ине...) Бәләкәс ҡус-

"I

тыларын йә һылыуҙарын етәкләп, йәки күтәреп алған үҫмер малайҙар, үҫмер ҡыҙҙар һаман килә бирҙе. Ирле-ҡатынлылар ҙа күренгеләй. Ҡайһылары — бала-сағалы. Ҡыҫҡаһы, аяғына баҫҡаны, түшендә шыуғаны, югереп йөрөгәне, егет ҡорона кергәне, кәләш-килен булғаны, һаҡал-мыйыҡ ҡырғаны — һәммәһе лә ағыла торҙо, ағыла торҙо. Тәүҙә беҙҙең эске өй тулды. Шунан олораҡтар, бәләкәстәргә урын бушатып, ишек алдына сыҡты. Унда ла һыймағас, ҡураға һибелделәр. Тик тыуған-тыумасанан ғына бер кем дә юҡ, сөнки Оло инәйем нәҫелнәсәпкә кендек әбейе булманы. Уларға бүтән абейҙәрҙе саҡыралар. Әйткәнемсә, өй тулы, ҡура тулы эреле-ваҡлы әҙәм балалары. Хатта уҫаллығы, ҡанһыҙлығы менән яманаты сыҡҡан Тажетдин дә ҡалмаған. Ул бөтә әҙәмде өркөтөп тота. Анау ҡытлығыраҡ йылды минең дә ҡотомдо алды ул. Мин ырҙын артында үҙем яһаған нагандан атып йөрөй инем. Атыу тигән шул инде : көбәгенә бер семтем дары һалаһың да, ҡабырғалағы тишеге тураһында шырпы сыйып шартлатаһың. Ҡайҙандыр Тажетдин килеп сыҡты ла минең наганымды тартып алды. «Әһә, кеше үлтерергә йөрөйһөңмө әле? Беләһеңме, сельсоветкә әйтһәм, был ҡорал өсөн ни эшләтәләр? Төрмәгә ябалар йә атып үлтерәләр. Башың бөттө, малай!» — тип екеренде. Ҡурҡыуым табаныма барып етте. Харап булдым! Тажетдин шәфҡәт белмәй ул. Инәлеү-ялбарыу файҙаһыҙ. Мин үҙалдыма бөтөп, юғалып барам. Ул аҙ ғына кире һүрелгәндәй итте: «Ярай. Оло инәйең хаҡына ғына ҡотҡарам. Түлке, ҡараңғы төшкәс, бына ошонан ырҙын артынан ғына килеп, бер биҙрә картуф килтереп кит. Картуфыңды беҙҙең ҡойроҡтағы имән төбөнә бушат. Ҡара уны, биҙрәң тулы булһын! Был хаҡта һис кемгә ләм-мим...» Ул минең наганды кеҫәһенә тығып, үҙ юлына китте. Әйләнеп тә ҡараманы. Мин шик эсендә ҡалдым. Вәғәҙәһенән ҡайта ғына күрмәһен инде! Ҡараңғы төшкәс тә, мөгәрәптән сәлдереп, тулы биҙрә картуфты әйткән ергә илтеп ауҙарҙым, һүҙендә торҙо улай, минең ғәйептең осо сыҡманы. Шулай ҙа еңел ҡотолдом. Оло инәйем булмаһа, баш китә ине... Ана, шул Тажетдин дә килгән. Үҙен тыйнаҡ, ипле тота, әйтерһең, мулла кейәүе...

Кеше бик күбәйгәс, мин Оло инәйем эргәһенә индем:

— Йыйылып -бөттөләр инде, Оло инәйем.

-т- Яныма инһендәр.

Бер-ике минут эсендә беҙҙең ҙур яҡ туп-тулы булды. Бала күтәргән әсәләр, ейәндәрен килтергән әбейҙәр, ваҡ балалар урыны еткәнсе ултырышты. Бүтәндәре баҫҡан көйөк ҡалды. Ниндәй генә зат, ниндәй генә төҫ юҡ бында! Ҡара сәслеһе лә, һары сәслеһе лә, һоро күҙлеһе лә, зәңгәр күҙлеһе лә, төймә танаулыһы ла, ҡылыс моронлоһо ла, сибәре, лә, йәмһеҙе лә бар. Оптоларҙың бөтәһенә лә тәүге фатиханы минең Оло инәйем биргән. Беҙҙекеләрҙән: был яҡҡа мин генә индем. Ауырыуҙың ихтыяры шулай булды.

Тауыш-тын, ығы-зығы тиҙ үк тынды. Бәләкәстәрҙә шымып ҡалды. Кескәй балалар -бөтөнләй өнһөҙ ҡалған саҡтағы тынлыҡ шиклегә, хәүефлегә, әйләнә икән. Бына әле лә өйҙө бер төрлө шом баҫты.

Оло инәйем аҡрын ғына урынынан торҙо. Башын яй ғына бороп, берәм-берәм -бөтәһенең дә йөҙөнә ҡарап сыҡты. Ҡайһыларына оҙаҡ текләп торҙо,, ҡайһыларына куҙ ташлап ҡына үтте. Ара-тирә. исемдәрен әйтеп өндәшкеләне лә: «Күптән күргәнем юҡ ине, Зәбирә, ҡалай үҫеп киткәнһең... Солтанғәленең күҙе төҙәлгән икән... Илаҡ Шатмораттың илаҡлығы бөткәндер инде... Бәләкәс Аҡйондоҙ атаһына ҡалай оҡшап бара... Ҡана, килен, кинйәңде тағы бер күрәйемсе...» Ҡара Йомағол ҡатыны, иренен ҡыймылдатып, мыш-мыш йоҡлап ятҡан ҡара малайының йөҙөн Оло инәйем яғына борҙо. Оло инәйем әле исеме лә юҡ ошо малайға бөтәһенән дә* оҙағыраҡ ҡарап торҙо. (Ауылыбыҙҙың иң яңы кешеһе, түшәктә ятҡан кендек әбейе донъяға ҡабул иткән иң һуңғы бәпес ине ул.) Ауырыуҙың ҡарашы> инде Тажетдингә туҡталды. «Килгәнһең икән, һәйбәт», тип хупланы ул ҡараш.

Олораҡтар ғәжәпләнеп, бала-саға аптырап, бераҙ сабырһыҙланып нимәлер көтә. Ошолай ҡарап, барлап алыр өсөн генә -саҡырмағандыр бит. Бербер хәл барҙыр. Күңелле тамаша булмаҫ, әлбит-тә, бынау иртә таңдан...

Оло инәйем турая төшөбөрәк ултырҙы:

— Балалар, —- тине ул,— был яҡты донъяға мин һеҙҙе берәм-берәм ҡабул иттем, ә бына хушлашыр өсөн бөтәгеҙҙе бер юлы саҡырҙым. Килгәнһегеҙ, рәхмәт. Минең рәхмәтемде әле аңламағандар, уҫкәсерәк төшөнөр. Өлкәнерәктәр төшөндөрөп бирер. Эйе, иҫән ваҡытта, күҙгә-күҙ ҡарашып, һаубуллашыйыҡ, тинем. Әсем боша. Донъя хәлен белеп булмай.

Кемдер һыҡтап ҡуйҙы. Теге Фәриҙә икән. Бөтәһе лә уға әйләнеп ҡараны.

Оло инәйем тауышында миңә таныш булмаған ҡоролоҡ ишетелде:

— Илашырҙан булһа, балалар, хәҙер үк таралышабыҙ. Мин һеҙҙе быны өсөн саҡырманым. Әлегә иртә. Ваҡыты еткәс, тыймам. Тыя ла алмам, ә хәҙергә, иркенләп, тыныс һөйләшәйек.

Шул ай тине лә күңелдән күҙгә килә торған йәш юлдарын ябып та ҡуйҙы.

—• Ул бит, инәй, күңеле йомшаҡлыҡтан ғына...— тип Фәриҙәне яҡланы Әсғәт.

Оло инәйем баш ҡаҡты, ләкин һүҙ менән йөпләп торманы. Күрһөндөмө, әллә былай тәрән итеп тын алдымы,—-ул байтаҡ өндәшмәй торҙо. Ғәҙәттәге йомшаҡ, йылы тауышы менән һүҙ башланы.

----- Васыят әйтер, өгөт бирер өсөн йыйманым мин һеҙҙе, балалар. Сәңгелдәктә ятып, имеҙлек имгәнегеҙгә лә, ер һөрөп, иген иккәнегеҙгә лә бары фатихамды ғына яңыртам, теләктәремде генә ҡабатлайым: бер-берегеҙгә игелек күрһәтегеҙ, үҙегеҙ игелек күрерһегеҙ. Онотмағыҙ шуны.

— Рәхмәт, инәй, онотмабыҙ,— тине Әсғәт. Яҡшы һүҙҙең ҡәҙерен белә ул.

Оло инәйемдең әйткәндәрен бөтәһе лә аңламай, әлбиттә. Быны ул үҙе лә һиҙәлер, ләкин аңлағандарына әйтеп, йөрәктәренә изгелек орлоғо һалып ҡалдырһам, заман еткәс, тегеләренә лә күсер тип, өмөт итәлер, моғайын. Бер бөртөк арыштан утыҙҡырҡ бөртөклө башаҡ ярала түгелме ни?

Ваҡ балаларҙа инсаф менән сыҙамлылыҡ күпкә етмәне: борғолана, шаулаша башланылар. Оло инәйем ҡапыл юрған аҫтынан шыуып төштө лә иҙәндә торған баяғы һандыҡ эргәһенә килеп теҙләнде.

Уң ҡулы менән һандыҡтың ҡапҡасын һаҡ ҡына- һыйпап ҡуйҙы.

•—• Донъялыҡта мин бик күп бүләктәр алдым,—• тине үтә тыныс. — һеҙҙең һәр берегеҙ тыуған сәғәттә миңә, рәхмәттәр у кый-уҡый, затлы һөйөнсөләр-бирҙеләр. Затлы булмаһа, затлы тип ҡабул ҡылдым. Тауыҡ бирһәләр, ҡаҙ, тинем, баҡыр бирһәләр, көмөш, тинем, киндер бирһәләр, ебәк, Тинем. — Ул сәйер генә көлөп ҡуйҙы.— Шулай итеп байып-сереп бөттөм. Бына күпме мал йыйҙым.— Ул һандыҡ ҡапҡасын тағы бер ҡат һыйпап алды. — Донъяныҡы донъяла ҡайтырға тейеш. Әлегәсә гел мине- бүләкләнеләр. Бына хәҙер бүләккә ҡаршы үҙем бүләк өләшер ваҡыт етте. Миңә күптәр тапшырҙы, мин дә-күптәргә тапшырырға тейешмен.—-Ул сыңлатып һандығының ҡапҡасын асып ебәрҙе, ләкин берәү ҙә,. муйынын һуҙып, һандыҡ яғына ынтылманы. — Төймәһен дә, дөйә күреп, ҡабул итегеҙ, йә, төрткәләшмәй генә килегеҙ. Бәләкәстәрҙе алдан ебәрегеҙ...

Беребеҙ ҙә көтмәгән тамаша башланды. Олс инәйемдең йөҙө яҡтырып, ҡул хәрәкәттәре еңеләйеп, бөтә ҡиәфәте егәрлеләнеп, хозурланып китте. Әйтерһең, ул хәҙер үҙ ғүмерендә иң бөйөк, иң изге, иң матур зшен башҡарасаҡ. Әле булһа ҡымшанған кеше юҡ. Аптырап көтәләр. Оло инәйем Ҡара Йомағол ҡатынына төбәп өндәште:

—■ Улайһа, килен, һинең кинйәңдән башлайыҡ.— Малайҙың инәһенә ул бик матур имеҙлек тотторҙо. Эргәһендә баҫып торған бәләкәс ҡыҙҙың муйынына-ҡыҙыл ебәк таҫма һалды. Хәбибулла менән Хисбуллаға берәр ҡәләм әләкте. Шунан китте!.. Инде балалар, ҡыйыуланып, үҙҙәре һандыҡты һырып алды, ләкин ҡул 'һоноусы күренмәй, биргәнде инсафлыҡ менән көтәләр. Өләшеүсенең йомарт ҡулдары береһенән-береһе затлыраҡ нәмәләрҙе сығарып ҡына торҙо. Кемгә таш ҡурсаҡ, кемгә һыҙғырткыс, кемгә кәтүк, кемгә бәләкәс резинка туп, кемгә ҡурғаш һалдат, кемгә уймаҡ, кемгә йылтырауыҡ ҡашлы булавка тейҙе. Ҙурыраҡтар өлөшөнә мулыраҡ та төштө: быларға еҫле һабын, бармаҡ буйы ғына һауыттарҙа хушбуй, кәкере тараҡ, кершән, баҡыр (балдаҡ, тимер ҡумргҙ, аллы-зәңгәрле еәс үргес,

еҙ эҫкәк шикелле нәмәләр эләкте. Бүләген алған һәр кем оҙаҡ ҡапланып торманы, кире үҙ урынына баҫа барҙы. Буталыш булманы. Шулай ҙа башта шаҡтай мауыҡтырғыс булған был мәшәҡәт байтаҡҡа һуҙылды. Оло инәйем йонсой төштө, ләкин эргәһенә килгән һәр йән эйәһенең тәүгеһенән һуңғыһына тиклем, арҡаһынан һөйөп, башын һыйпай барҙы. Олоһон да, кесеһен дә мәхрүм ҡалдырманы. Ниңәлер, Тажетдинде генә һөйөргә онотто. Бүләген һонғанда, тегенең күҙенә бер төрлө ҡыҙғанып ҡараны ла башын ситкә борҙо.

— Бөтәгеҙгә лә өлөш сыҡтымы? — тине ул аҙаҡтан.

Өндәшеүсе булманы.

— Мәхрүм булып ҡалыусы юҡмы?

Йәнә тынлыҡ.

— Ярай, әләйһә, былары йыназаға ҡалыр,— тип Оло инәйем шап иттереп һандыҡты япты.

Шул мәлдә ишек төбөндәрәк торған алты-ете йәшлек сөм-ҡара сәсле бер ҡыҙ ҡысҡырып илап ебәрҙе. Үҙе ике усын да алға һуҙҙы: «Минең бер нәмәм дә юҡ... ышанмаһағыҙ, бына ҡарағыҙ... Кендек әбейем мине һөймәне лә...» Олораҡ бер малай шунда уҡ үҙенең балсыҡ ҡуянын һондо. Теге алманы, әммә илауынан туҡтаны. Оло инәйем өлөшһөҙ ҡалған бәләкәс ҡыҙ өсөн һандыҡты яңынан асты, баланы үҙ янына саҡырып килтерҙе, арҡаһынан һөйҙө, башынан һыйпаны, һандыҡтың төбөнәрәк тығылып, ҡыҙыл ситле зәңгәр яулыҡ сығарҙы, уны, йәйеп, бер ҡағып алды ла, уртаға ҡатлап, үҙ ҡулы менән баланың башына бәйләне. «Бына һиңә лә булды...» — тип тағы һөйөп ҡуйҙы, һандыҡты инде ул бөтөнләйгә япты. Бүтәнсә ул-был булманы.

Бүләк алған йәш-елкенсәк тә, бала-сağа ла зыҡ ҡубып ҡыуанманы. «Ҡана, күрһәт әле... Тотоп ҡарайым әле...» тип бер-береһенә ташланманылар. Быҙдай сәйер хәл беҙҙең ауылда ла, тирә-яҡта ла булмағандыр, моғайын. Кеше үҙ ҡулы менән үҙ үлемтеген таратһын, имеш... Ысынлап та, ғәжәп бит! Һөйөнөргәме быға әллә көйөнөргәме? Нәтижә сығарырға хәҙергә ашыҡмай торайыҡ. Быныҡ шундай бөйөк, шундай күркәм күренеш икәнен беҙ күп ғү-

мерҙәр уҙғас ҡына аңлаясаҡбыҙ аңларға насип булғандарыбыҙ...

Оло инәйем ашыҡмай ғына ҡабат түшәгенә менеп ултырҙы. Ереле-ваҡлы әҙәм балаларына тағы бер ҡарап, гүйә, барлап сыҡты.

— Күрешеү бик һәйбәт булды бит әле. Күҙгә-күҙ ҡараштыҡ. Китеп барһам, һәммәгеҙгә лә бәхиллегемде биреп ҡалдырам, һәммәгеҙгә лә... Өлкәндәрегеҙ, моғайын, минең ҡәберемә тупраҡ һалырға килер. Бының өсөн алдан уҡ рәхмәт әйтеп ҡуям. Тик берәүгә генә рөхсәтем юҡ.

Олораҡтар, бер-береһенә ҡарап, шомланып‘ҡалды. Уйыбыҙ менән шик аҫтындағы кешене эҙләйбеҙ. Кем икән ул? Күп көттөрмәне, йомаҡты Оло инәйем үҙе систе.

— Тажетдин, — тине ул, башын эйә биреп,—һин етем әсәнеңде тел менән йәберләйһең икән, тип ишеттем. Шул дөрөҫмө?

Яуап булманы.

— Хатта уға ҡул да яғаһың икән, тип ишеттем. Шул дөрөҫмө?

— Дөрөҫ... Уҫаллыҡтан түгел, ҡыҙыулыҡтан булды.

Оло инәйем башын күтәрҙе:

— Ишеттегеҙме? Бөтәгеҙ ҙә ишеттегеҙме? Таметдин әсәһе тәненә йәрәхәт һалған. Шул ҡулдары менән ҡәберемә тупраҡ ташларға уға рөхсәтем юҡ. — Теҙ өҫтөндә ятҡан уң ҡулын саҡ ҡына күтәрә биреп ҡуйҙы. — Иә, барығыҙ инде.

Өйҙәгеләр, яй ғына ҡуҙғалып, бер-береһенә юл бирә-бирә, ишеккә йүнәлде. Тышҡы яҡта кемдәрҙеңдер тәрән көрһөнөүе, шыңшып алыуы, быуылып илап ебәреүе ишетелде. Өйҙә саҡта түҙҙеләр, рәхмәт. Мин иң тәүҙә Тажетдин сығып ысҡыныр, тип уйлағайным. Юҡ, ысҡынманы. Иң һуңға тороп ҡалды. Кеше бөткәс, ҡулындағы бәләкәс кенә хушбуй һауытын һаҡлыҡ менән генә һандыҡ өҫтөнә килтереп ҡуйҙы. Унан, бәргеләнмәй-һуҡҡыланмай, аҡрын ғына өйҙән сығып китте.

Оло инәйем күҙҙәрен йомдо. Серем итә, ахыры. Бәлки, кәрәгем булыр тип, эргәһендә ҡалдым. Ҡышҡы тәпәшәк һары ҡояштың нурҙары уның юрған тышында ҡалған ҡулдарына төшкән. Улар йымыл-

дап тора. Текләберәк ҡараһаң, ҡояш түгел. Оло инәйемдең ҡулдары шулай нур сәсә икән. Ике ҡул урынында ике ҡояш киҫәге ята юрған өҫтөндә. Әйтәм, башымды ҡуйһам, шундай йылылар, шундай шәфҡәтлеләр улар! Ҡағылыу менән бөтә хәсрәттәрҙе, сирҙәрҙе, шиктәрҙе ситкә алып ыргыталар, ә уға килгән яфаларҙы ниндәй ҡулдар алып ырғытҡан, уға төшкән хәүефтәрҙән ниндәй ҡулдар ҡурсалаған һуң? Был хаҡта мин ҡайта-ҡайта уйлайым, сөнки уйларлыҡ йәшкә етеп киләм хәҙер.

Күпме ултырғанмындыр, белмәйем, әммә ошо ваҡыт эсендә Оло инәйем менән бергә үткән һуҡмаҡтарҙы, яландарҙы, урмандарҙы йөрөп сыҡтым Сыҡтым, сығып бөтә алманым. Унының менән бергә эскән шишмәләрҙән ятып һыуҙар эстем. Эстем, эсеп туя алманым. Ун алты йәшемә тиклем бына унының ышығында йәшәйем. Йәшәйем, ә балалыҡтан уҙа алмайым. Ул төйәген алмаштырырға, мәңгелек йортона күсергә йыйына. Беләм, ул киткәс, мин иlармын. Иlармын, ләкин бер ваҡытта ла илап бөтөрә алмам... Тамағыма төйөр килеп тығылды бына...

Ул күҙҙәрен асты:

—- һин бында икәнһең, сиңнай. һәйбәт.

— йә 'бер-бер нәмә кәрәк булыр,—-тинем...

— Нәмә кәрәкмәй. Ҡалыуын һәйбәт... һин булғас, донъя буш түгел.

— Өләшкән бүләктәрең өсөн бала-саға ҡыуанып китте, — тип ялғанланым мин.

—• Ҡуй синнай, йыуатма мине. Ҡыуанһалар, насар булыр ине. Хоҙай әшкәртте: ҡыуанманылар. Мин бит уларға һөйөнсө таратманым. Хәтирә бүләге ҡалдырҙым. Хушлашыр өсөн буш ҡул биреп кенә өйҙән сығып китә алманым... Бөтәһен дә күргем килгәйне—-рәхмәт яуғырҙары. Моратыма ирештем. Әллә Тажетдингә ҡатыраҡ хөкөм сығарҙым инде? Ярай, үҙенә лә, бүтәндәргә лә ғибрәт булыр. Ғибрәтһеҙ донъя бармай ул. Ярлыҡамай торған яҙыҡтар ҙа була шулай. Иҫеңдә тот: эсә хаҡынан да изге нәмә юҡ.

— Беләм, Оло инәйем, икеләтә беләм — икегеҙ хаҡын да...

Ул йәнә күҙҙәрен йомоп торҙо:

—- Үкенестәрем юҡ минең хәҙер. Булһа ла, үкенергә һуң. Бына һине иртәрәк ҡалдырып китәм, шуныһы ғына аяныс. Ҡанаттарын нығып етмәгән, иҫ итмәҫтән имтәгеп ташламағайҙары. Балалыҡтан сығып өлгөрмәнең. Хәйер, һин ғүмер буйы балалыҡтан сығып бөтмәйәсәкһең. Бәхетең дә, бәләң дә шунда һинең. Хоҙай ярҙам бирһен! Үҙеы дә бөгөн ер менән күк араһында кеүекмен. Арыманым да, көсөм дә юҡ. Килеп тороп йоҡо баҫа...

Ул тағы йоҡлап китте. Мин, сығып, ауыл араһында йөрөп ҡайттым. Халыҡ Оло инәйемдең ҡылығына тамам хайран ҡалғдн. Ни тип әйтергә лә белмәйҙәр. Төрлө имеш-мимеш таралған. «Әжәл сәғәтен фәрештәләр күңеленә әшкәрткән икән...» — тип күрәҙәлек итте берәүҙәр. «Кемдек әбейе аҡылға зәғифләнеп ҡуймағайы...» — тип борсолдолар икенселәр. Өсөнсөләр ниндәйҙер ғибрәтле мәғәнә, ғилләле фәһем эҙләнеләр. Кешенең тере саҡта терелер менән ябай ғына, әҙәмсә генә хушлашып китергә теләүен берәү ҙә башына һыйҙыра алманы...

Кисен ул башта һеңлем Сәлисә менән ҡустым Ильясты саҡырып алды. Уларҙан һуң Сәлих ағайым байтаҡ тороп сыҡты. Минең Сәлих ағайым ифрат йомшаҡ күңелле. Күҙ йәштәре атылып сығырға ғына тора. Әле лә ике күҙе тулы йәш ине. «Ауырайҙымы әллә?»— тип хафаланды Кесе инәйем. «Юҡ,— тине теге, —• ул минән ғәфү һораны, әгәр аңғармаҫтан йәберем ҡағылған булһа, рәнйеп ҡалма, улым, тине...» Минең үтә сабыр Бикә еңгәм дә, тыйыла алмай, ауырыу янынан һыҡтап килеп сыҡты.

Иң аҙаҡтан яңы өйгә Кесе инәйем инеп китте. Ул бик оҙаҡ торҙо. Бәләкәстәр көтә-көтә арып, йоҡлап китте. Сәлих ағайым мөйөштәге бүкәндә бөршәйеп ултырған. Ул ара-тирә уфылдап ҡуя. Мин торған һайын шомлана барам. Әсем өҙөлә. Сыҙаманым, ишекте шым ғына асып, ҙур яҡҡа индем. Етеле лампа ҡыҫыбыраҡ ҡуйылған. Шулай ҙа шәйләп булырлыҡ. Кесе инәйем Оло инәйемдең карауаты янында ҡаҡ иҙәнгә тубыҡланған. Тегеһе бының башына ҡулын һалған. Шыбырҙап ҡына нимәлер һөйләшәләр ҙә, буғай. Бына Кесе инәйем мыңғыр-мыңғыр килә:

— Ни хәтле йыл инде көтәсәккә алған ҡыуаныс

менән йәшәй кеүекмен. Ара-тирә ҡапыл тертләп китәм: имеш, балаларымды ла миңә үтескә генә биргәндәр. Бер ҡараһаң, быныһы дөрөҫ тә, уларҙы мин тыуҙыра торҙом, һин ҡанат аҫтыңа һыйындыра барҙың, һөйөндөм дә быға, хәүефләндем дә. Балаларым аша мине ҡабул итеүеңә һөйөндөм. Хәүефемдең сәбәбен әйтә алмайым. Юҡ, юҡ... Әллә нимә буталдым. Әйтә торғаным — бүтән һүҙ ине. Ә-ә... бына нәмә: мин бит тораташ түгелмен, һинең күңел ғазаптарыңдың сәбәпсеһе икәнемде күптән аңланым. Әрнеүҙәремдең сиге булманы. Әйтәм бит, бөтәһе лә үтескә — шатлығы ла, бәхете лә, өмөтө лә... һин сырхап киткәс, ыҙаларым тағы ла артты.— Ул шым ғына иларға кереште.— Миңлеямал апай! йә яҙығымды ярлыҡа, йә, ҡысҡырып, үҙ телең менән ҡәһәрлә мине... Бурысымды ҡайтара алмайым, ҡөҙрәтемдән килмәй.

— И иҫәр сабый, бурысың да, яҙығың да юҡ һинең. Мин бер нәмә лә үтескә бирмәнем һиңә. һәр кемдең бәхете лә, ҡазаһы ла үҙе менән, һине бит мин үҙем яусыланым, онотмаған булһаң. Аҡылым камил ине.

— Уныһы шулай булды. Камил аҡыл менән үҙең димләнең. Әммә аҡыл бер, күңел икенсе икән. Мин дә ул саҡ алдын-артын уйлап тормайынса, һинең фатиханды ҡабул ҡылып, ризалаштым. Баҡһаң... Ҡайһыһы күберәк булғандыр — күңел рәхәтеме, выждан ғазабымы? Йә ярлыҡа, йә ҡәһәрлә, апай. Был көйө ярамай.

— Яҙығың юҡ,—■ тип ҡабатланы Оло инәйемдең йомшаҡ тауышы. — Үткән ғазаптарымдың сәбәпсеһе һин түгел, яҙмыш үҙе-—минең яҙмышым, э хәҙер минең бер ғазабым да юҡ...

— Миңлеямал апай, зинһар,—тип ялбарҙы Кесе инәйем, — зинһар, шиктәремдән ҡотҡар мине. Азат ит...

— һинеңсә булһын. Азат итәм. Әгәр гонаһың була ҡалһа, уны үҙемә алам!., һине мин димләнем... йә бар, унда балалар ҡурҡышыр.

Кесе инәйем торорға ашыҡманы. Мин һиҙҙермәй генә кире сығып киттем.

Төн уртаһында атайым ҡайтты. Иртә менән Сайрандағы апайым менән һунарсы еҙнәм килеп

етте. Сәлих ағайым барып алды уларҙы. Тирә-яҡ ауылдан бүтән ҡәрҙәш-ырыу йыйылды. Оло инәйем, һәр береһен эргәһенә саҡырып, хушлашты, әйтер һүҙен әйтеп, бәхилләште. Был көн кискә ҡаршы ул ауырайып-ауырайып ҡалды. Төнөн тағы арыуланды, ә таң атҡанда китеп барҙы. Йән биргәндә янында бер атайым ғына булған. Күрәһең, Оло инәйем үҙе шулай теләгәндер.

Был үлем мине яртылаш үлтерҙе. Тәгәрәп илай ҙа, быуылып үкһей ҙә алмайым. Ҡаттым да ҡалдым. Өс тәүлеккә яҡын беҙҙең күҙ алдында әжәле менән шаярып, Оло инәйем беҙҙе был хәлгә күнектерергә, ихтыярыбыҙҙы нығытырға тырышҡандыр, бәлки. Беҙҙе ҡапыл ғына аяҡтан йыҡмаҫҡа теләгәндер ул, ләкин хаталанды, сөнки унның донъя менән шулай еңел, тиҙ бәхилләшеүенә беҙ алдан ышана алманыҡ. Хәҙер ҙә ышанмайбыҙ. Ана ул, сәскәле яңы күлдәген, тәңкәле йәшел камзулын кейеп, ап-аҡ яулығын бәйләп, ятып ҡына тора. Ул арымаған да, тик көсө генә юҡ.

Иртән үк, талпынып-талпынып, ябалаҡ ҡар яуырға кереште. Көн буйы туҡтаманы. Әсғәт менән Хәмитйән, колхоз аранынан алып, ике ат менеп килде. Улар хәҙер ауыл буйлап иң ҡурҡыныс, иң хәсрәтле оранды ҡысҡырып үтәсәктәр. Ана, икеһе урамдың ике яғына сығып, Түбән осҡа елдереп тә киттеләр.

Нөрәк ярып, алмаш-тилмәш ике ауаз яңғыраны.

— Йыназаға барығыҙ!

Төш ауғанда, Оло инәйемде гүргә тапшырҙыҡ. Уның өҫтөндә ҡап-ҡара йомшаҡ түбә ҡалҡып сыҡты, ә ҡар һаман яуа ла яуа. Ҡара тупраҡ өйөмө инде аҡ донъяның эсенә инеп батты. Ҡәберҙең эҙе лә ҡалманы... Кинәт бөтәһе лә алмашынды. Әйләнеп-әйләнеп, ҡап-ҡара ҡар яуырға тотондо. Ҡара мамыҡ бөртөктәреберсә ергә тартыла, берсә һауаға ынтыла, берсә бызылдаша-бызылдаша, өйөрөлөп китә. Ер йөҙө ҡараңғыға сумды. Тик Оло инәйемдең ҡәбере генә, ап-аҡ тау булып, ҡара ер өҫтөндә ҡалҡып тора. Ҡара ҡар бөртөктәре аҡ тау башына ҡунмаҡсы булып киләләр ҙә кире осоп китәләр, ҡунырға ҡөҙрәттәренән килмәй, ниндәйҙер тылсымлы көс ебәрмәй ^уларҙы, кире ҡыуып тора.

Халыҡ зыяраттан таралып бөтөп бара. Кемдер мине, яурынымдан тотоп, һелкетте. Сәлих ағайым икән.

— Әйҙә ҡайтайыҡ.

—- Ҡайҙа? Ниңә?

Оло инәйем беҙҙе шулай бөтөнләйгә ташлап китте. Ошо уҡ көндәрҙә мин тағы бер үтә ауыр, үтә ғазаплы фажиға кисерҙем. Оло инәйем иҫән саҡта. Кесе инәйем менән уларҙың икеһен дә тигеҙ ярата кеүек инем. Дөрөҫөрәге, был хаҡта уйламай, яратыуымды бүлеп-ярып маташмай инем. Олоһо донъя ҡуйғас, Кесеһенә ҡарата — күкрәк һөтөн биреп үҫтергән үҙ инәйемә ҡарата—ҡапыл һыуынып киттем. Хатта ятһына башланым. Ул минең ҡайғымды уртаҡлашмаҡсы, башымдан һыйпап йыуатмаҡсы итә. Мин ситкә тайшанам. Ул ниндәйҙер һәйбәт һүҙҙәр әйтә. Мин ишетмәйем, һис ни ҡыла алмайым, ә үҙемдең рухым өҙгөләнә. Нимә булды миңә? Шулай уҡ Оло инәйем бөтәһен дә үҙе менән алып киттеме икән ни? Ниҙәр генә, ниҙәр генә эшләмәк кәрәк? Был ҡылығым өсөн, Кесе инәйемдең аяғына йығылып, ғәфү үтенерҙәй, яза һорарҙай булам. Тик көсөм етмәй... Миңә бит инде ун алты йәш. Үҙем, аулаҡ ергә тап булһам, тыйыла алмай, һулҡылдап иларға тотонам. Был мин түгел, Оло инәйемдең камзул сабыуына тотоноп китеп барған бала сағым илай. Тиҙ генә туҡталырға самаһы ла юҡ...

Ваҡыт үҙенекен итте. Оло инәйем әйтмешләй, аҙашып йөрөгән йәнем үҙ төйәгенә кире урап ҡайтты. Ҡайтты ла ҡап уртаға бүленде. Бер яртыһы — хәтер һәм тоғролоҡҡа, икенсе яртыһы йәшәү һәм өмөткә әйләнде. Шулай итеп, ике инәйемә ике өлөш сыҡты — хәтирә һәм тормош. Бынан ары мин икегә бүленгән бер йән менән йәшәп киттем, һәм ғүмер баҡый шулай...

## ҠОТЛО
## ҠУЛ
## НАСИП

Һуғыштан һуң байтаҡ ғүмер үтеп китте. Донъялар именләнеп, илгә бәрәкәт килде. Тән яралары бөтәшә, күңел йәрәхәттәре уңала төштө. Аяҡһыҙҙың— сатанлығына, ҡулһыҙҙың — сулаҡлығына, етемдең — етемлегенә, хәсрәтлененң хәсрәтенә аҡрынлап күнегә киләбеҙ. Күнмәй ни ҡылаһың. Яу ҡырынан иҫән ҡайтҡандарыбыҙ, бала саҡтағы кеүек, яҡынайып, уҡмашыбыраҡ йәшәй башланыҡ. Үлем менән йәшәү араһындағы берҙән-бер күперҙән алып сыҡҡан уртаҡ яҙмыш беҙҙе тағы бер усаҡ эргәһенә тупланы. Егет саҡта ҡыҙ-ҡырҡын өсөн ыҙғышып, ҡан усләшеп йөрөгән ирҙәр ҙә, дошманлыҡты онотоп, дөйөм усаҡҡа ылыҡты, бер табаҡтан ашар булды. Ситтәгеләр менән хәбәр алыштыҡ, сәләмдәр күндерештек. Тик тиҫтерҙәрҙе ҡысҡырып барларға ғына ҡурҡам, сөнки улар, элек ҡуйы урман шаулаған ерҙә һирәк-һаяҡ һерәйеп ҡалған ағас шикелле, күҙ алдына килеп баҫалар. Береһе өндәшә, дүртеһенән яуап юҡ. Урман тураһында юҡҡа ғына телгә алманым мин. Ауыл эргәһендә үтә мөһабәт имән урманы бар ине. Һуғыштың оҙон дүрт ҡышында ошо урман бөтөнләй бөлөп ҡалған. Унда-бында бер ағас бойоғоп тора. Былары ғәләмәт йыуандар, ауҙарырға, күрәһең, ҡатын-ҡыҙ менән бала-сағаның көсө етмәгәндер.

Әллә ниҙә бер көтөлмәгән мөғжизә лә булып ҡуя: йә хәбәрһеҙ юғалған берәүҙән хәбәр килеп төшә, йә бөтөнләй ғәйепкә һаналған әҙәм үҙе ҡайтып килә. Шуға күрә көткәндәрҙең күңелендә өмөт әле булһа баҫылмай — һыҙлай ҙа һыҙлай ул өмөт.,.

Йоморо Талип үлеп терелгән йылды инде бөтөнләй онотолоп бөткән Ҡотло ҡул Насип ҡайтып төштө. Әгәр ошо осрашыу булмаһа, бәлки, мин уның тураһында былай оҙон итеп һөйләп тә тормаç инем. «Насиптең Ҡотло ҡул икәнен бөтә әҙәм белә, тағы нимә өçтәйһең инде?» — тиер инем. Өçтәйһе нәмд бар икән шул.

Ҡунаҡ ҡайтҡанын ишеткәс тә, мин Мыйыҡ Шәрәфетдиндәргә киттем — Насиптең атаһын шулай тип йөрөтәләр. Шәрәфетдиндең бөтә ҡарап торғаны терпе балаһы дәүмәле шул ҡара мыйыҡ ине. Мин беләһенән өйөндә кәртә, ҡураһында мал булманы, р мыйыҡты ғүмер буйы тәрбиәләне, ҡараны, һаҡланы. Әйткәнемсә, мыйыҡ тәүҙә ҡара ине, унан ағарҙы, бара-тора һарғайҙы. Шәрәфетдиндең бер мәрәкә ҡылығы бар: өй эсендәге кешеләрҙе ул төп исемдәре менән атамай, үҙе таҡҡан ҡушамат менән йөрөтә. Насип — пес, уртансы улы — бумала, кесе улы •— ҡолаҡ, ҡатыны — артистка. Йәмлиха еңгә артисткаға былай һис тә тартым түгел. Тик бер генә ғилләһе бар: һәйбәт кенә атлап барған еренән ул, бер һаны ғәрипкә күрә, ҡайһы саҡта, ҡыйыҡ-мыйыҡ баçып, тыпырсынып ала. Бар һөнәре шул ғына, ә ире, артисткаға сығарып, ана, нисек юғары баһалай уны... Үгәй әсә булһа ла, йәмлиха Нәсипкә ҡарата тел-теш күрһәтмәне, йыуаш булды, ә Шәрәфетдин ҡаты ине. Берәүгә лә, көн бирмәне. Бигерәк тә өлкән улын ҡаҡты. Ауыҙынан араҡы, теленән әшәке һүҙ өҙөлмәне. Ул гел ситтә, ниндәйҙер кәсептә йөрөнө. Балта оçтаһы ине, ахыры. Ҡайтҡан арала өйөнөң аçтын өçкә килтерҙе, бөтә урамдың маҙаһын алды.

Колхозлашыуҙың тәүге йылдары ине буғай. Шәрәфетдин оҙаҡ кәсептән, имеш-мимешкә ҡарағанда, арыу ғына ҡотайып ҡайтты. Ҡайтты ла уттай эш өçтөндә бөтә урамды бер итеп, эсеп, һүгенеп, йөрөй башланы. Эштән һуң киске эңер ваҡытында күрше-күлән нигеҙ буйында әңгәмәләшеп ултырғанда, япон батшаһын һүгә-һүгә, сайҡалып, был килеп сыҡты. Эсеп алһа, ул гел шулай: кемгәлер бәйләнер әүәл, ике һүҙҙең береһендә оятһыҙ әйтеп япон батшаһын һүгергә керешә.

— Өйөрәм мин япон батшаһының ата-бабаһын...

бөтә нәҫел-нәсәбен... бөтә зат-ырыуын... Төкөрәм мин япон батшаһына... Көтөүсе Нуретдингә түгел» Ҡаҙна Исхаҡҡа ла алмаштырмайым мин уны, инәһен ас эттәр талағыры...

— һүҙеңде самалабыраҡ һөйлә, Шәрәфетдин, бала-саға бар бит, — тине минең атайым, — ҡатын-ҡыҙ ҙа ишетер...

— Ишетһен! Ҡатын-ҡыҙға бүтән нимӘ кәрәк?—• тип усы менән мыйығын һыйпап ҡуйҙы.—Ишетһен!!

— Ошонда етер, Шәрәфетдин! — тип йәнә иҫкәртте атайым.

— Ни эшләп әле миңә әмер бойороп ултыр-аһың» ҡартлас? Имеш, пр-аво? — тип кәпәренде мыйыҡ.— Әллә япон батшаһы булдыңмы? Уходи, Ташкент тауьГғы! Япон батшаһын мин...

— Күптән сикәгә тейә инең... — Алтмыш биш йәшлек атайым егеттәрсә һикереп торҙо ла, һелтәй биреп, Шәрәфетдинде йыға һуҡты. Теге салҡан килеп төштө. Байтаҡ ваҡыт ҡуҙғалмай ятты. Унан» аҡрын ғына тороп, теҙләнде, башын борғолап, һушын йыйҙы. Аяҡҡа баҫҡас, атайыма һөҙөп ҡарап торҙо. Бына хәҙер ул атайыма ташланасаҡ, һуғышты көт тә тор. Шәрәфетдин бер аҙым алға атланы. Саҡ-саҡ сөйләгәп китмәне. Ни эшләптер» ҡул күтәрергә ашыҡмай.

— һай-һай, ағай, батша итеп ҡуйырлыҡ кеше икәнһең, — тине ул, башын сайҡап. — һай-һай, ағай, тамаша яһаның...

Шәрәфетдин, сайҡалмай-нитмәй генә атлап, үҙ өйөнә ыңғайланы. Байтаҡ ара киткәс, йырлап ебәрҙе.

Ебәк микән, уҡа микән
Сибәремдең сәс бауы?..
Сибәремдең сәс бауынан
һыйпауҙары — йән һыуы.

Бәй! Шундай матур һүҙҙәр ҙә белә икән дәбаһа был. Килешеп тора.

Бынан ары ла уның әшәке һүҙҙәре беҙҙең тирәгә килеп еткеләне етеүен, ләкин иҫерек көйө үҙе аяҡ атламаны.

Ҡотло ҡулдарына үҙ йортонда, үҙ илендә ҡәҙер таба алмай, Насип әле малай саҡта, анау бергәләп ҡалаға ҡалас ашарға барған йәйҙе үк, ауылды таш-

.лап сығып олаҡты. Иртән оло юл буйындағы тары ерен утарға тип киткән еренән ғәйеп булды. Эҙләп маташтылар. Ер өҫтөндә лә, һыу аҫтында ла һөйәге табылманы. Ҡысҡырып илаусы, өҙөлөп иҫкә алыусы булманы. Тары урағы етеүгә, ул онотолдо ла инде.

Ике йыл үтеүгә, ҡабартма кеҫәле салбар, һары ҡата кейеп, Насип йәнә ауылға ҡайтты. Беҙҙе иң шаҡ ҡатырған нәмәһе — йәшел тирәсле хәрби фуражка ине. Уны күргәс тә, Әсғәт, йәшел башлы күгәүен, тип атаны. Фуражканы ололар ҙа, кеселәр ҙә, берәм-берәм ҡулдарына тотоп, баштарына кейеп ҡараны. Шәһиҙуллаға ул: «Ниңә, оҡшаһа, ал, тамсы ла йәл түгел»,— тип йомартлыҡ күрһәтте. Башлыҡ кире бирҙе: «Бер кәпәсте бөтәбеҙгә лә бүлеп бөтә алмаҫһың, үҙеңәбулһын»,—-тине. Ҡайҙа йөрөгәнен, нимәләр эшләгәнен Насип беребеҙгә лә теҙеп һөйләмәне, һүҙ араһында ғына уның, байтаҡ яфалар күргәндән һуң, приютҡа барып эләгеүен, шунда уҡып ятыуын аңланыҡ, йәшел тирәсле фуражканың бер командир бүләге икәнен белдек. Ниндәй батырлыҡтар өсөн бүләк иткәнен әйтмәне. «Былай ғына...» — тине.

Көҙгә табан ул тағы шулай кинәт китеп юғалды. Был юлы эҙләп тә маташманылар. «Яҙған мал булһа, ашаған еренә ҡайтыр әле...» — тип йәмһеҙ һүгенеп ҡуйҙы атаһы. Уның ауыҙынан сыҡҡанды эт ашамаҫ ине.

Был юлы берәҙәк малай оҙаҡ ваҡыттар билдә бирмәне. Әллә ете-һигеҙ йыл үтеп китте инде. Бер заман йәй уртаһында, ике ҡулына ғәләмәт ҙур ике һары сумаҙан тотоп, өҫтөнә ҡара тройка костюм, аяғына тишекле аҡ ботинка, башына ҡара мамыҡ эшләпә кейеп, муйынына йәшел галстук тағып. Насип ҡайтып төштө. Торғаны менән тере кәртинкә! Күрше-күләндең әйтеүенә ҡарағанда, бер сумаҙаныһна —• ата-әсәһе һәм ҡустылары өсөн кейем-һалым, икенсеһенә күстәнәс тултырған икән. Уныһы раҫтыр. Шул көндө үк Шәрәфетдиндең бөтә өй эсе баштан-аяҡ яңынан кейенеп сыҡты. «Тырышыуҙарым бушҡа китмәне. Малайға тәрбиә һеңде. Эш сыҡты малайҙан...» — тип маҡтанды аҡ мыйыҡлы Шәрәфетдин, өҫтөндәге пинжәгенең эсен-тышын күрһәтеп. Аяғындағы йылтырап торған резина калоштарҙы,

сыйылдатып, бер-береһенә ышҡый алды: йәнәһе,, быныһын да күрегеҙ!

Икенсе сумаҙан тулы эре сәтләүек, өрөк, йөҙөм, төрлө-төрлө кәнфит, ҡыҙыл перәник, киптерелгән ҡара емеш икәнен уҙем күрҙем. Ул сумаҙанын асып,, һике өҫтөнә ҡуйҙы ла хәл белергә ингән әбей-һәбейҙәргә, бала-сағаларға күстәнәс өләшергә кереште. Йомарт ҡунаҡ тураһында хәбәр тиҙ таралды ахыры. Бөтә урам балалары, бигерәк тә малайҙар,. Шәрәфетдин өйөнә ябырылды. Насип, үҙенең ҡотло ҡулдары менән ҙур-ҙур услап һәр береһенең йә һуҙылған ҡуш усына, йә йәйелгән итәгенә күстәрәс һалды. Килә торҙолар, китә торҙолар. Бер заман биттәренә ҡором һөрткән йәки аталарының меҫкен бүректЪрен, кейеҙ эшләпәләрен баҫтырып кейгән сәйер малайҙар күренгеләй башланы. Ниндәй кәмитселәр былар? Ҡайҙан килгәндәр?

—■ Агай, ағай, — тип фашланы Насиптең бер' ҡустыһы, — был малай, анау эшләпә кейгән малай әй лә, анау ҡором һөрткән малай,бая уҡ инде күстәнәс алғайны.

— Үҙе алһа, атаһының кәпәсе алмағандыр,— тип ҡых-ҡых көлдө Ҡотло ҡул. — Башығыҙҙан һалығыҙ, малайҙар.

Тегеләр ҡушҡанды эшләне. Кәпәстәргә тағы бер' нисәшәр емеш йәки сәтләүек тамды. Насипкә бәләкәс муттарҙың тапҡырлығы оҡшаны. Малайҙар шунда уҡ сығып ысҡынды. Кәмитселәр бүтәнсә күренмәне.

Насипте үтә һағынып, үтә зарығып, көткән халыҡ күп булған икән. Ҡараңғы төшкәнсе кеше өҙөлмәне. Быға тиклем уны күрмәй нисек түҙҙек икән? Ҡартҡоро өсөн самауыр ҙа өҙөлмәне. «Бына бит, яҙған ризыҡ теш һындырып керә, — тине Мансур ҡарт, тешһеҙ ауыҙында ҡаты өрөктө әүәләп. — Иртәнән бирле ирендәрем ҡысытып тора ине, күстәнәстән ауыҙ итергә булған икән... Әбейең дә мәхрүм булып ҡалмаһын...»—Ул бер ус емеште бишмәт кеҫәһенә алып һалды.

Насиптең ҡунаҡсыллығы бының менән генә бөтмәне. Бер нисә көндән һуң ул, ошо урамда бергә уйнап үҫкән үҙенең тиҫтер егеттәрен һәм ҡыҙҙарын йыйып, табын уҙғарҙы. Ул саҡта әле йәш-елкенсәк

мәжлесендә шарап эсеү ғәҙәте юҡ ине. Әммә итемайы, аш-һыуы мул булды. Кис буйы ашап-эсеп, уйнап-бейеп зыҡ ҡуптыҡ. Шәһиҙулланың гармуны, Әсғәттең сәсән теле алмаш-тилмәш табынға йән дә, йәм дә биреп торҙо. Бәлки, бөтә тиҫтерҙәр бөтәбеҙ бергә йыйылып күңел асыуыбыҙ беренсе һәм һуңғы тапкыр ошо булғандыр. Был Насип арҡаһында...

Ләкин үҙебеҙ уға ҡарата ҡот осҡос ихтирамһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек, ҡаты бәғерлелек күрһәттек: -беребеҙ ҙә, өйөбөҙгә саҡырып, түр башына ултыртып, ситтән ҡайткан ҡунаҡты хөрмәт итмәнек. Насиптең ҡунаҡсыллығын, йомартлығын беҙ мәрәкәгә һанабыраҡ, диуаналыҡка япһарыбыраҡ ҡабул .иттек, моғайын. Эйе, шулайыраҡ булды шикелле. Үҙебеҙ бүртенгәнсе һыйландыҡ, үҙебеҙ аҫтыртын ғына ирештереп тә ҡуйҙыҡ тегене, сөнки ул беҙҙең тар аҡылға, тар ҡоласҡа һыймай торған ҡыланыш күрһәтте. Бәлки, беҙҙән хөрмәт өмөт итеү уның бантына ла килмәгәндер. Шулай ҙа уның алдында бына әле килеп оят.

Был ҡайтҡанда беҙ Насиптең, ҡайҙалыр педтехникум бөтөрөп, Урта Азияла балалар уҡытыуын аңғарып ҡалдыҡ. Бер ай самаһы ауылда йөрөнө лз ул, ҡара тройка костюмен лавкасы Зәйнүшкә ярты хаҡына һатып, кире Урта Азияға китте. Был юлы ҡасып-боҫоп шылманы ул, сәфәре алдынан, күршекүләнгә, дуҫ-ишкә инеп, берәм-берәм хушлашып ■сыҡты. Поезға тиклем уны ике ҡустыһы оҙата барҙы. Йөктәре еңел ине. Буш һары сумаҙандар Йәмлиха еңгәгә тауыҡ йөнө менән һуған тултырыр өсөн ҡалды.

...һай-һай, күпме заман үтеп китте! Егерме йыл -барҙыр. Бына мин Шәрәфетдиндәр өйөнөң тупһаһына тағы аяҡ баҫам. Насип менән күрешергә киләм. Ҡарт инде гүр эйәһе. Мыйығы һарғайғансы йәшәне лә, ҡылған яманлыҡтары өсөн, урам уртаһына баҫып, ил алдында тәүбә итеп, үлеп китте. Ҡәйер, тәүбәһенән һуң ул, аҡты-ҡараны айырмай, байтаҡ ғазап сигеп ятты. йәмһеҙ йән бирҙе Шәрәфетдин: мейес янындағы бысраҡ лаҡанға башы менән тығылып, тонсоғоп үлде.

Насип мине асыҡ сырай менән ҡаршы алды.

Йәһәннәмдән йәйәү ҡасҡан тағы берәү бына! Һинең хәлдәреңде ишеттем. Бирешмәгәнһең, молодец, Кендек... — Ул, ғыж-ғыж килеп, көлгәндәй итте. Насиптең тауышы ғүмер баҡый ғыжылдауыҡ булды. Бәләкәй саҡта яңылыш мәкегә төшкәйне, шунан ҡарлығып ҡалды тамағы. Уның электән көлһыу йөҙө тағы ла төҫһөҙләнә төшкән, сикә сәстәре ныҡ уҡ ағарған, әммә ҡыҫыҡ һоро күҙҙәре шул көйө — тап та, шәүлә лә төшмәгән көйө тороп ҡалған, гүйә, был донъяла улар бөтмәҫ бәхет күреп, төкәнмәҫ шатлыҡ ҡына эскәндәр. Йылмайып торған ғәмһеҙ сабый күҙҙәре- уның йонсоу йөҙөндә, таушалып бөткән бөтә ҡиәфәтендә ике яҡты утрау ине.

Ул күрешергә ҡулын һуҙҙы. Мин ике ҡул урынына, түп-түңәрәк ҡалын кәлсә төҫлө, ике ус ҡыҫтым. Әйтерһең, ике ҡулының'да бармаҡтарын кемдер үтә ентекләп, үтә ыҡсым итеп ҡайсы менән төптән үк ҡырҡып сыҡҡан. Тик ҡайһы ҡулындалыр берҙән-бер сәтәкәй бармағы яҙып-яңылышып тороп ҡалған. Күрәһең, ҡайсы осона эләкмәгәндер. Мин әллә сирҡаныуҙан, әллә ҡыҙғаныуҙан тертләп, һ- çкәнеп киттем, ләкин күрешеү ҡыуанысына сумған Насип быны һиҙмәне, бәлки, хуш күңелле был бисарг хәҙер инде үҙенең ғәриплеген дә һиҙмәйҙер. Оноҭҡандыр, бахырың.

—- Бына бит, әй! — тип ярайһы тос «кәлсә» менән минең арҡаға һуҡты. — Ейер ризыҡ булғас, тагы илгә ҡайттым, һағынып үлә яҙҙым. Валлаһи!

— Хәлдәрең нисек? Ҡарар күҙгә былай һәйбәт күренәһең, — тип ялғанланым мин.

— Зарланыр урыным юҡ, — тине ул, гонаһһыҙ күҙҙәренән нур сәсеп. — Иҫән ҡалдым. Таҙалыҡ бар. Аяҡ-ҡул бөтөн тип әйтерлек. Бармаҡтар етешмәй ҙә ^тешеүен... Алтын йөҙөктәр кейәһем юҡ. Ана, ат тыумыштан бармаҡһыҙ ҙа йәшәй бит. Ҡалайырәк йәшәй әле!.. Ә балаларға дәресте мин ҡул менән түгел, тел менән, фиғел менән бирәм.

Эйе, был Ҡотло ҡул Насип ине. Нәҡ үҙе ине. Теге замандағы кеүек үк, өҫтөндә ҡара тройка костюм, ләкин пинжәгенең ең остары ныҡ ҡына һүҫәргән был юлы. . Йәшел галстугы ла майланып, ялтырап бөткән. Аҡ күлдәгенең яғаһы керҙе сама-

нан тыш күтәргән. Минең һынаулы ҡарашымды ул ярты юлдан уҡ эләктереп алды.

- Алмаш күлдәк барын бар ҙа ул, ә костюм инде сереп байыған саҡтарымда ла берәүҙән артманы. Мин нәфселе түгелмен, хатта бәхет тә икәү кәрәкмәй миңә. Берәүһе ярап ҡалыр ине мәгәр, эсте тишмәç ине... — Минең иғтибарымды тартыр өсөнмө әллә былай ғынамы, һул ҡулындағы (эйе, һулы ине) иçән ҡалған сәтәкәй бармағы менән түшендәге Ҡыҙыл Байраҡ орденен ике тапҡыр һыйпап ҡуйҙы.

Нимә эшләп әле мин бая был кеше тураһында «бисара» тип уйларға баҙнат иттем. Уны йәлләргә, йыуатырға маташыу үҙе үк әҙәпһеҙлек, выжданһыҙлыҡ булыр ине. Ул үҙенең яралары менән кәпәренмәй ҙә, меçкенләнмәй ҙә. Ғәриплеге менән һатыу итмәй ул.

...Ләкин был фани донъяла ғәриплек менән дә, матурлыҡ менән дә һатыу итеүҙәр бар шул әле. 1944 йылдың сентябрь баштарында мин күптән түгел генә алынған румын ҡалаһы Констанцаны бер көн ҡыҙырып йөрөнөм. Мәшәҡәтһеҙ генә тамаша ҡылдым. Был минең сит донъя, сит йолалар менән тәүге осрашыуым ине. Мине русса арыу ғына һүрпалаған бер полицай эйәртеп йөрөттө. Ул ҡаланың үҙен дә, кешеләрен дә яҡшы белә. Ике осрашыу, күңелде болоҡһотоп, хәтеремә айырыуса һеңеп ҡалды. Үҙәк урамдарҙың береһендә беҙгә хайран сибәр, хайран һылыу бер ҡыҙ тап булды. Ҡарап туйғыһыҙ. Полицай тегенең еңенән тотоп туҡтатты. Тупаç, һөмһөҙ хәрәкәттәр менән эйәгенән тотто, яурынынан һыйпаны, битенән семетте. Нимәлер һөйләне, тыйнаҡһыҙ итеп көлдө. Мин берсә хайран ҡалып, берсә аптырап ҡарап торҙом. Камил матурлыҡҡа хайран ҡалдым, урам һаҡсыһының шул матурлыҡ менән әҙәпһеҙ ҡыланыуына шаҡ ҡаттым. Ҡыҙ киткәндә полицай руссалап: «Бар, эшлә!» — тип уның осаһына һуғып ҡалды. Быныһы инде бөтөнләй башҡа һыйырлыҡ түгел ине. Мин һоҡланыуымды еңә алманым:

- Ҡалай сибәр... Бер күреүҙә янып үлерлек, тинем.

— һатыла. Тулайым түгел, ваҡлап, ваҡытлал

һатыла. Тик бик ҡиммәт, — тине юлдашым тыныс ҡына.

— Нисек инде һатыла? Үҙе шундай матур...

— Матур булғанға ҡиммәт тә... Мин ул «тәтәй ҡыҙҙарҙың» бөтә тарифен беләм.

Нисектер, көн ҡараңғыланып, һүрәнләнеп киткәндәй булды. Үкенесле, әлбиттә...

Йөрөй торғас, майҙанға килеп сыҡтыҡ. Майҙан тулы халыҡ. Уртала ҙур оҙон арбаға егелгән бәләкәс кенә ишәк баҡыра. Ишәкте йөнтәҫ осло бүрек кейгән кеше ҡолағынан тартып баҡырта. Арбала ғәләмәт оло башлы, ҡыҫҡа ғына кәүҙәле, сонтоҡ аяҡ-ҡуллы өс йәштәр самаһындағы шыр яланғас ир бала ята. Бала эргәһендә ҡалай ҡуны. Ишәк баҡыра. Ҡупыға ара-тирә баҡыр тәңкәләр сыңлап төшә. Был күренештең әсе мәғәнәһен һорашмай ҙа аңланым: атай кеше үҙ, балаһының ғәриплеген ваҡлап һата.

Быны күргәс, баяғы шуҡ полицай ҙа һалпайып ҡалды:

— Ниндәй генә көндәргә төшөрмәй әҙәмде фәҡирлек...

Һатлыҡ матурлыҡ менән һатлыҡ ғәриплеккә бер көн эсендә тап булдым шулай. Ҡайһыһы аяныслыраҡтыр, белмәйем. Бәлки, икеһе лә бер иштер...

Насиптең бармаҡһыҙ ҡулдары миңә инде ғәрип булып күренмәйҙәр. Нисек бар, шулай: матур ҙа түгел, йәмһеҙ ҙә түгел. Үҙем дә хужа кәйефенә буйһоноп, яраҡлашып өлгөрҙөм.

Йәмлиха еңгә сәй әҙерләне. Ҡайҙандыр бер «ҡара баш» килеп сыҡты. Насип шешәне йылт иттереп теҙ араһына ҡыҫтырҙы. Шунан, усы менән аҫтан төбөнә һуғып, сос ҡына асты ла, ике ҡулына ҡыҫып, стакандарга ҡойҙо. Бик теүәл, бик ғәҙел бүлде.

— Күрәһеңдер, ҡулдарым төп эшкә ярай бит. Ҡалғанын башҡарыу бер ни ҙә түгел ул... — Башта ул ҡых-ҡых көлдө. Шунан ике «көлсә»һен дә ҡапыл алға һондо. — Ошо ҡулдарҙың ҡотона нисәмә йылдар буйы берәүҙе лә ышандыра алмағайным. Тәки, бер килеп, инандырҙым, әй.

Берәр стаканды түңкәреп ҡуйғас, Насиптең күңел .тағы ла күтәрелеп китте:

- Бармаҡһыҙ ҡалдым, әммә ҡулымдың ҡотон иҫбат иттем, — тип шул уҡ хаҡта һүҙ яңыртты ул. — Бәләкәстән... Малай сағымдан уҡ һиҙҙем мин был ҡулдарҙың хикмәтен! һеҙ генә ышанмай ҡаңғырттығыҙ. Их-ма! — Ул, бүлт-бүлт иттереп, йәнә стакандарға араҡы ҡойҙо. — Әйҙә, йоп булһын!

Ә шулай ҙа бармағы-ние менән ҡайҙа ҡырҡтың тырнаҡтарыңды? — тип уның көйөнә төшөбөрәк һораным мин.

Кешенән ишетһәң, Насиптең ҡулында ҙур бомба ярылған икән, тип фәстереүҙәре бар. Үҙем генә һөйләп бирәйем. - Шешәнең тығынын ул кире тыҡты. Хужаһы һөйләгәндә, күңелгә вәсүәсә һалмай, тик кенә, тыңлап ҡына ултырһын. Бына шулай.

Насиптең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ югерҙе. Тимәк, ике стакан араҡы шифаһыҙ үтмәне. Тик күҙҙәре генә бер аҙ тоноҡлана тештә.

Улайһа, тыңла: туңып ҡойолдо был бармаҡтар.

Нисек?

- Шулай, ләкин үҙ эштәрен башҡарып һәләк булды улар. Батыр яугирҙәрсә һәләк булды минең бармаҡтар...

Ул дауам игте:

- Мин артиллерияла элемтәсе булдым. КП менән ут позицияһы араһында катушка күтәреп югереүсе инем. 43-төң ҡышы ине. Шығырҙап торған сатлама һыуыҡ иртәлә яман бой башланып китте. Беҙҙең орудиеләр КП-нан күҙ күреме ерҙә урман полосаһына һыйынып алғандар ҙа тегеләрҙең позицияһын өшкөрә генә бирәләр. Полк командире подполковник телефон аша бынан үҙе командовать итә. Ну тауышы, әй! Ҡуш боғаҙ ир ине. Бер заман алыҫта аҡ ҡар өҫтөндә төрлө ергә һибелгән ҡара таптар ҡыймылдаша башланы. Таптар аҡрынлап ҙурая бара, ҙурая бара: танкылар! Таныш картина. Тиҙҙән улар ут төкөрөргә керешәсәк. Давай, тығыл, давай! Ут кәбәненә әйләнеүеңде күр ҙә тор бына! Әсемдән шулай тигән булам, иң алдағы танкыға төбәп. Тегеләрҙең быҒаса һүлпән атҡан пушкалары ла дәррәү телгә килде. Көн аяҙ, тауыш һауаға һеңмәй. Ерҙе тотош күкрәү тетрәтә. Ике яҡтан

да ут өйөрмәһе өйөрөлә. Тап шул ваҡыт подполковник, асыуланып, телефон трубкаһын ташланы. «Өҙөлдө! Линия өҙөлдө. Ялғарға!» — тине. Кесе сержант Скворцов шунда уҡ кабель буйлап йүгерҙе. Беҙ уны күреп торабыҙ. Өс-дүрт йөҙ метр араны имен үтте. Шунан ул шартлауҙар полосаһына барып инде. Бер йүгерҙе, бер йығылды, бер торҙо. Шартлауҙар һаман ҡуйыра барҙы. Ахыры, танкылар ҙа ата башланы. Скворцов тағы бер-ике тапҡыр күренеп ҡалды ла башҡаса ҡалҡынманы. Линия ялғанманы.

— Рөхсәт итегеҙ!, — тинем мин.

— Итмәйем! Һин бар!—Подполковник рядовой Шихановҡа бойорҙо. Шиханов шул уҡ кабель буйлап Скворцов эҙенән йүгерҙе. Ярты юлға етер-етмәҫ, уны шартлау төтөнө ялмап алды. Шул көйө күҙҙән юғалды, төтөн эсендә ирep, юҡ булды. Линия ялғанмай ҡалды.

—- Рөхсәт итегеҙ, иптәш подполковник! Минең ҡулым ҡотло!!—тип йәнә мөрәжәғәт иттем. Асыулы командир ҡапыл ҡысҡырып көлөп ебәрҙе:

— Ҡулың ҡотло булғас, бар!

Мин дә шул уҡ юлдан йүгерҙем. Туп шартлауын да, мина бышҡырыуын да, пуля һыҙғырыуын да ишетмәйем. Улар минең өсөн түгел ине. Ҡар өҫтөнән һуҙылып барған телефон кабеленән башҡаны күрмәйем— донъяла бүтән нәмә юҡ ине. Эйелмәнем дә, йығылманым да. Мине ҡотом, ырыҫым һаҡлай. Йүгерҙем дә йүгерҙем. Мина ярып өңгән ҡоромло соҡор янында бөгәрләнеп йығылған уҫлаптай Скворцов кәүҙәһенә тап булдым. Бик уйынсаҡ егет ине. Әле кисә генә, маскхалатҡа уранып, цыганка булып йырлап бейегәйне. Хәҙер ята. Туҡталманым. Ҡайтҡанда алып сығырмын инде. Шихановты шәйләмәнем, буғай. Хәтерләмәйем. Йүгереүемде белдем. «Китә генә күрмә, ҡотом, китә генә күрмә...»- тип инәлә-инәлә йүгерҙем. Ҡотом ташламаны мине. Снаряд төшөп өҙгән урынды барып таптым. Бейәләйҙәремде һалып ташлап эшкә тотондом. Ике осто ла тәүҙә үҙ аппаратыма тоташтырып тикшереп ҡараным. Башта КП менән бәйләндем. Эшләй. Унан ут позицияһына тоташтым. Эшләй. Шунан ғына өҙөктө һәйбәтләп ялғап, изоляцион таҫма менән

урап ҡуйҙым, һыуыҡ ҡулды өтөп бара икән. Быныһын эш бөткәс кенә һиҙҙем. Бейәләйҙәремде тапмай ыҙаландым. Уларҙы бая ҡыҙыулыҡ менән әллә ҡайҙа ситкә атып бәргәнмен икән. Шуларҙы алайым тип, ике-өс аҙым ситкә атлауым булды, таралдым да төштөм. Яй ғына ауғанымды хәтерләйем бары. Мине шартлау иҫәнгерәткән икән — аҙаҡ белдем. Беҙҙекеләр һөжүмгә күскән, мин ятып ҡалғанмын. Шулай ҙа бәхет бар икән, әй, кемдер, миңә тап булып, тере икәнемде һиҙгән. Ул арала минең яланғас бармаҡтарым шыҡырҙап туңып өлгөргән. Уның ҡарауы, минең ҡотло ҡулым арҡаһында беҙҙекеләр күпме немец танкыларын ҡырып һалған. Туғыҙ бармаҡтың хаҡын артығы менән сығарғандар. Икенсе көндө медсанбатҡа подполковник үҙе килде.

— Ҡулдарың, ысынлап та, ҡотло булып сыҡты, •ефрейтор. Рәхмәт һиңә! Хәүефле хәтәр мәлдә күҙҡолаҡһыҙ ҡалған полкты бәләнән ҡотҡарҙың, — тине. — Онотола торған батырлыҡтарҙан түгел ■был, - - тип өҫтәне. Ихлас, шулай тине, әй.

—- Онотмағандар ҙа... — Мин Насиптең күкрәгендәге Ҡыҙыл Байраҡ ордененә ымланым.

— Былмы? Был әүәлерәк булған эштәр өсөн, Ржев хәлдәре өсөн...

— Ә һуңғыһы өсөн нимә бирҙеләр?

Бирмәнеләр. Бәлки, биргәндәрҙер ҙә, юлығып ала алманым. Мине тылға оҙаттылар.

Аҙаҡтан юлламаның дамы?

— Нисек тип юллайым? «Мин үҙемдең төп вазифамды башҡарғанда бармаҡтарымды туңдырғайным, шуның өсөн бүләк һорайым», — тиәйемме? — Ҡапыл уның йөҙө ағарып китте, ҡулдары ҡалтыранып ҡуйҙы.

Бүтәндәр һорай бит.

- Мин бүтәндәр түгел. Минең өлөшөмә иң оло бүләк — ғүмер тейҙе, ә егерме йәшлек Скворцов менән ун туғыҙ йәшлек Шихановҡа нимә эләкте? Юллап та ҡарамаҡсы инем бер саҡ, ана шул икәүҙән ояллым. Скворцовтың арыҫландай .кәүҙәһе әле булһа күҙ алдымда бөгәрләнеп ята, ә мин себеш хәтле генә кәүҙәм менән һаман йөрөгән булам.

—- Һинеңсә уйлай китһәң, тере ҡалғандарҙың

:мәрхүмдәр алдындағы бурысы йырып сыҡҡыһыҙ булып сыға.

— Уныһы раҫ, туғанҡай, йырып сыҡҡыһыҙ... Ғүмер буйы ҡайтарырға тура киләсәк ул бурысты. Тереләргә, йәғни бер-беребеҙгә, ҡайтарырға...

Был кешене мин бая әсемдән ҡыҙғанып, нисек кәмһетмәксе иткәнмен. Баҡһаң, ул ҡанатлы икән дәбаһа! Себеш түгел, затлы ҡош, ғәйрәтле ;кош икән дә!

Насиптең үҙ ҡулдарының ҡотона шик-шөбһәһеҙ ышан&уының серен бына әле килеп аңланым. Ҡулдарының ҡотонан уның үҙе өсөн файҙа ла кәрәкмәй, шөһрәт тә, бүләк тә, мал да кәрәкмәй. Ғүмер буйы ул ошо ҡулдары менән кемгәлер бәләкәс кенә булһа ла изгелек күрһәтергә, яҡшылыҡ итергә тырышты, бүтәндәргә эштә, уйында, кәсептә фарт килтерергә, уларҙы ҡыуанысҡа юлыҡтырырға өмөт итте. һәм бер заман, бармаҡһыҙ ҡалып, ҡулдарының изгелеген иҫбат ҡылды. Хәҙер инде уларҙың тылсымлы көсө хаҡында ла бер ҡасан да икеләнмәйәсәк, сөнки: ҡул — күңел хеҙмәтсеһе. Күңел ни ҡушһа, ул шуны башҡара. Насип ишеләрҙеке — бигерәк тә...

Насип теше менән шешәнең бөкөһөн тартып алды. Ҡалған араҡыны теүәл итеп стакандарға ҡойҙо.

— Әҙәм эсендә һәр ваҡыт Әҙәп менән Нәфсе алыша,—тине хужа бик етди тауыш менән.— Беҙ, ни, бары икешәрҙе генә төшөрөп, тегеләрҙең бәхәсен шәйлә ҡыҙҙырҙыҡ ҡына. Әйҙә, өсөнсөһөн аткарайыҡ. Нәфсегә зыян килһен, Әҙәпкә ҡеүәт өҫтәлһен.

Беҙ, сәкәштереп, Нәфсене ҡыйырһытып, Әҙәпкә дарман өҫтәп ҡуйҙыҡ.

— Бына шулай, туғанҡай, — тип Насип усын усҡа һуғып алды. Нимәнең «бына шулай» икәнен. асыҡламаны.

Мин дә һорамаными. Хәйер, асыҡланаһы асыҡланып бөткәйне инде. һәр шәхестең төп үҙәге, уның. рухи донъяһын тотоп торған бер терәүе була. Минеңсә, иң ныҡлы, ий, ышаныслы терәү, бәләҡазаларға бирешмәҫ иң ҡаты үҙәк — мөғжизәләргә ышаныу ул. Насип ана шуға ышана, һәм, ни тиһә лә, уныҡы дөрөҫ, уныҡы хаҡлы.

Йәмлиха еңгә, әленән-әле өҫтәл эргәһенә килеп,’ сәй яңыртты, табындағы ризыктан етешергә ҡыҫтаны. Уның йөрөштәре үҙгәргән бөтөнләй. Атлағанда ҡыйыҡ-мыйыҡ китмәй, тыпырсынып та ҡуймай, тура баҫып, яй гына, йөҙөп кенә йөрөй, сөнки уны өркөтөп, екеренеп тороусы юҡ.

Ишетмәгәнһегеҙҙер әле, моғайын, — тине Йәмлиха еңгә, - Йоморо Талип әжәл түшәгенә ятҡан икән. Йәмле йәй айҙарында гына китеп бармағайы. Инеп бәхилләшеп сыҡһағыҙ, сауап булыр ине. Ни етте әҙәм түгел бит, изге күңелле зат.

Ҡасан, ти?

Аҙна-ун көн төшөндәме икән?.. Йөрәген усына ҡыҫып тотҡан да ауған икән.

Был хәбәр мине айнытып ебәрҙе. Анау ҡышты, Сәмиғуллаға самосуд булған йылды, уның башынан меҫкен бүрке осоп төшкәйне, ап-аҡ ҡар өҫтөнә ҡып-ҡыҙыл ҡаны тамғайны. Шунан һуң ул таҡыр башын бик үк йәшермәй башланы. Тора-бара, яйы сыҡҡан һайын кәпәсен һалып, йылтыр түбәһен донъяға фаш ҡылыр булды. Кемдер уға әйткән, имеш: «Ялпаслыҡ — ул ғалимлек билдәһе, аҡыл мөһөрө»,—тигән, имеш. Ниңә бар аҡылды, бар ғилемде әҙәмдән йәшерергә? Оят нәмәме ни? Ә ул миңә һыйлаған самокат тәгәрмәсе? Бөтә урам малайҙары алдында минең дәрәжәне ҡалайыраҡ күтәрҙе шул тәгәрмәс заманында! Бер тәгәрәтеп ебәрер өсөн донъя мөлкәтен бирергә әҙер инеләр. Мин бушҡа тәгәрәттерҙем, тимер коньки хужаһы Шәйхаттар ише, мал артынан ҡыуманым, рәхмәт алдым: Бер рәхмәттә мең бәләнән ҡотҡарырлыҡ көс барын ул саҡта мин нығыраҡ аңлай инем. Был хаҡта шундай фәһемле хикәйәт тә бар.

Борон-борон заманда һыуһыҙ сүлдә бик бай бер каруан аҙашҡан, ти. һыуһыҙлыҡтан әҙәмдәр генә түгел, дөйәләр ҙә ҡырыла башлаған. Ҡазаға тарыҡҡан ошо каруанға юл белеүсе бер юламан тап булып, уны һыу янына алып килгән, ти. һәләкәттән ҡотолғас, каруан башы былай тигән: «Әй, юламан, изгелегең һинең ҙур булды, әммә ул рәхмәт әйтерлек үк түгел, һин беҙҙе бер генә бәләнән ҡотҡарҙың. Рәхмәт әйтеү күберәк булыр. Ана, хазина

тейәлгән. теләһә ҡайһы дөйәмдр һайлап ал. һәр береһендә ғүмереңә етерлек байлыҡ бар», тигән.

Рәхмәттең ҡәҙерен белгәндәр боронғолар. Йоморо Талиптең .самокат тәгәрмәсе күпме рәхмәт яуҙырҙы миңә!

Йәмлиха еңгә әйтеп һалған күңелһеҙ хәбәрҙе ишеткәс, бына шундай хәтирәләр килде минең күңелемә.

Ни эшләптер. Насип буш шешәгә йәнә тығын тыҡты. Көрһөнөп ҡуйҙы.

- Теге саҡ ҡалас ойотҡоһон ул һалғайны бит. Мин иҫәргә етә ҡалды. Йәнәһе, бөтә урам малайын ҡаласҡа тейендерәм.'.. Ойотҡоло кеше була торғайны Талип ағай, — тине ул, үҙалдына һөйләнгәндәй генә итеп.

Көтмәгәндә күңелгә бүтән хәстәр, бүтән ғәм инде. Беҙ Йоморо Талип менән бәхилләшергә киттек. Юл ыңғайында тыңҡыш Вәлетдингә ла һуғылдыҡ, һуғышты Берлиндә бөтөрөп, ул түшенә Дан ордене тағып ҡайтты, ләкин уның үҙе һөйләгән мажаралы батырлыҡтары ун ордендән дә артып ҡалырлыҡ ине. Арттырыу-ҡушыу яғынан Вәлетдин Талиптән ҡалышмай. Ул барҙа мәрхүм буласаҡ кеше менән уртаҡ телде тиҙерәк табырбыҙ тиештек һәм отолманыҡ. *

*

## ӘЖӘЛГӘ ДАРЫУ БАР ИКӘН

Талиптең анау саҡта, Оло инәйем менән беҙ кәзә тиреһе илтергә барғас, әйткән һүҙе раҫҡа сыҡты. «Мин сереп байыясаҡмын, көнө генә килһен», - тигәйне. Көнө килде. Сереп үк байымаһа ла, йылдар бәрәкәтәйгәс, ныҡ ҡотайҙы, ныҡ бөтәйҙе Талип. Малайҙарының иҫән ҡалғандары яуҙан ҡайтты, кеселәре үҫеп етте. Ҡайһыһы тракторға атланды, ҡайһыһы автомашинаға ултырҙы. Бәғзеләре, ҡулына оҙон сыбыртҡы алып, мал әйҙәне. Үҙ тормоштарын да етеш ҡорҙолар, аталарына ҡарата ла итәғәтле, ярҙамсыл булдылар. Алты мөйөшлө, бейек болдорло ҡалай гүбәле йорт һалдырҙы Талип. Тәҙрә ҡапҡастарын йәшелгә, түбәһен асыҡ ҡыҙылға буятты, ләкин, бүтәндәр шикелле, урам яҡҡа бейек ҡойма ҡойҙорманы, һирәк кенә тәпәш рәшәткә тотто. «Минең эсемдәгем--- тышымда. Ҡурамдагы .ма урамда булһын», - тине ул, ихата кәртәләгәндә. Ҡураһында малы, ҡош-ҡорто ишәйҙе. Өҫ-башы бөтәйҙе. Таҡыр түбә ғүмер күрмәгән фетр эшләпәгә тейенде. Был муллыҡтың игелеген йәмәғәте генә күп күрә алманы, ике ҡыш әүәл гүр эйәһе булды. Бына хәҙер үҙе хәл эсендә, ти, тимәк, ҡарсығынан саҡырыу килгән.

Беҙҙе ҡайһы улынындыр бисәһе ҡаршы алды. Ауырыу түрьяҡта, йылтырауыҡ башлы тимер карауатта, йомшаҡ түшәккә сумып ята. Бынау, өрһәң, гөлтләп тоҡаныр көндө өҫтөнә ҡалын юрған ябынған. Күрәһең, хәле мөшкөлдөр. Кешене ҡәбер һалҡыны шулай алдан ала, ти бит. Юрған аҫтынан уның таҡыр елкәһе генә күренә, йөҙөн ул тәҙрә яғына борған.

Килен кеше, һәр береһенә түңәрәк һырма һалып, өс ултырғыс ҡуйҙы. Беҙ ултырышҡас ҡына, ул ҡайныһына өндәште:

- Ҡайным, .ана, хәл белергә килгәндәр, ҡала ҡунаҡтары ла бар...

Талип ен сығарманы, тик саҡ ҡына ҡыймылдағандай итте.

— Рәтең булмаһа, өндәшмә, Талип ағай, — тине Вәлетдин,— арыҫлан йөрәгеңдең типкәнен тыңлап, беҙ һиңә ҡарап ҡына ултырырбыҙ.

Ауырыу ыңғырашып ҡуйҙы. Тимәк, арыҫлан әле тере. Көс-хәл менән аҙыраҡ башын борҙо* бер күҙен асты, ләкин өндәшмәне.

Насип, эйелеп, түңәрәк усын ауырыуҙың маңлайына ҡуйҙы. Йәнәһе, ул ҡотло ҡулы менән ҡағылһа, шифаһы буласаҡ. Талип башын йәнә ситкә тайшандырҙы.

Тыныс ҡына ултырыуҙан башҡа сара ҡалманы. Беҙҙең ауаздар йәннәткә юл тотҡан әҙәмдең ҡолағына юл таба алмай.

— Бына шулай, телдән ҡалмай, һүҙҙән яҙҙы. Икенсе аҙна тула инде, — тип төшөндөрҙө килен.— Әллә ниҙә бер яуап ҡайтара ҡайтарыуын...

Алғы өйҙә үк нимәгәлер бәреләһуғыла, дөбөршатыр һәүәҫкәр мулла Фәрхетдин килеп инде. Был тирә-яҡта мәшһүр кеше — дүрт тамыр, алты быуын аша миңә еҙнә тура килә. Фәрхетдиндең заманында итмәгән кәсебе, башҡармаған һөнәре ҡалманы. Мин беләһенән ул имгәнгән-һуғылған мал алып, мал һуйып әүеш-тәүеш итә ине. Ул арыҡ атына ултырып: «Йткә-майға! Иткә-маиға!» — тип ҡысҡырып үтеп киткәс, ваҡ балалар, уға эйәреп, уйын уйнай торғайны. Бәләкәй арбаларын тарталар ҙа: «Иткә-майға! Иткә-майға!» — тип һөрәнләйҙәр.

Был сауҙаһын ташлап, еҙнәбеҙ сепрәк, һөйәкһаяҡ, мөгөҙ-тояҡ, тимер-томор йыйырға кереште. Аръяғында кәсепте йыш алмаштырҙы ул: биҙрә, ҡомған төпләне, самауыр төҙәтте, дуға бөктө, тал сыбығынан ҡаҙ ояһы үрҙе, кирбес һуҡты, арҡаң иште; һыуға батҡан, буранда аҙашҡан, диуанаға һабышҡан кешеләр тураһында, форсат булғанда, ҡыҙғаныс бәйеттәр сығарҙы — әжеренә торманы, заказчик ни бирһә, шуға шөкөр итте. Һуғыш ва-

ҡытында был һөнәренең баҙары айырыуса күтәрелгән, тиҙәр. Ҡыҙғаныс бәйеткә мохтажлыҡ ҙур ине шул. Фәрхетдин бөтәһен эшләне, ләкин ике аяғының береһен бураҙнаға баҫманы. Үҙенсә ул аҡыл менән, хәйлә менән еңел көн итәм тип уйланы. Хәйлә тигәнен әйтер инем инде-—ташҡа үлсәйем...

Һуғыштан һуң еҙнәм Өфөгә юл төшкән һайын минең тупһамды ситләп уҙманы. Әйтһәм дә, йыш тапаманы улай, килеү-китеүе йылына ике-өстән артмаҫ. Ашап-эсеп алғас, тегенең ҡыҙмаса башына гел генә бер бик һәйбәт хәйлә килә торған булды.

- Апайың самауыр торбаһы һорағайны ла, бына сама самаға тура килмәйерәк ҡалды бит әле ҡәһәрең... — ти. *l*

— Нихаҡ тора һуң ул торба?

- Унын төп баһаһы 22 һум 50 тин инде. Илле тинен үҙем дә ҡуша алырмын,--ти. Ул саҡ әле аҡса алмашынмағайны.

Аҡса алмашынғас, самауыр торбаһының хаҡы башта 2 һум ҡырҡ тингә етте, унан 2 һум етмеш тингә менде, ләкин мин хаҡ артыу менән иҫәпләшмәнем, апайымды бер тапҡыр ҙа торбаһыҙ ҡалдырманым. Еҙнәмдең:

Апайың, самауыр торбаһы апҡайт, тип артымдан ҡысҡырып ҡалғайны ла, ҡәһәрһеҙең... -тип әйтергә өлгөрмәй, мин кеҫәмә тығылам.

Нихаҡ һуң ул торба был көндәрҙә?

• Унын арыуы ике һум һикһән ете тин инде...

Мә, өс һумлығын ал, улайһа, апайым ҡыуаныр.

Знамо, ҡыуаныр.

Шулай ҙа бер саҡ шаярыу ҡатыш һорай һалдым:

Һинең ҡулың белә, Фәрхетдин еҙнә, ниңә ул торбаны үҙең генә яһамайһың?

- Материал юҡ. Ҡул теймәй. Былай арзаныраҡҡа төшә, — тип бик төплө яуап ҡайтарҙы ҡунағым. Шунан һуң мин уға был тиклем үк ахмаҡ һорауҙар бирмәнем.

Күптән түгел ошо етмеш һөнәрле маһир ир, һәүәҫкәрлек күрһәтеп, дин әһеленә әйләнде. Уны һайлаусы ла, тәғәйенләүсе лә булманы. Күпме әҙәмдең әҙәбе, иманы, гонаһ-сауабы өсөн яуаплы-

лыҡты үҙ ирке менән өҫтәнә алды, рухына йөкмәне ул. Бындай ауыр бурыс алырға уға, әлбиттә, дин йәһәтенән тома наҙанлығы тәүәккәллек биргәндер. Малай саҡта отоп алған ике-өс бөртөк доғаһын да ул, рус араһында күп йөрөп, әллә ҡасан оноткайны. Бер саҡ, хәмерҙән ауыҙ итә-итә, хоҙа эштәрен сәйнәп ултырғанда үҙе шулайыраҡ ыскындырғайны. Хәҙер килеп, күрәһең, шул доғаларын ^ҡайтанан хәтеренә төшөргәндер. Зиһенле, тырыш ир шул.

Ишектән инеп бөтөр-бөтмәҫ үк, һәүәҫкәр хәҙрәт һуҙып сәләм бирҙе:

— Әссәлә-мәғәләй-ку-үм! Барсағыҙға ла...

Ул беҙгә артыҡ иғтибар итмәне. Юғары дәрәжәһен һаҡлай белә. Ауырыу ятҡан карауат ситенә ултырып доға ҡылды ла үҙ хәстәрен хәстәрләргә кереште:

— Ҡорҙаш, — тине ул,- өнһөҙ ятҡан Талиптең юрғанын тартҡылап, — әй, ҡорҙаш, тәңре ихтыярын алдан белеп булмай, үтеп-нитеп китһәң, ясинһеҙ үтмә, тим. Ясин сығып ҡалайым үҙеңә.

Талип күҙҙәрен асмай ғына башын борҙо. Фәрхетдин быны ризалыҡ биреү тип аңланы, ҡысҡырып уҡый ҙа башланы:

— Әғүзе биллаһи минашайтан раззим бисмилла рахман раххим-и и...

Талип юрған аҫтынан сығарып ҡул һелтәне. Тегеһе уҡыуын дауам итте. Быныһы башта йоҙроҡ, унан ҡуҡыш күрһәтте. Тегеһе, ярты мәйеттең сәйер ғәмәлен күреп, оторо тырышты. Быныһы ике ҡуҡыш һондо. Тегеһе, көсәнә торғас, кәзә тауыштары сығарып ебәрҙе. Быныһы, ике күҙен шарҙай асып, муллаға екерҙе:

— Етер, тим, һиңә, мөртәт! Тыныс ҡына үлергә ирек бпр...

Мулла ясинен өҙһә лә, тиҙ үк сигенмәне.

— Хоҙа хөкөмөн белеп булмай...

- һин белмәһәң, мин беләм. Хөкөм сыҡҡан. Фарман юлда. Сәғәтен генә көтәм. — Олоһо-кесеһе ҡаршыһында гел инсафлы, күндәм, йыуаш Талиптең әжәле алдында ошолай ҡырҡыу, ҡырыҫ һөйләшеүе ғәжәберәк тойолдо. Шул уҡ ваҡытта эскә йылы инеп китте. Былай йоҙроҡ төйнәп, мөртәттән һалдырып,

*

дин әһелен рисуай иткән ирҙән өмөт өҙөргә иртәрәк әле. Көрсөккә килеп терәлмәгән әле был.

Вәлетдин шымып ҡалған «хәҙрәткә» ишек яғын ымлап күрһәтте. Теге аңланы. Зирәклеге бар мәгәр. «Ихтыярында, ҡорҙаш», — тип ишеккә юнәлде. Килен уны оҙата сыҡты. Түр өйҙә дүртәү генә тороп ҡалдыҡ.

— Шулай итеп, донъя менән бәхилләшергә булғанһың икән, ағай? — тине Вәлетдин.

— Етер, туғандар, — тине ул йомшаҡ ҡына. Ашын ашағанмын, йәшен йәшәгәнмен. Сама белергә кәрәк.

- Улайһа, әйтер васыяттарыңды әйтеп, бирер фатихаларыңды биреп өлгөрҙөңмө һуң?—тип төпсөндө шул уҡ Вәлетдин.

Васыятым юҡ. Донъя минең васыятыма мохтаж түгел. Ул бөйөк ғаҡыл эйәләренең васыяты менән бара, — тине, бер күҙен асып. — Фатихамды мин кешеләргә тәнем иҫән, зиһенем теүәл саҡта уҡ биргәнмен.

— Бер генә лә әйтер һүҙең юҡмы ни шулай? һуңғы һүҙең?

Талип байтаҡ шымып ятты. Унан салҡан әйләнде, ике күҙен дә асып, шундай моңһоу, шундай ялбарыулы итеп ҡараны, хатта тәнем сымырҙап китте.

— Бар. Үтенесем бар, — тине.

—■ Әйт үтенестәреңде, ағай. Бөтәһен дә үтәрбеҙ,— тип вәғәҙә итте Насип.

Ауырыу тәрән итеп көрһөндө:

— Минең йыназамда бисәләр илар, шуларҙы йыуатығыҙ.

— Кемдәр? Ниндәй бисәләр, ағай?

- Мин яратып та, миңә күңел һалмаған ҡатындар үкенеүҙән илар. Шуларҙы йыуатығыҙ. Мин уларҙы ғәфү итеп китәм. Шуны әйтеп, йыуатығыҙ. Иламаһындар.

- Йыуатырбыҙ, ағай, йыуатырбыҙ, — тип ихлас һүҙ бирҙек.

— Рәхмәт... Йәнә... Миңә күңел һалып та, мин күҙ һалмаған ҡатындар, мәхрүм ҡалыуҙан әрнеп, илар. Шуларҙы йыуатығыҙ. Ул саҡтағы бәғерһеҙ-

легем өсөн хәҙер~үҙем үкенеп бөтә алмай илап китәм. Шуны әйтеп, йыуатығыҙ. Иламаһындар.

- Йыуатырбыҙ, ағай, валлаһи, йыуатырбыҙ,— тип ант иттек.

Рәхмәт, уҙамандар. Мин ышанып китәм...

Насип берҙән-бер сәтәкәй бармағы менән маңлайын ыуып алды. Нимәлер әйтмәксе, ахыры. Әйтте шул: *

'— Ә өсөнсөләренә ни тиәйек?

—Ниндәй өсөнсөләре?

— Үҙең һөйөлөп һөйгәндәреңә.

- Ә-ә-ә, уларынамы? Уларын тыймағыҙ.. Илаһындар. Иларға тейеш улар. Әсе йәштәре хәләл. —■ Талип тағы күҙҙәрен йомдо ла тиҙ үк асты. Был юл ы'ул күҙҙәрҙән икһеҙ-сикһеҙ хәсрәт эркелә ине. — Ғүмеремдә күп хыялландым, күп арттырҙым, туғандар, гүр ауыҙы төбөндә алдаша алмайым: ундайҙары булманы. Миңә һөйөлөп, һөйөргә яҙманы...

Насиптең урынһыҙ һорауы Талип хыялы ҡорған быяла һарайҙы селпәрәмә килтергәндәй итте. Ҡолаҡҡа ҡатта быяла сыңлауы килеп бәрелде: •сың-ң-ң...

Бик оҙаҡ өндәшмәй ултырҙыҡ. Талип тә, күҙҙәрен түшәмгә төбәп, тыныс ҡына ятты. Арала •өлкәнебеҙ Вәлетдин өҙөлгән һүҙҙе тағы ялғаны:

—• Иртәрәк ҡуҙғалаһың, Талип ағай, иртәрәк... Дим аша һалынасаҡ яңы таш күперҙе күрмәй китәһең.

•»— Күпер? — Сирле аҙ ғына башын күтәргәндәй итте. Вәлетдин тегенең нескә еренән эләктерҙе. Йоморо Талип нисәмә йылдар инде Дим аша күпер һалыу тураһында хыяллана, йыйылыш һайын был хаҡта, халыҡты өндәп, оран ташлай.

- Кем һала?

- Хөкүмәт. Ошо көндәрҙә генә ҡарары сыҡты,— тип иманһыҙ алдашты Вәлетдин.— Йыл әйләнәһенә төҙөп бөтөрөргә тиелгән. Боҙ ҡырҡҡыстары ҡоростан эшләнәсәк, һинең ниәтең, һинең теләгең ине бит ул күпер. Теләгеңде хөкүмәт, ҡабул ҡылып, тормошҡа ашыра, э һин, өр-яңы дағалы итектәреңде кейеп, өр-яңы күперҙән беренсе булып үтеү урынына, соҡорға боҫмаҡсыһың. Яҡшы түгел, Талип ағай. Ул күперҙән юл башлап Ҡайышлһ

Ҡаҙна Исхаҡ үтһенме ни инде, былай булғас. Ҡайҙан килгән Исхаҡҡа ул почет?

— Исхаҡҡа почет тағы... Мендәрҙе арҡаға ҡыҫтыр әле. — Мин мендәрен ҡыҫтырҙым, ул күтәрелеберәк ятты. — Боҙ ҡырҡҡысҡа, әйтегеҙ, ҡорос әрәм итмәһендәр. Башһыҙлыҡ булыр. Бетондан ғына яһаһындар. Ҡоростоң илдә бүтән хәжәте күп.

- — Әйтербеҙ.

— Исхаҡ тиң, ә? Бына кемдәргә ҡала бит донъя...

- Ҡалдырғас, ҡала Тпул, — тип аяуһыҙ раҫлап ҡуйҙы Вәлетдин.

Күпере күпер инде, — тип мин дә һүҙгә ҡушылдым, — Талип ағайҙың таш күперҙән дә, суйын күперҙән дә үткәне барҙыр. Уныһына донъя күргән кеше шаҡ ҡатмаҫ әллә ни. Ана, электр бағаналары Ҡаҙанғол үренә менеп еткән, бына-бына ауылға килеп инәсәктәр. Өйөндә гөлт итеп ҡояш балҡығанын күрмәй китә Талип ағай, шуныһы үкенескә ҡала...

— Беренсе лампа, әлбиттә, закон буйынса ла, йола буйынса ла ошо өйҙә тоҡанырға тейеш. Бына бында шарҙың үгеҙ ҡыуығы дәүмәллеген аҫырбыҙ, тегендә бәләкәйерәге... — тип Вәлетдин лампочкаларға түшәмдән урын да билдәләне.

— Өҫкәрәк күтәр мендәрҙе! — Был юлы Насип булышты. Аурыу һөйәлеп ултырҙы,— электр — мөғжизә ул. Мин сыра яҡтыһында күҙ асҡан бәндәмен. Электр илаһи ут ул... Ағастарын Ҡаҙанғол һыртында, эйе, күрҙем, ә емештәре бына тәтемәй ҡала...

— Ҡалдырғас, ҡала инде...

— Ни эшләп әле һин бөтәһен дә «ҡала... ҡала... ҡала...» тип ҡарҡылдап тораһың, Вәлетдин?

— Мин ни һинең һүҙеңде генә йөпләйем,

һинең йөпләп тороуын әллә минең әсемә һары май булып ята тиһеңме? Талиптең йөҙөнә тир бәреп сыҡты. Ул тәрән итеп һулыш алды. Вәлетдин дә көрһөнөп ҡуйҙы:

Бер ҡараһаң, күпере лә, электре лә пүстәк. Йәнһеҙ нәмә улар. Ана, бер йән эйәһе моңайып яңғыҙ йәшәй, яңғыҙ тороп ҡала. Шуны уйлаһаң, эстәр өҙөлөрлөк.

— Кемде әйтмәксеһең? — Талип теклəп үк ҡараны.

— Кем булһын, Аҡйондоҙ инде.

- Юғары үреләһең, ҡустым, — тип теге ҡырт киҫте. — Көлөп һөйләһәң, көлкө түгел, ысынлап һөйләһәң, лөғәткә һыймай. Аҡйондоҙ — иман ул. Иманды хөрмәт итергә тейешле.

Эйе, Вәлетдин был юлы шаштырыбыраҡ- ебәрҙе. Мин уға ярҙамға ашыҡтым.

— Аҡйондоҙ еңгәнең күрер күҙгә бик күркәм, бик егәрле тол апаһы ла бар икән. Ике бөртөк күҙ йәше кеүек, һеңлеһе менән оҡшашҡандар, - ти. Донъя көтөргә Дим- үренән беҙгә күсеп килгән икән,-—тип Кесе инәйемдән ишеткән хәбәрҙе һалдым.

Шулай уҡ оҡшашҡандар, тиме?

— һуйған да ҡаплаған, ти!

— Аҡйондоҙ тырнағына тырнағы ғына оҡшаһа ла. фәрештә затынан булыр. Исеме нисек?

— Аййондоҙ, — тип шаштырҙым мин, уйлап тормаҫтан.

- Исемен арттырыбыраҡ ебәргәндәр икән ебәреүен. Хәйер, уныһын үҙе ҡушмаған инде. Дөрөҫөн генә әйткәндә, Аҡйондоҙға ғүмер буйы һоҡланып туялманым. Күрәһе ине, апаһы ниндәйерәк икән...

— Күрмәй ни, күрәбеҙ уны. Бына юнәйеп аяҡҡа баҫ та...

5 — У-уф-ф! Юнәйеп булмаҫ инде.

— Был зарыңды ел алһын, Талип ағай. Бынау һабан туйҙары алдынан әҙәм сир хаҡында уйлармы? -тип Вәлетдин бөтөнләй икенсе яҡҡа һуҡтырырға кереште. — Әле майҙан һелкетеп бейер көнөң алда. Бына һин түңәрәк уртаһында, бер эйелеп, бер сүгеп, бер илереп, бер шымып, зыр әйләнәһең. Халыҡ, гөж килеп, тамаша ҡыла, сәпәкә итә. кәпәс сөйә. Аҡйондоҙҙар, Аййондоҙҙар һәм башҡа йондоҙҙар, һоҡланып, хайран ҡалып, күҙ ата һиңә. һин уның һайын купшыраҡ, уның һайын дәртлерәк, уның һайын сәмлерәк баҫаһың. Шундай өҙҙөрәһең- их-ма! Үҙең үк, сыҙамай, таҡмаҡ әйтеп ебәрәһең:

Менгән аты кир икән,
һай, кәрәмәт ир икән, —
Төшөп китһә, майҙандың
Билен һығып бейер икән... ♦
һайт! һайт! һайг!

Талип ҡалҡынып ҡуйҙы. Ул, ысынлап та, ауылдың хәтәр таҡмаҡсыһы, дан бейеүсеһе. Уға торор бүтән әҙәм юҡ. Йәш сағында ла шулай булған, әле дә ал бирмәй.

Вәлетдин һаман үҙ әңгәмәһен дауам итте:

—• Ҡатын-ҡыҙ зарығып, моңайып көтә: «Миңә килеп баҫһа ине», «Мине саҡырһа ине», — тип тилмерә. Ә һин кемгә килеп баҫырыңды алдан уҡ тоҫҡап ҡуйғанһың, һәм тыпырҙатып килеп тә баҫаһың. Нәҡ үҙенә...

- Килен!—тип ярайһы ғына ҡысҡырып саҡырҙы Талип. Алғы өйҙәге килен шунда уҡ югереп инде.

— Нимә, ҡайным?—тине, борсолоп.

— Ҡунаҡтарҙың, килен, нәғеҙҙәре, аҫылдары килгән. Әсе балыңды мул ғына һоҫоп сығар.

Килене уңған икән, ә тигәнсе өҫтәл өҫтөнә ҙур йәшел кәстрүл килеп ултырҙы. Уның ситен эскә батҡып ижау һабы тешлӘп тора. Биҙәкле сеүәтәләр теҙелде. Вәлетдин дүрт сеүәтәгә лә, ижау менән һоҫоп, бал ҡойоп сыҡты.

— һабан туйҙары шәрәфенә, улайһа, — тине .аяҡсыбыҙ. Бер сеүәтәне хужаһына һуҙҙы. Хужа һауытты алырға ынтылды ла кире дүнде:

— Ейелмәҫ ризыҡҡа ҡул тейҙереү харам, - тине. — Әйҙәгеҙ, рәхим итегеҙ.

Балдары эсергә еңел булһа ла, ҡеүәтле ине. Беренсе сеүәтә үк тамырҙарға югерҙе. Икенсеһе менән өсөнсөһө йөрәкте елкендерҙе. Беҙ эскәнде Талип, хозурланып, ҡарап ултыра, ара-тирә ҡыҫташтырғылап та ебәрә. Беҙ инде был өйгә ниңә килгәнебеҙҙе лә онотоп барабыҙ. Дүртенсе сеүәтә күңелгә моң килтерҙе. Вәлетдин, тынҡышлыгын ■фашлай, төшөп, танау эсенән йырлап ебәрҙе.

Үҫкән са кта' бергә үҫтек.
Тал тамырҙары кеүек...

Ярты юлда уға Насип эйәрҙе.

Үҫкәс кенә айырылыштыҡ,
Ҡош балалары кеүек.

Мин йырламайым. Көйөм юҡ. Тыңлап ҡына ултырам. Сеүәтәләр бер күтәрелде, бер төштө. Йыр инде бөтөнләй бәйҙән ысҡынды. Асыҡ Тәҙрәнән сығып, илгә таралды. Тынҡыш булһа ла, Вәлетдин моңло ул. Йырҙары ла күңел арбатҡыс — бигерәк, тә оҙон көйгә йырлағанда

Өндәремдә күреп туя алмайым,
Төштәремә керсе, йәпешем...

- Их, мандолина булһа!—тип мандолина сирткән хәрәкәт яһаны Насип. Үҙем уйнап, үҙем бейер, инем...

Ул юҡ бармаҡтары менән юҡ мандолинаның ҡылдарын тибрәтеп алды. Мин тертләп киттем. Элек уның уйнағанын күргәнем булманы, әммә тегебайып ҡайтҡан йылды бик матур мандолинаһы бар ине. Насип бер нисә тапҡыр бейергә ынтылып ҡараны, Вәлетдин уға ирек бирмәне, еңенән тартып туҡтатты. Ни тиһәң дә, беҙ бер аяғы менән гүрҙә торған кеше менән хушлашырға килгәнбеҙ. Әҙәп кәрәк.

Өсөнсө кәстрүлде башлағанда. Талип инде өрәңы һоро быйма кейгән аяҡтарын карауатынан һалындырып ултыра ине. Әңгәмә был саҡ һуғыш хәлдәре, фронт мажаралары, беҙҙең һалдаттың тапҡырлығы, германдың юнһеҙлеге тураһында бара ине.. Талип үҙе лә беренсе герман һуғышында байтаҡ мылтыҡ шартлатҡан, байтаҡ силғау туҙҙырған кеше. Уның геүәрдин булып йөрөгәнен көллө ғаләм белә. Әле лә унда геүәрдинлек дәрте, геүәрдинлек сәме тоҡанып китте:

- Юҡ, Вәлетдин, германды һүҙ менән бөтөрөп ташлама һин. Ул юләр түгел, беҙ башлыраҡ. Ул кәрһеҙ түгел, беҙ ғәйрәтле, һин германды сүпкә сығарма, Вәлетдин! Мин шуны еңеп геүәрдин булғанмын! һин дә геүәрдин, был да геүәрдин, ана. Насип тә геүәрдин. Ҡуян аулап кем батырға сыҡҡан? Айыу йыҡҡан — inyyi батыр.

Гвардия, алға!'—Насип, бәпес бармаҡлы ҡулын юғары сөйөп, оран ташланы.

Бынан һуң әңгәмәнең рәте китте. Беҙ өсөбөҙ ҙә, аяғүрә баҫып, ҡосаҡлаштыҡ. Артабан нимәләр булғанын төштә кеүек кенә. Тегеләр, Талип ҡаршыһына баҫып, йырлаған һуңғы йырҙың яртыһын шулай ҙа хәтерләйем.

Әжәлгә дарыу бар икән,
Мөхәббәткә бармы икән?

Йәнә шуныһы иҫемдә. Беҙ сығып киткәндә, Талип ҡысҡырып ҡалды:

һай, фартауай ҙа егеттәр икәнһегеҙ! һеҙҙең менән бер ултырыуҙары бер ғүмер!!

Беҙ сыҡҡанда, Талип өйө тураһында урамда халыҡ гөж килә ине. Әллә көләләр, әллә илайҙар, асыҡ ҡына, өҙөп кенә әйтә алмайым. Торғаны менән бер тамаша! Кәмит!

Талип артынан ҡыуа сыҡҡан ҡара фарман ун йылдан ашыу ҡайҙалыр аҙашып йөрөнө. Был арала ауылда беренсе булып электр утын уның өйөндә Вәлетдин үҙе тоҡандырҙы. Майҙандарҙа ул дәртләнеп бейегәндә халыҡ әүәлгесә, хайран ҡалып, хуплап торҙо. Аҡйондоҙҙоң апаһы Мәғүбәне (исеме шулай тоноғораҡ булып сыҡты) уға ныҡ ҡына димләп ҡаранылар. Күңеле ылыҡманы, тырнағы ғына ла Аҡйондоҙға тартмаған булып сыҡты шул. һөймәгәнгә һөйкәлмәне ул. һуңғы ыҙанына тиклем яңғыҙ атлап килде.

...Ә Дим аша таш күпер әле булһа һалына. Кемдәрҙеңдер уйында, өмөтөндә, телендә һалына ул. Унһыҙ **донъя** бармай...

## БЕҘҘЕ «МӘҢГЕ ЛӘШТЕ Р ӘЛӘР »

Ҡаланан' килгән • үтә йылтыр фотограф Кесе инәйем менән икебеҙҙе ауыл ситендәге иң ҡалҡыу ерҙә ҙ"ур яҫы таш өҫтөнә килтереп ултыртты: «Үҙегеҙҙең данығыҙға ауылығыҙҙың күркәм күренештәрен ҡушып, илгә сәсәсәкбеҙ. Ҡайһы ғына яҡҡа ҡарама — хозурлыҡ. Мәңгеләштереүҙе үҙе һорап тора. Төҫлө фото уйлап сығарған әҙәмгә рәхмәттәр яуһын. Ошо матурлыҡты һемереп кенә ала бит ул - төҫлө фото...» — тип ары-бире һуғылды.

Беҙ был яҡты Тау арты тип йөрөтәбеҙ. Тау артының бейек түбәһенә менеп баҫ та башыңды бороп ^ына бер байҡап сыҡ, йыһандың дүрт тарафы һинең аяҡ аҫтыңда буласаҡ. Шуға күрә беҙҙең ауылдыҡылар, сәңгелдәктән төшөп, тәпәй баҫҡас та, Ер шарының ҙурлығын үҙ күҙҙәре менән күреп үҫә. Уңға баҡһаң, йылтырап ятҡан Димде, һыу аръяғындағы зәңгәр үрҙәрҙе күрәһең, саҡ ҡына боролһаң, Ар баҫыуҙары йәйелеп китә, тегендәрәк Сайран ауылының әрәмәлеге ҡалҡып сыға. Башыңды һулғараҡ ҡайырһаң, Бәрсүән буйҙары, Айғалыш урмандары һине саҡыра башлай. Ҡапыл артҡа әйләндеңме, ап-аҡ тау башында ап-аҡ ҡала — Өфө балҡый. Мин ҡояшлы көндө әйтәм. Болотло көндә донъяның сырайы ҡаса, тыны ҡыҫыла. Ул һинән ятһынған һымаҡ күренә, ә аяҙ көндә үҙе, атылып, ҡосағыңа килеп инә. Әйткәнемсә, ғаләмдең Киләштән башланып Киләштә бөтәүен беҙ күреп үҫәбеҙ, күреп үләбеҙ.

Йәй яңы башлана ғына. Әле аяҙ көндөң йөҙөн монар ҡаплап тоноҡландырмай. Ерҙең йәшеллеге тик йәшел генә, күктең зәңгәрлеге — тик зәңгәр генә.

- - Һеҙ ултырығыҙ, һөйләшегеҙ, хәтерләгеҙ, уйланығыҙ, — тине фотограф. — Мин үҙ эшемде эшләрмен. Миңә иғтибар итмәгеҙ.

Итмәҫһең иғтибар, әйтерһең, ул себен. Себенгә лә иғтибар итмәй булмай, ә Кесе инәйем, ысынлап та, беҙҙең тирәлә өтәләнеп йөрөгән кешене шәйләмәй ҙә шикелле. Ҡая башына ҡунған инә бөркөт төҫлө, үҙенең туҡһан йыллыҡ ғүмере тирәһендә тыныс ҡына ултырып тора. Башын яй ғына бороп, тыуған тупрағының төбәктәрен, юлдарын, соҡорҙарын, урмандарын, ҡырҙарын барлай, һәммәһе лә теүәл, һәммәһе лә үҙ урынында булыуға ул риза. Тимәк, донъяны миңә бөтөн көйө ҡалдыра. Ул минең арҡамдан ҡағып ҡуя. Был инде: «Ошоларҙың һәммәһен' дә һиңә ышанып тапшырам», — тигән һүҙ була. Эш ҡушҡанда, йомош йөкмәткәндә, ул ғүмер баҡый шулай арҡамдан ҡаға торған булды. Быны ул Оло инәйемдән отоп алғайны. Эле-ек беҙ өсәү саҡта — Оло инәйем а-н-а-ау таш ҡойма эсенә күсеп китмәҫ борон мин йәнемде өлөштәргә бүлгеләмәй инем. Ә теге аҡ ергә ҡара ҡар яуған көндә йәнем, шартлап, уртаға ярылды. Күп замандар үткәс кенә, яңынан ялғанды, әммә йөй ҡалды. Мин бары Кесе инәйемдең генә улы булып китә алманым. Быны ул һиҙһә лә, һиҙмәмешкә һалышты. Киреһенсә, минең күңелемде күрер өсөн, яйы сыҡҡан һайын. Оло инәйемде ололап телгә ала. Өс-дүрт йыл тышында ғына әле миңә шундай ҙур һүҙ әйтте: «Ошо йәшемә етеп, һинең Оло инәйеңдән дә шәфҡәтлерәк, аҡыллыраҡ кеше күрмәнем. Нимә эшләп атайың уны тиңһенмәгәндер инде? Әгәр уның быңдай уҡ икәнен алдан белгән булһам, атайыңа сығыр башым юҡ ине. Бер уйлаһаң, бәлкем, мин дә уға төҫ биртәнмендер...» Кесе инәйемдең был һүҙҙәре миңә ошо китапты яҙа башларға хоҡуҡ бирҙе. Тимәк, көндәше тураһындағы минең яҡшы һүҙҙәрем уны рәнйетмәйәсәк. Йәшерәк саҡта ул ифрат ғәрсел, ифрат нескә күңелле ине. Күҙ йәше лә керпек осона ғына эленеп тора ине. Ҡайғыһы ишәйгән һайын, сабырлығы арта барҙы. Башта Оло инәйем уны бөтөнләйгә үҙ урынына ҡалдырып китеп, ғәмен арттырҙы, күп тә үтмәй, сәркәш Мортаза ағайым, урам һуғышында туҡмалыуҙан мандымай, вафат булды. Кесе инәйем

был ҡайғыларҙы ауыр ҙа, сабыр ҙа кисерҙе. Унан һуғыш. Сәлих ағайым, Ильяс ҡустым, мин— өсәбөҙ ҙә яуға киттек. Ағайым ауыр яралар алып ҡайтты. Шул яралар уны, һуғыш баҫылғас, алып та китте. Ошо уҡ заманда атайым донъя ҡуйҙы. Был йыназаларҙың бөтәһе лә Кесе инәйемдең берҙән-бер йөрәге аша уҙҙы. Эйе, хәсрәттәр уҙа торҙо, ул һаман нығый барҙы.

Кесе инәйемдең күҙ ҡарашы таш зыяратҡа туҡталды. Туҡталмаҫлыҡ та түгел шул. Уның ырыу ағасы инде дүртенсе быуынға һикерҙе, ә ҡороған тамырҙар, һынған ботаҡтар күпме! Ун өс баланың уныһы ла ана шул таш ҡойма эсендәге йәшел сирәм аҫтында. Бөтәһен дә хәтерләй китһәң... Инәйем өндәшм-әй. Моғайын, хәтерләүҙәргә бирелгәндер. Бына, Назияз күпере яғына әйләнеп, эйәге менән ымлап ҡуйҙы:

һине мин гел юғалтып яфаландым... Беренсе тапҡыр, әле ҡул балаһы сағыңда, Ҡара Яҡуптан ҡунаҡтан ҡайтышлай анау Назияз буйында төшөрөп ҡалдырғайным. Мин ойоп барғанмындыр, ахырыһы; күпер төбөндә сана һалыулап киткән дә һин юрғаныңа төрөлгән көйө осоп төшөп ҡалғанһың. Юҡлығыңды ҡапҡа төбөнә килеп туҡтағас ҡына белдек. Атты бороп, кире саптыҡ. Ярай төн айлы ине. Юлдан әллә ҡайҙа ситтә тәгәрәп ята инең. Уянмағанһың да хатта. Оло инәйеңдән йәшерҙек был хәлде... Ураҡҡа алып барһаҡ, арыш эсенә инеп аҙаштың, бесәнгә алып барһаҡ, урман араһына инеп юғалдың. Шишмә һабан туйында кәмитселәргә эйәреп юҡ булдың... Танауыңа еҫ керә башлағас, ыраматта йөрөп олаҡтың, һуғышын әйтмәйем дә инде — йә хәбәрһеҙ зарыҡтырҙың, йә үле хәбәрең килде... Төштәремдә әле булһа һине юғалтам да ҡоттарым осоп уянам.

Мин уны йыуатмайым, сөнки бынан һуң да, югалмам, тип вәгәҙә итә алмайым. Юлдарҙа әле лә бит һикәлтәләр, һалыуҙар бар. Береһендә осоп төштөң ҡалдың булыр.

Уның теле асылып киткәндә, мин бүлдермәҫкә тырышам. Үҙенә кәрәген ялғар ҙа йәнә теҙер. Эйе, ялғап алып китте.

Ә анау тәрән соҡорҙо төшөп был яҡҡа кү-

тәрелгәндә, һинең атайың менән тәү тапҡыр йөҙгә-йөҙ осраштыҡ. Ул саҡта мин утыҙ йәшлек тол ҡатын инем. Үҙебеҙҙең урам бисәләре менән, туғайҙа тал ҡайырыһы һыҙырып, ҙур-ҙур бәйләм ҡайыр күтәреп ҡайтып килә инек. (Ул заман, яҙға сыҡһаҡ, бөтә урамыбыҙ менән ҡайыр һыҙырыр инек. Вәликәй бай бәйләменә 15—20 тин бирә. Шуға ризабыҙ инде.) Ошо үрҙә генә ҡара ат атланған атайың елдереп ҡыуып етте. Мин уньЗЗылтыр Ильяс мәзиндәрҙә ураҡ өмәһендә күргәйнем, әммә һүҙ ҡатышмағайныҡ. Әле, аҙ ғына уҙа биреп, атын шып туҡтатты ла илдә булмаған хәтәр тәүәккәллек күрһәтте. Мин, ҡотом ҡасып, ҡурҡтым да, һоҡландым да быға. Күнме кеше алдында ят ҡатынға көпә-көндөҙ әмер бирҙе был:

— Вазифа, артҡараҡ ҡал әле саҡ ҡына. һөйләшәһе һүҙ бар! — тип бойорҙо, әммә тауышы яғымлы ине. Мин, ҡаушап, юлдаш бисәләремә ҡараным. Арабыҙҙа иң ҡыйыу иҫәпләнгән Ямал кәңәш бирҙе:

— Ниңә, ҡал! Тотоп ашамаҫ әле.

Мин туҡтаманым. Иптәштәремә эйәрә бирҙем. Атайың, таш һын төҫлө, ҡымшанмайынса ат өҫтөндә ултырып ҡалды. Бер аҙ атлағас, минең аяҡтарым тыңламаҫ булды, тыным ҡыҫыла башланы, йөрәк тибешем сикәмә килтереп һуғырға кереште. Алдымдагы үр текә ҡаяға әйләнде. Бара алмайым. Ҡайыр бәйләме, елкәмде баҫып, мине ергә бөгә. Туҡтаным. Шунда уҡ тояҡ тауышы мине ҡыуып етте.

Бир, ҡайырыңды эйәр алдына һалайым.

Мин ҡарыштым. «Үҙем...» — тигән булдым.

Бир! Йәнә бойорҙо ул. — һөйләшергә кәрәк. Һин йөк күтәреп барғанда, мин нисек һөйләшәйем?

Минең ризалыҡты көтөп тормай, яурынымдағы йөгөмдө эйелеп алып, эйәр ҡашына һалды. Былдай сая ирҙе тәүтапҡыр күрәм, әммә уның саялығы мине кәмһетмәй. Шулай за зиһенем таралып төштө. Тик уның сал керә башлаған түңәрәк һаҡалын ғына шәйләйем. Нисәләрҙә бар икән?

һүҙ башламайынса байтаҡ барҙыҡ.

Минең әле һинең тауышыңды ла ишеткәнем юҡ... Ә күңелем күптән һиндә, — тине ул тыныс

ҡына. — Минең тормошомдо, булмышымды беләһеңдер. Бер ауылда йәшәйбеҙ бит. Әле яҙ. Йәй буйы уйла. Ризалыҡҡа ишараң булһа, яусы ебәрермен. Был аҙымды мин ғүмер иткән кешемдең фатихаһынан тыш яһамайым. Ҡабатлап әйтәм, миңә йәш бисә кәрәк булған өсөн генә һүҙ ҡатмайым, һин күңелемә индең, — ул көлөмһөрәп ҡуйҙы. — Мөхәббәт тип әйтһәм, минең йәштәге кешегӘ оят булыр. Ҡырҡ туғыҙҙамын мин.

Мин ауыҙ асып өндәшмәнем. Оялдым да, ҡыуандым да. Оялмаһам да, ни әйтер инем һуң? Шулай һыбайлы-йәйәүле анау Гөбөрнатыр урамына килеп индек.

- Йөгөңдө атайыңдар ҡураһына ташлап китермен, тине ул.

- Юҡ, рәхмәт. Үҙемә бир, — тинем. Ул ныҡышманы. Йөгөмдө йәнә яурыныма йөкмәнем. Иңбашымда ҡайыр бәйләме түгел, аҡҡош мамығы ине. Йөгөм ергә баҫмай, һауаға күтәрә. Бына ҡалай арбаны күңелемде һинең атайың. Үҙе атының муйынын шаҡарып борҙо ла кире артына тороп сапты. Күп тә үтмәй, Оло инәйең бик ышаныслы кеше аша миңә фатихаһын ебәрҙе...

...Фотограф, әле уңға, әле һулға сығып, әле ҡаршыға баҫып, йә эйелеп, йә сүгәләп, йә ергә ятып, шылт та шалт аппаратын шылтлатты. Кесе инәйем быны иғтибарһыҙ ҡалдырманы, тәүҙә үк башындағы яулығын төҙәтте, күлдәк итәгендәге һырҙарҙы ҡулы менән һыйпап ҡуйҙы. «Атайың мәрхүм менән бер генә тапҡыр ҙа карточкаға төшмәнек. Шуға үкенәм»,— тине ул үҙ-үҙенә. Фотограф вәғәҙәһендә торҙо, беҙҙең һүҙгә ҡыҫылманы, әммә байтаҡ йонсотто. Аяғүрә баҫтырып та, атлап барған көйө лә төшөрҙө. Кешенең эше шул булғас, беҙ һуҡранманыҡ, күндек.

Еребеҙҙе ҙурлауың өсөн рәхмәт, улым, — тине Кесе инәйем. — Ә Кеше ғүмере ул... һинең бер шылтлатыуың ни, минең туҡһан йыл ғүмерем ни — барыбер.

Фотограф, еребеҙҙе, үҙебеҙҙе «мәңгеләштереп», үҙ юлына китте. Беҙ Кесе инәйем" менән ҡасандыр һәр ҡайһыбыҙ үҙ нәүбәтендә ялантәпәй югергән туҙанлы тар һуҡмаҡ (үуйлап Мәкәш шишмәһенә

ыңғайланыҡ. Ошо шишмәнең һалҡын һыуын, усы-быҙға алып, уртлағы килде, һыуһауҙан түгел, теләктән. Шулай икәүләп бүтәнсә әллә килеп була, әллә юҡ.

Һуҡмаҡ туҙанында имән япрағы дәүмәле генә эҙҙәр ҡалдырып, ике пар ялантәпәй түбән табан шишмә яғына югергән. Күрәһең, беҙҙән өлгөрөрәк-тәр ҙә бар икән...

## АҠ ҠАР
## ӨҪТӨНДӘ
## КАРА КҮМЕРҘӘР

Туҡһандың өҫтөнә сыҡҡан Кесе инәйем бер иртәлә үтә бойоҡ күренде. Мин хәл-әхүәл һорашҡас, «имен», тине, хатта йылмайған да булды, ләкин барыбер уның күңеле һүрән ине. Ныҡлап төпсөнә торғас, әйтеп бирҙе:

Бөгөн таңда мин иланым, — тине.

Ниңә иланың?

Былай ғына... Ҡартлыҡ иҫәрлегелер инде.

Әсә күҙ йәштәренә ҡарата улдың битараф ҡалыуы мөмкин түгел; әгәр әсәһе туҡһанды уҙған, ә улы алтмышты ҡыуып барған булһа, бигерәк тә.

Мин ҡайта-ҡайта һораштым:

- Әллә рәнйеттеләрме? Әллә сиреңде йәшерәһеңме?

Мин йәлләп иланым.

- Кемде?

Көҙөрә сәсле яланаяҡ ҡыҙҙы, һигеҙ йәшлек сабыйҙы.

- Кем ҡыҙын?

Кесе инәйем был һорауға ҡолаҡ һалманы, үҙенекен дауам итте:

Усаҡ тоҡандырырға өйҙә шырпы булмағас, ажғырып торған ҡышҡы иртәлә, һоҫко тотторып, әсәһе уны күлдәксән көйө ут күршегә тере күмер алырға ебәрә. Ҡуҙҙы алғас, кире югерә был. Үҙҙәренең ишек төбөнә еткәс кенә, тайып китә лә лып итеп ергә ултыра, һоҫҡолағы утлы күмерҙәр ҡар өҫтөнә сәселә. Ап-аҡ ҡарҙы, әйтерһең, ҡап-ҡара күҙ йәштәре өтөп, өңөп ала. Ҡыҙ бала шул ултырған көйө әрнеп илап ебәрә. Яланғас үксәләре боҙға йәбешә. Ул бала мин ■инем. Бөгөн таңда уянып,

ана шул сабыйҙы ҡыҙғаныуҙан иланым. Тыйылыр әмәл юҡ. Мөмкин булһа, уға иң йылы кейемдәремде кейҙерер, иң татлы һыйҙарымды бирер инем. Юҡ шул... Мөмкин түгел. Күпме үкенһәң дә, мөмкин түгел. Йәнә... шул мөмкин түгеллек үкенесенән өҙгөләнеп иланым мин...

Бына шулай икән. Бәхетле булһа ла, бәхетһеҙ булһа ла, беҙҙең бала сағыбыҙ оҙон-оҙаҡ йылдар буйынса артыбыҙҙан эйәреп килә. Дөрөҫөрәге, беҙҙең күңелебеҙҙән китмәй. Кесе инәйемде әйтәм, һикһән йылдан артыҡ ваҡыт үткәс, яланаяҡ ҡар өҫтөнән югереп килгән бала сағын ҡыҙғанып илай. Был үҙе сабыйлыҡ түгелме? Сабыйлыҡтыр, моғайын, ә сабыйлыҡ, моғайын, сафлыҡтыр.

Сәселеп киткән күмер таптары ғына аҡ ҡарҙы ҡараға әйләндерә алмай...

*1972—1978*

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Алдан әйтелгән һүҙ ........................................................ 3
Бөтәһе лә әйләнә.................................................................5
Кеше тыуҙырырға.................................................................9
Байрам ашы - ҡара ҡаршы..............................................21
«Ҡалды ғәзиз башым йәш көйгә»................................39
Искәндәр Әсғәте.............................................1 . 46
Мәсхәрә ителгән ҡала...................................................... 66
Йоморо Талип......................................................................93
Ите һиңә, һөйәге миңә . 101
Ике хөкөм............................................................. 105
Ирмәк өсөн генә...............................................................118
Ғәриптәргә байрам кәрәкме? . . . . . . . . . 129
Кавказ батшаһының вариҫе ........................................136
Баяр балалары................................................................. 154
Аҡйондоҙ ............ ............................................................ 162
Ике хат.............................................................................. . 2 1 5
Оло инәйем хушлаша................................................... 245
Ҡотло ҡул Насип...........................................................259
Әжәлгә дарыу бар икән................................................... 274
Беҙҙе «мәңгеләштерәләр»...........................................285
Аҡ ҡар өҫтөндә ҡара күмерҙәр.................................291

*Мустафа Сафич Каримов*

(Мустай Карим)

ДОЛГОЕ-ДОЛГОЕ ДЕТСТВО

*(на башкирском языке)*

Редакторы *М. С. Игебаева*
Художество редакторы *И. С. Файрушин*
Рәссамы //. //. *Горбунов.*
Техник редакторы *Н. Ғ. Фәйзуллина*
Корректоры *Р. М. Ғәйфуллина*

!!li № 1457

Наборға бирелде 04.06 81 Баçырга ҠУЛ ҡуйылды 04.09.81. Ҡағыҙ форматы‘«4 V I°°1/з2' Тип- кагь^ы Ns 1. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баçылды. Шартлы баçма таб. 15,20. Учет.-изд. таб. 13,81. П02306. Тиражы 30 000 эк:«. Заказ № 187. Бумвинил тышлыһының хаҡы 1 һум 20 тин. Ҡағыҙ тышлыһының хаҡы I һум 10 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте Өфө-25, Совет урамы, 18. Башкирское книжное издательство. уфа-25, ул. Советская. 18. Баш корт АССР-ы Нәшриәттәр, -полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетенең Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1. Октябрь проспекте. 2.

1982 йылда
Башҡортостан китап нәшриәтенең
«Мәктәп китапханаһы»нда
Мостай Кәримдең

≪З А М А Н А Л А Р≫
исемле йыйынтығы сығасаҡ,

Унда шағирҙең мәктәп программаһы буйынса үтелә торған төп әҫәрҙәре инә,

1 h. 10 тин.